С(Башк)
К97

Мостай Кәрим



# БЕҘҘЕҢ ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ



С (Баш)
К 97

*Мостай Кәрим*

# БЕҘЗЕҢ ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ

ПОВЕСТАР ҺӘМ ХИКӘЙӘЛӘР

БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
ӨФӨ — 1983

84 Баш
К 97

**Кәрим Мостай**

К 97 Беҙҙең өйҙөң йәме. Повестар, хикәйәләр. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. — 208 бит.

Был китапҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры, СССР Дәүләт премияһы лауреаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы Мостай Кәримдең балалар өсөн булған «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Өс тағай» повестары, «Айыу мажараһы», «Малайҙар» тигән хикәйәләре инде.

К $\frac{4803010200 - 146}{М\ 121\ (03) - 83}$ 152 — 83 84 Баш

Баш. [illegible] БИБЛИОТ[illegible] им. [illegible] КРУПС[illegible]

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1983 й.



# БЕҘҘЕҢ ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ

*Повесть*

## ӘСӘЙЕМ ҠАЙҘА КИТТЕ?

Һеҙҙең көндәлегеҙҙә лә бик күп һәйбәт нәмәләр барҙыр әле. Уларҙы бөтә яҡшы кешеләргә һөйләп биргегеҙ ҙә килә торғандыр.

Минең көндәлемдә лә бар. Бына хәҙер шуларҙы һөйләй башлайым.

Ул ваҡытта һуғыш ине әле. Атайым бөтә егеттәр менән бергә фронтта фашистарҙы туҡмап йөрөй, ә әсәйем колхозда эшләй ине. Бер саҡ әсәйем, колхоз председателе Яҡуп ағайҙың артлы саңаһын егеп, Тимертауҙағы өләсәйемде ҡунаҡҡа алып килде. Өләсәй бер кис ҡунғас та, әсәйем ҡайҙалыр китергә йыйына башланы. Мин беләм инде, кеше йыраҡҡа китмәç булһа, сохари ҡатырмай ул. Минең

әсәйем бер тоҡсай сохари ҡатырҙы, бүтән тәмле нәмәләр бешерҙе. Әллә нисә ваҡ төйөнсөк төйөнләне. Кеше бер ҙә юҡҡа төйөнсөк төйнәйме ни? Миңә әлегә бер ни ҙә әйтмәгән булалар.

Бер көн таң менән өләсәй мине уята:

— Тор инде, Йәмил, тор, ана әсәйең тәмле иттереп ҡоймаҡ бешергән,— ти.

Мин ҡапыл күҙҙәремде асам. Иң элек өҫтәл өҫтөндә пары сығып ултырған самауырҙы күрәм. Әсәйем мейес алдында бешеренеп йөрөй. Буйға бәләкәй булһа ла, минең әсәйем бик уңған.

Өҫтәлдә тәмлерәк нәмәләр булғанда, минең ялындырып тора торған гәҙәтем юҡ. Тик ундай нәмәләр йыш тәтемәй шул. Тиҙ генә йыуынып, өҫтәл эргәһендәге үҙ урыныма ултырам. Ул арала әсәйем дә, эшен бөтөрөп, табынға килә. Өләсәйем сәй яһай башлай. Тик сәй янына ултырғас ҡына, табындың бик иртә әҙерләнгәнен һиҙәм. Шунда уҡ әсәйемдең тоҡсайын, төйөнсөктәрен күҙ алдына килтерәм... Берәү ҙә өндәшмәй. «Әһә,— мин әйтәм, эстән генә,— барыбер беләм инде. Әсәй бөгөн ҡайҙалыр китә».

Сәй эсеп бөткәс, әсәйем мине саҡырып ала ла арҡамдан һөйә:

— Йәмил улым, мин алыҫ ҡалаға барып ҡайтам, һин өләсәйеңде тыңлап ҡына тор, йәме,— ти.

— Йә,— тип мин баш ҡағам. Үҙемдең күҙҙәремдән йәш бөрсөктәре тәгәрәй. Бөтәһен дә алдан белеп торҙом бит инде. Ә ниңәлер сыҙап булмай. Минең илағанды күрмәмешкә һалышалар. Мин бер-ике рәт танауымды тартам да илауҙан туҡтайым.

— Алдыңды-артыңды ҡарап йөрө инде, ҡыҙым,— ти өләсәй,— юл аҙабы — йән ғазабы, тигәндәр бит.

Әсәйем өндәшмәй. Бер аҙҙан һуң ул сөйҙәге тунын алып кейә, аҡ ҡалын шәлен бәйләй. Өләсәй уға тоғоноң биштәрен кейергә булыша. Унан беҙ өсөбөҙ ҙә ултырғыстарға ултырабыҙ. Өләсәй ниҙер

уҡына, әсәйем менән беҙ тик кенә торабыҙ. Шунан әсәйем ҡапыл урынынан тора, башта өләсәйҙе, унан һуң мине ҡосаҡлап ала. «Иҫән-һау ғына тороғоҙ инде»,— тип бышылдай ул. Мин уны йәлләп киттем. Тышта ҡыш. Үҙе төн, ә ул алыҫ юлға сыға. Әсәйем тиҙ-тиҙ атлап ишеккә бара. Ул тағы беҙгә боролоп ҡарай ҙа: «Хушығыҙ!»— тип өй ишеген аса. Бына ул ҡураға сыҡты. Мин уның аяҡ тауыштарын ишетәм: ул баҫҡан һайын, ҡар шығыр-шығыр итеп китә. Әсәйем ҡапҡаны асып япты. Инде ҡар урамда шығырлай. Тауыш алыҫая һәм аҡрыная бара — шығыр... шығыр... шығыр...

Өләсәй менән икәү генә тороп ҡалабыҙ. Бер аҙҙан һуң мин унан: «Өләсәй, йән ғазабы нимә ул?»— тип һорайым.

Өләсәй тәрән һулыш алып ҡуя ла:

— Балаҡайҙарым, һеҙ белмәһәгеҙ ине инде шул ғазаптарҙы... Белмәһәгеҙ ҙә, күрмәһәгеҙ ҙә ине,— ти.

## БАТЫРҘЫҢ ҠЫЛЫСЫ ҠАЙҘА?

Беҙ өләсәй менән һаман икәү генә торабыҙ. Әсәйемдән хат та, хәбәр ҙә юҡ,— өләсәй шулай ти. Мин инде уның нисә кис ҡунғанын да оноттом. Әсәйем киткәс, беҙҙең һыйыр быҙауланы. Теге мөгөҙлө ҡара һарыҡтың ике бәрәсе булды: береһе аҡ, береһе ҡара. Бик һалҡын көндәрҙә беҙ бәрәстәрҙе өйгә алып инәбеҙ. Бигерәк тилеләр әле, бер ни ҙә белмәйҙәр. Йә, янып торған тимер мейескә бәрелеп, һырттарын көйҙөрөп китәләр, йә, һандыҡ өҫтөнә һикергән булып, ҡолап төшәләр. Тамаҡтары туйып, йылынып алғас, бәрәстәр бөтә өйҙө бер итеп сабышып уйнайҙар.

— Эй мәхлүктәрең, ҡалай рәхәтләнәләр,— ти өләсәй.

Ул, бейәләй бәйләүенән туҡтап, күҙлеге аҫтынан ғына миңә ҡарай (өләсәй, фронттағыларға тип, шау ғына бейәләй бәйләй). Мин ике быйма ҡуңысы араһына һалынған күперемә сыралар теҙеп ултырам. Өләсәй шулай аҙ ғына ҡарап тора ла яңынан шәп-шәп итеп бәйләргә тотона. Үҙе һаман һөйләнә:

— Күңелле шул уларға, икәү булғас... Бына һинең дә туғаның булһа, ниндәй һәйбәт булыр ине,— ти.

Мин, йүгереп килеп, өләсәйгә һыйынам. Ул минең башымдан һыйпай.

— Фәриттең ҡустыһы бар. Мараттың һеңлеһе бар, бөтәһенең дә инде... Минең генә бер кешем дә юҡ,— тип шунда уҡ танауымды тарта башлайым.

— Һинең һеңлең булһа, яратыр инеңме? — тип һорай өләсәй.

— Би-и-к яратыр инем! Эй-й, һеңлем булһамы, мин уны күтәреп кенә йөрөтөр инем. Бер ҙә йыҡмаҫ инем. Марат кеүек.

Өләсәй йомшаҡ ҡулдары менән биттәремдән һөйә. Һеңлем тураһында уны тағы, тағы һөйләткем килә. Ә ул башҡа бер һүҙ ҙә әйтмәй.

Мин яңынан күперем эргәһенә киләм. Бәрәстәр әллә ҡасан күперемдең аҫтын өҫкә килтергәндәр инде. Бәрәстәргә рәхәт, улар икәү. Ә минең бер үҙемдең уйнағым да килмәй. Мин инде, һандыҡ өҫтөнә менеп, тик кенә ултырам. Өләсәй әйткән һеңлем, нисектер, эргәмә үк килеп баҫҡан төҫлө булып китә. Ул миңә шундай асыҡ күренә. Башта бик бәләкәс төҫлө ине. Әҙерәк торғас, ул Мараттың һеңлеһе Фәһимә тиклем була. Үҙенең сәсе ҡара, ҡыҙыл күлдәгенә ата ҡаҙ күҙе төҫлө түңәрәктәр төшкән... Мин көн буйы уның тураһында ғына уйлап йөрөйөм.

Төн булғас, өләсәйҙең эше бөткәнен көтөп, карауатта бер үҙем генә ятып торам. Ҡайһы саҡта шулай йоҡлап та китәм. Ә бына хәҙер йоҡлап булмай.

Тышта буран. Тәҙрә ҡапҡастарына ел килтереп һуға ла бөтә өй дөбөрләп китә. Ошо буранда атайым да, әсәйем дә өйҙә юҡ. Улар өшөйҙәрҙер әле. Ә һеңлем? Ул да атайым менән әсәйем янындалыр кеүек тойола миңә.

Өләсәй самауырҙы түгеп, көлөн ҡаға. Был эшен ул иң аҙаҡтан эшләй. Бына, утты һүндереп, минең янға ята. Мин, юрғандан башымды сығарып, өләсәйҙең ҡолағына бышылдайым:

— Өләсәй, өләсәкәйем, әкиәт һөйлә әле.

— Һин һаман йоҡламаныңмы ни әле, төн ҡошо? — ти ул.

— Берҙе генә, өләсәй... унан йоҡлармын.

Ҡапыл тышта ел туҡтап ҡалғандай була. Өйҙә ҡараңғы ла, тын да. Мин йәнә юрған аҫтына инеп китәм. Өләсәй ашыҡмай ғына һөйләй башлай. Уның тауышы миңә юрған аша әллә ҡайҙан, ер аҫтынан килгән кеүек, юҡ, ер аҫтынан түгел, борон-борон замандан килгән кеүек ишетелә.

— ...Борон-борон заманда, — ти өләсәй, — Тимербәк тигән батырҙың ай йөҙлө, йондоҙ күҙле Гөлнур исемле бик һылыу һеңлеһе булған. Тимербәк үҙе илгә яу менән ингән әҙәм башлы, йылан кәүҙәле батшаның ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышып йөрөй икән. Йорттағы бөтә ирҙәр яуға ҡаршы киткән булғандар, ти. Бер саҡ Гөлнур үҙенең дуҫ ҡыҙҙары менән күл буйына һыуға төшкән, ти, шулай. Тик торғанда бер мәл дауыл күтәрелеп, өйөрмә өйрөлә башлаған, ти. Ҡыҙҙар бөтәһе лә ҡамыштар араһына кереп боҫҡандар. Өйөрмә килгән дә шул арала үтеп тә киткән. Ҡыҙҙар, йүгерешеп, йәнә яр башына сыҡҡандар. Тик бер Гөлнур ғына сыҡмаған. Дуҫтары уны, бөтә күл буйын бер итеп, кискә тиклем эҙләп йөрөгәндәр. Шул юҡтан юҡ булған да ҡуйған, ти, ай йөҙлө, йондоҙ күҙле Гөлнур.

Яуҙағы батырҙар, әҙәм башлы, йылан кәүҙәле батшаны еңеп, ҡыуанышып, илгә ҡайтҡандар. Тик бер Тимербәктең генә шатлығы ҡайғы менән алма-

шынған. Батыр, шул яуҙан ҡайтышлай уҡ, аҡбуҙ атынан да төшмәйенсә, бер һелтәгәндә ҡырҡ саҡрым ерҙе айҡай торған ҡылысын һалып, Гөлнурҙы эҙләргә сығып киткән.

Ай йөрөгән, ти, йыл йөрөгән ти, батыр, ете тауҙы үткән, ете даръяны кискән, ти. Бер заман тау мәмерйәһендә бәлтерәп бөткән сал сәсле ҡартты осратҡан, ти, Тимербәк.

— Һауғынамы, бабай! Ниндәй яҙмыштар килтерҙе үҙенде был тау-таштар араһына? — тип һорағаи.

— Юл кешеһенә изге юл! — тип яуап биргән ҡарт. — Һин минең ниндәй юлдар менән бында килеүемде һораның булһа кәрәк, егет. Мин дә һин килгән юлдан килдем.

Тимербәк, атынан төшөп, ҡарт эргәһендәге таш өҫтөнә ултырған. Ҡарт яңынан һүҙгә керешкән:

— Һинең кеүек егет сағымда минең һеңлемде аждаһа урланы. Шул замандан бирле берҙән-бер һеңлемде эҙләп йөрөйөм. Бына хәҙер таптым мин уны. Ошо тауҙың артында аждаһаның алтын түбәле тимер һарайы бар. Тик хәҙер аждаһа менән алышырлыҡ ғәйрәтем ҡалманы шул минең, ҡартайҙым, йонсоном.

Тимербәк, ҡапыл урынынан тороп, аты янына йүгереп килгән.

— Минең һеңлем дә тап шунда булырға тейеш. Әйҙә, киттек, бабай! Беҙ икебеҙ ҙә бер үк нужа менән йөрөйбөҙ икән,— тип батыр өҙөңгеһенә һикереп баҫҡан.

— Сабыр ит әле, ғәйрәтле егет,— тигән ҡарт.— Мин үҙем дә йәш сағымда атаҡлы батырҙарҙан инем. Был аждаһаға яҡын барып булмай. Ул, үҙенең һарайына кеше килгәнен күрһә, ҡырҡ саҡрымға ут сәсеп тора.

Шул саҡ Тимербәк ҡылысын ҡынынан алып, һелтәп ҡуя. Ҡарттың күҙ алдында ерҙән күккә тиклем йәшен һыҙылып үткәндәй була. Шунан инде



егет ҡартҡа ҡылыстың серен аса. «Был ҡылыс,— ти егет,— үс ҡылысы». Шунан һуң былар икәүләшеп юлға сығалар. Көн китәләр, төн китәләр. Таң атыуға инде, ҡарт батыр менән йәш батыр бейек тауҙың башына менеп етәләр. Тау башында торған көйө, былар алыҫтағы тимер һарайҙы күрәләр. Уның алтын түбәһе ялтырап тора. Ә һарайҙың тирә-яғы тотош ҡара ер, ундағы бөтә нәмә көл-күмергә әйләнгән. Бер мәл һарай эсенән йомғаҡ дәүмәле генә ут тәгәрәп сыға. Ул йомғаҡ яҡынайған һайын ҙурая бара.

— Ана, беҙҙе күреп, аждаһа сыҡты,— ти ҡарт. Мин был утты бик күп тапҡыр килеп ҡараным.

Батырҙар янына уҡ килеп еткәс, теге ут тотош ялҡынға әйләнә.

Беҙҙең Тимербәк ҡынынан ҡылысын һурып ала ла һарай яғына ҡарай һелтәп ебәрә. Бер һелтәй, ике һелтәй, ә ут һаман көсәйә генә бара. Бер мәл егет үҙе бөтөнләй ялҡын эсендә ҡала, уның ҡаштары, керпектәре көйөп бөтә. Барыбер ул ҡылысын ташламай, һелтәй ҙә һелтәй, ҡылыс үҙе лә уттай ҡыҙара. Көн алышалар, төн алышалар. Тик өсөнсө көндө генә ут әҙерәк баҫыла төшә. Тимербәк аждаһа һарайына яҡынайғандан-яҡыная бара. Уның артынан ҡарт та эйәрә. Ҡиҫкә табан ут бөтөнләй һүнә. Тик ер өҫтө ҡара төтөн була. Ул — аждаһаның ҡырҡылған ун ике башы төтәп ята икән.

Ҡарт менән егет, аждаһа һарайының ете ҡат ишеген емереп, эскә инәләр. Һарай эсе тотҡондағы ҡыҙҙар — илдең иң матур ҡыҙҙары менән туп-тулы була. Тимербәк менән бабай үҙ һеңлеләрен эҙләп табалар. Ҡыҙҙарҙың бөтәһен дә ҡотҡарып, тыуған илдәренә ҡайтып китәләр... Эй ҡыуаналар, ти, ул көлөшәләр, ти, шатлыҡтан илашып та алалар, ти. Шатланмаҫлыҡмы ни?

Өләсәй әкиәтен шау шулай ҡырт ҡына бөтөрә. Мансур бабай кеүек, «әле лә рәхәтләнеп ғүмер итәләр...» тигәнен бер әйтмәй.

Мин шым ғына ятам. Ә күҙ алдымда, йәшен кеүек, ҡылыс ялтырап китә. Мин түҙмәйем, өләсәйҙән һорайым:

— Шул батырҙың ҡылысы әле ҡайҙа икән, өләсәй? — тим мин.

Өләсәй ашыҡмай ғына яуап бирә:

— Атайың ҡулында, балам, хәҙер ул ҡылыс. Йоҡла инде...

## ТАНЫШ БУЛМАЙ ТОРҒАН ЯҘЫУ

Әсәйем ҡайтмай ҙа ҡайтмай...

Бер көн иртәнсәк, өләсәй һыйыр һауырға сыҡҡас, хаттар, газеталар ташыусы Гөлһылыу апай килеп инде. Әсәйгә Өфөнән килә торған газетаны ҡалдырҙы. Мин ул газетаның ҙур итеп яҙылған ике һүҙен генә таныйым, уны «Ҡыҙыл Башҡортостан» тип көн дә ҡысҡырып уҡып ҡуям. Гөлһылыу апай дүрткә бөкләнгән тағы бер ҡағыҙ киҫәге лә бирҙе. «Быныһы әсәйеңдән телеграмма», — тине лә сығып китте. Мин ҡулыма телеграмманы тотоп ҡараным да ҡалдым. Нимә икән ул телеграмма? Яҡшы әйберме икән әллә насармы икән?

Өләсәйгә ҡаршы йүгереп барҙым да: «Өләсәй, өләсәй!.. — тинем, — телеграмма килде!»

— Кем тинең? Ҡайҙа һуң ул? — Өләсәй яҡ-яғына ҡарана.

Мин ҡулымдағы ҡағыҙҙы уға бирәм. Уның ҡулдары ҡалтырап китә:

— Хоҙайым, пахарун ғына булмаһа ярар ине,— ти.

— Юҡ, өләсәй, пахарун тимәне Гөлһылыу апай. «Әсәйеңдән телеграмма», — тине.

Өләсәй мине, тиҙ генә кейендереп, Мансур бабайҙы алырға ебәрә. Беҙ, бер-бер хәл булһа, кәнәшкә гел уны саҡырабыҙ. Ул нисек әйтһә, шулай эшләйбеҙ. Донъяла ул белмәгән нәмә юҡ.

Мансур бабайҙар беҙгә йәнәшә генә торалар. Ул: «Инде туҡһанға етеп барам»,— ти. Туҡһан бик күп була ул, мин туҡһанға тиклем һанай беләм. Ул саҡта Мансур бабайҙың Фәрхениса әбей исемле һуҡыр ҡарсығы бар ине. (Хәҙер инде ул һуҡыр түгел: һуғыш бөткәс, уны Мансур бабай Өфөгә алып барҙы ла күҙҙәрен төҙәттереп ҡайтты. «Харап һәйбәт шәйләйем инде», — ти Фәрхениса әбей хәҙер. Ә элек һуҡыр ине.)

Мансур бабайҙың өйөндә шул әбей ҙә үҙе генә. Улдары булмаған, ә ҡыҙҙары сит ауылға китеп бөткән. «Ҡөҙрәт менән генә торғандай тораһың инде, Мансур ағай», — ти уға өләсәй. «Колхоз ҡарамаһа, ҡөҙрәт менән генә әллә ҡайҙа барып булмаҫ ине, ҡәрендәш», — ти ул. Мин улар һөйләшкәнде ҡайһы саҡта аңлап та бөтмәйем.

Мин ике аралағы ҡапҡанан ғына Мансур бабайҙар ҡураһына индем. Ул ишек алдын һепереп тора ине.

— Бабай! Телеграмма килтерҙеләр, өләсәйем һине саҡырҙы, тиҙ үк! — тип ҡысҡырҙым.

Бабай һорашып-нитеп торманы, өйөнә инеп китте. Мин болдор эргәһендәге ҡар өйөмөнән бер тапҡыр ғына аяҡ менән шыуып төштөм дә ҡайтып киттем.

Мансур бабай, беҙгә кәңәш бирергә килгәндә, һәр ҡасан аҡ сәкмәнен кейеп, ҡыҙыллы-күкле матур билбауын быуып килә. Ҡайһы саҡта Фәрхениса әбейҙе лә эйәртә. Әле лә шулай икәү етәкләшеп килеп инделәр.

— Иҫәнгенәме, һаулығынамы, ҡәрендәш? — ти ул һәм әбейҙе етәкләп һандыҡ өҫтөнә килтереп ултырта.

— Телеграмма тип һөйләндеме Йәмил, ҡайҙан килгән, кемдән?

— Көнбикәнән, ти ҙә бит, ни икәнен генә белеп булмай шул, — тип бошона өләсәй.

— Ҡана, бир әле бында, — тип бабай ҡағыҙҙы ала. — Телеграмма ни инде ул, ҡәрендәш, тимер сыбыҡ буйлап ебәрелгән хат була. Күрәһең, Көнбикә һуҡҡандыр, — ул ҡағыҙҙы оҙаҡ итеп әйләндергеләп ҡарап тора.

— Уҡыр инең, исмаһам, ағай... Пахарун ғына булмаһа ярар ине, тип йөрәгем ҡупты. Һуғышта балалар бик күп бит.

— Пахарун түгелен асыҡ беләм, ҡәрендәш, бына тик уҡып биреүҙе булдыра алмайым. Заманында

өйрәнмәгән һөнәрен, йөрөмәгән ерен ҡалдырманым. Өфөлә тиһеңме, Стәрлелә тиһеңме — бөтәһендә лә булдым. Ә бына шул яҙыу танырға өйрәнеп булманы.

Өләсәй ҡағыҙҙы ҡабат үҙенә ала, күҙлеген бер кейеп, бер һалып, яҙыуҙы уҡырға итә.

— Бошонма, ҡоҙағый, — тип һүҙгә ҡушыла Фәрхениса әбей. Ул, күҙе күрмәгәс, бик һирәк һөйләшә. — Көнбикәнән булғас, һәйбәт нәмәләр әле.

— Фәрхениса күҙҙәре күрмәгәнгә һуҡыр, — ти өләсәй,— ә беҙ һинең менән күҙле була тороп дөмһуҡырбыҙ, агай. Әрнеп тә китәм. Анау колхоз төҙөгән йылды өйрәтергә иткәндә, «шайтан һабағы» тип, уҡырга йөрөмәнем бит. Бына хәҙер диуана кеүек ултыр инде. Уҡый-яҙа белһәм, улдарыма үҙ фатихаларымды үҙем яҙып ебәрер инем.

Ҡартайған өс кешенең шулай аптырап тороуынан миңә бик ҡыйын булып китә. Йүгереп барып, ошо яҙыуҙы ҡысҡырып уҡып биргем килә. Нисек ҡыуаныrҙар ине улар! Ниңә мин әле ете менән генә барам икән, ниңә һигеҙ менән бармайым икән? Ошо мәлдә үк минең, мәктәпкә барып, яҙыу өйрәнеп ҡайтҡым килә. Барыбер өйрәнермен мин ул яҙыуҙы. Әсәйем кеүек, ҡалын-ҡалын китаптар ҙа уҡырмын әле, башта бөтә әкиәттәрҙе лә уҡып бөтөргәс...

Фәрхениса әбей янынан өндәшә:

— Ҡоҙағый, урамдан балалар шаулашып үтеп бара түгелме? Берәйһен алып керер ҙә уҡытыр инең шул ҡағыҙҙы.

Өләсәйҙең йөҙө яҡтырып китә:

— Бәй, балалар бар саҡта, ни эшләп аптырап торабыҙ әле? Иҫемә лә төшмәгән... — Ул башта, тәҙрәгә килеп, урамға ҡарай, унан шәлен генә ябына ла сығып китә.

Өләсәйем юғары ос Мәхмүтте эйәртеп инә. Мин беләм, ул быйыл бишенселә уҡый.

— Улым, ошо ҡағыҙҙы ғына уҡып бирсе, бөгөн Гөлһылыу килтереп киткән, — ти өләсәй.

һынап торам. Мәхмүт эреләнеп кенә яҙыуҙы ала.

— Көнбикә апайҙан телеграмма был. Русса яҙылған.

— Ул тиклемен белдек тә уның белеүен, — ти Мансур бабай.

— Уҡы, улым, уҡы.

Мәхмүт башта яҙыуҙы русса уҡып сыға. Унан башҡортса һөйләп бирә:

— Көнбикә апайым әйткән: «Ун алтыһында ҡайтып төшәбеҙ, тигән, станцияға ат ебәрһендәр, тигән, сәләм», — тигән.

Өләсәйем, үрһәләнеп, ары-бире йөрөй башлай.

— Сисенегеҙ, ағай, йә, ҡоҙағый, ни эшләп ултыраһың, сисен. Сәй эсеп алырбыҙ,— ул ҡапыл туҡтап ҡала. — Бөгөн нисәһе һуң әле?

— Бөгөн ун бише инде, иртәгә ун алтыһы... Башҡа нәмә әйтмәгән шул, — ти ҙә Мәхмүт сыға башлай.

— Ултыр, улым, һин дә ултыр, — ти өләсәй, — баллап сәй эсербеҙ.

— Рәхмәт, әбей, мәктәпкә барам, — тип Мәхмүт сығып уҡ китте.

Минең Мәхмүткә күҙем ҡыҙып ҡалды. Ҡалайыраҡ, тотлоғоп та торманы, сатнатып уҡыны ла бирҙе. Етмәһә, сәй ҙә эсмәгән була.

Мансур бабай менән Фәрхениса әбей, сисенеп, өҫтәл эргәһенә килеп ултыра.

Теге телеграмманы мин әле яңы ғына аңлап алам: иртәгә минең әсәкәйем ҡайта! Ул әле ҡайҙа икән? Нинә бөгөн үк ун алтыһы түгел икән? Минә ул, шығыр-шығыр баҫып, ҡапҡанан ингән кеүек була. Әсәйемде бигерәк күргем килде шул минең...

Ҡапыл өләсәй радионы бороп ебәрҙе.

— Әллә ниткән ғәҙәтең шул, ҡәрендәш, үҙең русса бер ни ҙә төшөнмәйһең, ә үҙең радионы русса һөйләгәндә лә тыңлайһың,— ти Мансур бабай.— Нисә инһәм дә, тик тормай.

— Мәскәү үҙе һөйләй бит, ағай. Өйөндә Мәскәү тауышы ишетелеп торғас, күңелгә рәхәт, — ти өләсәй. — Аңламаһам да, мин уның өмөтлө һөйләгәнен беләм бит. Һин улай тимә. — Ул шаулап торған самауырҙың өҫтөндәге көлөн өрөп төшөрә лә өҫтәлгә килтереп ҡуя.

Бына эсәләр инде хәҙер сәйҙе былар, бер башлағас...

## БЫНА КЕМ ИКӘН МИНЕҢ ҺЕҢЛЕМ

Председатель Яҡуп ағайҙың артлы санаһы беҙҙең ҡапҡа төбөнә килеп туҡтаны. Беҙ өләсәй менән икебеҙ ҙә тәҙрәгә ҡапландыҡ. Башта күсергә ултырған толопло берәү һикереп төштө. Быныһын таныйым: бригадир Баҙамша бабай. Унан әсәйемдең аҡ шәле күренеп ҡалды. Ул арала өләсәй тышҡа сығып та йүгерҙе. Мин иҙәнгә һикереп төштөм. Бер быймамды шунда уҡ таптым, ә икенсеһе юҡ та юҡ. Ахыры, бийма мин эҙләгән һайын йырағыраҡ ҡаса.

Бына ҡапҡа асыла. Мин яңынан һандыҡ өҫтөнә һикереп менәм дә тәҙрәгә ҡапланам. Ана әсәйем, әсәкәйем ҡайтып инде! Әсәйем, әсәкәйем! Ә ниндәй бәләкәс ҡыҙҙы етәкләгән һуң ул? Өләсәй ул ҡыҙҙы күтәреп ала. Бүтәнсә түҙеп булмай. Һандыҡ өҫтөнән һикереп төшәм дә шул бер быймамды ғына кейгән көйө тышҡа йүгерәм. Болдорға сығып та етәм — әсәйем мине ҡосаҡлап та ала. «Тиле, — ти әсәй, — ялан аяҡ сығалармы ни?» Уның тауышын ишеткәс, тағы ла күңелем тулып китә. Мин өндәшмәйем, әсәйҙең ҡарлы шәленә битемде ҡуйып, уның муйынынан ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлайым.

Өйгә ингәс, теге бәләкәс ҡыҙ менән мине ҡаршы-ҡаршы баҫтырып ҡуялар.

— Бына һеңленде алып ҡайттым, Йәмил. Оксана исемле. Сисендер өҫтөн! — ти әсәй. Миңә бик күңелле булып китте. Башта мин Оксананың муйы-

нынан ҡосаҡлап алдым, унан биттәрен һыйпаным. Минең дә һеңлем бар, Оксана исемле һеңлем бар! Һеңлемде күтәреп алырға ла итәм, тик көсөм генә етмәй.

— Күтәрмә, Йәмил, ул ҙур бит инде. Ысҡындыр төймәләрен. — Өләсәй минең башымдан һыйпай. Әсәйем менән улар беҙгә көлөп ҡарап торалар.

Мин башта һеңлемдең башлығын, унан пальтоһын һалдырам.

Оксананың сәстәре ҡара түгел, ҡуңыр, күлдәгенә ата ҡаҙ күҙе төҫлө түңәрәктәр ҙә төшөрөлмәгән. Сәсенә бик матур ҡыҙыл таҫма бәйләгән. Ә буйға Фәһимәнән дә ҙур. Минең саҡлы. Исеме лә урамда бер исем — Оксана, ҡалайыраҡ! Ә ниңә һуң ул өндәшмәй, турһайып тора?

— Әсәй, Оксана ла өндәшһен әле минә. Ағай, тиһен.

— Ул әле өшөгән, улым, йылынғас, барыһын да әйтер, йәме.

— Йә.

Мин һеңлемде, ҡулынан етәкләп, һандыҡ эргәһенә алып киләм. Шунда уҡ карауат аҫтына инеп, үҙемдең бөтә уйынсыҡтарым һалынған тартманы алып сығам. Минең әйберҙәрем байтаҡ. Таш атым,



ағас мылтығым, бәләкәс арбам, баҡа ҡабырсаҡтары, имән сәтләүектәре, тәтәй таштарым, матур-матур һүрәттәр төшөрөлгән ҡағыҙҙарым бар. Ҡалалағы һылыу апа алып килгән ҡыҙыллы-йәшелле тутыйғошом менән тимер һаплы бәкем дә юғалмағайны әле ул саҡта. Тимер һаплы бәкенең Марат ҡына былтыр урманда башына етте инде, кипкән шыма көпшәнән һыҙғыртҡыс яһағанда. Бына ни тиклем уйынсығым



бар ине минең! Шуларҙың бөтәһен дә мин Оксана алдына теҙеп ҡуйҙым.

— Ал, ал, Оксана, — тим мин, — бөтәһен дә һиңә бирәм. Йәй булғас, мин тағы бик күп матур нәмәләр йыйырмын әле.

Оксана ояла. Ниңә ояла ул? Мин әсәйем менән өләсәйемә ҡарайым. Улар икеһе лә мейес ҡаршыһындағы эскәмйәлә йылмайышып ултыралар. Әсәйем, беҙҙең янға килеп, икебеҙҙе лә һөйөп ала. Ниндәй шат минең әсәйем! Әсәйем шат саҡта, миңә бик рәхәт була. Һеҙгә лә шулайҙыр инде ул.

— Уйнағыҙ, күгәрсендәрем, уйнағыҙ, — ти әсәйем.

Мин бер үҙем генә саҡта ул «күгәрсенем» тимәй ине. Әле икәү булғанға күрә шулай әйтәлер инде. Күгәрсен яңғыҙ булмай торғандыр шул. Ана бит, беҙҙең келәт ҡыйығына оялаған күгәрсендәр ҙә ни тиклем. «Татыу ҡоштар улар, күргәрсендәр, гөрләшеп кенә торалар», — ти Мансур бабай.

Әсәйем һөйгәс, Оксана көлөп ебәрҙе. Ул башта, тартмаға әкрен генә ҡулын һуҙып, баҡа ҡабырсағын тотоп-тотоп ҡараны, унан һуң имән сәтләүектәрен алды. Иң аҙаҡтан ғына теге ҡыҙыллы-йәшелле тутыйғоштоң ҡойроғонан тотоп, һелкетеп ҡараны. Мин, уның эсен тишеп, ваҡ ҡына таштарын ҡойоп бөтөргәйнем шул инде. Һеңлем миңә ниҙер әйткәндәй булды. Мин аңламаным. «Ни тинең, Оксана, ни тинең?» — тип һораһам да, ул ҡабат өндәшмәне.

Башк. республиканская
БИБЛИОТЕКА
им. Н. К. Крупской

Үҙенең зәңгәр күҙҙәрен ҙур асып, миңә ҡараны ла торҙо. Мин әллә ниңә ҡурҡып киттем.

Әсәй минең янға килеп ултырҙы.

— Йәмил, — тине ул, — һинең һеңлең бит бик алыҫ ҡалала торҙо. Ул ҡалала беҙҙеңсә һөйләшмәйҙәр. Әлегә Оксана ла башҡортса белмәй. Һин уны өйрәтерһең, йәме?

Мин әсәйҙең һүҙҙәрен аңлап етмәһәм дә, ярар, тинем. Ә ул ҡалала ниңә башҡортса һөйләшмәйҙәр? Ҡайһылай һөйләшәләр һуң унда? Алыҫмы икән ул ҡала? — Шуларҙы әсәйемдән һорашҡым килә. Һорашыр нәмәләр тағы ла күп әле.

Ҡапыл һеңлем әсәйемә килеп һыйына. Әллә минән ҡурҡамы икән?

— Әсәй, әйт Оксанаға, мин уға теймәйем бит. Мин уға бер ҙә теймәйем, әсәй, — тим мин. Әсәйем ситкә борола. Күңеле тулғанда, ул гел шулай итә.

— Йәгеҙ, ҡунаҡтар, иркенләп сәй эсеп алайыҡ, — ти өләсәй, — самауыр һыуына.

Мине Оксана менән иң түрҙәге урынға йәнәш ултырталар. Шунда мин үҙемдең бәләкәй сынаяғымды бөтөнләйгә һеңлемә бирҙем. Эйе, бөтөнләйгә шул.

Әҙерәк торғас та, беҙгә Мансур бабай менән Фәрхениса әбей инде. Бабай, әбейҙе етәкләп, һөйләнә-һөйләнә түргә уҙҙы: «Алтылағы сәфәрҙән ҡайтһа, — ти ул, — алтмыштағы күрешә килһен, тигәндәр боронғолар». Улар артынан уҡ Шәһит ағайҙар, Сәгиҙәләр килде. Бөтә урам килде ул көндө беҙгә. Һәр кеше Оксананы йә күтәреп ала, йә былай ғына һөйөп ҡуя.

— Бына Йәмилдең дә һеңлеһе булды. Ҡалай матур бала, — тине Миңлекәй әбей, — бәхете-тәүфиғе булһын инде.

Үҙе беҙҙең икебеҙгә лә берәр ус муйыл бирҙе. Баҙамша бабай Тәзкирәһе Оксанаға ҡурсаҡ килтерҙе; ҡурсағы бик елле — күлдәк кейгән, яулыҡ бәйләгән, ысын ҡурсаҡ. Оксанаға ул бик оҡшаны,

әллә нисә рәт һикертеп алды. Кискә тиклем кешеләр килделәр ҙә килделәр. Өйҙә күмәк саҡта минә бик рәхәт була, һеҙгә лә шулайҙыр инде ул.

Кешеләр ҡайтышып бөттө. Мин әсәйҙең итәгендә ултырам. Ә өләсәй Оксананың сәсен тарай.

— Ҡыҙымдың сәстәре керләнгән, иртәгә үк мунса яғырға кәрәк булыр, — ти ул.

Минең Оксанаға бик күп һүҙҙәр әйткем килә. Тик нисек кенә тип өндәшергә икән һеңлемә? Ул бит барыбер минең һүҙҙәремде аңламай. Ниңә генә аңламай икән инде? Башта туғаным юҡ ине. Хәҙер туғаным бар ҙа бит, тик минең менән һөйләшә белмәй. Мин ҡысҡырып иларҙай булдым.

Үҙем һаман үтә ҡарайым.

— Йәмил... — тине ул. Мин һиҫкәнеп киттем. Әҙерәк торғас, өҫтәп ҡуйҙы: — Ағай...

Ҡалай матур итеп әйтә ул!

— Оксана! Туғаным! — тим мин. Әсәйемдең итәгенән һикереп төшәм дә уның битен һыйпайым. — Әйт, тағы әйт!

Ул өндәшмәй. Үҙе йылмая.

— Ҡош та бит һайрарға әкренләп өйрәнә. Ул да өйрәнер, балаҡайым, — ти өләсәй.

Ҡараңғы төшкәс тә, Оксананың йоҡоһо килде. Әсәйем эскәмйә янына ултырғыстарҙы теҙеп ҡуйҙы ла уға шунда урын һалды. «Бөгөнгә бында ятып торһон да иртәгә уның үҙенә карауат кертербеҙ»,— тине ул өләсәйгә.

Оксана ятҡас та йоҡлап китте. Ә мин уның янына ултырҙым да тик кенә ҡарап торҙом. Унан һуң Оксананың меңдәр ситенә башымды терәп ҡараным... Тик әсәйем мине күтәреп алғанда ғына, күҙем аҙыраҡ асылып китте...

## ОКСАНА ҠУРҠА

Өләсәйем әллә ҡасан уҡ инде Тимертауға ҡайтып китте. Беҙ өйҙә өсәү генә ҡалдыҡ: мин, әсәйем,

Оксана. Әсәй көн буйы колхоз келәтендә бойҙай таҙарта. Ул бойҙайҙы, яҙ булғас, ергә сәсәләр. Әсәйем дә бойҙайҙы машина менән сәсә белә. Беҙ быйыл малайҙар менән, яҡын баҫыуға барып, бойҙай сәскәнде үҙебеҙ ҡарап торҙоҡ. Ат екһәләр, бер машинаға икене егәләр. Ә трактор булһа, әллә нисә машинаға бер генә тракторҙы егәләр. Яҡын баҫыуҙа үҙебеҙ күрҙек.

Әсәйем, көндөҙ ҡайтып, беҙгә аш бешереп ашата ла тағы китә. Оксана менән беҙ икәүләп өйҙә ҡалабыҙ. Беҙ ҙә тик кенә тормайбыҙ: иҙән һеперәбеҙ, сынаяҡтарҙы йыуабыҙ. Һеңлем хәҙер оялмай. Минең менән һөйләшергә лә өйрәнде. Башта ҡыйын ине лә, хәҙер анһат инде. Мин уға быҙауҙарҙың, ҡышлау гөлдәрҙең, бәрәстәрҙең, ҡоштарҙың — бөтә, бөтә нәмәләрҙең исемдәрен өйрәттем. Ул элек осраған бер әйберҙе «был нимә?» тип һорап ҡына тора ине. Ә хәҙер үҙе белә.

Йылы көндәр булһа, Фәриттәр, Мараттар, Фәһимәләр менән бергә тау шыуырға ла йөрөйбөҙ. Хәҙер көндәр йылынды инде. Күптән түгел әсәйҙәрҙең март байрамы ла булды. «Тиҙҙән яҙ килер инде», — тиҙәр ҙур малайҙар.

Ҡайһы саҡта әсәйем беҙҙе Мараттарға илтеп ҡуя. Уның Фәһимә исемле һеңлеһе лә бар, тигәйнем бит. Уларҙа беҙ дүртәүләшеп «күҙ бәйләш» уйнайбыҙ. «Аҡрынырак баҫып йөрөгөҙ, таш табандар!» — ти беҙгә Мараттың өләсәһе. Ул минең өләсәйем кеүек түгел, бер ҙә тауышты яратмай. Әллә башы ауырта инде.

Оксана менән Фәһимә дуҫ ҡушылдылар. Марат менән мин былтырҙан уҡ дуҫ булып алғас, һеңлеләребеҙ тик йөрөһөнмө ни? Беҙ уларҙың ҡулдарын тотоноштороҙоҡ та бер-береһенә өсәр тапҡыр: «Дуҫмы?» — «Дуҫ!» тип әйттерҙек. Беҙҙең урамда бөтә малайҙар ҙа, ҡыҙҙар ҙа, дуҫ ҡушылғанда, шулай итәләр.

Бер көндө шулай, әсәйем төшкә ҡайтып киткәс,

тышта бик шәп ел күтәрелде. Мин елдең ниндәйләгән баҡсаның алыҫ мөйөшөндәге ҡайынға ҡарап беләм — ул тәҙрәнән күренеп тора. Тышта дауыл ҡупһа, ҡайын осоп китерҙәй булып сайҡала башлай. Уның яланғас нескә ботаҡтары, бәүелеп-бәүелеп, беҙҙең урам яҡ ҡоймаға һуғыла. Шундай саҡта ҡайын миңә бик ыҙаланған төҫлө күренә. Ниңә иҫә икән инде ул ел? Ниңә өҙгөләй икән инде ҡайынды?

Беҙ Оксана менән икәү тәҙрәнән баҡсаға ҡарап ултырабыҙ. Мансур бабайҙарҙың мөрйәһенән һоро төтөн сыға ла беҙҙең баҡсаға йығылып төшә. Әллә ул ҡайынды йылытырға итәме икән?

Мин әллә ҡасандан бирле һаҡлап килгән серемде Оксанаға асам. Мин уны ҡар ирегәс кенә әйтермен тигәйнем дә, түҙеп булмай бит.

— Яҙ булғас та, мин һиңә, Оксана, бер һарай хазина бүләк итәм, — тим.

Һеңлем аңламай тора. Уның әле хазина күргәне юҡтыр шул. Мин уға һөйләп бирәм.

— Ана, баҡсаны күрәһеңме? Ул быңдай ғына баҡса түгел, унда алтын япраҡлы көмөш ағастар үҫә. Таңдан алып төнгә, төндән алып таңға тиклем төрлө-төрлө ҡоштар һайрай. Сәскәләрҙән нур тамып тора, тим. Ошондағы бөтә ағастар араһында бер ҡайын бар, ҡайын төбөндә таштан һалынған һарай, һарай эсендә бер әкиәт малайының хазинаһы бар. Хазина — байлыҡ тигән һүҙ ул. Шул малай, йәй булғас, бер бәләкәс кенә әкиәт ҡыҙын баҡсаға алып инер ҙә ҡайын төбөнә алып килер. Һарайҙың таш ишеген аҫыр ҙа былай тип әйтер: «Бына, һеңлем, ошо һарайҙа нимә бар, шуның бөтәһе лә һиңеке. Уйна, шатлан, ҡайғы күрмә!»

— Кәрәкмәй, был әкиәт булмаһын, ысын булһын! — ти Оксана.

— Иҫәр, — тим мин, — малайы бит уның Йәмил исемле, ә ҡыҙы Оксана исемле була.

Шулай тигәс, һеңлем көлөп ебәрҙе:

— Тағы ла һөйлә, Йәмил!

— Ә унан һуң, — тим мин, — беҙ унда бәләкәс флагтар ҡаҙап ҡуйырбыҙ ҙа, йәй көнө Ҡөмөшлө буйында булған кеүек, пионерҙар лагеры яһарбыҙ. Фәриттәр, Мараттар, Фәһимәләр килер. Йыр йырларбыҙ. Әйҙә хәҙер үк йырлап ҡарайыҡ.

— Әйҙә! — ти Оксана.

Беҙ икебеҙ ҙә йырларға тотонабыҙ:

Яҙ килер, яҙ килер,
Ҡар ирер, ҡар ирер.
Үләндәр үҫерҙәр,
Үләндәр үҫерҙәр.
Баҡсаға инербеҙ,
Йырлашып йөрөрбөҙ,
Флагтар ҡаҙарбыҙ,
Лагерҙар яһарбыҙ...

— Тик ҡоштарҙы ҡурҡытмабыҙ, йәме? — ти Оксана, йырҙан туҡтап. — Улар матур һайрап торорҙар.

— Таш та ырғытмабыҙ, кө-ө-ө-ш! тип тә ҡысҡырмабыҙ, Оксана, эйе бит? Төйләгәнде генә ҡыуырбыҙ. Ул себештәрҙе урлай.

Ҡапыл көслө ел тәҙрә ҡапҡастарына килтереп һуҡты. Улар дөбөрләп киттеләр. Оксана ой тип ҡаты ҡысҡырып ебәрҙе. Мин һеҫкәнеп әйләнеп ҡараным, уның күҙҙәре ҙур булып асылғандар. Күҙҙәре миңә был юлы асыҡ зәңгәр булып түгел, ҡараһыу булып күренделәр. Ниңә улай ирендәре, иларға иткән кеүек, ҡалтырап тора? Ни булған уға? Шул арала тәҙрә ҡапҡастары тағы ла шәберәк дөбөрләп ҡуйҙы. Оксана инде карауат өҫтөнә өйөлгән мендәрҙәр артына уҡ инеп ҡасты. Мин, аптырап, тышҡа ҡараным. Тышта ҡараңғы төшөп килә. Ел һаман беҙҙең ҡайындың ботаҡтарын тартҡылай. Ә ҡурала элеккесә бер кем дә юҡ. Тик Сәғиҙә апайҙарҙың ала эте генә кәртә буйындағы көрт өҫтөндә



аунап ята. Ниҙән ҡурҡа һуң һеңлем? Унын эргәһенә килеп, мин дә мендәргә һыйындым.

Оксана ике ус төбө менән ҡолаҡтарын баҫып тотҡан да бөршәйеп кенә ултырып тора. Ул ҡалтырана-ҡалтырана миңә бышылдай:

— Ҡас тиҙерәк, Йәмил, ҡас, ана фашист килгән тышта! Ишетәһеңме, мылтыҡ ата бит! Ул уҫал! Ҡас тиҙерәк!

Мин дә ҡурҡып киткәндәй булдым. Тышта ҡараңғы. Ел һаман тәҙрә ҡапҡастарын һелкетә. Әсәйем дә өйҙә юҡ. Ә фашист алыҫ ул, унынһын яҡшы беләм. Шулай ҙа мин тиҙ генә һикереп төшәм дә тартманан ағас мылтығымды алып киләм.

— Күрәһеңме быны? — тим Оксанаға.— Килеп кенә ҡараһын фашист! Күрәгеҫен алыр. Атайҙар фронтта булғас, килә аламы ни ул бында?.. Ҡурҡма, Оксана, ҡурҡма.

— Ә кем ата һуң унда?

— Ел ул, ел. Тәҙрә ҡапҡастары әлек тә дөбөрләй инс. Яҡты саҡта ишетмәгәнһең генә һин уны.

Ул инде ҡолаҡтарын ҡулдары менән ҡапламай. Беҙ икәүләп мендәрҙәр артында, карауаттың арғы башына арҡаларыбыҙҙы һөйәп, ултырып торабыҙ.

— Беләһеңме, Оксана, — тим, — мин бар саҡта, һин ҡурҡма. Мин, үҫеп, Тимербәк кеүек батыр булғас, фашистарҙы еңергә китәм, һин өйҙә ҡалырһың. Мин ҡайтып етеүгә һине аждаһа урлап китһә лә, мин һине барыбер табып ҡотҡарырмын. Һин ҡурҡма, йәме?..

— Ой, кәрәкмәй, кәрәкмәй! Һин бер ҡайҙа ла китмә!.. Ә аждаһа нимә ул?

— Би-и-и-к ҙур йылан.

— Ә йылан нимә?

— Йыланмы? Йылан ул саға, тешләп ала.

— Ҡуй, тешләмәһен, мин ҡурҡам.

— Иҫәр һин, Оксана, мин бит уны еңәм ҡылыс менән.

— Мин ҡурҡам, йә ул ашар.

— Юҡ, аждаһа ашамай ул. Һоро бүре генә ашай, ҡыҙыл таҡыялы ҡыҙҙы ашаған кеүек, һине бүре ашаһа, мин уның эсен ярып ҡына ебәрермен. Мин ул бүрене!..

Оксана миңә һыйынғандан-һыйына бара. Үҙе дер-дер ҡалтырай. Өйҙә бөтөнләй ҡараңғы төштө. Тик ишек яғындағы мейес кенә ағарып тора.

— Тыңлағыҙ! Өфө һөйләй! — тип беҙҙең радио һөйләй башланы.

Өләсәй әйткәндәй, рәхәт булып китте. Мин инде, мендәр артынан сығып, яңынан тәҙрә эргәһенә килеп баҫтым. Бына урам ҡапҡаһы асылды. Бәрәү йүгерә-йүгерә болдорға табан килә. Был әсәйем булырға тейеш. Ҡапҡанан ингәс тә, ул ғына шулай йүгерә.

## ҺЕҢЛЕМДЕҢ ТӨШӨ

Мин яҙ булғанды бик яратам. Оксана ла ярата, һеҙ ҙә шулайҙыр әле. Бәрәстәр ни эшләй һуң, бәрәстәр! Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ! Ҡалай рәхәтләнеп йүгерешәләр, һикерешәләр. Ағы нигеҙ буйында ниҙер еҫкәнеп йөрөгән була. Уның бәләкәс кенә ҡойроғо бер туҡтауһыҙ ҡыймылдап тора. Ә ҡараһы болдорға менә лә һикереп төшә. Уның уйыны шул. Бер аҙҙан һуң инде икеһе өйҙөң ике мөйөшөнә табан йүгереп китәләр ҙә, шунан килеп, маңлайҙары менән төкөшәләр. Ыҙғышып түгел, былай шаярып ҡына итәләр улар. «Мөгөҙҙәре ҡысыта сабыйҙарҙың», — ти Мансур бабай. Бәрәс сабый була тимени! Мансур бабай бәләкәс балаларҙы ғына түгел, ҡолондарҙы, бәрәстәрҙе, эттәрҙе — бөтә хайуандарҙы ла бик ярата шул. Шуның өсөн бәрәстәрҙе «сабыйҙар» тип әйтә лә ул. Яман кешеләр менән фашистарҙы ғына яратмай беҙҙең Мансур бабай. Үҙе шулай ти.

Әсәйем алыҫ ҡалаға киткәс тыуған алалы-ҡолалы быҙау ҙа хәҙер бик ҙур үҫте инде. Ул бер үҙе баҡса буйында уйнап тик йөрөй. Ата ҡаҙ менән инә ҡаҙ үҙҙәренең һары йомғаҡтар төҫлө, бәп-бәләкәс кенә балаларына, ниҙер һөйләй-һөйләй, өй алдын күрһәтеп йөрөй. Ул бәпкәләр әле бөгөн генә ҡураға сыҡтылар. Әсәйем өйҙә саҡта, беҙ уларҙы тотоп-тотоп ҡарағаныбыҙ бар. Оксана әле береһенә һыу ҙа эсерҙе.

Быныһын үҙегеҙгә генә әйтәм. Ҡаҙ бәпкәләренең бер иң матурына мин «Оксана» тип ҡуштым. Әсемдән генә. Ул бәпкәне мин алыҫтан уҡ танығйым. Ана әле ул бәләкәс кенә таш өҫтөнә менеп баҫҡан да, муйынын әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа бороп, йылынып тора.

Ә тауыҡтар һуң, тауыҡтар! Улар, бөтә тирә-яҡты бер итеп, йырлап йөрөйҙәр. Ҡалай күңелле, ерҙә

яҙ булғас! Бөтәһе лә шат, бөтәһе лә уйнай, бөтәһе лә йырлай.

Оксана менән беҙ икәүләп баҡса буйындағы бүрәнәләр өҫтөнә менеп ултырғанбыҙ. Был бүрәнәләрҙән яҡын баҫыу күренеп тора. Баҫыуҙа беҙҙең әсәй машина менән бойҙай сәсеп йөрөй.

— А-а-на, Йәмил, алдағы тракторҙың сәскесенә баҫҡан беҙҙең әсәйҙәр әле, — ти Оксана.

Мин уға табан әйләнеп ҡарайым. Һеңлемдең зәңгәр күҙҙәре тағы ла яҡтырып киткән кеүек була миңә. Уның танау өҫтөндәге ваҡ ҡына сыбар һипкелдәре, ҡояш нурҙарында ялтырап, йымылдаған-дай күренәләр. Мин Оксанаға тағы ла һыйыныбыраҡ ултырам.

— Оксана, — тим мин, — әйҙә етәкләшеп ултырабыҙ! — Һеңлем шунда уҡ миңә ҡулын һуҙа. Мин уны етәкләп алам. Әсәй ҙә беҙҙе күреп торалыр әле. «Ана, минең балаларым ҡайҙа менеп ултырғандар»! — тиҙер әле ул.

— Үҫкәс, беҙ ҙә бойҙай сәсербеҙ әле. Оксана, эйе бит?

— Эйе шул. Һин тракторҙа йөрөрһөң, ә мин, әсәй кеүек, сәскескә баҫырмын, йәме? — ти Оксана. Ул шунда уҡ бүрәнә өҫтөнә баҫып күрһәтә.

Оксана тағы минең эргәмә ултыра. Ул ҡапыл күңелһеҙләнеп киткән шикелле тойола. Мин һынаным инде. Шундай саҡта һеңлемдең асыҡ зәңгәр күҙҙәре ҡараһыу булып китәләр. Ул шыбырлап ҡына һөйләй башлай:

— Беҙҙең тағы ла бер әсәй бар ине бит, Йәмил. Ул бик алыҫта, алыҫта ҡалды...

— Әкиәттәме, борон-борон замандамы, Оксана?

— Түгел. Ул да бик һәйбәт ине.

Мин һеңлемдең һүҙҙәрен аңламайым. Нисек инде ул ике әсәй булһын ти? Мин беләм инде — донъяла бөтә кешеләрҙең дә атаһы ла, әсәһе лә берәр генә була. Өләсәйем шулай тип үҙе әйтте.

Мин Оксана иламаһа ярар ине тип ҡурҡып киттем. Юҡ, һеңлем иламай. Ул бер һүҙ ҙә өндәшмәй, тик кенә ултырып тора. Ел уның ҡуңыр сәсенә ҡушып үрелгән ҡыҙыл таҫманы һелкетә. Ул таҫма, түбән остағы клуб түбәһенә ҡуйылған флаг кеүек, елберләп тә ҡуя. Үҙем таҫмаға ҡарайым, үҙем Оксананың әйткән һүҙҙәрен ҡабатлайым: «Алыҫта, алыҫта ҡалды...» Ҡем ул алыҫта ҡалған әсәй? Әсәйем өйгә ҡайтҡас, мин унан да һораным инде. «Оксана һиңә, моғайын, төшөн һөйләгәндер», — ти әсәйем. Ниңә уләй төштәр күрә икән минең һеңлем? Оксанаға ниндәйҙер һәйбәт һүҙҙәр әйткем килә.

— Әйҙә баҡсаға инәбеҙ, Оксана, — тим мин, бик оҙаҡ торғас, — анау ҡайын төбөндәге хазинаны һиңә бөтөнләйгә бирәм. Күрһәң, иҫең китер.

Һеңлем баҡса яғына ҡарай:

— Ҡайын төбөндә әле ер ҙә кибеп бөтмәгән...

— Бөтмәһә ни? Саҡ ҡына ҡалған инде. Ҡояш уны барыбер киптереп бөтәсәк... Әйҙә инде, Оксана!

## УҪАЛ АТА ҠАҘ

Ҡапыл урам ҡапҡаһы аҫтынан Марат һеңлеһе Фәһимәнең һары башы килеп сыҡты. Беҙҙең оста үндай һары сәсле ҡыҙ берәү генә. Шунда уҡ түше менән шыуып ҡына Фәһимә үҙе лә килеп инде. Бер Фәһимә генә түгел, беҙ бөтәбеҙ ҙә ҡапҡа аҫтынан инеп-сығып йөрөйбөҙ. Әлгесе бейек шул беҙҙең ҡапҡаның. Бер Марат ҡына, ҡапҡаны аса алмаһа, ҡойма башынан үрмәләп инә. Йәнәһе, ҙур, имеш, һигеҙ менән бара.

Фәһимәне күргәс, Оксана көлөп үк ебәрҙе. Дуҫы килгәс, кем шатланмай инде.

Фәһимә ике ҡулына ике ҡағыҙ сәүкә тотҡан. Ул, йүгереп килеп, бер сәүкәһен Оксанаға, береһен миңә һуҙҙы. Үҙе һаҡаулап-һаҡаулап һөйләргә тотондо. Ҙурҙар ҙа аптырай инде. Әллә ниңә һаҡаулығы

бөтмәй шул Фәһимәнең. Үҙе бит алты менән бара хәҙер.

— Малат дүлт сәүкә яһаны дүлтебеҙгә. Хәҙел Фәлит менән бында киләләл. Сәүкә осолғас, әй ҡыҙыҡ булыл, — ти Фәһимә. Үҙе Оксанаға биргән сәүкәһен кире алып, осороп та ебәрҙе. — Күлдеңме?

Ҡағыҙ сәүкә ҡыйпылып-ҡыйпылып осоп китте. Оксана ҡыуанысынан ҡул сабып ҡуйҙы.

Икенсе сәүкәне мин Оксанаға бирҙем. Ҡағыҙ ҡош әйләнеп-әйләнеп осоп китте лә теге бәләкәс бәпкә эргәһенә барып ҡунды. Бәпкә ҡурҡыуынан, ахыры, баҫҡан еренән йығылып төштө. Мин һиҙмәй ҙә ҡалдым — һеңлем бәпкә янына тороп йүгерҙе. «Ой бәләкәсем, тәпәйең ауырттымы әллә?» — тип ҡаҙ бәпкәһен күтәреп алмаҡсы булды. Тап шул ваҡыт ата ҡаҙ, асыу менән осоноп, һеңлемдең күлдәген килеп тешләне. Унан һуң, ҡанаттарын киң йәйеп, Оксананы һуғып та йыҡты. Һеңлем әсе итеп ҡысҡырып ебәрҙе. Фәһимә иларға уҡ кереште.

Мин, йүгереп барып, ата ҡаҙҙың ҡанатына тотондом. Ул шунда уҡ Оксананы ысҡындырҙы ла минең беләгемде суҡып алды. Ҡаҙҙың ҡанаты ҡулымдан ысҡынып китте. Ата ҡаҙ тағы ла асыулана төштө, ахыры. Инде ике ҡанаты менән бер юлы мине туҡмай башланы. Мин ата ҡаҙҙың тоноҡ уҫал күҙҙәрен генә күреп ҡалдым. Үҙем нимәгәлер абынып киттем. Шунан һуң бер ни күрмәнем дә, ишетмәнем дә, ике ҡулым менән битемде ҡаплап, бөгәрләндем дә ергә йөҙ түбән яттым. Иламаным да, ҡысҡырманым да. Әйберем ауыртҡанда, минең илай торған ғәҙәтем юҡ. Ә ата ҡаҙ мине һаман өҙгөләй бирҙе...

Кемдер мине күтәреп алды ла баҫтырып ҡуйҙы. Бер күҙемде асҡанда, минең алда Мансур бабай тора ине. Уның янында Мараттар, Фәриттәр, Фәһимәләр буталып йөрөй. Ә Оксана әле булһа күҙҙәрен ыуа-ыуа илап тора. Мине йәлләп илай ул, беләм инде.

— Ике күҙендә лә ас әле, улым,— ти миңә Мансур бабай, — хайуан түгел был ҡаҙ, дошман был. Харап итә яҙҙы бит баланы.

Шунда уҡ минең күңелем тулып китте. Өҫтөмдәге йәшел күлдәгемдең йыртылып бөткәнен күргәс, тағы ла ҡыйыныраҡ булды.

— Нисә әйттем Көнбикәгә: ата ҡаҙ түгел был, йыртҡыс был. Балаларҙың йөрәктәре ярылыуы бар.— Бабайҙың тауышы миңә шундай яғымлы булып ишетелә. Уның муйынынан ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлағым килә минең. Ә Марат эре генә һөйләнгән була.

— Ярылды ти, мине ҡоторған эт талаһа ла, ярылманы әле. Миңә ҡалһа, ҡаҙығыҙҙың муйынын борон ташлаған булыр инем.

— Ташлал инең. Әтәстән дә ҡулҡаһың әле.

— Ә һин ҙурҙар һүҙенә ҡыҫылма. Бар, ҡурсағыңды уйна.

— Фәһимә дөрөҫ әйтә. Һин — маҡтансыҡ, — ти Фәрит.

— Минме?

— Һин!

Мин Мараттың артына йәшергән йоҙроғон күреп ҡалдым.

— Әй, һеҙ, көҙгө әтәстәр, көш! — ти Мансур бабай. — Татыу ғына уйнағыҙ. Туҡта, Оксана ҡыҙым, илама инде. Хәҙер әсәйегеҙ ҡайтыр. Иртәгә Май байрамы бит, балалар. Татыулыҡ кәрәк.— Шуларҙы әйткәс, аралағы ҡапҡанан сығып та китте.

## ЕҢЕҮ АЛМАҒАСТАРЫ

Иртәгә Май!

Беҙ инде бөтәһен дә онотто҅. Бишәүләшеп тотоноштоҡ та һикерә башланыҡ:

— Иртәгә Май! Иртәгә Май! Иртәгә Май!

— Тәзкирә апа мине иртәгә уламда йөрөргә алып сыға, беләһеңме?

— Ә беҙ үҙебеҙ барабыҙ, әсәйем ебәрә,— ти Оксана. — Флагтар ҙа тоторбоҙ — ҡыҙыл ситсанан яһалғанды.

— Әйҙәгеҙ, бишәүләшеп бергә барабыҙ, юҡ, — алтаулашып. Минең ҡустым Заман да эйәрһен, — быны Фәрит шулай ти. Ул гел генә бергә йөрөргә ярата. Марат кеүек түгел.

— Ә кем беҙҙең башлыҡ булыр һуң? Юрамал ғына звеновод йә бригадир?

— Юрамал түгел, ысын кәрәк. Звеновод та түгел, вожатый.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә: «Марат булһын, Марат булһын», — тибеҙ.

— Тик Малат мине төлткөләмәһен, ялалмы? — ти Фәһимә.

— Вожатый төрткөләмәй ул. Бик белеп тор уны. Тик һаҡау көйөңә күп һөйләнеп йөрөмә.— Юҡ, Марат был юлы һеңлеһенә асыуланмай. Вожатый булған өсөн генә шулай ҡысҡырып һөйләй.

Марат беҙҙе, ендәрҙән тотоп-тотоп, теҙеп ҡуя. Иң алға Фәритте, унан Оксананы, унан мине, иң аҙаҡтан Фәһимәне баҫтыра. Үҙе, бер ситтә генә тороп, команда бирә башлай:

— Алға! Бер, ике, өс! Бер, ике, өс!

Беҙ ҡуҙғалып китәбеҙ! Тик Фәһимә генә, нигеҙ буйындағы бәрәстәргә ҡарап, тороп ҡала. Беҙ ҡапҡа төбөнә яҡынлашҡанда ғына, ул, йомғаҡ кеүек тәгәрәп, килеп етә. Марат беҙгә туҡтарға ҡуша.

— Туҡтағыҙ, тим бит инде! Бер, ике!

Шул саҡ ҡапҡа асылып китә. Төбө-тамыры менән ҡуптарылған кескәй генә ағастар күтәреп, әсәйем килеп инә. Уның ҡояшта янған битендә бөрсөк-бөрсөк тир тамсылары ялтырап тора. Асыҡ ҡапҡа төбөндә туҡтап, әсәй аптырап ҡала:

— Был ниндәй ғәскәр тағы?

Беҙ бөтәбеҙ ҙә бер юлы яуап бирәбеҙ.

— Иртәгә Май! Марат беҙҙең вожатый.

Әсәй оҙаҡ итеп минә ҡарап тора. Уның йөҙөндәге йылмайыу аҡрынлап юғала. Ул, бошоноп, минән һорай:

— Ә һин һуң, Йәмил, ҡайһы фронтта булдың?

Мин өндәшмәй генә башымды эйәм. Оксана менән Фәһимә икеһе бер юлы ата ҡаҙҙы һөйләй. Марат өҫтәп ҡуя:

— Көнбикә апай, Мансур бабай менән беҙ булмаһаҡ, Йәмил бөткәйнө бөгөн, — тигән була.

Ҡулындағы ағастарын баҡса ҡапҡаһы янына илтеп ташлай ҙа әсәй Оксана менән мине етәкләп ала.

— Иҫәрҙәр, — ти әсәй йомшаҡ ҡына, — шулай һаҡһыҙ йөрөмәйҙәр инде. Һәр кемгә лә бала ҡәҙерле бит. Кешегә лә, ҡаҙға ла. Бөгөн бойҙайҙы сәсеп бөтөрҙөк. Төштән һуң мин эшкә бармайым. Бына алмағастар алып ҡайттым. Сәй эскәс, бергәләшеп шуларҙы баҡсаға ултыртырбыҙ. — Ул Маратҡа боролоп, өҫтәп ҡуя: — Һин дә отрядыңды алып кил, вожатый, яраймы?

— Ярай, Көнбикә апай, — ти Марат, ҡыҫҡырып. Үҙе Фәрит менән Фәһимәне урамға төрткөләп алып сығып китә. Әсәйем, ҡапыл ғына эйелеп, ике ҡулы менән икебеҙҙе ҡосаҡлап, биттәребеҙҙән үбеп ала. Үҙе аҡрын ғына һөйләнә: «Балаҡайҙарым, күгәрсендәрем!» — ти.

* * *

Сәй эскәс, беҙ өсөбөҙ ҙә баҡсаға сыҡтыҡ. Әсәйем үҙе тимер көрәк алды. Оксана менән минә бәләкәс тимер тырманы тотторҙо. Бер тырманы, икәү егелгән булып, һөйрәп килдек.

Баҡсаға ингәс тә, әсәй, көрәген кәртәгә һөйәп, беҙҙең ҡулдағы тырманы алды. Ул башта былтыр сөгөлдөр ултыртылған түтәлдәрҙең сүптәрен бер урынға тырматып өйөп ҡуйҙы. Оксана менән беҙ ул сүптәрҙе ҡойма буйына ташып та бөтөрҙөк.



Унан һуң әсәйем алға килеп төшкән сәс толомон артҡа алып ташланы ла көрәккә тотондо.

— Мәгеҙ, инде һеҙ бүтән түтәлдәрҙе тырматығыҙ, — тине әсәй, — ә мин ҡаҙырға тотонам.

Ул, көрәген батырып-батырып, ерҙе ҡаҙый башлай. Ағасты ултыртыу өсөн, башта соҡор яһарға кәрәк шул. Кисә генә Мансур бабай ҙа шулай итте. Ул да ике алмағас, дүрт сейә ағасы ултыртты. Үҙе Оксана менән беҙгә әйтә: «Был ағастарҙың емештәрен мин күрә алмам инде, балалар, ҡартайҙым, — ти. — Ә һеҙ үҫеп етеүгә, уларҙың емештәре өлгөрөр. Мин күрмәһәм, һеҙ күрерһегеҙ. Мин шуға ризамын...» Бабай, билен ыуа-ыуа, саҡ ҡына баҫып тора ла тағы һөйләй башлай: «Донъяла кеше үҙе өсөн генә йәшәргә тейеш түгел. Ана, ҡояшты ҡарағыҙ, ул бөтә ерҙе йылыта...»

Беҙ Оксана менән икәүләп, ҡулдарыбыҙҙы ҡаш өҫтөнә ҡуйып, күккә ҡарайбыҙ. Баш өҫтөндә, ҙур күк түбәһендә, бәләкәс кенә ҡояш тора. Ул үҙе эҫе, үҙе яҡты.

Эшләгәндә, беҙҙең әсәй һөйләнергә яратмай. Ана, әле лә шәп-шәп итеп ерҙе ҡаҙый. Эйелгәндә, уның сәс толомдарына тағылған сулпылары сылтырап китә.

Оксана менән беҙ, тырмаға еғелеп, бүтән түтәлдәрҙе тырматып йөрөйбөҙ. Тик ниңәлер әсәй тыр-

матҡандағы кеүек түгел, сүптәр, йыйылып, өйөлмәй.

Урамда берәү һыҙғырып ебәрҙе. Был Марат инде, ул ғына шулай һыҙғыра белә. Шунда уҡ ҡойма өҫтөндә Мараттың башы ҡалҡып сыҡты. Тик, әсәйҙе күреп алғас, тиҙ генә кире боҫто. Әсәй өйҙә саҡта, ул ҡойма башынан йөрөргә шикләнә. Шул арала Заман, Фәһимә, Фәрит бер-бер артлы ҡапҡа аҫтынан шыуып инеп тә еттеләр. Был юлы вожатый үҙе лә тегеләр ингән ерҙән генә инде.

Беҙҙең янға иң алдан Заман йүгереп килеп етте. Уға бер көн генә дүрт йәш тулды, ә үҙенең бүрке миңә лә ҙур. Башы дәү уның бик.

Заман әсәй ҡаршыһына уҡ килеп баҫты.

— Көнбикә апай, беҙҙең әсәйҙең уймағы баҙға төшөп китте. Эй эҙләнек — табып булманы, алыҫ ҡасҡан, — ти Заман, үҙе йәһәт кенә баҡсаның арғы яғына йүгереп китә.



Әсәй, эшенән туҡтамай ғына, көлөп ҡуя.

— Көнбикә апай, миңә Сибәл әбей матул күлдәк текте, Май байламына.

Марат уға турһайып ҡарай:

— Күлдәк тә күлдәк, ти, ә атайҙан килгән хатты әйтмәй. Көнбикә апай, әле генә атайымдан хат килде. «Еңеп бөтөп барабыҙ инде», — тигән.

— Беҙҙең атайҙан да килде инде иртәнсәк, — ти Оксана, — белдеңме!

Әсәй, көрәгенә таянып, беҙгә ҡарап тора. Уның йөҙө шундай яҡты. Эсендәге шат-

лығы шулай һәр ваҡыт уның төҫөнә сыға. «Көнбикәнең эсендә ҡыуанысы булһа, ул үтәнән-үтә күренеп тора. Йөрәгендә тап юҡ минең баламдың», — ти өләсәй.

— Байрам килә, балалар, беҙҙең урамға ҙур Еңеү байрамы килә, — ти әсәй. Уның тыныс тауышы миңә бик матур йыр төҫлө ишетелә.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә бер юлы ҡысҡырып ебәрәбеҙ:

— Байрам килә! Байрам килә!

Оксана менән Фәһимә, ҡулдарын болғай-болғай, һикерергә үк тотоналар.

* * *

— Әйҙәгеҙ, балалар, — ти әсәйем, — хәҙер инде алмағастарҙы ултырта башлайыҡ. Үҙегеҙ ҙур үҫкәс, бәләкәстәргә һөйләрһегеҙ: «Был алмағастар фашисты еңгән йылды ултыртылды, туғандар», — тип әйтерһегеҙ. «Еңеү алмағастары былар»,— тиерһегеҙ. Барығыҙ, малайҙар, ағастарҙы берәмләп кенә бында ташығыҙ.

«Малайҙар» тигәс, Заман да беҙгә эйәргән була. Үҙе беҙ күтәргән ағастың сыбығына ғына тотоноп йөрөй.

Әсәй беҙ ташыған алмағастарҙы соҡорға баҫтырып ҡуя ла беҙҙең өсөбөҙгә — ҙур малайҙарға — аҙ ғына күтәреп тотоп торорға ҡуша. Үҙе көрәк менән ағастарҙың төптәрен күмә. Оксана менән Фәһимә кәртә буйында үҫкән һары сәскәләрҙе йыйып йөрөй. Ә Заман бөтә эште лә эшләй. Эшләй тигәс тә, бутала инде шунда. Әле беҙ тотоп торған ағасҡа килеп йәбешә, әле усы менән соҡорға тупраҡ һалған була.

— Бына Замандың, исмаһам, эшләмәгән эше юҡ, — ти әсәй, — тик танауын һөртөп алырға ғына ваҡыт теймәй. — Заман шунда уҡ еңе менән танау аҫтын ышҡып ала. Беҙ малайҙар менән пырхылдап

көләп сбәрәбеҙ. Көлмәҫлек тә түгел шул: Замандың түшендә мөйөшөнән булавка менән ҡаптырып ҡуйылған ҡулъяулыҡ бар. Үҙе танауын еңенә һөртә. Беҙ көлгәс, ул танауын ҡулъяулығы менән икенсе ҡат һөртөп ҡуйған була. Бала тиһәң дә бала шул.

Бына беҙ бөтә ағастарҙы ла ултыртып бөтөрҙөк. Уларҙы үҫеп ултырған ысын ағастарҙан айырып та алырлыҡ түгел. Бөтәбеҙ ҙә иң аҙаҡтан ултыртылған ағас янына йыйылдыҡ. Мин ағастарҙы һанап ҡарайым: берәү, икәү, өсәү, дүртәү, бишәү. Бөтәһе биш ағас. Эсемдән генә уйлап торам: быныһы атайыма, быныһы әсәйемә, быныһы Оксанаға, быныһы миңә була. Ә бишенсеһе кемгә була һуң?

— Ә бишенсе алмағас кемдеке була һуң, әсәй? — тим мин.

— Нисек кемдеке?

— Нисек булһын, шулай. Дүртеһе дүртебеҙгә, быныһы кемгә була?

Әсәйем, йылмаймайынса, тыныс ҡына яуап бирә. Әллә асыулана инде:

— Өйҙәге нәмәне бүлешмәйҙәр уны, улым. Бөтәһе лә беҙҙеке. Ана, тау буйындағы ҙур баҡса ла беҙҙеке.

— Һеҙҙеке генә түгел әле ул, Көнбикә апай, уны минең әсәйем дә ултыртты, — ти Марат. — Мин дә дүртте ултырттым.

— Шуның өсөн дә беҙҙең барыбыҙҙыҡы, тим дә баһа, берәү ҙә бит бүлешеп йөрөмәй.

Оксана әсәйҙең итәгенә һыйына. Әсәй уның башынан һөйөп ала.

— Әсәй, — ти Оксана, — ысынлап түгел ти, юрамал ғына ти, әсәй, йәме?

— Нимә, ҡыҙым? — Әсәй Оксананы бөтөнләй эйелеп тыңлай.

— Юрамал ғына ти, әсәй, бишенсе алмағас кемгә булыр икән?

Әсәй Оксананы ҡосаҡлап күтәреп ала:

— Ҡыҙым да һорағас, әйтәйем инде: бишенсе алмағас килгән ҡунаҡтыҡы булыр, йәме?

Әһә, әсәй, дөрөҫөн әйтте. Беҙ өйҙә өсәү генә торабыҙ. Беҙҙең ултырғысыбыҙ бишәү, сынаяҡтарыбыҙ алты пар, тәрилкәләр тағы ла күберәк. Кем өсөн һуң уның артығы? Хәҙер белгәнһегеҙҙер инде — ҡунаҡтар өсөн. Беҙ ҡунаҡ килгәнде бик яратабыҙ. Мансур бабай бер көн әйтә: «Ҡунаҡ йөҙөн күрмәгән кеше шатлыҡ йөҙөн күрмәй ул», — ти, беҙҙең радио һөйләгәнде тыңлағас. Әллә радио берәйһен ҡунаҡҡа саҡырҙымы икән?

— Бына балаларға ҙур рәхмәт, хәҙер уйынығыҙҙа булығыҙ инде, — ти әсәй.

— Көнбикә апай, миңә лә рәхмәтме? — тип һорай Заман.

— Заманға рәхмәттең иң ҙурыһы инде, — әсәйем шулай тип Заманды үбеп ала. — Замана балаһы һин, Заман!

— Эйе, — тип Заман баш ҡаға.

Тегеләр баҡсанан сыҡҡанда, мин йүгереп кенә хазинам эргәһенә барып киләм. Ҡайын төбөндә саҡ ҡына һыу бар шул әле. Хазина һарайы шул һыуҙың аҫтында ята.

Мин яңы ултыртылған бер алмағас янында саҡ ҡына туҡтап торам. Был алмағас — арала иң матуры. Эсемдән генә, шул иң матуры Оксанаға булыр, тип уйлайым. Уны саҡ ҡына һыйпап та ҡуям мин.

Урам ҡапҡаһы төбөндә тегеләрҙе ҡыуып етәм, ҡапҡаны әсәйем үҙе асып бирә. Беҙ бөтәбеҙ ҙә урамға сығып йүгерәбеҙ. Мин Оксананы етәкләп алам да артыма әйләнеп ҡарайым. Әсәй, көрәк һабына таянып, ҡарап ҡала. Ә беҙ Тимербулат бабайҙар тыҡрығынан Ҡыр яғына уҡ сығып китәбеҙ. Ауылдың ул яғын шулай «Ҡыр яғы» тип йөрөтәләр. Унда тәрән соҡор ҙа, һай соҡор ҙа бар. Йәй көнө шунда быҙауҙар ҙа, бәрәстәр ҙә, тайҙар ҙа үлән ашап йөрөйҙәр.

## СУҠЛЫ БАШМАҠТАР

Мин Ҡаҙанғол һыртына килеп еткән көтөүҙе күреп ҡалдым. «Көтөү ҡайтты, малайҙар!» — тип ҡысҡырып та ебәрҙем. Иң алдан кәзәләр, унан һуң һарыҡтар урам осона сабышып килеп тә инделәр. Бына ҡалай оҙаҡ уйнағанбыҙ Ҡыр яғында. Беҙ бөтәбеҙ ҙә урамға табан йүгерҙек.

Беҙҙең ҡапҡа асыҡ ине. Көтөү ҡайтыр алдынан беҙ шулай асып ҡуябыҙ ҡапҡаны. Оксана менән икәүләп йүгерешеп болдорға килеп мендек. Ә беләһегеҙме ни күрҙек беҙ болдорҙа?! Ишек янына ғына һөйәп ҡуйылған таяҡ күрҙек. Еҙ башлы ҡара таяҡ. Кем таяғы тиһегеҙме? — Тимертауҙағы өләсәй таяғы ул. Бына кемдең таяғы килгән беҙгә!

Беҙ, таяҡты тотоп та ҡарамайынса, өйгә атлығып керҙек. Өләсәйем, ҡыҙыл камзулын кейеп, өҫтәл артында ултырып тора. Оксана менән икебеҙ ҙә өләсәйҙең муйынына килеп аҫылынабыҙ — һеңлем алдан, мин арттан ҡосаҡлайым. Уны күргебеҙ килеп бөткәйне шул инде. Әсәйҙәрҙең март байрамынан бирле килгәне юҡ ине беҙгә. «Һай, зирәктәрем», — ти өләсәй, көлгән саҡта, уның ауыҙындағы кителгән теше күренеп ҡала. Мин өләсәйемде уйлағанда, уның шул теше шау ғына күҙ алдыма килә.

Өләсәй ҡулдарын камзул кеҫәләренә тығып ала. Ул башта беҙгә кеҫәһенән ике йомортҡа сығарып бирә. Икебеҙгә лә берәрҙе. Унан һуң ҡағыҙға төрөлгән тағы бер нәмә килтереп сығара. Ни икән ул ҡағыҙ эсендә? Өләсәй төргәкте тиҙ генә һүтеп ташлай. Төргәк эсенән муйыл күҙле бәләкәс кенә ҡамыр турғайҙар килеп сыға. Былары беҙгә икешәрҙән тейҙе. Ул турғайҙарҙы өләсәйем үҙе бешерә белә.

Өләсәйҙең итәгенән төшөп, һеңлем менән икәүләп һандыҡ өҫтөнә барып ултырабыҙ ҙа турғайҙарҙың ҡойроҡтарын тешләп алабыҙ. Мин уларҙы

Оксананан йәһәтерәк ашап бөтөрөм. Һуңынан ғына муйындарын сыртлатып сәйнәп ҡуйған булам.

Өләсәй менән әсәй бер-береһенә ҡарашып ала ла әсәйем шаршау эсенә инеп китә. Беҙ теге бүлмәне, шаршау менән бүленмәһә лә, шаршау эсе тип йөрөтәбеҙ. Шаршауы юҡ, ә шаршау эсе бар — ҡыҙыҡ инде шулай.

Әсәй, ике ҡулын артҡа йәшереп, шунда уҡ кире сыға.

— Быныһы кемгә? — тип һорай ул.

— Ниҙең быныһы һуң, әсәй?

— Һуңынан күрерһегеҙ, әйтегеҙ инде тиҙерәк,— тип ҡабаландыра өләсәй. Мин әллә ни эшләп китәм. Тыным ҡыҫылғандай булып ҡала.

Әсәй, башы менән һул яҡҡа күрһәтеп, яңынан һорай:

— Улай булғас, һин әйт, Оксана, кемгә быныһы?

— Йәмилгә!

— Ә тегеһеһе Оксанаға! — тип әйтеп өлгөрәм мин.

Әсәй икебеҙгә лә бер юлы берәр пар башмаҡ һуҙа, өр-яңы күн башмаҡтар.

— Өләсәйегеҙ һеҙгә Май бүләге итеп алып килгән уларҙы, рәхмәт әйтегеҙ, — ти әсәй. Беҙ икебеҙ ҙә өләсәйгә һыйынабыҙ: «Рәхмәт һиңә, өләсәй!» — тибеҙ.

Их, күрһәгеҙ ине ул башмаҡтарҙы! Дүртеһе лә һары күндән тегелгән, дүртеһенең дә йөҙөндә ҡыҙыл күндән яһалған суҡтары бар. Бына башмаҡтар, исмаһам! Мин уларҙың суҡтарын һыйпап-һыйпап ҡарайым.

— Йәгеҙ, кейеп ҡарағыҙ әле, балалар, таманмы икән? — ти өләсәй.

Беҙ тиҙ генә иҫке башмаҡтарыбыҙҙы сисеп ташлайбыҙ. Уларҙы сискәс, әсәй беҙҙе туҡтатып тора:

— Булғас, булғас, бөтәһе лә яңынан булһын

инде. Болдорҙағы таста һыу бар, аяҡтарығыҙҙы шунда йыуып инегеҙ ҙә яңы ойоҡтар кейҙерермен.

Болдорға сыҡҡанда ла, беҙ башмаҡтарҙы ҡалдырмайбыҙ, алып сығабыҙ. Аяҡтарыбыҙҙы тастағы һыуға тығып, беҙ һөйләшеп ултырабыҙ:

— Ҙур үҫкәс, беҙ ҙә өләсәйгә матур-матур күлдәктәр алып бирербеҙ, матур башмаҡтар тектерербеҙ, йәме, Йәмил? — ти һеңлем. Үҙе ике ҡулына ике башмағын кейеп, туп-туп итеп баҫып ҡараған була.

— Мин, үҫкәс, шофер булам да өләсәйҙе, әсәйҙе, атайҙы, һине машинаға ултыртып, ҡалаға ҡурсаҡ театрына алып барам. Йәме, Оксана?

— Ә мин, үҫкәс, өләсәйгә үҙем яңы камзул тегәм. Мин бит тегеүсе булам. Машинаны әйләндерәм дә тек-тек тегәм дә ҡуям.

— Һин өләсәйгә тун да тек, Оксана, уның туны туҙған инде...

Әсәй өйҙән тәҙрә ҡаға, үҙе, беҙҙе саҡырып, ҡулын болғай. Беҙ, болдор иҙәнендә эҙҙәр яһап, саҡ ҡына йөрөйбөҙ ҙә, әсәй биреп сығарған сепрәккә аяҡтарҙы һөртөп, өйгә инәбеҙ.

— Һеҙ унда әллә һыуға баттығыҙмы?

Ҡыҙыҡ һүҙ әйтә — тастағы һыуға батып буламы инде?

— Кейеп ҡара ла бейеп ҡара! Бындай башмаҡтар кейгәс, кеше нисек итеп бейемәй түҙеп торор икән? — ти өләсәй.

Башмаҡтарҙы кейгәс, беҙ икебеҙ ҙә иҙән буйлап йөрөп ҡарайбыҙ. Бер Оксанаға, бер үҙемә күҙ һалам. Һеңлем баҫҡан һайын, теге ҡыҙыл күн суҡтар, ҡош ҡанаттары кеүек, елпенеп-елпенеп ҡуялар.

Минең яңы башмаҡтарҙы кейгән көйө урамға сығып йүгергем, бөтә ауылды әйләнеп ҡайтҡым килә. Юҡ, улай ғына ла түгел, анау машиналар үтеп йөрөй торған оло юл менән алыҫҡа, алыҫҡа йүгереп китер төҫлө булам. Үҙем хәҙер үк һеңлемде етәкләп алырға итәм. Ниңә аяҡтар йүгереп китергә генә то-

ра икән был тиклем? Әллә, ысынлап та, әкиәттәге итектәр кеүек, үҙҙәре йөрөй торған башмаҡтармы икән былар?

— Һинең урамға сығып йүгергең киләме, Оксана? — тип һорайым мин.

— Килә. Әйҙә сығабыҙ.

Әсәй беҙҙең янға килә лә, икебеҙҙе ҡосаҡлап алып, һандыҡ өҫтөнә ултырта.

— Ана ҡояш та тау артына төшөп китте. Тауыҡтар ҙа ҡунаҡланы, бәрәстәр ҙә хәҙер йоҡларға ята. Һеҙ иртәгә ҡояш менән бергә тороп сығырһығыҙ, — ти әсәй. — Ҡояш һеҙҙең башмаҡтарҙы күргәс, үҙе лә һоҡланып әле: «Ҡалай матур анау балаларҙың башмаҡтары!» — тип әйтер.

Мин әсәйемдең шулай һөйләгәнен яратам. Ҡояштың ни әйтерен дә белә шул ул әсәй кеше булғас.

— Әсәй, — ти Оксана, — башмаҡтарҙы айға ла күрһәтербеҙ, ярaймы, әсәй!

— Һеҙ йоҡларға ятҡас, ай үҙе килеп тәҙрәнән ҡарай ул.

— Ә йондоҙҙарға?

— Йондоҙҙар алыҫтан күрмәйҙәр, шуның өсөн уларға ай ғына һөйләп бирер. «Бына мин бөгөн ерҙәге ике баланың башмаҡтарын күрҙем, бик матурҙар», — тип әйтер ул. Ә йондоҙҙар йымылдашып көлөргә тотонорҙар. Шатлыҡлы һүҙ ишеткәс, улар ҙа ҡыуанып, яҡтырып китәләр бит.

Әсәй һөйләгәндә, мин һеңлем менән икәүләп йондоҙҙар араһында атлап йөрөгәндәй булам. Бына ниндәй башмаҡтар килтерҙе бит беҙгә өләсәй!

Ҡараңғы төшкәс тә, беҙ ятмай торабыҙ. Башмаҡтарҙы һалып ҡуйғы килмәй. Ҡасан ғына иртәнсәк булыр икән? Беҙ иң әлек Мараттарға, унан Фәриттәргә барыр инек. Һыу буйына төшөп, ҡомда ла йөрөп ҡарар инек әле.

Өләсәй Оксана менән икебеҙгә урындар һалып бирә. Беҙҙең карауаттарыбыҙ тураһына ғына атайҙың ҙур һүрәте эленгән. Ул ялан баш, күкрәгендә

өс миҙал теҙелеп тора. Мыйығы яҡ-яҡҡа ҡыйылып киткән. Был һүрәт элек бәләкәс кенә ине лә, былтыр уны Хисамиҙарға килгән бер таҡыр башлы, алтын тешле ағай әллә нисек кенә дәүәйтеп китте. Ул ағай беҙҙе лә һүрәткә төшөрҙө.

Мин һәр көндө кис атайыма оҙаҡ итеп ҡарап ятам. «Ул ҡайҙа икән әле, ул ни эшләй икән әле?» — тип уйлайым. Оксана ла, билдәле, шулай уйлай. Әле һүрәт асыҡ күренмәй. Ләкин мин барыбер уны күреп торған кеүекмен. Күҙҙе йомоп та таный алам мин атайҙы.

Ниңәлер һаман йоҡлап китеп булмай. Бына урам тәҙрәһенән ай ҡараны. Уның яҡтыһы һандыҡ өҫтөнә төштө. Ә һандыҡ өҫтөндә беҙҙең башмаҡтар тора. Ул мине лә, Оксана кеүек, йоҡлай был, тип уйлайҙыр әле. Мин, күҙҙәремде саҡ ҡына асып, ҡарап ятам. Ай мине күрмәй. Ни һөйләй икән ул ай хәҙер үҙенең йондоҙҙарына?..

Мин юрғанды башымдан уҡ ябынып ятам. Ҡапыл Мансур бабайҙың һүҙҙәре миңә яңынан ишетелгән кеүек булып китә: «Иртәгә Май байрамы бит, балалар...» Нисек йоҡо килһен, ти инде ошондай саҡта!

## АҠТЫ ЛА КИТТЕ БЕР БАШМАҠ

Мин әсәйҙең аяҡ тауыштарын ишетәм. Ул, әкрен генә баҫып, өйҙән сығып китте. Ә мин барыбер ишетәм дә күҙҙәремде асам. Өйҙә яҡты. Һеңлем әле уянмаған. Ул үҙе йоҡлай, үҙе көлә. Уның ҡуңыр сәсе маңлайына килеп төшкән. Мин тороп ултырам. Өләсәйем дә өйҙә күренмәй. Ә башмаҡтар күренә. Улар дүртәүләшеп һандыҡ өҫтөндә торалар. Мин һеңлемде уятам:

— Оксана, ана ҡояш та сыҡҡан, тор инде.

Ул һаман уянмай. Йоҙроғо менән танау осон



ыуып ала. Мин һеңлемдең ҡолағына уҡ эйелеп, бышылдап ҡына әйтәм:

— Оксана, ана башмаҡтар көтөп тора, уян инде, уян.

Һеңлем ҙур зәңгәр күҙҙәрен асып ебәрә лә һикереп тора. Беҙ икебеҙ ҙә, йәһәт кенә ишек янына барып, биттәребеҙҙе йыуабыҙ. Беҙҙең йыуына торған еребеҙ шунда.

Өләсәй һөт күнәген күтәреп килеп инә:

— Бына, йылы һөт эсеп алығыҙ, балалар, — ти өләсәй. Ул икебеҙгә лә күбекләнеп торған һөт һалып бирә.

Һөттө эсеп алғас та, беҙ башмаҡтарҙы кейергә тотонабыҙ. Өләсәй тиҙ генә Оксананың сәсен тарап, теге ҡыҙыл таҫманы тағып ҡуя. Оксананың хәҙер башмағында ла, сәсендә лә ҡыҙыл суғы булды.

— Ниндәй уңған балалар былар, ҡояш менән бергә тороп ултырғандар, — ти әсәй, нигәс. — Барығыҙ хәҙер сәйгә тиклем урамда уйнағыҙ. Байрамға барғанда, яңы күлдәктәр ҙә кейҙерермен.

Урамда бөтә кеше беҙҙең башмаҡтарға ҡарай. Үҙебеҙ ҙә ҡарайбыҙ. Ҡояш та ҡарай. Ул ҡарамаһа, башмаҡтарҙың өҫтәре ялтырап тормаҫ ине бит.

Беҙ иң элек Мансур бабайҙарға индек. Фәрхениса әбей, кәштәләге төйөнсөктө сисеп, беҙҙең икебеҙгә лә берәр ус сәтләүек бирҙе. «Йылы тәнегеҙҙә туҙһын инде. Башмаҡтарығыҙ бигерәк матур икән», — ти ул. Үҙенең күҙҙәре күрмәй, ә үҙе беҙҙең башмаҡтарҙың матурлығын белә. Әллә әбейгә Мансур бабай һөйләнеме икән? Ай йондоҙҙарға һөйләгән кеүек.

— Өләсәй килтерҙе, суҡтары ла бар, әбей, ҡыҙыл,— ти Оксана. «Ҡана әле, ҡыҙым»,— тип, әбей Оксананың аяғын һәрмәп ҡарай. Үҙе һаман маҡтай. «Бигерәк йомшаҡ та икән үҙҙәре. Бармаҡтарым рәхәтләнеп китте, рәхмәт төшһөн инде өләсәйегеҙгә»,— ти ул. «Күҙе күрмәһә лә, күңеле күрә шул әбейегеҙҙең»,— тип ҡуя Мансур бабай.

Мансур бабайҙарҙан сығып, Мараттарға киттек. Беҙ етәкләшеп, атлап ҡына барабыҙ. Йүгермәйбеҙ. Үҙебеҙҙең шау ғына түбән ҡарағыбыҙ килеп тора.

Марат келәттәре янындағы бүкән өҫтөндә ағас юнып ултыра. Ул ҡылыс яһай ҙа ҡылыс яһай. Үҙе, танауын йыйырып, беҙгә ҡарап тора:

— Әлләә-лә-лә, берәүҙәр яңы башмаҡ кейеп алғанмы ни?

— Кейгән шул.



— Кейһә, нς китәме әллә? Мин итек яратам,— тигән булып, ул бысағы менән итек ҡуңысына һуғып ала. Үҙе тағы ла беҙҙең башмаҡтарға ҡарай.

Оксана, аяғын күтәреп, башмаҡ табанын Маратҡа күрһәтә:

— Ана, яҙыуы ла бар,— ти. Мараттың иҫе лә китмәгән була.

Мин, салбар кеҫәһенән алып, Маратҡа үҙемдең ус менән бер ус сәтләүек бирәм. «Рәхмәт,— ти миңә Марат.— Башмаҡ ҡотлағандыр инде, беләм. Суҡтары матур ғына. Һиңә лә ҡылыс яһармын».

Әллә ниндәйерәк шул Марат. Үҙе вожатый, үҙе эре, үҙе барыбер дуҫ.

Мараттарҙың өй ишеге асылды ла унан йылт итеп Фәһимә килеп сыҡты. Ул беҙгә табан йүгерә, үҙенең һары сәсе, тай ялы кеүек, елбер-елбер итеп китә. Өҫтөндәге сәскәле-сәскәле яңы күлдәге күҙ яуын алып тора. Фәһимә, килеп еткәс, Оксананан һорай:

— Матурмы минең күлдәгем?

Оксана уның сәскәле күлдәген тотоп-тотоп ала. «Эй матур!»—ти, ә үҙе түбән ҡарай. Фәһимә әйләнеп-әйләнеп күлдәген маҡтатҡанда, Оксананың башмаҡтарын күреп ҡала.

— Ой, ниндәй башмаҡтар кейгән! Йә, йөләп ҡала әле. Киләһе йыл миңә лә шундайҙарҙы алырҙар әле! Суҡталы ла суҡталы! Әйҙәгеҙ, һыу буйына барабыҙ.

Марат өндәшмәй генә бысағы менән ҡылысын бүрәнә ярығына килтереп ҡыҫтыра. Унан һуң күлдәгендәге юнышҡыларҙы ҡағып ташлай. «Әйҙәгеҙ!»— тип беҙҙе урамға алып сыға. Беҙ һыу буйына төшкәндә, арттан Фәрит менән Заман да килеп етә.

— Беҙ бәрәмәстәр бешерҙек, Оксана, тәмлене, ике икмәк тә һалдыҡ,— ти Заман, үҙе, эйелеп, һенлемдең башмаҡ суғын тотоп алырға итә. Уны Фәһимә саҡ ҡына төртөп ебәрә:

— Өҙәһең бит инде, Заман! — Заман асыуланмай. Ул, Сәғит Ильясы кеүек, ебегән малай түгел.

Ә беҙҙең һыуҙы күргәнегеҙ бармы һуң? Юҡтыр шул. Ана, ул Фәриттәр йортонон аяҡ осона ағып килә лә туғай янына табан боролоп китә. Беҙгә табан түгел, беҙҙең аяҡ осонда Ҡыр яғы ғына. Һыуҙың исеме Көмөшлө. Йәй көнө беҙ унда һыу кереп йөрөйбөҙ. Әле һыуы һалҡын уның. Таш ырғытһаң, теге ситенә еткереп тә булмай. Бына ниндәй киң ул! Беҙҙең Көмөшлө бер үҙе генә аға-аға ла бик алыҫ бер еркәйҙә Ағиҙелгә барып ҡушыла. Унан икәү булалар. Ә Мансур бабай әйтә: «Көмөшлөнөң һыуы диңгеҙгә барып етә»,— ти. Етәлер ҙә шул, шау ғына ағып торғас. Үҫкәс, һеңлем менән беҙ ҙә диңгеҙгә, балыҡсы бабай алтын балыҡ тотҡан ергә, барып етербеҙ әле.

Бына ошо инде беҙҙең Көмөшлө тигән һыу. Беҙ уны Көмөш кенә тип йөрөтәбеҙ.

Башта беҙ яр буйындағы еүеш ҡомлоҡта эҙҙәр яһап йөрөнөк. Иң матуры — яңы башмаҡтарҙың эҙе инде — Оксана менән минең эҙ.

Шунан һуң, нисә ҡалас ашармын тип, ҡыйпылсыҡ таштарҙы һыу өҫтөнән һикертеп-һикертеп ырғытып уйнаныҡ. Һыу өҫтөндә таш нисә ҡат һикереп китһә, шул тиклем ҡалас ашаған булаһың. Иң күп ҡалас ашағаны Марат менән Фәрит булды. Оксана менән Фәһимә берҙе лә ашамағайны ла, мин Оксана өсөн, Марат Фәһимә өсөн икешәрҙе ҡыйпылдырып бирҙек. Заман ҡомда тирмән тартып ҡына ултырҙы.

Беҙ, өс ҙур малай, тал сыбыҡтарынан, төрлө юнышҡыларҙан һал яһарға тотондоҡ, һал бик ҡыҙыҡ ағып китә ул беҙҙең һыуҙа. Фәрит, тал ҡабығын һуйып, һалды нығытып бәйләп тә ебәрҙе. Һал әҙер генә булғас, беҙҙең янға түбән ос малайҙары килеп етте. Улар ҙа беҙҙең кеүектәр — ҙур ҙа түгел, бәләкәй ҙә түгелдәр. Тик Хәйбулла Рушаны ғына уҫал. Беҙ Оксана менән почтаға атайға яҙған хатты илтергә барғанда, ул гел таш ырғытып ҡала. Үҙенең

бер тейҙерә алғаны юҡ. Йә ҡулы салыш ырғыталыр әле.

— Һаумыһығыҙ, юғары остар, — тигән була уларҙың Әхәте, үҙе бер Марат менән генә күрешә.

— Һаумыһығыҙ, түбән остар,— тип яуап ҡайтара беҙҙең Марат. Ҙур малайҙар ҙа осрашҡанда шулай итәләр.

Һал өҫтөнә һалырға тип, мин ҡоро үлән, ағас япраҡтары йыйып йөрөйөм. Оксана менән Фәһимә яр ситендә генә башмаҡтарына тулған ҡомдо ҡағып ултыра. Һеңлем бер башмағын ҡулына тотҡан, икенсеһен һалып эргәһенә ҡуйған.

— Һал әҙер!— тине Марат. Уны иплэп кенә һыу ситенә килтереп һалды, Фәрит, ботинкаларын сисеп, салбар балаҡтарын төрҙө лә һалды эскә этеп ебәрҙе. Тап бына шул мәлдә күктән осоп, һал өҫтөнә бер һары башмаҡ килеп төштө. Мин Рушандың һелтәнгән ҡулын ғына күреп ҡалдым. Башта аяҡтарыма ҡараным. Минең ике башмағым да кейелгән көйө тора. Шунда уҡ ялт итеп һеңлем яғына әйләндем. Ул һаман да бер башмағын ҡулына тотоп ултыра. Үҙҙәре Фәһимә менән ҡысҡырып-ҡысҡырып һөйләшәләр. Ә икенсе башмаҡ уның эргәһендә күренмәй.

— Башмаҡ! — тип ҡысҡырып ебәрҙем мин, аҙыраҡ торғас.

Мин ҡысҡырғанға тиклем үк, Марат итектәре менән һыуға инеп китте. Һыу биленә еткәс, ул кире боролдо. Ә һал һаман эскә табан китте. Яр башында һеңлем илап ебәрҙе. Малайҙар араһында тартҡылаш башланды. Фәрит Рушанды төртөп йыҡты. Түбән ос малайы Әхәт үҙе Рушандың арҡаһына һуҡты. Рушан урам яғына табан тороп йүгерҙе. Ә беҙ һалға ҡараныҡ та ҡалдыҡ. Ул һыуҙың уртаһына уҡ йөҙөп сыҡты. Һал өҫтөндә ҡыҙыл суҡлы башмаҡ, һеңлемдең башмағы, бара.

— Их, кәмә булһа! — ти Әхәт.

— Ә йәй булһа һуң, мин йөҙөп барыр ҙа тотор инем...

— Ә мин сумып ҡына...

Мин һеңлем эргәһенә киләм. Ул тыбырсына-тыбырсына илай. Уға ҡушылып, Фәһимә менән Заман да илай.

— Илама, Оксана, илама, хәҙер сисәм дә бер башмағымды һиңә бирәм,— тим мин,— үҙем һаман һалға ҡарайым. Һал алыҫайғандан-алыҫая бара. Хәҙер башмаҡтың суғы ла күренмәй. Китте өләсәйем Май буләге итеп килтергән бер башмаҡ...

Мин яр буйлап һуҙылған таҡыр һуҡмаҡты күреп ҡалдым. Беҙ, ул һуҡмаҡтан йүгереп, әллә ҡайҙа тиклем еткәнебеҙ бар.

Берәүгә лә әйтеп-нитеп тормай, башмаҡ артынан торҙом да йүгерҙем. Яр буйынан ғына һуҡмаҡ үҙе алып бара. Мин, әҙерәк киткәс тә, һуҡмаҡ арҡыры ятҡан сыбыҡ-сабыҡҡа абынып йығылдым да танауым менән һөрләгеп киттем. Танау аҫтынан йылы нәмә тама ла башланы. Ҡул һыртым менән һөртөп алдым — ҡан! Һикереп торғас та, һыу өҫтөнә ҡараным. Һал инде күҙҙән юғалып бара. Мин ҡысҡырып илап ебәрҙем дә тағы ла шәберәк йүгерергә тотондом.

Инде һал менән минең ара яҡыная башланы. Йылғаның бер боролған ерендә башмаҡты ҡыуып та еттем. Ана бара ул. Үрелеп кенә алыр инем дә бит, буй етмәй. Их, экиәт малайы булһам ине мин! Берәй аҡҡош килер ине лә суҡышына ғына эләктереп алып бирер ине шул башмаҡты. Мин дә уның берәй йомошон тыңлар инем.

Бик оҙаҡ барғас, һал йылға өҫтөнә ауған бер ҙур талдың ботағына килеп эләкте. Бер аҙ тартышып торғас, ул тағы ысҡынып китте лә һыу өҫтөндә әйләнә башланы. Ситкә лә сыҡмай, уртаға ла китмәй. Өйрөлөп тик йөрөй бер тирәлә. Ырғаҡлы берәй оҙон ҡолға булһамы, мин тартып ҡына алыр инем дә бит...

Ҡояш һыу өҫтөн ялт иттереп ялтыратып тора. Ҡарап та булмай, күҙ сағыла. Күрмәйме икән ни инде? Иртән үҙе шатланып ҡараған башмаҡтарҙың береһе ни хәлгә төштө бит!

Мин, һыуҙың ситенә үк килеп, ҡарап торам. Ағып барған ҙур ағастың башы һалды төртөп ебәрҙе. Һал әйләнмәнән ысҡынып, йәнә ағып китте.

Һал аға — мин йүгерәм, һал аға — мин йүгерәм. Диңгеҙ алыҫмы икән әле? Алыҫ та ҡалмағандыр инде. Диңгеҙгә етеп булһа ла тоторҙмон мин ул башмаҡты! Бер ҙур ағас төбөнә еткәс, минең алдыма ялбыр ҡолаҡлы ала эт килеп сыҡты. Ул, ике аяғын һуҙып, һуҡмаҡҡа ултырҙы ла ҡуйҙы. Үҙенең ауыҙынан оҙон ҡыҙыл теле һалынып төшкән. Мин ҡурҡманым унан, тиҡ илауымдан ғына туҡтаным. Башта этте бер ситтән урап үтергә уйлағайным, ялбыр ҡолаҡ минең алға һикереп сыҡты ла ырылдап ебәрҙе. Мин ҙур тирәк торған иксесе яҡҡа йүгерҙем. Эт тағы минең алдыма килеп баҫты. Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә. Шул арала Көмөшлө һалды тағы алыҫҡараҡ алып китте... Их, ошо мәлдә ат менгән атайым, бер ҡулына мылтыҡ, бер ҡулына ҡылыс тотоп, килеп сыҡһа ине. Был дошман эт үҙе ҡурҡып ҡасыр ине. Этләй бит мине был ала эт. Мин берсә ағып киткән башмаҡҡа, берсә йәмһеҙ ала эткә ҡарап торам. Бына һал күҙҙән дә юғалды...

Ҡапыл урман яғынан кеше тауышы яңғырап килде:

— Барбос!.. Бар-бос!..

Шуны ғына ишеткәс тә, теге ялбыр ҡолаҡ торҙо ла сапты. Мин алға йүгерҙем. Тағы ла өс рәт йығылғанымды ла, тубығымды ауырттырғанымды ла, битемде ағастан сыйҙыртҡанымды ла һөйләп тормайым. Йөрөгән саҡта ундай ғына хәлдәр була инде ул.

Был юлы мин тағы ла шәберәк йүгерҙем. Ә һал минән әкренерәк йөҙә. Бына мин уны тағы ҡыуып еттем. Туғанымдың башмағына бер бәләкәс кенә

ҡош килеп ҡунған. Уға рәхәт. Их, шул әкиәт ҡошо булһа, бер генә һүҙ әйтер инем үҙенә...

— Шул ҡошсоҡҡа ҡарап ҡына барғанда, миңә ап-аҡ һаҡаллы бер бабай осраны. Ул иңбашына бер ишкәк һалған, арҡаһына тубал аҫҡан.

— Ҡайҙа йүгерәһең былай, улым, үҙең ҡанға туҙып бөткәнһең? — ти бабай.

— Ана башмаҡ, өҫтөнә ҡош та ҡунған,— тим мин,— беҙ түгел, уны һал өҫтөнә Рушан ташланы. Һеңлемдеке, ул илай. Ана, ана, күрәһеңме, бабай?

Бабай, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, һыуға ҡарап тора:

— Асыҡ ҡына күрмәйем шул, улым.

— Күр инде, бабай, күрә күр, ана ғына бит.

Бабай, арҡаһындағы тубалын һалып, кәкре ағасҡа элеп ҡуйҙы ла, тиҙ-тиҙ атлап, һуҡмаҡ буйлап кире китеп барҙы. Мин уның артынан йүгерә-йүгерә генә эйәрә алдым. Бер йырғанаҡты сыҡҡас, бабай яр аҫтынан төшөп китте. Мин дә унан ҡалышманым. Унда йыуан талға бәйләнгән кәмә тора. Бабай кәмә бауын систе лә, ишкәген алып, кәмә эсенә баҫты.

— Йә, улым, ултыр, киттек,— тине ул.

Мин кәмәгә ултырҙым.

Һал тағы күҙҙән юғалды. Теге ҡош ҡына алып китмәһә ярар ине башмаҡты. Ул да, Рушан кеүек уҫал булһа, һыуға ла төртөп төшөрөр әле. Тиҙерәк ҡыуып етһәк ине лә бит! Бабай, кәмәгә баҫҡан көйө, ҡыҙыу-ҡыҙыу ишә бирә. Аяҡҡайы ғына тайып китеп, бабай һөрлөгөп ҡуймаһа ярар ине, тип ҡурҡып бөттөм. Ул-был булманы. Бына беҙ һалды ҡыуып еттек. Теге ҡош осоп киткән инде. Бабай ниңәлер башта һалды ситләберәк үтеп китте. Шунан алға сығып, кәмәне арҡыры борҙо. Бына күрҙегеҙме инде? Һал үҙе тап бабайҙың ҡаршыһына ғына кәмәгә килеп һуғылды. Бабай һеңлемдең ҡыҙыл суҡлы һыңар һары башмағын үрелде лә алды. Әһә, ҡаптыңмы ҡармаҡҡа! Бына ниндәй һәйбәт

икән был бабай! Бабай башмаҡты миңә бирмәй, кәмә төбөнә ҡуйҙы. «Йә төшөрөп сбәрер, быға бирһәм»,— тип уйлағандыр әле ул. Төшөрмәҫ инем, ҡыҫып тотор инем.

Беҙ инде яр буйлап ҡына ҡайтыр яҡҡа табан йөҙөп барабыҙ. Бабай ишкәк ишә, мин унан әкрен генә һорайым.

— Һин әллә әкиәт бабайымы?

— Юҡ, мин ысын бабай, балыҡсы Яҡшығол ҡарт мин,— ти ул.

— Һин үҙең ысынһың, үҙең Яҡшығолһоң, үҙең бик яҡшыһың,— тим мин. Бабай өндәшмәй.

Ҡәмә моронө ярға килеп төртөлдө. Мин сөйләгөп китә яҙҙым. Беҙ бая ултырып киткән ергә килеп еткәнбеҙ икән.

— Сыҡ инде, улым,— тине бабай.

Башта кәмәнән мин төштөм, унан һуң, башмаҡты алып, бабай сыҡты. Ул кәмәне бәйләгәс, яр башына мендек. Шунда ғына бабай һеңлемдең ҡыҙыл суҡлы һары башмағын миңә бирҙе:

— Мә, улым,— тине бабай,— бик килешле икән башмағы ла, һаҡлап ҡына кейһен инде туғаның.

— Рәхмәт, бабаҡай,— тинем мин, уның биленән генә ҡосаҡлап алдым. Муйынынан ҡосаҡларға буй етмәй бит.

Килгән һуҡмаҡтан бабай менән икәүләп ҡайтып киттек. Ул мине етәкләп алды. Бер һай ғына урынға еткәс, бабай минең битемде, ҡулдарымды йыуҙырҙы. Беҙ икебеҙ ҙә ус менән генә шунда һыу ҙа эстек. Ҡалай рәхәт булып китте. Ана бит, ҡоштары ла матур итеп һайрап торалар. Ҡояш һуң, ҡояш! Ҡайҙа, юғарыға уҡ менеп киткән ул. Һыу өҫтөндә, бибек-бибек тип, аҡсарлаҡтар осоп йөрөй. Ағастар ҙа, әле генә үҫеп сыҡҡан һары сәскәләр ҙә, ҡоштар ҙа, бабай ҙа, мин дә — бөтәбеҙ ҙә шатланабыҙ. Шатланмаҫлыҡмы ни? Үҙе яҙ, үҙе йылы, үҙе рәхәт, үҙемдең ҡулымда табылған башмаҡ бар.

Кәкре ағасҡа еткәс, бабай, тубалын алып, арҡаһына аҫты.

Беҙ инде тауыш-тынһыҙ ғына барабыҙ.

Бабай, туҡтап, бишмәтенең түш кеҫәһенән оҙон сылбырлы сәғәтен алып ҡарай:

— Бәй, улым, беҙ бит байрамға һуңға ҡалабыҙ. Сәғәт туғыҙҙы һуғырға тора, әйҙә, ҡыҙыуыраҡ киттек,— ти.

Байрам! Мин әллә ни эшләп киттем: һуңға ҡалмаһаҡ ҡына ярар ине!

Мин бабайҙың салғыйынан тартҡылайым:

— Әйҙә йүгерәбеҙ, әйҙә! — тим.

— Минең итектәрем бик ауыр шул, бар, һин алдан йүгер, бар,— тип, ул мине, етәкләп, үҙ алдына сығара. Башмаҡты яйлап ҡына тотоп алдым да һуҡмаҡ буйлап ысҡындым ғына. Ә байрам бөткән булһа? Их, ошо Раушанды, ниҙәр генә күрмәнем шуның арҡаһында? Һеңлемде илатып бөттө... Артҡа әйләнеп ҡарап алам. Баштараҡ бабай бик ҡалышмағайны ла, һуңынан ҡалышты.

Ә кемдәр йүгереп килә һуң былай табан? Береһе ҙур, икеһе бәләкәй. Әллә уларҙың да башмаҡтары ағып киттеме икән? Мине күргәс, улар тағы ла шәберәк йүгерә башланылар. Таныным, таныным! Ҙурыһы әсәйем. Тегеләре кемдәр тиһегеҙме? Берсеһе Марат, ә иң арттан йүгергәне Оксана. Бына кемдәр килә!

Хәле бөткән әсәйем килеп етә лә мине күтәреп ала.

— Ҡотомдо осорҙоң бит, балаҡайым!..— Ул мине ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлай, биттәремдән, баштарымдан үбә. Ә минең бөтә уй байрам хаҡында:

— Байрам бөтмәнеме әле? — тим мин.

Матур түбәтәйсе менән битендәге тирен һөртөп торған Марат яуап бирә:

— Юҡ әле, башланманы ла.

Иң һуңынан Оксана килеп етә. Шунда уҡ әсәй



мине ерғә төшөрә. Һеңлем мине йүгереп килеп ҡосаҡлап ала:

— Йәмил, Йәмил! — ти ул.— Ә беҙ ҡурҡып бөттөк,— ти. Мин уға башмаҡты бирәм:

— Балыҡсы Яҡшығол бабай менән икәү тотоп алдыҡ, кәмә менән барып.

Һеңлем башмағын күкрәгенә ҡыҫа. Әсәй бигерәк ҡыуана инде. Икебеҙ ҙә табылдыҡ бит: мин дә, башмаҡ та.

Беҙҙең янға Яҡшығол бабай килеп туҡтай:

— Байрам ҡотло булһын, Көнбикә! Һинең улыңмы ни был?

— Минеке. Рәхмәт инде, Яҡшығол ағай, югиһә байрамдың йәме китә яҙҙы бит.

— Сая малайға оҡшай. Ярай, ярай, бик һәйбәт. Беҙҙең заман сая ирҙәр һорай...

— Башмаҡ артынан үҙе төшөп китмәһә ярар ине тип ҡурҡтыҡ, бигерәк туған йәнле бала... Барығыҙ, балалар, алдан йүгерегеҙ,— ти әсәй.

Беҙ, әсәй менән Яҡшығол бабайҙы артта уҡ ҡалдырып, урамға килеп инәбеҙ. Урамдың түбән осондағы клуб башында ҙур ҡыҙыл флаг талпынып-талпынып елберләп тора. «Байрамға килегеҙ, байрамға килегеҙ, балалар!»— тип беҙҙе саҡыралыр әле ул ҡыҙыл флаг...

## МИН ЫСЫН ФЛАГ ТОТОП БАРАМ

Өләсәй әйткәндәй, суҡтай итеп кейенеп, яңынан урамға сығабыҙ. Беҙ бик күмәкбеҙ. Һанап та бөтөрөрлөк түгел. Иң ҙурыһы — Баҙамша бабайҙың ҡыҙы Тәзкирә апай. Ул әллә нисәнселә генә уҡый инде — әллә алтынсыла, әллә етенселә.

Клуб түбәһендәге флаг, һаман да беҙҙе саҡырып, елберләп тора. Беҙ шул флаг яғына табан китеп барабыҙ. Байрам һайын кешеләр башта шунда йыйылалар ҙа, байраҡтар күтәреп, урамдар буйлап уҙалар. Мин әсәйем менән байрамда икс рәт йөрөгәнем бар. Береһе — былтыр майҙа, береһе — октябрҙә. Былтыр майҙа мин арыным да, әсәйем әҙерәк кенә күтәреп барҙы. Бәләкәс инем шул әле мин ул саҡта.

— Ә ниңә һуң байрамда кешеләр урамға сығып йөрөйҙәр, әсәй?— тип һораным мин шул саҡта. Әсәйем миңә һөйләп бирҙе:

— Донъяла беҙҙең дуҫтарыбыҙ ҙа, дошмандарыбыҙ ҙа күп. Беҙ күмәкләшеп урамдарға сыҡҡас, алыҫ илдәрҙәге дуҫтарыбыҙ беҙҙе күрә лә: «Ана, беҙҙекеләр ни саҡлы, үҙҙәре берҙәм, үҙҙәре көслө!»— тип шатланалар. Бөтәбеҙ ҙә бергә йыйылғас, күңелле була бит.

— Ә дошмандар ни эшләй?— тип һорайым мин.

— Дошмандар ҡурҡалар, уларҙың ҡоттары оса, белдеңме инде?

— Белдем инде. Дошмандың да кемлеген беләм мин: фашистар йә буржуйҙар. Шуларҙы еңеп йөрөй бит инде атай.

Бына беҙ күмәкләшеп урамға сыҡтыҡ. Дуҫтар шатланһындар, ә дошмандың ҡото осһон! Алдан вожатый Марат бара, уның артынан Фәрит менән мин, беҙҙең арттан бәләкәстәр эйәргән. Тәзкирә апай ситтән генә атлап килә. Түбән осҡа яҡынайған һайын, беҙ күбәйә барабыҙ. Осраған бөтә бала беҙгә килеп ҡушыла. Ҡалай күңелле икән байрамға барыу.

Клуб янында халыҡ бик күп. Ҙурҙар төркөм-төркөм булып һөйләшеп торалар. Егеттәр менән ҡыҙҙар түңәрәкләнеп баҫҡандар. Түңәрәк эсендә ниҙәр барын алыҫтан күреп булмай, әллә бейейҙәр инде. Бер ҡыҙ ҡысҡырып-ҡысҡырып йырлай. Минең кеүектәр йүгереп уйнап йөрөй.

— Килеп еттегеҙме, ҡарттар, бик һуңлап йөрөйһөгөҙ,— ти беҙгә бер ағай, үҙе көлә. Уның исеме Рәшит. Ҡыҙыҡ һүҙ әйтә Рәшит ағай, бәләкәй кешеләргә «ҡарттар» ти.

— Былар килгәс, ҡуҙғалырға ла ярайҙыр инде, Рәшит,— ти уҡытыусы Сания апай. Мин уны беләм. Ул матур апай беҙҙең оста тора.

Кешеләр теҙелә башлайҙар. Беҙҙе, бәләкәс балаларҙы, иң алға килтереп баҫтыралар. Мине Окса-

на менән йәнәшә ҡуялар. Минең икенсе яҡта артҡы урамдың бер малайы. Мин уны танийым да, исемен генә белмәйем. Фәрит менән Фәһимә беҙҙең артта, Марат әллә ҡайҙа буталып ҡалды, күренмәй. Мин, артҡа әйләнеп, әсәйемде эҙләйем. Тик табып ҡына булмай.

Оксана минең беләгемдән тарта.

— Йәмил, ана әсәй,— тип һеңлем бармағы менән төртөп күрһәтә.

Әсәй беҙҙең алға килеп сыҡты. Үҙе шат, үҙе матур беҙҙең әсәйебеҙ. Әле уның ҡайһы ерелер беҙҙең әсәйгә оҡшамаған да төҫлө.

— Етәкләшеп кенә йөрөгөҙ, йәме,— тине лә әсәйем ҙурҙар теҙелгән яҡҡа китеп тә барҙы. Беҙ уға ҡул болғап ҡалдыҡ.

Беҙ пионер апай алда торған бөтә балаларға ла бәп-бәләкәс кенә ҡыҙыл флагтар таратып бирҙе. Тик миңә генә етмәй ҡалды. Минс күрмәй үтте, ахыры. Ул тиклем бәләкәй ҙә түгелмен инде. Миңә ҡыйын булып китте. Теге артҡы урам малайы менән Оксана бер юлы ҡысҡырып ебәрҙеләр:

— Апай, апай, был малайға флаг теймәне! — Оксананың «был малайға» тип әйтеүе миңә оҡшамай. «Йәмил» тиһә лә ярар ине инде.

Башымды түбән эйеп кенә ҡарап торам. Теге апай шәп-шәп кенә атлап ҡайҙалыр китеп барҙы.

— Йәмил, Йәмил, алмашлап тоторбоҙ, үпкәләмә, Йәмил! — Был һүҙҙәрҙе минең һеңлем әйтә. Уның тауышы миңә тағы ла яғымлыраҡ булып ишетелә. Мин, илап ебәреүҙән ҡурҡып, башымды күтәрмәйем. Шул саҡ башмаҡтар ағып китеүе лә, ҡыҙыл телле ала эт тә, танау ҡанағаны ла иҫемә килеп төшә. Әллә минең бәхетем юҡ инде...

Бик ҙур флаг тотоп, беҙҙең алға бер апай килеп баҫты.

Инде ҡуҙғалып киттек тигәндә генә, баяғы пионер апай килеп етте. Ул ҡулына оҙон һаплы ысын флаг тотҡан. Флагы бик ҙур түгел, шулай ҙа ысын.

— Ә һиңә иң матурын бирәм. Ҡара әле, ҡара нисек елберләй бит,— ти апай, үҙе флагтың һабын миңә тоттора.

Мин тиҙ генә флагтың һабын эләктереп алам, үҙем юғарыға ҡарайым. Ҡыҙыл ебәк баш өҫтөмдә, ҡош шикелле, талпынып тора. Әйтерһең, ул ҡыҙыл ҡош бейеккә, әллә ҡайҙарға осоп китергә теләй. Үҙе мине лә күтәреп алырға итә. Әгәр флаг мине күтәреп алып китһә, мин иң элек атайым янына барып төшөр инем дә флагымды атының эйәренә ҡаҙап ҡуйыр инем. Шунан һуң беҙ атайым менән икәүләп фашистарҙы еңеп бөтөрөргә атты елдереп кенә китер инек. Ҡыҙыл флагтан ҡурҡып, фашист ҡасыр ине.

Ә һуң ошо бөтә халыҡ осоп ҡына дошман алдына барып төшһә, ҡурҡыуҙан йөрәге ярылыр ине тегенең. Ә дуҫтар инде шатланып бөтә алмаҫтар ине. Дуҫтар үҙҙәре лә беҙгә ҡушылып китһә, тағы ла күмәгерәк булырбыҙ...

Оксана минең еңемдән тарта. Ҙур байраҡ тотоп торған апай алға уҡ киткән, бөтә халыҡ та ҡуҙғалған, мин бер үҙем тороп ҡала яҙғанмын. Ярай әле минең һеңлем бар.

Мин атлай башлағас, флагым тағы ла ярһыбыраҡ талпынырға тотондо.

Беҙ инде урам буйлап барабыҙ. Беҙҙең яҡ-яҡтағы өйҙәр ҙә, канау буйындағы яңы бөрөләнеп килгән ағастар ҙа, эргәмдәге балалар ҙа миңә бәләкәсләнеп киткән төҫлө күренәләр. Әллә мин үҙем шулай кинәт кенә үҫеп киттемме икән? Мин атлап барған да төҫлө түгелмен. Ысынлап та, ҡулымдағы флаг, ҡыҙыл флаг, мине осороп ҡына алып бара, ахыры.

Артта йыр башланылар. Мин дә ул йырҙы ишеткәнем бар. Ләкин был юлы ул әллә ҡайҙан, алыҫтан яңғырап килгән һымаҡ тойола.

Минең дә йырға ҡушылғым килә. Тик, ниңәлер, тауышым тамағым төбөнән тышҡа сыҡмай ҡала.

Күҙ ҡырыйым менән генә Оксанаға ҡарап алам. Уның да ирендәре ҡыймылдай. Артта яңғыраған йыр, әйтерһең, бөтә байраҡтарҙы ла елберләтеп, баш өҫтөнән ағып үтә. Мин тағы ла нығ итеп башымды юғары күтәрәм. Флагым ел көйөнә бәүелеп бара.

Оксана минең беләгемдән тота:

— Йырла, Йәмил, рәхәт бит!

— Эйе, эйе, Оксана, бик рәхәт,— тип бышылдайым мин.

Һеңлем, миңә эйелә төшөп, йырларға тотона.

Үҙебеҙҙең ҡапҡа төбөнә еткәс, өләсәйемде күреп ҡалдым. Ул ҡойма эргәһенә баҫҡан да үткән кешеләргә йылмайып ҡарап тора. Ул беҙҙе эҙләйҙер әле. Беҙ, аяҡ остарына баҫып, уға күренергә тырышабыҙ.

— Өләсәй! — тибеҙ.

Оксана менән мине тапҡас, уның йөҙө тағы ла асылып китә. Өләсәйҙе күргәс, минең эсемә башмаҡтар килеп төшә. Мин түбән ҡарайым. Оксана менән икебеҙҙең дә яңы башмаҡтар кейгән аяҡтарыбыҙ туп-туп баҫып килә. Инде йыр ҙа алыҫтан ишетелгән кеүек түгел. Хәҙер мин үҙем дә йырға ҡушылам, һәм бөтә урамды гөрләткән йыр, әйтерһең, бер минең күкрәгемдән генә сыға — мин шулай ҡысҡырып йырлайым. Ана өйҙәр ҙә, ағастар ҙа элекке кеүек кенә күренәләр — бәләкәй ҙә түгел, ҙур ҙа түгел. Тик аяҡтарым ергә баҫҡанды ғына һиҙмәйем.

Мин эргәмдәге теге артҡы урам малайына ҡарайым. Уның бәләкәс кенә танауы өҫтөндә бөрсөк-бөрсөк тир ялтырап тора. Атлаған һайын үҙенең итләс бите терт-терт ҡалтырап китә. Миңә ҡыҙыҡ булып тойола. Нинә бер уның ғына бите шулай һелкенә икән?

Тиҙ генә һеңлемә лә күҙ һалып алам. Ул, туптура алға ҡарап, атлап бара. Уның зәңгәр күҙҙәре саҡ ҡына ҡыҫыла төшкән, ә ҡулындағы кескәй ге-

нә флагы елберләй, ҡуңыр сәсенә тейеп-тейеп китә. Үҙе, ниңәлер, әҙерәк турһайған да төҫлө. Ҡапыл минең ҡолағыма кемдер бышылдаған кеүек була. Юҡ, берәү ҙә бышылдамай — мин үҙем эстән генә шулай уйлайым: «Һиңә, Йәмил, ысын флаг тотҡас, бик рәхәт тә бит. Барыһына ҡарағанда ла рәхәтерәк. Уларҙың ысын флаг тотҡолары килмәйҙер шул...» Мин бөтәһенә лә: Оксанаға ла, Фәриткә лә, Фәһимәгә лә, артҡы урам малайына ла бик-бик рәхәт булыуын теләйем. Тотам да хәҙер флагты башта һеңлемә бирәм. Ул, саҡ ҡына барғас, Фәриткә бирер, шунан һуң ҡулдан-ҡулға китер ҙә барыр. Ҡалай яҡшы булып сығыр!

Мин, һеңлемдең еңенән тотмаҡсы итеп, ҡулымды һуҙам, тик шунда уҡ туҡталып ҡалам: ә әсәйем беҙгә уҡыған ҡыҙыҡлы китапта нисек ине һуң? Ундағы бер һалдат һуғышта яраланғас та, үҙенең ҡулындағы байраҡты ташламаған да, берәүгә лә бирмәгән дә. «Байраҡ ул изге әйбер»,— тине минә әсәйем. «Изге»— ул үтә һәйбәт тигән һүҙ. Байраҡ ни, флаг ни — икеһе лә бер үк инде. Бәлки, минең ҡулымдағыһы ла байраҡтыр әле.

Мин флагтың һабын тағы ла ҡыҫыбыраҡ тотам. Йыр тынған арала уның ҡыштырлауы ла миңә ишетелеп китә. Юҡ, флаг кемгә бирелгән, шуның ҡулында ҡалырға тейеш ул. Бирһәм, теге пионер апайға ғына бирермен.

Алдағы апай Тимербулат бабайҙар тыҡрығынан Ҡыр яғына боролдо. Беҙ бөтәбеҙ ҙә Ҡыр яғына сыҡтыҡ. Һай соҡорға етәрәк бер таш өйөмө янында бөтә халыҡ туҡтап ҡалды. Шунда ғына баяғы пионер апай минең флагымды килеп алды. «Ҡулың талғандыр инде, туғаным»,— тине ул. Ә минең ҡулым саҡ ҡына ла талманы. Флаг тотҡан кешенең ҡулы таламы икән? Бармаҡтарым ғына ойоно. Уныһы иҫәпкә лә кермәй инде.

Ҙурҙар бөтәһе лә таш өйөмөн уратып алдылар. Рәшит ағай таш өҫтөнә менеп баҫты. Мин уны саҡ

ҡына күреп ҡалдым. Ҡайҙандыр Марат килеп сыҡты.

— Әллә-лә-лә, берәүҙәр ысын флаг тотоп барҙымы ни? — тине ул, шунан минең иңбашҡа ҡулын һалды.— Әллә көнләшеп тиһеңме? Көнләшмәнем дә, күҙ генә ҡыҙҙы әҙерәк.

Мин бер һүҙ ҙә әйтеп өлгөрә алманым, һеңлем килеп етәкләп алды:

— Әйҙә, әсәйҙе табабыҙ, Йәмил,— тине ул.— Һин ысын флаг тотоп барғас, ҡалай яҡшы булды. Әсәй ҙә, өләсәй ҙә, Мансур бабай ҙа шатланып әле. Мин дә шатландым. Әйҙә инде.

Беҙ халыҡ артында етәкләшеп йүгереп йөрөгәндә, кемдеңдер ҡулдары икебеҙҙе бер юлы ҡосаҡлап алды. Был — әсәй ине. Ул, Оксананы йәһәт кенә күтәреп, иңбашына ултыртты. Шунда уҡ мине лә ағас аяҡлы бер ағай, эләктереп алып, елкәһенә атландырҙы. Мин осоп ҡына килеп ҡуйдым. Хәҙер Оксана менән икебеҙгә бөтәһе лә күренеп тора. Таш өҫтөнә баҫҡан Рәшит ағай ҡулындағы фуражкаһын болғай-болғай һөйләй. Фуражкаһындағы йондоҙо, көҙгө кеүек, ҡояшта ялтырап-ялтырап китә.

— Йәшәһен бөйөк партия! — ти Рәшит ағай, үҙе таш өҫтөнән һикереп төшә. Бөтә кешеләр ҙә «ура!» тип ҡысҡыралар, үҙҙәре сәпәкәй итәләр. Оксана менән беҙ ҙә сәпәкәй итәбеҙ.

Беҙҙе ергә төшөрҙөләр.

— Арығанһығыҙҙыр инде, балалар, барығыҙ, ҡайтығыҙ,— тине әсәй.— Ә һин, ҡыҙым, флагыңды миңә бир, апайыңа мин үҙем бирермен, йәме?

Беҙ йүгереп ҡайтып та киттек. Тыҡрыҡҡа ингәндә, беҙ артыбыҙға әйләнеп ҡараныҡ. Бөтә кешеләр ҙә йырлашып ҡайтып килә ине инде.

Низәр менән генә һыйламаны беҙҙе өләсәй ул көндө. Беҙҙе лә, байрамды ла ярата бит ул. Низәр менән һыйланғаныбыҙҙы һеҙгә әйтә алмайым инде. «Мин тегене ашаным, мин быны ашаным, тип һөйләп йөрөү бер ҙә килешә торған эш түгел»,— ти өлә-

сәй үҙе. Юҡ, ул һүҙҙәрҙе беҙгә әйтмәй, аллә ниндәй бер апайға әйтә. Ә беҙ һөйләнеп йөрөһәк, беҙгә лә әйтер.

Тап ошо көндө мин һеңлемде баҡсалағы ҡайын төбөнә алып килдем. Теге элек әйткән хазинаны соҡоп алып, бөтәһен дә уға бирҙем. Матур тәтәй быялалар менән һәйбәт таштар ғына өс кеҫә булды. Ҡалғаны бөтәһе лә тимер-томор ине. Улар Оксанаға оҡшап етмәне. Ярай, торһон әле ул тимерҙәр. Мин һуңынан берәй нәмә эшләрмен уларҙан.

## БЕҘҘЕҢ АТАЙҘЫ КҮРМӘНЕГЕҘМЕ?

Бер аҙҙан һуң тағы ла байрам булды. Был үҙенә башҡа бер байрам ине.

— Һуғыш бөттө, беҙ еңдек! — тинеләр ҙурҙар.

Халыҡ тағы ла клуб янына йыйылды ул көндө. Беҙ ҙә Мараттар, Фәһимәләр менән шунда барҙыҡ. Беҙҙең оста торған матур уҡытыусы апай һүҙ һөйләне. Әбейҙәр ҙә, апайҙар ҙа үҙҙәре көләләр, үҙҙәре илайҙар.

— Улар ниңә илайҙар, Мансур бабай? — тип һорайым мин.

— Шатлыҡ йәштәре, балам, улар, татлы йәштәр, — ти ул. Шулай тигәс, минең дә илағым килеп китә, ләкин түҙәм, сөнки минең кеүектәрҙән берәү ҙә иламай. Ундай татлы йәштәр апайҙар менән әбейҙәргә генә булалыр. Әкиәттәге Тимербәк тотҡон ҡыҙҙарҙы ҡотҡарғас, шатлыҡтарынан илашып алғандар бит тегеләр.

Оксананы бер апай күтәреп ала. Үҙе һөйләнә:

— Бик бәхетле булырһығыҙ инде, балаҡайҙарым, ана ниндәй аждаһаны дөмөктөрҙөләр бит...

Кискә ҡаршы беҙ Мансур бабай менән Фәрхениса әбейҙе сәй эсергә саҡырҙыҡ. Үҙебеҙ ҡараңғы төшкәнгә тиклем урамда уйнап йөрөнөк. Ҙурҙар ҙа бер туҡтауһыҙ йырлашып, бейешеп кенә торҙолар.

Кешеләр шат булһалар, йырлайҙар шул. Әсәйем дә атайҙан хат килгән көндәрҙә йырлап ҡуя торғайны. Ҡалай яҡшы, кешеләр шат булғас...

Ул саҡта әле муйылдар менән алмағастар яңы ғына сәскә атҡайны. Шул көндән алып беҙ өсөбөҙ ҙә атайҙы көтә башланыҡ. Хәҙер инде беҙҙең колхозда, бесәнде бөтөрөп,ураҡҡа төштөләр. Ә атай һаман ҡайтмай ҙа ҡайтмай. «Тиҙҙән күрешербеҙ» тигән хаты килеүгә лә әллә нисә көн булды инде. Әсәй эштән ҡайтҡас, төн буйы өйҙөң стеналарын йыуҙы, мейесте ап-аҡ итеп ағартты, беҙ өсәүләп ҡураны һеперҙек. Унда хәҙер бер генә сүп тә юҡ.

Оксана менән беҙ, әллә нисә ҡат инде ауыл осона сығып, көтөп тә ҡараныҡ. Тик атай һаман ҡайтманы. Шул тиклем оҙаҡ ҡайтмай торған кеше булыр икән.

Бер саҡ әсәйем төшкә ҡайтҡас, беҙгә Тәзкирә апай керҙе.

— Беләһеңме, Көнбикә еңгә, күпер башы Бәкерҙең Рамазаны ҡайтҡан бит, бүтәндәр ҙә оҙаҡламаç инде, — ти ул.

— Указ булыуға ла байтаҡ заман үтте шул. Беҙҙеке бит, етмәһә, дүрт ҡат яраланған да, — ти әсәйем.

Мин указдың ни икәнен генә белмәйем. Тик, атай ҡайтыуға ҡатнашы булғас, яҡшы әйберҙер инде. Мин Оксананы ымлап ҡына саҡырып алам да, беҙ болдорға сығабыҙ.

— Ишеттеңме? — тим мин.

— Нимәне?

— Күпер башын. Әйҙә шуларға барып ҡайтабыҙ.

Мин әйткәс, һеңлем ҡарышып тормай. Беҙ, ҡапҡа аҫтынан ғына сығып, түбән осҡа йүгерәбеҙ. Еләбеҙ генә. Хәйбулла Рушаны беҙҙе күрмәй ҙә ҡалды. Күрһә лә, хәҙер таш ырғытмай инде ул. Оксананың башмағын ағыҙып ебәргәс, Рушандың уҫаллығы бөтөп китте. Бер көн бит беҙ, ҡаҙ һаҡла-

ғанда, Рушанды пленға алдыҡ та Фәһимәнең ко-
сынкаһы менән ҡулын артҡа бәйләнек. Шунан уны
һәйбәт булырға ант иттерҙек. Ант итте теге. Марат
үҙен тукмай ҙа яҙып ҡуйҙы. «Бәхетең инде, һуғыш
бөтөү шатлығынан бер юлға ҡалдырам», — тине.
Шуға күрә беҙ уны плендан да ҡотҡарып ебәрҙек.
Хәҙер Рушан һәйбәтләнде.

Күпер башы Бәкер ағайҙарҙы мин беләм. Улар
почта йортона яҡын ғына торалар. Уларҙың рә-
шәткә менән уратып алынган ҙур баҡсалары бар.
Әле унда ҡыҙарып ҡына килгән алмалар асылы-
нып-асылынып тора. Почтаға барғанда үҙебеҙ күр-
ҙек.

Оксана менән беҙ икәү Бәкер ағайҙарҙың ҡапҡа
төбөнә барып еткәс тә туктап ҡалдыҡ. Ҡапҡа
асыҡ. Әллә ул асыҡ булғанға, беҙ керергә ҡыймай
торабыҙ инде. Мин, башымды тығып, ҡураға ҡара-
ным.

— Кем унда ҡапҡаға һыймай тора? — тине ҡа-
лын тауыш. — Әллә ҙурыһын асырғамы?

Мин ҡаушап төштөм. Кире ҡайтып китергә лә
уйлағайным, теге тауыш йомшаҡ ҡына итеп тағы
өндәште:

— Инегеҙ, балалар. Ҡунаҡҡа килгән кеше шун-
да тормай инде...

Беҙ, етәкләшеп, ҡураға индек. Болдорҙа бер
һалдат ағай итек таҙартып тора. Үҙе беҙгә ҡарап
йылмая. Итеген ышҡығанда, уның күкрәгендә асы-
лынып торған миҙалдары сыңлап китә. Мин Окса-
наның ҡолағына бышылдап алам: «Ошо үҙе ин-
де!» — тим. Һалдат ағай инде итек таҙартыуҙан
туктап тора.

— Әйҙүк, ни йомош, туғандар? — тип һораша
ул.

Мин ҡаушауымдан:

— Бер йомош та юҡ,— тип әйтеп һалам.

Оксана ҡапыл нык итеп минең сәкмәнән тарта.

— Йәмил онотҡан, ағай, беҙҙең йомошобоҙ бар,— һеңлем үҙе бер аҙым алға атлап ҡуя.— Беҙҙең атайҙы күрмәнегеҙме? Ҡасан ҡайта ул?

— Кем һуң һеҙҙең атайығыҙ?

— Ҡавалерист. Уның да өс миҙалы бар.

— Улай булғас, беләм, — ти ағай, үҙе рәхәтләнеп көлә, фашисты еңгәнгә шулай шатланалыр инде, — тик ҡайтҡан саҡта ғына күрә алманым шул. Оҙаҡламаç инде, ул да ҡайтыр.

Тап ошо минутта атай өйгә ҡайтып ингәндәй була миңә. Ә ысынлап та шулай булһа?

— Беҙ ҡайтабыҙ инде, ағай, — тип мин тиҙ генә һеңлемде етәкләп алам.

— Туҡтағыҙ әле, туҡтағыҙ! — тип ағай минең беләгемдән тота, үҙе асыҡ тәҙрә яғына ҡарап ҡысҡыра. — Әсәй, бында ике ҡунаҡ бар, күстәнәс сығарып инең!

Матур яулыҡ бәйләгән әбей икебеҙгә икешәр дәү сәтләүек менән берәр кәнфит бирҙе. Беҙ рәхмәт әйттек.

Һалдат ағай һаман һорашып тора:

— Һеҙ игеҙәктәрме әллә? Юғиһә бигерәк типтигеҙһегеҙ.

— Юҡ, игеҙәк түгелбеҙ, — тип яуап бирәм мин, — беҙ былай ғына икәүбеҙ, ағай.

Шунда уҡ сығып та йүгерәбеҙ.

— Мин бындай һалдаттарҙы бик күп күргәнем бар, — ти һеңлем.

— Ҡайҙа?

— Һуғыш булған ерҙә, бик алыçта. Атай мине ҡосаҡлап-ҡосаҡлап яратҡан ерҙә...

Оксана ҡайһы ваҡытта шулай ҡыҙыҡ һүҙҙәр һөйләп ҡуя. Бәләкәй кеше һуғыш булған ерҙә йөрөймө инде? Тик мин бәхәсләшмәйем. Йә ул үпкәләр.

Беҙ йортҡа ҡайтып инәбеҙ. Әсәй, ишек келәһенә ағас ҡына тығып, эшкә киткән. Ә атай һаман да ҡайтмаған.

* * *



Көн һайын кешеләр фронттан ҡайтып торҙо. Марат менән Фәһимәнең атаһы ла, Баҙамша бабайҙың ҙур улы ла, артҡы урам кешеләре лә ҡайтты. Беҙ Оксана менән икәү, уларҙың бөтәһенә лә барып, атайҙы һорашып йөрөнөк. Тик барыбер, «күрҙем» тип, асыҡ ҡына әйтеүсе булманы. Ҡайһыһы атай тураһында ишеткән, ҡайһыһы алыҫтан ғына күреп ҡалған, ҡайһыһы уның хаҡында газетала яҙылғанды уҡыған.

Беҙ көндәр буйы станция юлынан күҙ ҙә алмайбыҙ. Берәй әҙәм күренһә, йүгереп ҡаршы барабыҙ. Ә атай юҡ та юҡ.

Атайҙы көтә башлағанда, ҡаҙ бәпкәләре бәләкәй генә ине. Улар үҫеп бөттө. Арала иң матуры — теге мин эсемдән генә «Оксана» тип исем ҡушҡаны. Ата ҡаҙ беҙҙе талаһа ла, уларҙың балаларын барыбер яратабыҙ. Көн дә ем биреп торабыҙ. «Атай ҡайтҡансы, үҫә торһондар!» — тип алмағастарға көн дә һыу һибәбеҙ. Улар сәскә атманылар атыуын, күп иттереп япраҡ ҡына ярҙылар. Ә мәктәрҙең сәскәләре ҡойолоп бөттө инде. Бына ни тиклем ваҡыт үтеп китте. Беҙҙең башмаҡтарыбыҙ ғына шул көйө

тора. Уларҙы беҙ кеймәйбеҙ, атай ҡайтыуға һаҡлайбыҙ.

Кис ятҡан һайын, атайҙың һүрәтенә ҡарайбыҙ. Оксана ҡулдары менән уны үҙенә саҡыра:

— Ҡайт инде, атай, ҡайт! — ти.

— Беҙҙең атай дошманды иң алысҡа тиклем ҡыуып барғандыр, шуның өсөн тиҙ генә ҡайта алмайҙыр, эйе бит, Оксана?

Һеңлем «эйе» тип иҫнәп ала ла шунда уҡ йоҡлап китә.

Тиҙерәк иртә булһын ине лә, атай ҡайтһын ине, тип уйлайым мин кис һайын... Беҙгә ҡарап, әсәй йыш ҡына көрһөнөп ҡуя.

## ТӨШ ТӘ, ӨН ДӘ

Өндә һүрәттәр һөйләшмәй бит. Ә төштә улар һөйләшәләр ҙә, көләләр ҙә. Мин һүрәт тураһында төш күреп ятам. Бына, имеш, атайҙың караuat өҫтендә эленеп торған һүрәте стена буйлап шыуып ҡына минең янға төштө. Үҙенең аяҡтары ла, ҡулдары ла бар. Ауыҙ ситтәренән аҫылынып төшкән мыйығы ҡыймылдап тора, күкрәгендәге миҙалдары сыңлап-сыңлап китә. Ул шундай асыҡ итеп йылмая, уның күҙҙәренән сәселеп торған яҡтылыҡҡа минең күҙҙәрем сағыла. Һүрәт үҙе кем менәндер мыңғырлап ҡына һөйләшә лә төҫлә. Мин күҙҙәремде асмаҡсы итәм, тик никәлер улар башта тиҙ генә асылмайҙар. Өндөшергә итһәм, тауышым сыҡмай. Ҡалай әкәмәт төш күрәм мин.



Ҡапыл күҙҙәрем үҙҙәре асылып китә. Өй эсе шундай яҡты, ҡояш тап Оксана менән минә ҡарап тора. Ә һүрәт, ни эшләптер, икәү булып китә, береһе элеккесә стенаға элеүле тора, икенсеһе — тереһе һаман минең янда баҫып ҡала. Ҡапыл ул мине күтәреп алып, күкрәгенә ҡыҫа. Мин инде бөтөнләй уянып китәм. Беҙҙең янға әсәй ҙә йүгереп килә. Әсәй йыш-йыш итеп ниҙер әйтә. Мин уның һүҙҙәрен аңламайым, үҙем башымды атайҙың иңбашына һалып, уның биттәрен һыйпайым.

— Атай! — тип ҡысҡырып ебәрәм.— Ниңә шул тиклем оҙаҡ ҡайтмай торҙоң, атай?

Атай мине күтәреп тора. Мин Оксанаға ҡарайым. Ул, ниҙәндер һиҫкәнеп, тороп ултыра. Атай шунда уҡ икенсе ҡулы менән һеңлемде күтәреп ала:

— Бына ҡыҙым да уянды, танылһыңмы мине, ҡыҙым?

Оксана көлөп ебәрә лә атайҙы үбеп ала. Ә мин уны үбергә лә оноттом.

— Атай! — ти һеңлем. — Беҙ һине көттөк тә көттөк.

— Һеҙ көткән өсөн дә, иҫән-һау йөрөп ҡайттым бит инде, бәхетегеҙ бар икән, балалар, — ти атай. Үҙе, икебеҙҙе лә күтәргән көйө, һандыҡ өҫтөнә барып ултыра.

Мин уның миҙалдарын һанап ҡарайым: бер, ике, өс, дүрт, биш... Тик күлдәгенең һул кеҫәһе өҫтөндәге ике һары, ике ҡыҙыл таҫманың ғына ни икәнен ул саҡта белмәнем. Ә хәҙер беләм. Улмы? Ул — беҙҙең атай дүрт тапҡыр яраланып, дүрт тапҡыр һауыҡҡан тигән һүҙ.

Беҙ һандыҡ өҫтөндә ошолай бик оҙаҡ ултырҙыҡ.

Оксана ҡайтҡанда ла, беҙгә кеше бик күп килгәйне бит, ә был юлы тағы ла күберәк килде. Ҡайһылары атай менән ике ҡуллап күрешә, ҡайһылары бер ҡуллап күрешә. Әбей кешеләр уның арҡаһынан

да һөйөп ала. Мансур бабай ҙа инеп, әҙерәк ултырып китте.

— Изге эш башҡарып ҡайттығыҙ, бик ҙур рәхмәт инде, — ти ул. — Емерелгәне төҙәлер, туҙғаны яңырыр, тик ана етемдәр генә бик ҡыҙғаныс.

Атай тәрән көрһөнөп ҡуя. Мансур бабай шунда уҡ икенсе нәмә һөйләй башлай:

— Беҙгә лә ҡыйын булды. Иллә-мәгәр бирешмәнек, бер ниндәй эш тә ҡарышып торманы, үҙең дә күрерһең...

Беҙҙең кеүектәрҙән иң элек Марат менән Фәһимә килеп етте. Улар был юлы әллә ниңә ишек яңағына һөйәлделәр ҙә ҡаттылар. «Уҙығыҙ, түргә уҙығыҙ»,— тиһәк тә, урындарынан ҡуҙғалманылар. Беләм инде, улар атайымдан оялалар.

Заман бөтәһенән дә аҙаҡ килде, тик ул ишек төбөндә туҡтап ҡалманы, туп-тура атайға килеп һыйынды. Атайым Заманды күтәреп алды. Ә теге атайҙың муйынынан ҡосаҡланы ла үбергә тотондо. Беҙ аптырап ҡарап тораbыҙ.

— Иң һағынған кеше бына кем икән!— ти атай.

— Мылтығың булһа, ат әле, ағай! — ти Заман.

— Бында бит фашист юҡ.

— Һин төйләгәнгә ат, ул бөгөн бер ҙур себеште урлап китте.

Бөтә өй эсе геү килеп көлөп ебәрә. Заман һаман үҙенекен һораша:

— Ҡылысыңды күрһәт әле миңә.

— Ҡылысты алып ҡайтманым шул, балаҡай. Бына ҡалаға барғас, мин һиңә бәләкәс ҡылыс һатып алырмын, йәме?

— Ярар, бәләкәс булһа ла... — тип Заман атайҙың ҡосағынан шыуып төшә. Үҙ өлөшөнә тейгән күстәнәсте алғас та, сығып уҡ йүгерә.

Марат менән Фәһимә беҙҙе уйнарға саҡыралар. Беҙ атайҙың бер үҙен генә ҡалдырып барыбер сығып китмәйбеҙ.

Әсәйем ул көндө эшкә барманы. Ҡыскә тиклем мейес янында төрлө тәмле нәмәләр бешереп йөрөнө. Беҙ һәр ваҡыт атайға һыйынып ҡына торҙоҡ. Әсәй ҙә беҙҙең янға килгеләп китә. Ул бер атайға, бер Оксанаға, бер минә ҡарай. Үҙе өҙлөкһөҙ йылмая, һөйләгәндә, һүҙҙәре лә, сулпы сылтырауы кеүек, матур булып сыға. Әсәйемдең янып торған ал йөҙөндә ниндәйҙер нур балҡыған төҫлө тойола. Эйе, мин күреп торам: ул нурҙар әсәйемдең күҙҙәренән бөркөлөп сығалар ҙа йөҙөнә таралалар. Бер уның йөҙөнә генә түгел, бөтә өйгә, бөтә урамға тарала ул нурҙар. Теге саҡта, арҡаһына тоҡ аҫып, ҡалын аҡ шәлен ябынып, ҡышҡы төндө алыҫ ҡалаға киткән әсәйгә бер ҙә оҡшамаған ул бөгөн. Ә үҙе шул уҡ беҙҙең әсәй.

Төштән һуң Тимертауҙағы өләсәй ҙә килеп етте. Беҙ, уның ҡапҡанан ингәнен күреп, йүгереп ҡаршы сыҡтыҡ.

— Һай, зирәктәрем, — ти өләсәй, үҙе, икебеҙҙе лә етәкләп, йүгерә-атлай өйгә инеп китә. Беҙ был юлы уның камзул кеҫәһен дә аҡтарманыҡ.

Өләсәй үҙе атайымды һөйә, үҙе аҡрын ғына илай.

— Беләһеңме, Оксана, өләсәйҙең күҙенән сыҡҡан йәштәр — шатлыҡ йәштәре, татлы йәштәр улар, — тим мин.

— Ә һин ҡайҙан беләһең?

— Мансур бабай әйтте.

— Саҡ ҡына ла бирешмәгәнһең бит, инәй. Тимертауҙыҡы булғас та, әллә тимер кешеһең инде, — ти атай өләсәйгә.

— Тимер ҙә тутыға, балаҡай, был ауыр заманда тимерҙән дә нык булырға кәрәк ине шул.

Мин пырхылдап көлөп ебәрәм.

— Ниңә көләһең? — тип һорай Оксана.

— Өләсәйҙең ҡулдары йоп-йомшаҡ, үҙе тимерҙән дә нык, имеш!

Минең өләсәйҙән келәүем Оксанаға оҡшамай. Ул ҡашын йыйырып ҡуя.

Төшкө сәйҙе эсеп бөткәс, атай ҡайышын быуҙы, пилоткаһын кейҙе.

— Әсәһе, — тине ул, — беҙ балалар менән бергәләп яландарҙы ураштырып ҡайтмаҡсыбыҙ. Иҫән ҡайтһам, арҡамдағы тоҡсайымды ла һалмай, яландарҙы, туғайҙарҙы урап сығырмын тигән һүҙем бар ине... Әллә беҙҙең менән үҙең дә бараһыңмы?

— Был юлы үҙегеҙ генә йөрөп ҡайтығыҙ. Бер ҙә генә бушамайым шул, — ти әсәй, үҙе Оксана менән минең ялан аяҡҡа ҡарай. — Ә һеҙ ни эшләп башмаҡтарығыҙҙы кеймәнегеҙ?

Бына һиңә кәрәк булһа, атай ҡайтҡас, башмаҡтарҙы бөтөнләй онотҡанбыҙ. Мин шунда уҡ караүат аҫтына тәгәрәп инеп китәм дә башмаҡтың дүртеһен бер юлы алып сығам.

— Бына, атай, өләсәйҙең бүләге — ҡыҙыл суҡлы һары башмаҡтар, — тим мин.

— Минең бер башмаҡ Көмөшләлә ағып киткәйне әле, Йәмил табып алып ҡайтты, — ти һеңлем.

— Балыҡсы Яҡшығол бабай менән икәүләп тоттоҡ.

— Ул башмаҡтар шатлыҡ та, ҡайғы ла булды инде, — ти өләсәй. — Һин ҡайтҡансы, кейҙерә алманыҡ: «Атай ҡайтҡас, кейәбеҙ», — тиҙәр. Әле бөтөнләй иҫтәренән дә сыҡҡан. Эй балалар, балалар...

Беҙ башмаҡтарыбыҙҙы кейеп ебәрәбеҙ. Шунан һуң өсәүләшеп, мунса янынан ғына үтеп, Ҡыр яғына сығабыҙ. Беҙ Оксана менән икебеҙ атайҙың ике яғынан йүгерәбеҙ. Ә ул еҫле үләндәрҙе өҙөп ала ла, танауына килтереп, еҫкәп тора; ҡояшта ҡыҙған саҡма таштарҙы алып, әкрен генә яңағына ышҡый. Йә ул, беҙҙең менән бергә йүгереп, тәрән соҡорҙарҙың төптәренә төшә лә сәпскеле көрәп сәскәне өҙә, йә иһә, берәй таш өҫтөнә баҫып, оҙаҡ итеп бөтә тирә-яҡты ҡарап тора. Беҙ инде һай соҡорҙо ла үттек.

Атай беҙҙе ҡайынлыҡ урманының теге башындағы шишмә янына алып килде. Эй һалҡын ул шишмәнең һыуы! Атай шишмәлә ҡулдарын, биттәрен йыуҙы, унан, устары менән алып, һыу эсте. Беҙ ҙә эстек. Шунан өсәүләп үлән өҫтөнә ултырҙыҡ.

— Был шишмәне һеҙҙең олатайығыҙ — минең атайым Батырша ҡаҙығайны, — ти атай. — Мин ул саҡта һеҙҙең кеүек кенә инем. Шунан бирле «Батырша шишмәһе» тип йөрөтәләр. Ә күпме кеше һыу эскән, битен йыуған ошонда!.. Ҡоштар ҙа, йәнлектәр ҙә килеп һыу эсеп китәләр... Ана, ҡарағыҙ, ҡалай рәхәтләнеп үҫеп ултыралар уның тирәһендәге ҡыҙыл сәскәләр!

— Рәхмәт инде олатайға, — ти Оксана. Атай, уны ҡосағына алып, маңлайынан үбә лә тағы ергә баҫтырып ҡуя.

— Дөрөҫ, ҡыҙым. Ҡалай аҡыллы бит минең ҡыҙым.

— Атай, — тим мин, — атай, әйҙә беҙ ҙә өс шишмә, юҡ, дүрт шишмә яһайыҡ: һиңә, әсәйгә, Оксанаға, миңә. Беҙгә рәхмәт әйтерҙәр.

— Һеҙ үҫкәс, бәләкәс шишмәләр генә түгел, ҙур күлдәр яһарһығыҙ, ҙур йылғаларҙың ағышын борорһоғоҙ, — ти атай. — Кешеләргә файҙалы тағы бик күп эштәр эшләрһегеҙ.

— Ярай, — тип мин баш ҡағам. Тик үҙем хәҙергә ҙур күлдәр ҙә, ҙур йылғалар ҙа яһай белмәйем. Үҫкәс белермен әле, атай үҙе өйрәтеп бирер.

— Мин дә яһашырмын, атай, ярармы? — ти һеңлем.

Атай ултырып тора, ә үҙе беҙгә ҡулдарын һуҙа, беҙ һеңлем менән икәү уны, ҡулдарынан тотоп, баҫтырып ҡуйабыҙ.

— Хәҙер инде Имәнлекүл буйҙарына барып сығайыҡ. Арыманығыҙмы? — тип һорай атай.

Беҙ тамсы ла арыманыҡ әле. Атай ҡайтҡас, арыта тиме ни? Беҙ ауыл осон кире урап, Көмөшлө туғайына сығабыҙ.

Имәнлекүл буйында туҡмаҡ башлы бер нәмәкәй үҫә, үҙе матур, үҙенең мамыҡтары осоп тора. Уның исеме — екән. Күл буйына барғас, беҙ уларҙы күп итеп өҙҙөк. Томбойоҡ япраҡтары ла йыйҙыҡ. Уҡ яһарға төҙ ҡамыштар алдыҡ. Беҙ унда ҙур өйрәктәрҙе лә, бәләкәсерәк өйрәктәрҙе лә күрҙек. Улар, беҙҙән ҡурҡып, осоп киттеләр. Ә тәлмәрйендәрҙе күрһәк тә, әйтеп тормайым. Яратмайым мин ул баҡылдаҡтарҙы.

Шунан һуң атай беҙҙе әллә ниндәй һуҡмаҡтарҙан алып китте лә ҡайтыр юлға сығарҙы. Туғайҙан ҡайтҡанда, бер тауға менергә кәрәк. Беҙ саҡ ҡына арығайныҡ та, бер ағас төбөнә ултырып, ял иттек. Тағы ла атайҙың миҙалдарын тотоп-тотоп ҡараныҡ. Шунан һуң ул ике түңәрәк миҙалды күлдәгенән ыскындырҙы ла беҙҙең күкрәктәргә ҡаҙап ҡуйҙы. Шунда уҡ беҙҙең арыуыбыҙ бөтөп китте. Һуғышта миҙал алғас, атайҙың арыуы ла шулай бөткәндер әле. Бына ҡалай яҡшы бит ул миҙал!

Тауҙы инде беҙ шәп итеп мендек. Иң бейеккә еткәс, атай тағы туҡталды. Бынан беҙҙең ауылдың өс урамы ла, Көмөшлө буйҙары ла, теге Имәнлекүл дә, күкһел урман ситендәге Тимертау ҙа күренеп тора. Мин аптырайым: беҙҙең урмандар бөтәһе лә йәшел, ә Тимертау урманы күкһел. Өләсәй менән барып ҡарармын әле мин ул урманды...

Алыҫтағы тау яғынан, оҙон төтөн сығарып, поезд үтеп бара. Яҡын баҫыуҙа комбайн бойҙай урып йөрөй, уның өҫтөнә бәләкәс кенә бер кеше менеп баҫҡан. Әллә минең кеүек кенә берәй малаймы икән ул?

Атай, ҡулдарын ҡаштары өҫтөнә ҡуйып, оҙаҡ итеп ҡарап тора:

— Бына, балалар, — ти ул, — былар бөтәһе лә һеҙҙең тыуған ерегеҙ. Ана теге тауҙар, урмандар, йылғалар артындағы ла, бик алыҫтағы ла һеҙҙең тыуған ерегеҙ. Әле һеҙ күрмәгән, һеҙ белмәгән ер-

ҙәр бар. Ана шул ерҙәрҙән дә ҡыуып ебәрҙек беҙ фашистарҙы. Аңлайһығыҙмы?

Беҙ бөтәһен үк төшөнөп бөтмәйбеҙ. Тик атайҙың бик яҡшы һүҙҙәр һөйләгәнен аңлайбыҙ. Ә үҫкәс, атай һуғышып йөрөгән яҡтарҙы барып күрербеҙ ҙә бөтәһен дә аңлап ҡайтырбыҙ.

— Ә һағыныуҙың ни икәнен беләһегеҙме? — ти атай.

— Нимә һуң ул?

— Һеҙҙең мине күргегеҙ килдеме?

— Эй оҙаҡ торҙоң, атай, беҙ илап бөттөк, — тип Оксана уны ҡосаҡлап ала.

— Бына минең дә шулай һеҙҙе лә, ошо урмандарҙы ла, шишмәләрҙе лә, юлдарҙы ла күргем килде.

— Ә һин илаһыңмы, атай? — тип һораша һеңлем.

— Юҡ, ҡыҙым, илауын иламаным. Илағым килһә лә түҙҙем.

— Ә ниңә түҙҙең?

Оксана шуны ла белмәй. Һалдат кеше илап тормаҫ инде.

Беҙҙең арттан һаҡаллы бер ағай килеп етте.

— Һау ғына ҡайттыңмы, иҫән генәме, йорт-ер именме, туған?.. Сәхрәгә сыҡтыңмы? Ярай, ярай, бик һәйбәт. Күркәм эш. Һағындыртҡандыр шул. Эйе, ярай, ярай, бик һәйбәт! — тип һөйләргә тотонто. Үҙе атайҙың ҡулын тотҡан да ебәрмәй.

Атай, ниҙер әйтергә теләп, ауыҙын асҡайны, теге ағай, уның һүҙен тыңламай, йәнә һөйләп алып китте:

— Ниңә шунда, бер сыҡҡас, беҙҙең йәшелсә бригадаһы яғына ла барып етмәнең? Ҡарбуз менән һыйлар инек. Эйе. Помидорҙар ҡотороп уңды быйыл. Бына һис арттырыу булмаҫ, ҡуш йоҙроҡтан һис ҡайтыш түгел. Балаларыңды ла алып төш. Ҡалай үҫкәндәр икән, тфү-тфү, күҙ теймәһен... Ҡабаҡтар миско урынына тәгәрәп яталар, носилка менән

ташырға тура килер инде. Бар, яраймы? — тине ул. Үҙе шәп-шәп атлап китеп үк барҙы. Был ағайҙың аяҡ атлауына күҙ ҙә эйәрмәй, үҙе бәләкәй генә, үҙе ҡалайыраҡ шәп йөрөй. Эше күптер инде.

Атай уның артынан йылмайып ҡарап ҡала:

— Һаман шул Йәнтүҙмәҫ Гәрәй икәнһең, — ти ул теге ағай тураһында.

Беҙ ҡайтырға ҡуҙғалабыҙ. Йүнтүҙмәҫ Гәрәй ағай, ҡапыл кире боролоп, беҙгә ҡаршы йүгереп килә:

— Ғәйепкә алма, туған, — ти ул, — ниндәйерәк эшкә тотонмаҡсыһың — ағынамы, ҡараһынамы тигәндәй? Әгәр ашығыс тимәһәң, минең бригадала бик һәйбәт аҡлы-ҡаралы бер эш бар. Ҡалаға емеш һатыуҙы юлға һалып ебәрер инең. Әйе.

— Һин дә ғәйепкә алма, Гәрәй ағай, мин шул ат тирәһенә барырмын тип торам.

— Бигәйбә, — ти Гәрәй ағай, — үҙең беләһең. Ул яныбан беҙҙе артта ҡалдырып китә.

Беҙ урам башына килеп етәбеҙ. Ситтән дүртенсе анау өй беҙҙеке инде.

* * *

Бына күрҙегеҙме инде, дүртенсе алмағастың да эйәһе булды. Атайҙы әйтәм. Мин өләсәйҙе иҫәпкә индермәйем. Ул бит Тимертауҙан ҡунаҡҡа ғына килеп йөрөй. «Ни өсөн мине иҫәпкә индермәйһең?» — тип асыуланмай ул беҙҙең өләсәй. Ниңә, ҡунаҡ булып тороу яҡшы түгелме ни?

Мин бөтәбеҙ тураһында ла һөйләп бөтмәнем әле. Тик һеҙ ашыҡмағыҙ. Бер һөйләй башлағас, мин туҡталып ҡала торған малай түгел. Үҙебеҙҙең өй, бигерәк тә һеңлем, тураһында һөйләргә мин бик яратам. Тик һүҙемә ҡолаҡ һалыусы ғына булһын. Һеҙ ҙә, бер тыңлай башлағас, ярты юлда туҡталып ҡалмағыҙ. «Ярым-ярты эш эшләп йөрөү — ирлек

түгел!» — ти Мансур бабай бер көн соҡор буйы Заһитҡа. Заһиты ла бит ярты баҡсаһын ҡәртәләгән, яртыһын ҡәртәләмәгән.

## БЕҘ ТИҘҘӘН МӘКТӘПКӘ БАРАСАҠБЫҘ

Атай ҡайтҡас, мин һигеҙгә сыҡтым, ә Оксана һаман ете менән бара.

— Балаларға һабаҡҡа төшөргә кәрәктер бит инде быйыл, — тине атай бер көндө иртән, аттар янынан ҡайтҡас.

— Үҙҙәре бер ҙә һүҙ ҡуҙғатмайҙар бит әле. Әллә уҡығылары килмәй инде, — ти әсәй. Беләм инде, ул шаярып ҡына шулай әйтә. Ҡапыл шул ваҡыт әсәй ҡыш көнө ебәргән теге телеграмма минең хәтеремә килеп төшә. Өләсәй менән Мансур бабайҙың яҙыуҙы танымай торғандарын, Мәхмүттең, эре генә ҡыланып, уҡып төшөндөргәнен уйлайым. Әсәй уларҙы белмәй шул, ә мин беләм. Белһә, ул шулай шаяртып тормаҫ та ине.

— Беҙҙең уҡығыбыҙ бик килә, әсәй, — ти һеңлем. — Сентябрь булғас та, эй күмәк китербеҙ мәктәпкә.

Ә мин һаман өндәшмәйем, теге телеграмманы уйлап ултырам.

— Һин һуң, Йәмил, ҡалайыраҡ уйлайһың? — Быны атай һорай. Ҡалай уйлайым ти мин? Һәйбәт уйлайым.

— Һәйбәт уйлайым, атай, — тим мин ҡысҡырып. — Сентябрь генә тиҙерәк булһын...

Мәктәп тураһында башҡаса һөйләшмәйҙәр.

Атай менән әсәй эшкә киткәс тә, беҙ икебеҙ болдорға сығып ултырабыҙ. Артҡы урамдың теге осондағы ҙур аҡ мәктәп беҙгә күренеп тора. Сентябрь булғас, беҙ Оксана менән икәү, китаптарыбыҙҙы күтәреп, ошо болдорҙан төшөрбөҙ. Унан урамға сығырбыҙ ҙа ан-а-ау юл менән китербеҙ, шунан мәктәпкә лә барып етербеҙ.

— Беҙ унда яҙыу ҙа яҙырбыҙ. Һүрәттәр ҙә төшөрөрбөҙ. Мин сәскә төшөрөрмөн, яраймы, Йәмил?

— Мин — ат та мылтыҡ...

— Матур йырҙар йырларбыҙ. Һин башларһың, йәме?

— Уҡытыусы апай башлаһын...

Тап ошо ваҡытта үҙемдең йырлағым килеп китә. Алыҫтағы аҡ мәктәпте, уның тәҙрәләрен, мәктәп янындағы ҙур ағастарҙы, ағастар янынан үткән юлды күреп торһағыҙ, уның өҫтәүенә, шул юлдан үҙегеҙҙең барасағығыҙҙы уйлаһағыҙ, һеҙҙең дә йырлағығыҙ килер ине.

Мин йырҙы башлап ебәрәм:

Тау башында аҡ мәктәп,
Беҙ барырбыҙ күмәкләп...

Һеңлем ялт итеп миңә әйләнеп ҡарай. Ул, үҙенең зәңгәр күҙҙәрен ҡыҫа төшөп, шунда уҡ йырға ҡушыла. Беҙҙең аяҡтарыбыҙ ҙа тик кенә тормайҙар, йырыңғайына бәүелергә тотоналар.

Китаптары шау һүрәт,
Мәктәп, һин беҙҙе өйрәт
Уҡырға, яҙырға,
Һүрәттәр яһарға!

Беҙҙең ҡапҡа аҫтынан Фәһимә үрелеп ҡарай. Беҙ йырҙан туҡтайбыҙ. Шул арала Марат ҡоймаға менеп үк атлана. Фәһимә, беҙҙе күргәс, йүгереп килә.

— Йыллашып ултырамы ни беләүҙәл! — ти ул. Һаман бөтмәй шул Фәһимәнең һаҡаулығы.

Марат һыҙғыртҡысын һыҙғыртып ебәрә, үҙе ҡулы менән беҙҙе урамға саҡыра. Оксана өй ишеген ябып ҡуя. Ишектә япмай китһәк, тауыҡ, себештәр өйгә килә лә тула. Тәҙрә төптәренә ҡунып бөтәләр улар. Үҙҙәре уҫалдар, үҙҙәре әллә нindәй әрһеҙҙәр.

— Балабыҙмы? — ти Фәһимә.
— Ҡайҙа?
Марат һыҙғыртҡысын икенсе тапҡыр һыҙғырта:
— Киттек! — ти ул.
— Ҡайҙа киттек?
— Их, һеҙ, — тигән була Марат, — бер ни ҙә белмәйһегеҙ. Кисә бит бер апай беҙҙең кеүектәрҙе уҡырға яҙып йөрөгән. Беҙ урманда тороп ҡалдыҡ. Һинең бәкең арҡаһында инде.
— Юғалтма үҙең кеше бәкеһен!
— Кем юғалтҡан? Һин юрамал миңә ябаһың бит, белгең килһә.
— Әрләшмә, Марат, — ти Оксана. — Ул бәке бит үҙе юғалды. Эйе бит, Йәмил?
— Үҙе...
— Балайыҡ инде. Әй бынауы малайҙалды!
Беҙ дүртәүләшеп урамға сығабыҙ. Арттан Фәрит менән Заман ҡыуып етә. Улар шау ғына шулай инде. Бөтә баланан да һуңға ҡалалар.
— Минең дә ҡәләмем бар! — ти Заман, бармаҡ буйы ғына ҡәләмен Оксанаға күрһәтә. — Беҙҙең бесәй бөгөн бер турғайҙы тота яҙҙы ла, турғай осоп китте. Һәйбәтме?
— Нимә, турғаймы, Заман?
— Ҡәләм.
Марат Заманға һөйләнмәҫкә ҡуша. Күп һөйләй шул Заман. Әсәй миңә: «Һөйләргә яратаһың», — ти. Заман минең ише генәме һуң, бәп-бәләкәс көйөнә ауыҙы һүҙҙән бушамай.
Беҙ инде урамдың теге яғынан, Хәйбулла Рушандары яғынан, йөрөргә лә ҡурҡмайбыҙ. Рушан хәҙер бер ҙә таш ырғытмай. Ямғыр яуған көнлө беҙҙең быҙау тары баҫыуына керергә иткәйне. Беҙ Оксана менән йүгерәбеҙ-йүгерәбеҙ, һис тегене тыйып булмай. Шунда Рушан быҙауҙы тотоп бирҙе. Ул бик шәп йүгерә бит.
Ана ул әле ҡапҡалары башында ниҙер йырлап ултыра. Ҡыҙыҡ малай ул Рушан: йә ағас ботағы-

на, йә өй ҡыйығына, йә берәй бағана башына менә лә йырлап тик ултыра. Үҙенең йырын бер ҙә аңлап булмай.

— Әйҙә, Рушан, мәктәпкә! — ти Марат.

— Мин сентябрь еткәс барам, кисә апай шулай тине.

— Ә беҙ улманда йөләнөк тә апайҙы күлмәнек.

Марат һеңлеһенә асыуланып ҡарай:

— Һин һаҡау көйөңә мәктәптә күп һөйләнеп торма! — ти ул.

Фәһимә үпкәләмәй, тик үҙенең һары башын ғына ҡағып ҡуя.

— Ялал...

Беҙ артҡы урам осона сыҡтыҡ та мәктәпкә килеп еттек. Бер малай ҙа теймәне беҙгә. Артҡы урам малайҙары ла һәйбәттәр бит.

Беҙ ишек төбөндә генә туҡтап ҡалдыҡ. Берәү ҙә алдан кермәй. Фәһимә ишек тотҡаһына үрелгәйне лә, Марат уның ҡулынан тартты. Беҙ, тирә-яҡҡа ҡаранғылап, һаман торабыҙ. Ҡулына ҙур ҡыҙыл сәскә тотоп, мәктәп баҡсаһынан Заман килеп сыҡты. Ул башта уҡ туп-тура шунда йүгергән, ахыры.

— Эй күп сәскә таптым, әйҙәгеҙ, сәскә йыябыҙ! — ти Заман.

Фәрит уны әрләй. Баҡсалағы сәскәләрҙе өҙөргә яраймы ни? Бигерәк тә бер ни белмәй шул әле Заман.

— Мин ҡәләмде юғалттым, Фәрит, — ти ул.

Баҡсанан бер апай килеп сыға:

— Ҡайһығыҙ бында сәскә өҙөп йөрөй?

— Мин түгел! — ти Заман, үҙе Фәриттең артына боҫа. Теге апай көлә. Көлгәс, асыуланмайҙыр инде.

— Баҡсала уйнарға ярай, тик сәскәләрҙе өҙәргә ярамай, — ти апай, үҙе Замандың башын һыйпай. — өҙгәс, бөтә бит улар. Барығыҙ, уйнағыҙ.

— Беҙ уйнарға килмәнек, апай, йомош менән килдек, — ти Марат.

— Йомошоғоҙ кемдә һуң?

— Мәктәптә. Беҙ уҡырға килдек, апай, — ти Фәһимә. Марат уның итәгенән тартып ҡуя:

— Юҡ, әлегә уҡырға түгел. Беҙҙе яҙып ҡуйығыҙ, апай.

Апай беҙҙе мәктәпкә, бер ҙур бүлмәгә, алып инә. Унда балалар ултыра торған парталар ҡуйылған.

— Йә, ултырышығыҙ, балалар, — ти апай. Беҙ парталар артына инәбеҙ. Апай үҙе, өҫтәл янына килеп, бер китаптымы, дәфтәрҙеме асып ҡуя.

— Апай, беҙ кисә урманға барҙыҡ...

— Шулаймы ни?

— Эйе! — ти Заман. Заман алдаша: ул кисә урманға барманы.

— Кемдән башлайбыҙ?

Беҙ өндәшмәй торабыҙ. Шунан һуң апай башта Мараттың, унан Фәриттең, унан Оксана менән минең исемдәрҙе, фамилияларҙы, йәштәрҙе һораштьı.

Сират Заманға килеп етте.

Ул апайҙың янына уҡ килде лә бая үҙе өҙгән сәскәһен һуҙҙы:

— Мә, апай. Мин дүрттә.

— Мин алтыла, — тине Фәһимә.

Апай тағы ла йылмая, үҙе Замандың арҡаһынан һөйә.

— Беләм, беләм, һеҙҙе лә яҙып ҡуйҙым, — ти ул, шунан һуң беҙгә ҡарай. — Минең исемем — Рауза апай. Һеҙ бергәләшеп ошо класта уҡырһығыҙ, мин уҡытырмын, ә хәҙергә ҡайтығыҙ, уйнағыҙ...

Рауза апай беҙҙе болдорға тиклем оҙата сыҡты. Беҙ йүгерешеп ҡайтып киттек. Заман да ҡалышманы.

Соҡор буйына еткәс, беҙ йүгереүҙән туҡтаныҡ.

— Рауҙа апай һәйбәтме? — тип һораны Оксана минән.

— Һәйбәт. Ул беҙҙе уҡырға ла, яҙырға ла өйрәтер.



— Тағы ун дүрт көндән сентябрь, уны бик белеп тороғоҙ! — тип әйтеп ҡайтарҙы беҙгә Марат.

Ошо мәлдән алып беҙҙе мәктәпкә әҙерләй башланылар. Әсәй икебеҙгә лә матур итеп муҡсалар тегеп бирҙе, атай лавканан ҡәләмдәр, төрлө буяуҙар алып ҡайтты. Оксанаға ла, миңә лә яңы күлдәк тектеләр.

Беҙ көн һайын мәктәп тирәһенә барып ҡайтабыҙ; әсә нимәһәк тә, баҡсаһында йөрөйбөҙ. Сәскәләрҙе өҙмәгәс, беҙгә бер әү ҙә һүҙ әйтмәй. Ниндәй генә сәскәләр, ниндәй генә ағастар үҫмәй ул баҡсала!

## ЯҠШЫ ХӘБӘРҘӘР

Беҙ кисен дүртәүләп сәй эсеп ултырабыҙ. Оксана баянан бирле минең менән бәхәсләшә. Мин әйтәм: «1 сентябргә тиклем ете көн ҡалды», — тим. Ул әйтә: «Һигеҙ көн»,— ти, мин әйтәм: «Юҡ, ете», — тим, ул әйтә: «Юҡ, һигеҙ», — ти. Атай менән әсәй өндәшмәй генә беҙгә ҡарап тора.

Һеңлем ҡапыл атайға һыйына:

— Улайһа, иң-иң дөрөҫөн, атайым, һин әйт,— ти ул.

Атай мыйығын һыйпап ала, үҙе саҡ ҡына йылмайып та ҡуя.

— Миненсә, — ти ул, — иң дөрөҫө — ете көн, һигеҙ төн...

Мин бармаҡ бөгә-бөгә көндәрҙе лә, төндәрҙе лә иҫәпләп сыҡмаҡсы итәм. Тик бер ҙә рәтен табып булмай. Әй ҙә, нинә төндө һанап торорға? Кешеләр бит төнөн йоҡлайҙар.

Атайым әсәйемә, унан беҙгә күҙ төшөрөп ала ла тыныс ҡына һүҙ башлай:

— Бөгөн, — ти ул, — алыҫ ерҙән яҡшы хәбәрҙәр алдыҡ, балалар, бик яҡын кешебеҙҙән хат килде...

Ниндәй ерҙәрҙән, ниндәй яҡын кешенән килде икән ул хәбәрҙәр? Атай шуны төшөндөрөп бирмәй бит. Оксананың сәсен һыйпағанда, ниңә һуң әсәйемдең ҡулы саҡ ҡына ҡалтыранғандай итә?

Мин яҡын кешебеҙ йәшәгән алыҫ ерҙәр тураһында уйлайым. Ул яҡтар ҡайҙа икән? Әллә теге Тимертауҙың күкһел урманы артындамы? Мин атайҙан шуларҙы һорашмаҡсы итәм. Ләкин инде атай урынынан тороп китә лә әсәйем менән йыш-йыш итеп һөйләшә башлай: «Көнбикә, һин иртәгә умарталыҡтан бал алып ҡайтырға онотма. Тимертауға ла хәбәр итер инең. Шулай һәйбәтерәк булыр...» — «Ярар» тип баш ҡаға әсәйем. Әлбиттә, шулай һәйбәтерәк булыр. Өләсәй беҙҙә саҡта һәр ваҡыт һәйбәтерәк була.

— Ә һеҙгә, балалар, һуңәй баҙарына китергә ваҡыт, — ти әсәй, уның тауышы бөгөн, ни эшләптер, тоноҡлана төшкән.

Алыҫ ерҙәр, яҡшы хәбәрҙәр хаҡында ул кис бер ни ҙә белә алмайынса, Оксана менән йоҡларға яттыҡ.

Ә иртәнсәк һуң, иртәнсәк ниҙәр генә эшләнмәне беҙҙең өйҙә! Беҙ тороуға әсәйем мейесте ап-аҡ итеп ағартып ебәргән, һандыҡтағы биҙәкле таҫтамалдар ҡаҙауҙарға алып элгенгән, ҙур карауатҡа беҙҙең теге шаҡмаҡлы-шаҡмаҡлы матур балаҫ йәйелгән. Тәҙрәләргә селтәрле яңы ҡорғандар ҡоролған. Самауыр һуң, самауыр! Ҡалайыраҡ ялтырап ултыра ул өҫтәл өҫтөндә.

Атайым бөтә ҡураны тап-таҙа итеп һепереп ҡуйған. Һарғайып килгән йорт үләне өҫтөндә бына бынау саҡлы ла сүп таба алмаҫһың.

Алыҫ ерҙәрҙән яҡшы хәбәрҙәр килгәс, бына нисек була бит ул!

Кискә ҡаршы беҙгә өләсәй ҙә килеп етте. Беҙ, уны Хәйбулла Рушандары тәңгәленә еткәс тә күреп, ҡаршы йүгереп барҙыҡ.

— Өләсәкәй, — тип беҙ уны икебеҙ ике яҡтан ҡосаҡлап алдыҡ, — беҙгә алыҫ ерҙәрҙән яҡшы хәбәрҙәр килде. Шуға күрә һинс лә саҡырып ебәрҙек...

— Хәбәрҙең яҡшы булыуы һәйбәт, балалар... — ти өләсәй, үҙе йомшаҡ ҡулдары менән арҡабыҙҙан һөйә.

Атай көнө буйы аттары янында йөрөнө. Бына көтөү ҙә ҡайтты.

Өләсәй менән Оксана Мансур бабайҙарға инеп киттеләр. Мин шым ғына әсәйем һыйыр һауған ергә барҙым.

— Әсәй, — тинем мин бышылдап ҡына, — әсәй, алыҫ ерҙәге яҡын кеше кем ул?

Әсәй ҡапыл миңә боролоп ҡараны ла йомшаҡ ҡына тауыш менән әйтеп ҡуйҙы:

— Иҙге сәғәткә тура килһә, бөтәһен дә үҙегеҙ күреп белерһегеҙ, улым...

Бер көн үтте, ике көн үтте. Беҙ бер ни ҙә күреп белә алманыҡ. Ә өсөнсө көндө беҙҙең өйгә — өләсәй әйтмешләй — һөйөнөс тә, көйөнөс тә килеп инде...

## ҠУНАҠ КИЛДЕ

Көмөшлө буйынан беҙ кис кенә ҡайтып индек. Баҡса янындағы бүрәнә өҫтөндә атай менән бер һалдат ултырып тора. Беҙҙе күргәс, теге һалдат аяҡ үрә баҫты ла ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

— Оксана!.. — Ул тағы ла ниҙер әйтте, тик мин генә аңламаным.

Һеңлем менән беҙ икебеҙ туҡтап ҡалдыҡ. Оксананы ҡайҙан белә был мыйыҡһыҙ һалдат ағай? Атай әйттеме икән ни?

Мин ҡурҡып киттем. Оксана ла ҡурҡты. Уның ирендәре лә ҡалтырай башланы...

— Быңа килегеҙ, балалар, был ағай — ҡәҙерле ҡунаҡ, — тине атай. — Ул әле генә килеп төштө.

Тик беҙ барыбер ҡуҙғалманыҡ. Ҡәҙерле ҡунаҡ үҙе йүгереп килде лә Оксананы күтәреп алды. Башта ул һеңлемдең күҙҙәренә бик оҙаҡ ҡарап торҙо, ә унан һуң күкрәгенә ҡыҫты. Оксана иламаны ла, ҡысҡырманы ла. Уны бит былай ҙа һәр осраған кеше күтәреп ала. Бөтә кеше ярата минең һеңлемде. Ҡәҙерле ҡунаҡ үҙе һөйә, үҙе һөйләнә: «Оксана... Оксана...» Мин атайға ҡарайым. Ул башын эйә лә ҡул һырттары менән күҙен ыуып ала. Сүп керҙеме икән әллә уның күҙенә? Өләсәй асыҡ тәҙрәнән тышҡа ҡарап тора. Ул, ниңәлер, ауыҙын яулыҡ осо менән ҡаплаған. Әсәй болдорға сығып баҫҡан. Ул әллә көлә, әллә илай — мин шуны һис аңлай алмайым. Ул, ахыры, илай ҙа, көлә лә.

Ә ҡәҙерле ҡунаҡ Оксананы һаман ҡосаҡлап тора. Был һаллатҡа асыуым да килә башлай, нәмәһелер оҡшамай уның минә. Кеше һеңлеһен шул тиклем оҙаҡ һөймәйҙәр инде. Ул ҡунаҡ минең өсөн ҡәҙерле лә түгел әле, белгегеҙ килһә!

Аҙаҡтан ғына ҡунаҡ Оксананы ергә баҫтыра ла мине күтәреп алмаҡсы итә. Мин атай янына ҡасып китәм. Ул ҡунаҡ тағы бер тапҡыр шулай итһә, һеңлемде Тимертауға алам да таям.

— Улай ҡырыҫ итенмә, улым, беҙҙең ҡунаҡ, Петро ағайың, һине ярата бит, — ти атай.

— Кәрәкмәй, яратмаһын, мине лә, Оксананы ла яратмаһын.

Ҡунаҡ, Оксананы етәкләп, беҙҙең эргәгә килә. Мин йүгереп китәм дә болдорға барып ултырам. Әллә ниңә эсем бошоп ҡуя. Оксана инде тегенең итәгендә ултырып тора... Мин атайға, әсәйгә, өләсәйгә ҡарайым: улар бөтәһе лә бөгөн әллә ниндәйҙәр. Әллә шатланалар, әллә ҡайғыралар инде. Оксана ла бөтөнләй үҙгәреп китте. Минең турала, ахыры, онотто ла инде ул... Юҡ, онотманы. Бына һеңлем минең эргәмә йүгереп килә. Уның зәңгәр күҙҙәре тағы ла яҡтыра төшкән. Тимәк, ул шатлана. Ул ҡыуанып сәпәкә итә:

— Беләһеңме, беҙгә кем килде? — ти.
— Ә кем һуң?
— Әйтәйемме?
— Беҙгә килде... Әйтмәһәм, ғүмергә лә беләсәк түгелһең.

Һеҙ белә алыр инегеҙме һуң? Мәңге белә алмаҫ инегеҙ.

## БЫНА КЕМ ИКӘН УЛ БЕҘҘЕҢ ҠӘҘЕРЛЕ ҠУНАҠ...

— Көнбикә, инәй, — тип саҡыра атай, — бында килегеҙ әле. Бөтәбеҙ ҙә бергәләп ултырып алайыҡ.

Беҙ шул уҡ бүрәнәләр өҫтөнә теҙелешеп ултырабыҙ, Оксана ҡунаҡ ағай менән минең араға ултыра.

Мин Ҡыр яғына әйләнеп ҡарайым. Ҡояш алыҫ тау артына төшөп бара. Беҙҙең баҡса артындағы һыртта аттар ҡурпы утлап йөрөй. Уларҙың ҡолағәләре оҙон булып ергә төшә. Яңғыҙ имән төбөндә алма сыбар ат баҫып тора. Уның исеме Атака. Ут ат та, атайҙар кеүек үк, фронтта йөрөп ҡайтҡан. Атаканың янбашына һуғышта пуля тейгән. Ул, юртҡанда, әле лә саҡ ҡына аҡһап китә. Атака тирәһенә тай-тулаҡ йыйылған. Ул аҡрын ғына башын ҡағып ала, ә тегеләре, ҡойроҡтарын да ҡыймылдатмай, тик торалар. Бәләкәс аттарға Атака һуғышта булған хәлдәрҙе, үҙенең күргәндәрен һөйләй, ахыры.

Атай ҡояшҡа ҡаршы таш өҫтөнә күсеп ултыра. Ҡояштың ҡыҙыл нурҙары уның битенә төшә. Атайҙың йөҙө ялҡын бөркөп торған һымаҡ күренә миңә. Уның оҙон мыйыҡтары дөрләп янып китмәһә ярар ине тип шикләнеп тә ҡуям.

— Ҡәҙерле ҡунаҡты беҙҙең өйгә ниндәй яҙмыш килтергәнен һөйләргә ваҡыт етте, балалар, — ти атай, ул башта Петро ағайға, унан Оксанаға һәм миңә ҡарап ала.

Петро ағай башын түбән эйеп ултыра, ни тураһындалыр уйлана, ахыры, ул. Беҙ, Оксана менән икәү, атайҙың ни әйтеүен көтөп торабыҙ. Ләкин атай һүҙен тиҙ генә башлап китә алмай.

— Минең һүҙем ҡыҫҡа булыр, — ти ул, тамағын ҡырып. — Һуғыш ул, балалар, ҡот осҡос нәмә. Кешеләргә бик күп ҡайғы-хәсрәттәр килтерә ул. Аҙмы емерелгән, яндырылған ауылдар һәм ҡалалар үттек беҙ — әйтеп бөтөргөһөҙ. Беҙҙең дошмандарыбыҙ — фашистар, йыртҡыстан да яман булып сыҡты. Улар әсәләрҙе лә, кескәй балаларҙы ла ҡыҙғанманылар.

Беҙ уларҙы Украина еренә ҡыуып бара инек. Бер саҡ шулай дошманды бер ауылдан бәреп сығарҙыҡ. Емерек өйҙәр, ҡара көйгән баҡсалар әле лә күҙ алдымда тора. Бөтә ерҙе төтөн ҡаплаған, хатта тын алыу ҙа ауыр. Урамда кеше заты күренмәй. Ҡапыл мин ситтәге бер өйҙә бала илауын ишеттем.

Атай яғынан тамаҡ ҡырҙы ла ялт итеп Оксанаға ҡараны. Оксана ла, унан күҙен алмай, ҡарап тора. Үҙенең ирендәре лә аҙ ғына ҡалтырай. Петро ағай,ниҙәндер ҡурҡҡан төҫлө, бөршәйеп кенә ултыра. Ул өндәшмәй генә атайҙың һөйләп бөткәнен көтә.

— Мин шул өйгә йүгереп керҙем. Керһәм — иҙәндә үлек әсә ята. Уның эргәһендә бер ҡыҙ бала илап ултыра. Иҙән уртаһында туҡтап, ҡатып ҡалдым. Ни эшләргә белмәйем. Ә ҡулдарым ирекһеҙҙән ҡыҙ баланы күтәреп алдылар. Ул миңә ҡапыл: «Атай!»— тип өндәште. Күрәһең, мине шулай уҡ фронтта йөрөгән атаһы тип уйланы. «Изге сәғәткә, балаҡай! — тинем мин. — Бөгөндән башлап һин Йәмилдең туғаны булырһың...»

Оксана ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

— Ул мин инемме?

— Эйе, һин инең, ҡыҙым...— тине атай йомшаҡ ҡына. — Йә инде, балалар, ҡалғанын тыңлағыҙ.

Мин, мейестән күмер алып, стенаға үҙемдең адресты яҙҙым, шунан ҡыҙымды шинелгә төрөп күтәрҙем дә иптәштәремде ҡыуа киттем... Һуғыш тынып торған арала, ҡыҙымды яҡындағы ҡалаға балалар йортона илтеп ҡуйырға командирым миңә рөхсәт бирҙе. «Оксананы килеп ал!» — тип әсәйегеҙгә шунда уҡ хат та яҙҙым. Әсәйегеҙ ул алыҫ юлға тик бер нисә айҙан һуң ғына сыға алды... Туғаныңдың ҡайтып төшкән көнөн хәтерләйһеңдер бит, Йәмил?

Хәтерләмәй буламмы һуң?..

— Бынан өс көн элек хат килеүе тураһында әйткәйнем һеҙгә. Ул хатты Петро яҙғайны. Оксананың атаһы — беҙҙең ҡәҙерле ҡунағыбыҙ һәм туғаныбыҙ Петро бөгөн үҙе килеп төштө, — тине атай. Һуңғы һүҙҙәрҙе әйткәндә, уның тауышы, нисектер ҡалтыранып китте...

Мин ҡысҡырып илап ебәрерҙәй булдым. Ләкин тап шул мәлдә Оксана бышылдап ҡына миңә өндәште:

— Беҙҙең тағы ла бер әсәйебеҙ бар тигәйнем бит һиңә, Йәмил, эйеме?! Бына тағы бер атайыбыҙ ҙа килде. Минең атайым!

Ҡапыл Петро ағай Оксана менән икебеҙҙе бер юлы күтәреп алды ла күкрәгенә ҡыҫты: «Йәмил, Оксана...» — тип шыбырланы ул.

Шул саҡ мин уның ысындан да ҡәҙерле ҡунаҡ икәнен аңланым.

## ҺУҢҒЫ ӨС КӨН

Мин Петро ағайға шунда уҡ эйәләшеп алдым. Бына тигән ул беҙҙең Петро ағай. Оксана менән икебеҙҙе, ике иңбашына ултыртып, ҡура буйынса күтәреп тә йөрөй әле ул. Беҙҙең өйҙә унан да дәүерәк кеше лә юҡ. Соланға ла ул эйелеп кенә инә, югиһә маңлайы ишек башына бәрелә. Йомарлаһа, һәр бер йоҙроғо Замандың ҙур ҡыҙыл тубы саҡлы

булыр. Бына ҡалайыраҡ бит ул беҙҙең Петро ағай. Баһадир! — Бынылын Мансур бабай шулай ти.

Тик өләсәйем генә бошона: «Бигерәк тынғыһыҙ шул. Көнө буйы ашап-эсеп рәхәтләнеп ҡунаҡ булып ҡына ятмаҫҡа шунда. Ә уның етмәгән ере юҡ», — ти.

Өләсәй дөрөҫөн әйтә: был арала беҙҙең өсөбөҙҙөң етмәгән еребеҙ ҡалманы. Иң тәүҙә беҙ Петро ағайға Батырша олатай шишмәһен күрһәттек. Унан яҡын баҫыуҙа әсәйемдәр ҙур машина менән бойҙай һуҡҡан ергә барҙыҡ. Петро ағайым ҡарап тороп ҡына сыҙай алманы. Машинаның башына уҡ менеп, барабанға көлтә бирергә тотондо. Оксана менән беҙ ситтә, эҫкерт янында, баҫып торҙоҡ.

— Һалдаттың ҡулдары эш һағынған, һай, нык һағынған! — ти шунда һалам өйөүсе бер бабай.

— Дөрөҫ! — тип уның һүҙен ҡеүәтләй апай кеше.

Машина туҡтаған арала туҙанға батып бөткән Петро ағай беҙҙең янға килде. Шунан һуң беҙ өсәүләп атайымдың аттары янына барып сыҡтыҡ. Их, шәп тә һуң беҙҙең аттар! Улар Петро ағайға ла бик оҡшаны.

Әйтәм бит, йөрөмәгән еребеҙ ҡалманы — йәшелсә баҡсаһында ла, умарталыҡта ла, кирбес һуға торған ерҙә лә булдыҡ беҙ. Петро ағайға беҙҙең ауыл бик оҡшаны, ахыры, күреп туя алмай. Ә кешеләр һуң, кешеләр! Һәр береһе Петро ағайға: «Хуш килдең, туған!» — тип өндәшә һәм, уның ҡулын ҡыҫып, оҙаҡ-оҙаҡ итеп күрешә.

Ҡарт әбейҙәр уның арҡаһынан һөйөп алалар. Ҡәҙерле ҡунаҡ булмаһа, кешеләр шулай яратырҙар инеме һуң Петро ағайҙы, ә!

Петро ағайға иң оҡшаған нәмә — беҙҙең тимерлек булды. Беҙ унда әллә нисә рәт барҙыҡ. Тимерлектә ике Ғәби эшләй — береһен Йыуан Ғәби, икенсеһен Нәҙек Ғәби тип йөрөтәләр. Ғәбиҙәр ҡәҙерле ҡунаҡ менән тиҙ үк дуҫлашып алдылар. Һөй-



ләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Барған һайын Петро ағай, еңдәрен һыҙғанып, ҡулына сүкеш ала. Бер саҡ ул, минең баш дәүмәле сүкеште күтәреп, ҡыҙған тимер өҫтөнә килтереп һуҡҡайны, теге тимер ҡоймаҡ ҡалынлығы ғына ҡалды.

— Бына тимерсе, исмаһам, — ти Нәҙек Ғәби Йыуан Ғәбигә. — Бына кемдә ул көс!

Ошо тимерлектә инде Петро ағай миңә тимер һаплы бәке, әсәйемә тәртешкә яһап бирҙе. Тик Оксанаға ғына бер әйбер ҙә булманы. Ҡурсаҡ яһап булмай шул бында...

Әсәйем әйткәндәй, төштәге кеүек үтте лә китте ул өс көн!

## СЕРЛЕ ҺӨЙЛӘШЕҮ

Оксана менән Петро ағай өйгә инеп китте. Мин, тимерлектән алып ҡайтҡан һәйбәт нәмәләремде теге таш һарайға ҡуйырға тип, баҡсаға керҙем. Яҙ ултыртҡан алмағастар араһынан эйелеп кенә мин ҡайын төбөнә килдем. Бына Оксана алмағасы, бына минеке, анауҙары атайым менән әсәйемдеке... Ә был ситтәгеһе кемдеке һуң? Теге саҡ, яҙ көнө, әсәйем ни тигәйне әле? «Бишенсе алмағас ҡунаҡҡа булыр», — тигәйне. Беҙҙең хәҙер ҡәҙерле ҡунағыбыҙ бар. Шулай булғас, бишенсе алмағасты Петро ағайға атайым да ҡуям. Ҡалай һәйбәт булып сыҡты!

Кеҫәләге тимер-томорҙарҙы бушатып торғанда, баҡсаның арғы башында кемдәрҙеңдер мыңғыр-мыңғыр һөйләшкәнен ишетеп ҡалдым. «Ҡемдәр икән?» Мин ҡапыл әйләнеп ҡараным. Ҡәртәнең был яғына өләсәй баҫҡан, теге яҡтан Мансур бабайҙың аҡ һаҡалы елберләп күренеп тора.

— Бигерәк тә бала йәнле инде. Үҙе шундай кеселекле, үҙе харап уңғанға оҡшап тора, — ти өләсәй. — Үндыҡ яңы тыуғандан, бик уңдыҡ.

— Шулай, шулай, ҡәрендәш, — тип Мансур ба-

бай уның һүҙен ҡеүәтләй, — бәндәләрҙе тел дә, байлыҡ та туғанлаштырмай. Бәндәләрҙе йөрәк туғанлаштыра. Мин күп йәшәгән кеше инде, беләм: был заман кешеләрҙең тормоштарын ғына түгел, йөрәктәрен дә яҡшыртты.

Өләсәй көрһөнөп ҡуя ла яңынан һөйләй башлай:

— Йөрәк итен телеп алған кеүек булыр инде, Мансур ағай. Артыҡ ныҡ эйәләштек шул ҡыҙыбыҙға. Атаһын да әле күреп туя алған юҡ. Бигерәк Йәмил менән Көнбикә өҙгөләнер инде. Ошонда бергәләп кенә йәшәүгә ни етер ине лә бит, күндереп булмай шул.

Унан һуң Мансур бабайҙың ҡалын тауышы ишетелә:

— Күндерергә кәрәкмәй ҙә, ҡәрендәш. Үҙ ере көл-күмергә ҡалған ир-егет, йөрәге сыҙап, бында ятмаç шул. Уның урынында булһам, мин дә үҙ тупрағыма ҡайтып, орлоҡ сәсер инем...

Был ике оло кешенең һөйләшеүе бик серле тойолдо миңә. Эсемдә ниндәйҙер нәмә келт итеп өҙөлгәндәй булды. Эйе, улар һеңлем менән Петро ағай тураһында һөйләйҙәр ине.

Мин өйгә атлығып индем. Һеңлем, аяҡтарын һелкеп, һандыҡ өçтөндә ултыра, үҙе атаһына ниҙер һөйләй. Уның асыҡ зәңгәр күҙҙәре нисек йылмаялар!.. Мин шунда уҡ тынысланам. Юҡсы, улар бер ҡайҙа ла китмәгәндәр бит.

— Һин хазина һарайына барҙың, мин беләм инде, — ти һеңлем. — Әйҙә, атыңа ултыртып, минең ҡурсаҡтарҙы ҡунаҡҡа алып китәбеҙ.

— Ә ҡайҙа?

— Алыçҡа, би-ик алыçҡа, Украинаға.

Атлай-йүгерә өләсәй килеп инә һәм шунда уҡ самауырына тотона, үҙе һөйләнә:

— Ҡунаҡтар ҡайтып та еткән, ә мин күрмәй ҙә ҡалғанмын. Бына нисек була бит ул, донъяңды онотоп йөрөгәс, йә инде...

Ә минең ҡолаҡ төбөндә башҡа һүҙҙәр яңғырай: «Йөрәк итен телеп алған кеүек булыр инде...»
Ниңә улай ти икән өләсәй?
Ниңә икәнен мин тик һуңынан ғына аңланым.

## ОҘАТЫУ

Август айының һуңғы көнө килеп етте. Ул иртә шундай йылы ине. Өй алдындағы һары үләндәр, баҡсалағы ағас япраҡтары, өй түбәләре, урамдағы яңы телеграф бағаналары — бөтәһе, бөтәһе лә ҡояш нурына күмелгән.

— Йәй беҙҙең менән нисек йылы, яғымлы итеп хушлаша! — ти өләсәй. — Беҙ уны яҡшы һүҙ менән хәтергә алабыҙ.

Был иртәлә Петро ағай һәм Оксана беҙҙең ауыл менән хушлаштылар.

Ҡапҡа төбөндә күптән инде егеүле Атака тора. Арба тирәһендә малайҙар һәм ҡыҙҙар йүгерешеп йөрөй. Ололар ҡойма буйында һөйләшеп тора.

Өйҙә юлға йыйыналар. Әсәй Оксанаға иң матур күлдәген кейҙерә. Петро ағай тиҙ генә ҡырынып ала. Уның мыйығы ҙур түгел бит, шуның өсөн тиҙ.

Атай юл әйберҙәрен арбаға сығарып һала ла яңынан өйгә инә. Өләсәй бөтәбеҙгә лә саҡ ҡына ултырып торорға ҡуша. Тик шул ваҡытта ғына әсәй, миңә табан боролоп, әйтеп ҡуя:

— Бына, Йәмил, — ти ул,— һеңлең менән хушлашыр ваҡыт та етте. Бөгөн Оксана атаһы менән бергә Украинаға китә. Һуңыраҡ беҙ ҙә күмәкләп Петро ағайындарға ҡунаҡҡа барырбыҙ. Ярармы, ҡыҙым? — Ул был һүҙҙәрҙе Оксанаға әйтә.

— Ой, әсәкәйем, тиҙерәк килегеҙ! — ти һеңлем. — Ә Йәмил әле үк барһын. Бараһыңмы, Йәмил?

— Икегеҙ ҙә киткәс, өйҙә кем ҡалыр һуң? Йәмил беҙҙең менән барыр, — ти өләсәй.

Мин аптырайым: ни эшләп Оксана үҙе генә китә икән? Мин бит уның менән теләһә ҡайҙа барырға әҙер торам. Шуны аңламайҙармы икән ни?

Аҙыраҡ ултырғандан һуң, өләсәй урынынан тора. Уның артынан беҙ ҙә ҡуҙғалабыҙ.

Бөтәбеҙ ҙә урамға сығабыҙ. Кешеләр Петро ағайҙы уратып алалар, уның ҡулын ҡыҫалар.

— Хуш бул, туған, — тиҙәр улар, — беҙҙе онотма. Ҡунаҡҡа йышыраҡ кил!

Кемдер, Оксананы күтәреп алып, биттәренән үбә. Шунан һуң уны ҡулдан ҡулға йөрөтәләр. Хушлашыу бик оҙаҡҡа һуҙыла. Һеңлем эргәһенә иң аҙаҡтан өләсәй килә һәм уның сәсенән һыйпай.

— Бәхетле, тәүфиҡлы бул, ҡыҙым, — ти. Өләсәйҙең йәшле күҙҙәре берсә асыла, берсә йомола.

Беҙ бишебеҙ ҙә арбаға менеп ултырабыҙ. Әсәй Оксананы итәгенә ала. Атай дилбегәне һелтәп ебәрә. Беҙ ҡуҙғалып китәбеҙ. Ҡапҡа төбөнә йыйылған кешеләр ҡарап ҡалалар. Фәһимә ҡысҡырып иларға тотона, ә Марат менән Фәрит, арба артынан эйәреп, йүгереп килә.

— Һау бул, Оксана! — ти Марат.

— Иҫән бул! — ти Фәрит.

Һеңлем малайҙарға ҡул болғай. Урам башында улар ҙа тороп ҡалалар.

Анау саҡта беҙ атай менән туҡтап хәл йыйған урманлы тауҙы ла үтеп китәбеҙ. Туғайға килеп сыҡҡас, атай атты туҡтата. Иң элек арбанан үҙе һикереп төшә.

— Барығыҙ, балалар, һеҙ алдан йүгерегеҙ, арығас, тағы ултырырһығыҙ, — ти ул.

Әсәй Оксананы арбанан төшөрә, ә мин үҙем һикереп төшәм. Беҙ һарғая башлаған үлән өҫтөнән йүгереп китәбеҙ. Бында инде сәскәләр ҙә юҡ, улар ҡойолоп бөткәндәр, күбәләктәр ҙә әллә ҡайҙа осоп киткәндәр. Ҙур бесән эҫкертенең башында бер дәү һоро ҡош ултырып тора. Ергә уның ҡара күләгәһе

төшә. Мин: «Ҡө-өш!» — тип ҡысҡырам, ул барыбер осоп китмәй.

— Ҡурҡытма, Йәмил, йә уның йоҡоһо киләлер. Ниңә ул яңғыҙ икән? Уның балалары ҡайҙа икән? — Ул ҡапыл тынып ҡала. Аҙыраҡ барғас, аҡрын ғына һөйләй башлай: — Әсәйем бөгөн иртәнсәк мине соланға алып сығып һөйҙө-һөйҙө лә ҡысҡырып иларға кереште...

Мин артҡа әйләнеп ҡарайым. Атай, әсәй, Петро ағай өсөһө лә арба артынан атлап килә.

Алыҫта беҙҙең Ҡыр яғы саҡ ҡына күренеп тора. Йәй көнө унда минең һеңлемдең күҙҙәре төҫлө зәңгәр сәскәләр — күгәрсен күҙҙәре үҫә. Беҙ уларҙы йыйып ҡайта ла һыулы стаканға ултыртып ҡуя инек. Ә хәҙер ул сәскәләр ҙә юҡ инде. Беҙҙең яңы башмаҡтарыбыҙ ҙа иҫкерҙе. Оксана ла китә. Өйҙә бары «Оксана» исемле ҡаҙ бәпкәһе менән «Оксана» исемле алмағас ҡына тороп ҡалды.

— Һин китмә, туғаным! — тим мин.

— Әсәй ҙә барырға ҡуша бит, — ти ул. — Минең атайым бик һәйбәт. Ул һине лә, мине лә ярата. Ә һин әсәйҙәр менән бергә беҙгә ҡунаҡҡа килерһең. Беҙҙең унда яңы өйөбөҙ булыр.

Атайҙар, атты саптырып, беҙҙең арттан килеп етә. Оксана менән беҙ арбаға менеп ултырабыҙ. Беҙ бик оҙаҡ барабыҙ, ҙур урмандарҙы, күл буйҙарын, күперҙәрҙе үтәбеҙ. Шунан һуң тағы тауға менәбеҙ. Беҙҙең алдан, оҙон төтөн сығарып, поезд үтеп китә. Алыҫта, ағастар араһында, бер аҡ йорт күренеп ҡала.

— Бына килеп тә еттек! — ти атай.

Беҙ ана шул аҡ йортҡа етер-етмәҫ бер ағас төбөндә туҡтайбыҙ. Атай менән Петро ағай йортҡа инеп китә, беҙ өсәү арбала ултырып ҡалабыҙ. Әҙерәк торғас, әсәй беҙҙе теге йорт янына алып килә. Ошо йорттоң янында ғына дүрт оҙон тимер юл ялтырап ята. Уларҙың осо ла, ҡырыйы ла күренмәй.

Ошо тимерҙәр өҫтөнән тәгәрәп китә инде поездың тәгәрмәстәре.

Йорт тирәһенә, Мансур бабайҙарҙың балта сары төҫлө, ҙур-ҙур таштар йәйелгән. Шул таштар өҫтөнә баҫып, кешеләр йөрөп тора. Бөтәһе лә ҙурҙар, беҙҙең кеүектән берәү ҙә юҡ.

Әсәй беҙҙе етәкләп ала, һәм беҙ өсәүләп ошо таштарға баҫып йөрөргә тотонабыҙ. Әсәй үҙе көлмәй ҙә, һөйләшмәй ҙә.

— Билеттар булды! — тигәнде ишетеп, беҙ әйләнеп ҡарайбыҙ. Атай менән Петро ағай беҙҙең артта баҫып тора.

— Тиҙҙән поезд киләсәк, мин әйберҙәрҙе килтерәйем, — ти ҙә атай, шәп-шәп атлап, китеп бара. Беҙ дүртәү шунда ҡалабыҙ. Петро ағай менән әсәй ниҙер һөйләшә. Русса белмәгәс, мин уларҙың һүҙҙәрен аңламайым.

Әйберҙәрҙе күтәреп, атай ҙа килеп етә. Инде улар өсәүләп һөйләшә башлайҙар.

— Килә! — тип ҡысҡырҙы кемдер.

Өй алдындағы халыҡ ары-бире йүгергеләй башланы. Ағастар артынан ухылдап паровоз килеп сыҡты. Шул саҡ ер тетрәп ҡуйғандай булды. Ул пых-пых итеп беҙҙең яндан уҙғанда, мин ҡурҡып та киттем. Шунан һуң йәшел вагондар әкрен генә үтә башланылар. Әсәй мине ҡапыл етәкләп алды. Беҙ вагондар артынан йүгерҙек. Бер вагон эргәһендә Петро ағай туҡтап ҡалды. Беҙ ҙә шунда килдек. Ҡейеменә ялтырап торған төймәләр теҙелгән бер кешегә Петро ағай билетын һуҙҙы.

Беҙ хушлаша башланыҡ. Петро ағай башта атайҙы ныҡ итеп ҡосаҡланы, унан һуң әсәйҙең ҡулдарын ҡыҫты, иң аҙаҡтан мине күтәреп алды ла өс тапҡыр битемдән үпте.

Оксана ҡапыл әсәйгә килеп һыйынды. Әсәйем уны ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡларға тотонды. Шунан атайым һеңлемде әсәй ҡулынан йәһәт кенә алып һөйҙө лә ергә төшөрҙө.

— Хушлашығыҙ инде, балалар, — тине атай.

Һеңлем миңә әйләнеп ҡараны. Уның яңаҡтары буйлап юл-юл булып йәш аға ине.

Мин һеңлемдең беләгенән тотоп алдым:

— Оксана, китмә, туғаным!

— Йәмил, илама, улым, һеҙ тиҙҙән тағы күрешерһегеҙ. Беҙ бит бер үк Тыуған илдә йәшәйбеҙ, — тине атай.

Петро ағай һеңлемде тиҙ генә вагондың өҫкө баҫҡысына баҫтырып ҡуйҙы, шунан һуң үҙе һикереп менде.

Паровоз ҡысҡыртып ебәрҙе. Вагондар ҡуҙғалып китте. Беҙ ҡул болғап ҡалдыҡ. Бына Оксана вагон тәҙрәһенән үрелеп ҡараны. Ул ниҙер ҡысҡырҙы, ахыры, тик мин генә ишетмәнем.

Поезд урман эсенә инеп юғалды. Ә беҙ һаман шунда баҫып торабыҙ. Ҡапыл мин әсәйҙең йомшаҡ тауышын ишетәм:

— Үҙ ояһына осоп китте... ҡошсоғом минең... шатлығым минең...

Атай бик оҙаҡ уйланып тора. Унан һуң беребеҙгә лә ҡарамай һүҙ башлай:

— Улай тимә, Көнбикә. Ҡыҙыбыҙ ғүмер буйы беҙҙең өйөбөҙҙөң йәме булып ҡалыр. Хәҙер Оксананың ғына түгел, беҙҙең бөтәбеҙҙең дә ике оябыҙ буласаҡ. Үҙ нигеҙендә Петро ер-яңы ҙур йорт һалыр. Ул булдыҡлы, ҡеүәтле кеше. Бынан һуң шатлыҡтар ҙа, ҡайғылар ҙа улар менән уртаҡ буласаҡ... Бер-беребеҙгә ҡунаҡҡа йөрөшөрбөҙ, кәрәк сағында, ярҙам да итешербеҙ.

Мин һаман да урман өҫтөнә һибелеп ҡалған төтөнгә ҡарайым. Был — Оксананы алып киткән паровоз төтөнө.

...Бына минең ҡаршыма Петро ағай үҙе һалған яңы йорт килеп баҫа. Йорт алдында беҙҙеке кеүек үк баҡса, унда бер ҡайын, биш алмағас үҫеп ултыра. Ҡурала ап-аҡ ҡаҙҙар йөрөй. Беҙ Оксана менән етәкләшеп бейек болдорға менеп барабыҙ...

Алыçта паровоз ҡысҡыра. Минең баш осомда аяҙ күк йөҙө — һеңлем Оксананың күҙҙәре төҫлө, асыҡ зәңгәр күк йөҙө.
Оксана... һеңлем, беҙҙең өйҙөң йәме инең бит һин...





# ӨС ТАҒАН

*Повесть*

## БӨРКӨТЛӨ

Һеҙҙең Бөркөтлөлә булғанығыҙ бармы? Юҡмы ни? Донъялағы иң матур ауылдарҙың береһен күрмәй нисек түҙәһегеҙ икән? Ҡыйындыр, әлбиттә. Ә бит Бөркөтләнә күреү генә түгел, шунда тыуып, шунда үҫкән кешеләр бар. Уларға рәхәт, исмаһам, тыуҙыңмы, рәхим ит: Бөркөтлө.

Шулай ҙа кешеләрҙе аңламаҫһың. Бөркөтлөләр үҙ ихтыярҙары менән ҡайҙағылыр алыҫ ҡалаларға, күҙ күрмәҫ, ҡолаҡ ишетмәҫ илдәргә барып йөрөп ҡайталар. Күргәндәрен мәрәкә итеп һөйләйҙәр. (Мин һуғышты әйтмәйем. Унда бераү ҙә мәрәкә күрәйем тип бармаған.)

Йорттан сыға алмағандары лимон-әфлисундар үҫкән йыраҡ ерҙәр, шаулы диңгеҙҙәр, ҡыш булмай

торған илдәр, төн булмай торған яҡтар тураһында хыяллаһалар. «Их, шуларҙы барып күрһәң ине!»— тиҙәр. Ә бына: «Их Бөркөтлөнө күрһәң ине!» — тип уфтанған кешене, ниңәлер, осратырға тура килмәне. Кешеләрҙең шундай ҡыҙыҡһынмаусан булыуына аптырарһың. Ҡыҙғаныс, әлбиттә.

Бөркөтлөлә, әйткәнемсә, донъя күргән кешеләр байтаҡ. Күрмәгәндәре лә сей наҙан түгел. Аҡты ҡаранан айыралар. Ана һарыҡ көтөүсеһе Шәрифулланы ғына тыңлап ҡарағыҙ. Алтмышҡа етеп, ситкә аяҡ атлағаны юҡ, ә үҙе ер шарын биш бармағы кеүек белә. «Ҡыҙыл буяуҙы Ҡыҙыл диңгеҙ һыуынан, ҡара буяуҙы Ҡара диңгеҙ һыуынан, аҡ буяуҙы Аҡ диңгеҙ һыуынан яһайҙар, йәнә Һары диңгеҙ, Йәшел диңгеҙ, Зәңгәр диңгеҙ бар...— ти ул.— Йылы яҡта шундай тигеҙ далалар бар, ҡояш сыҡҡанда йомортҡа тәгәрәтеп ебәрһәң, ҡояш батҡансы туҡтамай барасаҡ», — ти.

Ә Бөркөтлө ҡарағас, ҡайын, ҡарағай урмандары менән ҡапланған тауҙар араһында — Урал итәгендә ултыра. Уның ике яғында ике ҙур күл. Береһен — Ҡалҡанкүл, икенсеһен Ҡылыскүл тип атап йөрөтәләр. Ҡалҡаны алыҫыраҡ, Ҡылысы ауыл эргәһендә генә. Тау битләүендә үлән йәшәреүгә Ҡалҡандың һыуы йылынып та өлгөрә, ә Ҡылыстың һыуы йәй уртаһында ла, боҙ кеүек, һалҡын була, инһәң, тәнде ҡурып ала.

Донъяла бер нәмә лә үҙ-үҙенән генә яралмай. Әлеге күлдәрҙең барлыҡҡа килеүе тураһында ошондай әңгәмә йөрөй. Имеш, борон-борон заманда, Уралды илбаҫарҙарҙан һаҡлағанда, бәһлеүәнгә уҡ тейгән. Ул гөрһөлдәп ергә ауған. Уң ҡулындағы ҡылысы бер яҡҡа, һул ҡулындағы ҡалҡаны икенсе яҡҡа барып төшкән. Ҡалҡан төшкән ерҙә йылы күл, ҡылыс төшкән ерҙә һалҡын күл ҡалҡҡан. «Ни өсөн шулай ике төрлө һыу сыҡҡан?»— тип һораһағыҙ, баяғы Шәрифулла былай тип яуап бирер: «Сөн-

ки ҡылыс йән ҡыя торған ямаи ҡорал, ә ҡалҡан йән һаҡлай торған яҡшы нәмә»,— тиер.

Бөркөтлөнөң күрке күлдәр генә түгел. Уның тирәһендә кем уҙарҙан ярышып күккә урләгән тауҙар, тау араларындағы йәшел үҙәндәр, ҡаяларҙан урғылып сыҡҡан шишмәләр, таштан ташҡа һикереп уйнаған ҡыр кәзәләре, яҙғы шарлауыҡтарҙан көҙгө ҡырауҙарға тиклем тынмай һайраған ҡоштар йәм өҫтөнә йәм өҫтәй. Яҙғы күкрәүҙәр ваҡытында бында тауҙар гөрләп тора. Әйтерһең, улар үҙҙәре күктә күкрәтәләр. Урмандарҙа beләк йыуанлығы көпшәләр үҫә, аҡландарҙа турғай башы ҙурлығы еләктәр бешә. Кеше аяғы баҫмаған түбәләрҙә бөркөттәр бала сығара. Улар йыш ҡына саңҡ-саңҡ итеп ауыл өҫтөнән осоп үтәләр. Ана шул бөркөттәр инде бынан бик күп йылдар әүәл ауылға исем биргәндәр: Бөркөтлө.

## КҮКРӘКТАУҘАҒЫ ӘҢГӘМӘ

Ҡылыскүл эргәһендәге бейек түбәне Күкрәктау тип йөрөтәләр. Уның төньяҡ битләүен ҡуйы ҡарағай урманы ҡаплаған, ә көньяҡ битләүе тап-таҡыр сиҙәмлек. Бер ҡараһаң, ул яртылаш сәсе алынған малай башына оҡшап ҡуя. Был яҡта ул шулай: ағастар тауҙарҙың төньяҡ итәктәренә һыйынып үҫәләр. Әйтерһең, улар тауҙарҙы һалҡын елдәрҙән ышыҡлар өсөн шулай итәләр.

Күкрәктау башына менеп ҡараһаң, күк сите әллә ҡайҙа алыҫҡа күсеп китә. Түбәндә Яйыҡ буйына ултырған Тирмә ауылының йорттары умарталыҡтағы умарталар саҡлы ғына күренә. Ә Урал итәгендә көтөүселәр яҡҡан усаҡтың төтөнө Шәрифулла төрөпкәһенән сыҡҡан төтөн хәтле генә. Тик әллә ҡайҙа ятҡан Кирәмәт кенә аяҙ көндәрҙә ҡараған һайын яҡынайған һымаҡ күренә. Тулҡын-тулҡын булып күгәреп ятҡан бүтән түбәләр араһында уның

ғына башы ҡояшта ялтырап ағарып тора. Йәйге селләгә тиклем унда ҡар ята.

Кирәмәт башына менеү тураһында күп малайҙар хыяллана. Ләкин унда менеү өсөн ҡара урмандар, текә ҡаялар, тәрән соҡорҙар аша уралып-уралып киткән тар, хәтәр һуҡмаҡ менән бер көн, бер төн барырға кәрәк. Ирмен тигән кеше Кирәмәткә менмәй ҡалмаç, әлбиттә.

Ә хәҙергә Күкрәктауҙың көньяҡ битләүендә Шәрифулланың һарыҡтары керт-керт үлән ашап йөрөй. Тау башында эреле-ваҡлы биш кеше ултыра. Һары мыйыҡлы, ас яңаҡлы Шәрифулла ағай үҙе инде. Ә ҡалған дүртеһе тураһында һеҙҙең хатта ишеткәнегеҙ ҙә юҡтыр. Ғәжәп тә түгел. Уларҙың әлегә һис ни менән дан ҡаҙанғандары юҡ шул. Өсөһө кисә генә төрлө-төрлө билдәләр менән бишенсе класты тамамлап сыҡты. Тәртип яғы ла ал да гөл генә булманы. Шулай ҙа ҡойроҡ-фәлән эйәрмәне.

Ыçмала төçлө ҡара ҡуйы сәсле, ҡылыс танаулы, сандыр малай Ғабдулла исемле. Уның сәсенә ҡулыңды тейҙерһәң, бармаҡтарың сатнап йәбешер һымаҡ. Йәмшек танаулы, табаҡ битле йыуаны — Вәзир. Һыуыҡта ла, эçелә лә уның ике бит алмаһы гел ҡыҙарып янып тора. Вәзирҙең күҙҙәрен сылт-сылт йома торған гәҙәте бар. Бер саҡ яңы килгән уҡытыусы апай, үсекләшә тип уйлап, ошо ҡылығы өсөн уны кластан да ҡыуып сығарҙы. Үҙе шундай булһа ла рогатканан һәләк мәргән ата ул. Өсөнсөһө — Бөркөтлөлә берҙән-бер ерән сәсле, һипкелле малай — Айҙар. Уның «Ҡыр кәзәһе» тигән ҡушаматы ла бар. Шәп йүгергән өсөн шулай тип йөрөтәләр. Дүртенсеһе саҡ ҡына ситтәрәк ултыра. Уның әле етеһе лә тулмаған. Сысҡан ҡойроғо кеүек кенә толомона матур ҡыҙыл таçма ҡушып үргән. Исеме лә матур уның — Гөлнур. Тик алғы тештәре генә юҡ. Теш булмағас, ауыҙында һис кенә һүҙ тормай.

Шәрифулла ағай бик серле тауыш менән нимә



тураһындалыр әңгәмә һөйләй. Ҡалған дүртеһе тын да алмай тыңлап ултыра. Байыр яҡҡа тәгәрәгән ҡояштың һарғылт нурҙары Шәрифулланың ыҫлапған мыйыҡ остарына төшөп йымылдайҙар. Йымылдайҙар ҙа уның аҫҡы ирененә һикереп төшәләр. Шуға күрә уның ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙе ниндәйҙер бер яңы серҙе аса һымаҡ.

Нимә һөйләй икән ул? Әйҙәгеҙ, ҡолаҡ һалып ҡарайыҡ.

— ...Ҡирәмәт башына менеү — бөркөт осор бейеклеккә күтәрелеү тигән һүҙ ул. Төндәрен уның өҫтөндә,— ти Шәрифулла,— усаҡ тирәһендә әйләнгән күбәләктәр төҫлө, йондоҙҙар һикерешеп уйнай. Улар түбән үк төшәләр — үрел дә тот үҙҙәрен! Ҡайһы бер үтә шуҡтары, яңылыш ҡаяға һуғылып, селпәрәмә лә киләләр. Ана шуны инде йондоҙ атылыу тиҙәр.

Әммә Ҡирәмәттең ҙур хәсрәте бар. Уның башындағы кескәй генә күлдә әүәл заман алтын-көмөш балыҡтар мыжғып торған. Бәлки, йондоҙҙар шулар менән шаярыр өсөн тау түбәһенә төшкәндәрҙер ҙә. Балыҡтарҙың күптән инде заты ҡороған, ә йондоҙҙар иҫке ғәҙәттәрен һаман да ташламағандар. Балыҡтарҙы бер яман кеше һәләк иткән. Ул күлгә бер генә суртан ебәргән. Шул суртан аҙмы-күпме ғүмер үтеүгә алтын-көмөш балыҡтарҙы йотоп бөтөргән. Тау быға ҡайғырған. Шул ҡайғынан түбәһендәге күле лә кибә башлаған. Ул кибеп бөтһә, Ҡирәмәт дөм-һуҡыр булып ҡаласаҡ. Ҡояш яҡтыһын да, болоттар аҡҡанын да, йондоҙҙар йымылдауын да күрмәйәсәк. Теге ҡомһоҙ суртан да дөмөгөүсе дөмөккән, тик күлдәге йән эйәләрен бөтөрөп дөмөккән.

Әгәр батыр егеттәр табылып, беҙҙең Ҡылыстағы төҫлө алтын-көмөш балыҡтарҙы шунда илтеп ебәрмәһәләр, ул күл кибәсәк. Ҡирәмәт хәсрәтенән ишелеп төшәсәк. Көндәрҙән бер көнде анау аҡ нур сәсеп торған бейек тау урынында бушлыҡ тороп

ҡалһа, бик күңелһеҙ буласаҡ. Шулай түгелме ни, егеттәр?

Егеттәр өндәшмәне.

## БАШЛЫҠ ҺАЙЛАУ

Ҡояш алыҫтағы урманға барып төртөлгәндә, Шәрифулла һарыҡтарын фермаға табан ҡыуып китте. Малайҙар ҙа ҡайтыр яҡҡа ыңғайланы. Башлап Вәзир өндәште:

— Кирәмәттең хәле мөшкөл икән...

— Бер суртан арҡаһында... — тип ҡушылды Айҙар.

— Суртан түгел, бер яман кеше арҡаһында,— тип төҙәтте Ғабдулла.— Кирәмәтте был хәлдә ҡалдырырға ярамай.

— Күп итеп ыуылдырыҡ йыяйыҡ та,— тип кәңәш бирҙе Вәзир,— илтеп һалайыҡ. Балыҡ ул ыуылдырыҡтан ярала.

Айҙар уны ҡырт киҫте:

— Ыуылдырыҡ түгел, тере балыҡ ебәрергә кәрәк!

— Ҡыҙыл ыуылдырыҡ магазинда ла бар,— тип хәбәр итте Гөлнур.

Малайҙар бер-береһенә ҡарашып алдылар. Шундай ҙур эш тураһында кәңәш барғанда был «ике ҡолаҡтың» артыҡ булыуы һәр кемгә асыҡ ине. Ҡарышырға урын ҡалдырмаҫлыҡ итеп, Айҙар һеңлеһенә бойороҡ бирҙе:

— Ыҫҡын бынан!

Ләкин Гөлнур ҡарышты:

— Ыҫҡынмайым.

— Шыл тиҙәр һиңә!

— Шылмайым, үҙең шыл.

Айҙар ҡаты бойороҡто ҡапыл йомшаҡ вәғәҙәгә алмаштырҙы:

— Тыңлаһаң, турғай балаһы тотоп бирермен, һылыуым, хатта икене.

— Антмы?

— Ант!

Гөлнур шунда уҡ ауыл яғына тороп йүгерҙе. Сыбар күлдәге генә елберләп ҡалды.

Беҙҙең яҡта кешеләр етди нәмә тураһында аяк өҫтө баҫып һөйләшмәйҙәр. Аҡылды ултырып йыялар. Малайҙар йәшел үлән өҫтөнә аҡыл йыйырға ултырҙылар.

«Ҡирәмәтте ҡотҡарырғамы, юҡмы?»— тигән һорауҙы ҡабатлауҙың кәрәге юҡ ине. Ул һис шикһеҙ ҡотҡарылырға тейеш. Ә ҡотҡарыу юлдары тураһында фекер төрлөсәрәк булды. Айҙар колхоздың балыҡсылар бригадаһына барып ярҙам һорарға кәңәш итте. Вәзир уны үсекләргә үк керешге:

— Ярҙам, ярҙам, имеш... Бар, бөтә ауылға сығып ҡысҡыр, ярҙам һора. Бахыр.— Ул теш араһынан серт итеп төкөрөп ҡуйҙы.

— Башта уҡ ант итәйек,— тине Ғабдулла,— был — сер. Өндә лә, төштә лә, аҫһалар ҙа, киҫһәләр ҙә серҙе сисмәҫтән булһын. Кем дә кем телен тыя алмай, ул һатлыҡ йән тип аталасаҡ. Антмы?

Үҙе ҡуш ҡулын маңлайына ҡуйып ант итте:

— Ант!

Уның артынан Вәзир менән Айҙар ҡабатланы:

— Ант!

— Ант!

— Ыуылдырыҡлыһын һайлап ҡына беҙгә дәү бер күнәк балыҡ тоторға кәрәк,— тине Ғабдулла.

Вәзир һикереп үк торҙо:

— Нийә уны тотоп торорға? Мин Ҡылыстағы балыҡсыларҙың балығы ҡайҙа торғанын беләм. Эңер төшкәс, бер түгел, ике күнәк сәлдереп килтерәм мин һеҙгә. Тик һалып торорға мурҙа ғына булһын.

— Батмай. Тура эште кәкре ҡул менән эшлә-

мәйҙәр! — Был һүҙҙәрҙе Ғабдулла әйтте. Ләкин улар баяғы Шәрифулла һүҙҙәре ине.

Вәзир ҙә тиҙ генә ҡойолоп төшмәне:

— Ҡалайыраҡ эре сирттергән була,— тине ул, һуҙа биреп,— әйтерһең, башлыҡ...

— Малайҙар! — тип ҡысҡырҙы Айҙар.— Беҙгә, ысынлап та, бер башлыҡ кәрәк. Кем башлыҡ була?

Ҡалған икәү, йәнәһе, төптән уйлаған булып, байтаҡ ҡына өндәшмәй торҙо. Сөнки кәңәш ваҡытында һәр һүҙгә тиҙ үк ҡушылып барыу ир кешегә килешмәй. Шулай ҙа Айҙар тәҡдимен иғтибарға алмау мөмкин түгел ине.

— Башлыҡты һайларға кәрәк,— тине һайлау-һайланыуҙарҙың рәтен яҡшы уҡ белгән Ғабдулла.

Шул саҡ Вәзир үҙенең барлы-юҡлы баҫалҡылығын бөтөнләй юғалтып ташланы. Ул, ҡыҫыҡ ҡара күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, ялбарырға тотондо.

— Малайҙар, ә, малайҙар, минең бер генә лә башлыҡ булғаным юҡ... — Хатта уның тауышы ҡалтыранды.— Айҙар ҡыш буйы класта староста булды, Ғабдулла стена газетаһына һайланды, район слетына барҙы. Бер мин генә...

Вәзирҙең уң күҙенән бер бөртөк йәш бына-бына тәгәрәп төшәм тигәндә, Ғабдулланың тау еле кеүек һалҡын тауышы уны тыйып ҡалды:

— Башлыҡты һорап алмайҙар!

Ләкин Вәзир өмөтөнән тиҙ генә баш тартманы. Ул үҙенсә шундай хәйләкәр юл уйлап тапты:

— Шыбаға! Кем өҫкә сыға, шул башлыҡ була.

Инде уға Айҙар ҡаршы төштө:

— Шыбағаны уйында ғына тоталар. Тапҡан уйын! Кем уҙарҙан ярышырға ла, уҙған кеше башлыҡ була.

Хәҙер Вәзир арҡа терәберәк һүҙ башланы:

— Харап икән. Йүгеректе башлыҡ итергә, имеш. «Башлыҡ» ул «аяҡ» һүҙенән түгел, «баш» һүҙенән алынған — белмәһәң, бел. Иң йәтеше уның

мәргәнлектә ярышыу. Кем мәргән ата, шул командир. Ана, Ғабдулла әйтһен!

Ғабдулла, әлбиттә, үҙ фекерен әйтеүҙән баш тартманы:

— Иң дөрөҫөн әйтәйемме?

— Әйт!

— Иң дөрөҫө — көрәштә көс һынашыу. Кем алышта еңә, шул башлыҡ.

Ғабдуллаға ҡаршы төшөү урынһыҙ булһа ла, малайҙар оҙаҡ бәхәсләштеләр. «Ҡара көс күрһәтеп кенә башлыҡ булыу замандары үткән инде»,— тигән өсөн Вәзирҙең саҡ-саҡ ҡына яңағына эләкмәне. Шулай ҙа, аҙаҡ килеп, ғәҙеллек еңде. Өсөһөнөң дә һүҙе һүҙ булды.

Башта малайҙар үҙҙәре ултырған ерҙән ауыл ситендәге яңғыҙ ҡарағасҡа тиклем йүгереп уҙышырға булдылар. Өсөһө лә, балаҡтарын төрөп, Айҙар таяҡ менән һыҙып билдәләгән һыҙыҡҡа баҫтылар.

Вәзир команда бирҙе:

— Раз, два, пли!

Йәйәнән ысҡынған уҡ шикелле, Айҙар шунда уҡ атлығып алға сыҡты. Их, йүгерә лә һуң! Табандары ергә лә теймәй, тик үксәләре генә алмаш-тилмәш ялтырап бара. Байтаҡ ара Ғабдулла ла унан артыҡ ҡалышманы. Вәзир, инәһенә әйәрер-әйәрмәҫ барған ялҡау ҡолон һымаҡ, артта уҡ тороп ҡалды. Уның Айҙарға асыуы килде: «Ерән шайтан! — тине ул эсенән.— Ботон таш менән бәреп һындыраһыңмы ни? Һөрләгеп тә китмәй бит, исмаһам!» Айҙарҙың һөрләгергә самаһы юҡ ине. Ул Ғабдулланы дилбегә буйы артта ҡалдырып, ҡарағасты килеп ҡосаҡланы. Ғабдулла икенсе урынды алды.

Ярты юлға еткәс, Вәзир лап итеп ергә ултырҙы. Уң аяғын күтәреп, нимәлер соҡонорға тотондо. Күрәһең, табанына сүп кергәндер. Бер аҙҙан ул, аҡһай биреп, иптәштәрен ҡыуып етте.

— Ниңә шул тиклем йән-фарман сабаһың, аяҡтарыңды ҡыҙғаныр инең саҡ ҡына,— тип көлдө унан Айҙар.

— Аяғыма сүп керҙе,— тине Вәзир.— Мине ярышта ҡатнашмаған тип иҫәпләгеҙ!

Вәзирҙең аяҡ табанына, белгестәрсә ентекләп, тикшереү үткәрҙеләр. Ләкин унда былтырғы яраларҙың йөйҙәренән башҡа телгә алырлыҡ һис нәмә табылманы. Вәзир, бәхәскә инмәй генә, үҙенең еңелеү оятын күтәрергә мәжбүр булды.

Эште оҙаҡҡа һуҙмай, ярыштың яңы төрө башланды. Тәүҙә өсөһө лә һәр саҡ янда йөрөй торған ҡоралдарын — рогаткаларын салбар кеҫәләренән һурып сығарҙылар. Бер тауыштан ярыштың шарттары раҫланды. Ҡарағастың түбәндә генә һерәйеп торған ҡоро ботағына Айҙарҙың сигелгән түбәтәйен ҡуйҙылар. Ҡарағастан утыҙ аҙым үлсәп, тояҡ ҡаҙанылар. Ошонан тороп атырға тейештәр. Кеҫәләрҙә һәр саҡ йөрөй торған запастан иң йомро, иң шыма өсәр таш алдылар. Өс атыуҙа түбәтәйгә кем күберәк тейҙерә, тимәк, шул ота. Сиратты алфавит буйынса билдәләнеләр. Беренсе булып Айҙар атты. Тәүге таш выжлап осоп китте, ләкин ҡайҙа барып тейгәнен берәү ҙә күрмәне. Икенсеһе шап итеп ҡарағастың үҙенә һуғылды. Өсөнсөһөн Айҙар бик оҙаҡ тоҫҡаны. Инде быныһы түбәтәйҙе осороп алып китергә тейеш ине. Ләкин таш үҙ юлына китте, түбәтәй ҡымшанмай тора бирҙе.

Икенсе булып майҙанға Вәзир сыҡты. Башта ул бик етди ҡиәфәт менән бер талай сәпкә ҡарап торҙо. Ашыҡмай ғына рогаткаһын ҡорҙо. Бына ул тоҫҡай башланы. Тап шул ваҡытта уның йәлпәк танауына бер сәрәкәй килеп ҡунды. Ләкин Вәзирҙең уға иҫе китмәне. Быны күреп торған Айҙарҙың эсе бошто: «Ҡурҡаҡ һин, сәрәкәй,— тип әрләне ул эсенән теге оҙон моронло.— Танауына ҡунғансы, күҙенә килеп инһәң, ни ерең кәмер ине, йүнһеҙ...

Етмәһә, минең сигелгән түбәтәйгә ата». Айҙар һуҡранып та бөтә алманы, түбәтәй осоп та китте.

— Бер ҡоймаҡты майланыҡ,— тине Вәзир эре генә. Ғабдулла йүгереп барып түбәтәйҙе кире урынына ҡуйҙы. Икенсе атыуҙа түбәтәй, йәмшәйеп, тағы ла килеп төштө. Был юлы Айҙарҙың башы сатнап китте. Таш, әйтерһең, уның түбәтәйенә түгел, маңлайына килеп тейҙе. Вәзир үҙенекен ҡабатлай бирҙе:

— Ике ҡоймаҡты майланыҡ!

Өсөнсө атыу бәхәсле булып сыҡты. Түбәтәй төшөүен төштө, ләкин ул ботаҡ һелкенеүҙән генә төштө. Таш был юлы түбәтәйгә түгел, ботаҡҡа тейгәйне. Вәзир тағы ла тантаналыраҡ итеп йәнә ҡысҡырған булды:

— Өс ҡоймаҡты майланыҡ!

— Майламайыраҡ тор әле...— тине Айҙар, эстән һөйөнөп,— майың етмәҫ!

— Күҙең ҡыҙамы? Эсең әрнейме? — Өсөнсө атыуҙың буш булыуын Вәзир үҙе лә белә ине. Ләкин маһайған йүгеректе үсекләгеһе килде уның.— Бына шулай атырға кәрәк, Айҙар мырҙам,— тип кәпрәйҙе ул.— Был һиңә тыр-мыр йүгересү түгел.

— Шул тиклем маҡтаныуҙан нисек телдәре талмай,— тип бошондо Ғабдулла.— Вәзирҙең өсөнсө ташы барыбер иҫәпләнмәй. Харамлашма ла!

Вәзир ҙә артыҡ ныҡышманы. Сөнки ул Ғабдулланың уҙа алмаҫын яҡшы белә ине. Ысынлап та, Ғабдулла, өс атыуҙан бары бер генә тейҙереп, икенсе урынға сыҡты.

Яңғыҙ ҡарағастың күләгәһе Вәзирҙәрҙең картуф баҡсаһына барып еткәндә, көрәш майҙаны асылды. Шыбаға буйынса, тәүҙә Вәзир менән Айҙар, устарына төкөрөп, ҡара-ҡаршы килеп баҫтылар.

— Алыш бармы, енеш бармы?— тине Айҙар.

— Алыш та бар, енеш тә бар! — тип, Вәзир тағы бер тапҡыр усына төкөрҙө.

Һабантуй майҙанындағы көрәшселәргә оҡшатып, улар яурынға яурын һуғып алдылар. Шунан һуң ғына, бер-береһенең күлдәген арттан бороп тотоп, билдән алыштылар. Улар, орсоҡ кеүек әйләнеп, байтаҡ йөрөнөләр, икеһе лә мышнап төштө. Ләкин берәү ҙә бил бирмәне. Малайҙарҙың көс бер сама булһа ла, Айҙар кесҡә кеүек ауыр Вәзирҙе күтәреп сөйөргә иҫәп тотмай ине. Ул бер нисә тапҡыр, үҙе ҡырын йығылып, Вәзирҙе баш аша осорорға маташып ҡараны, әммә теге гөрҫ итеп уның өҫтөнә ауып торҙо. Хатта бер ваҡыт Айҙарҙың үпкәһе боғаҙына килгәндәй булды.



Алыш тауышһыҙ-тынһыҙ дауам итте. Аяҡ салыу кеүек харамлашыуға бирәү ҙә бармаһы. Бер саҡ иҫләмәгәндә генә Вәзир Айҙарҙы бөрөп алды ла, билен өҙөрҙәй ҡыҫып, күкрәгенә күтәрҙе. Айҙарҙың яҙғы себешкенәп яңы ғына ҡотолоп килгән аяҡтары ерҙән өҙөлдө. Улар, таяныс эҙләгән шикелле, тыбырсынырға тотондолар, тик таяныс таба алманылар. Вәзир, ҡырын йығыла бирел, оҙонса буйлы ҡаҡса Айҙарҙы баш аша ырғытты. Шул ваҡыт нимәлер пыр-р-р итеп йыртылып китте.

Тәгәрәп ятҡан Айҙарҙың ике усында Вәзир өҫтөндәге зәңгәр күлдәктең ике итәге ине. Хужа өҫтөндә бары ике еңе менән яғаһы ғына эленеп ҡалған. Вәзирҙең ғәҙәттән тыш батыр ҡиәфәтен башта күргән Ғабдулла ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Ҡабырғаһы менән осло ташҡа барып төшкән Айҙар, ауыртыныуын онотоп, Ғабдуллаға ҡушылды:

— Юлбарыҫ тиреһе ябынған баһадир! Ха-ха-ха!

Әлегә бер нәмә лә аңламаған Вәзир, битендәге тирен һөртмәксе булып, күлдәк итәген ҡапшаны. Ләкин ҡулы яланғас ҡорһағына тейҙе. Ул бары шунда ғына Айҙар ҡулындағы сепрәктәрҙең ҡайҙан йолҡоп алынғанын төшөндө.

Вәзир бына хәҙер йә ҡысҡырып илар, йә Айҙар менән һуғыша башлар тип көтәһегеҙҙер, бәлки. Көтмәгеҙ, көтөүегеҙ бушҡа сығасаҡ. Вәзир донъяның ваҡ-төйәгенә иҫе китеп бара торған малай түгел. Йәнә шуны ла әйтеп үтергә кәрәк. Ҡейем-һалым һандығы уның бөтөнләй үк буш та түгел. Өйҙә тағы бер күлдәге бар. Тик бына төҫөн генә хәтерләүе ҡыйын. Дөрөҫөрәге, уның төҫө юҡ. Ҡөн ашаған.

Шулай ҙа «юлбарыҫ тиреһе ябынған баһадир» иптәштәренә ҡушылып көлмәне. Ниңәлер көлгөһө килмәне. Танауын йыйыра бирел, ғорур ғына әйтеп ҡуйҙы:

— Баш һау булһа, мал табылыр әле.— Был саҡ ул үҙендә дейеүҙе еңерлек көс һиҙҙе. Автомобиль

тәгәрмәсенә тын өргән шикелле, кемдер уның беләктәренә көс өрөп тултыра, уның мускулдары ҡабарып тулыша ла таш булып ҡата, имеш.

Көрәш әле бөтмәгәйне. Вәзир Ғабдулла ҡаршыһына килеп баҫты:

— Алыш бармы, һалыш бармы?

— Алыш та бар, һалыш та бар!

Сәмләнеүҙең сигенә еткән Вәзир йән асыуы менән Ғабдулланың салбар ҡайышынан эләктереп алды. Ләкин Ғабдулла көрәште ҡабул итмәне. Сөнки «дошмандың» өҫтөндә күлдәге лә, билендә ҡайышы ла юҡ ине. Етмәһә, салбары ла өлтөрәп кенә тора. Ҡыҫҡаһы, уның тотонор нәмәһе юҡ ине. Айҙар үҙ ҡайышын сисеп Вәзиргә бирҙе. Баштарын сайҡайсайҡай һөҙөшөргә килгән йәш үгеҙҙәр кеүек ғәйрәтләнеп, малайҙар бер-береһенә ташландылар. Алыш был юлы баяғынан да яманыраҡ барҙы. Хәйләкәр Вәзир, бил бирмәҫкә тырышып, осаһын һуҙып, гел эйелеп йөрөнө. Ул башта Ғабдулланың хәлен бөтөрөргә иҫәп тотто. Ләкин беше имән кеүек Ғабдулла тиҙ генә әлһерәп төшә торғандарҙан түгел ине. Ул Вәзирҙең хәйләһенә ирек ҡуйҙы. Бара торғас, улар алышҡан ер, үләне тапалып, тап-таҡыр булып ҡалды.

Үҙәнгә һалҡынса шыйыҡ эңер төшә башланы. Ә «батырҙар» йән-фарман килеп һаман алыша бирҙе. Вәзирҙең итләс арҡаһына бөрсөк-бөрсөк тир бәреп сыҡты. Ә Ғабдулланың күлдәгендә әле дым күренмәй ине. «Уңған аттың тире сыҡҡансы, ялҡау аттың йәне сығыр»,— тигәндәре ошо булалыр инде.

Вәзир көйөнә йөрөп, Ғабдулла ялҡыуҙың сигенә сыҡты. Ул, ҡапыл теҙләнеп, Вәзирҙең күкрәк аҫтына инде. Күҙ асып йомғансы, тегене яурынына алды ла зырылдатып әйләнергә тотондо. Әйләнеп-әйләнеп йөрөнө лә, үҙе йығылып, Вәзирҙе баш аша тәгәрәтеп ебәрҙе. Оҙаҡ барған ҡаты алыш шулай кинәт кенә тамам булды.

Нимә тип былай көс һынашыуҙарын малайҙар онотоп та өлгөргәйне инде. Арала иң зирәк иҫәпләнгән Айҙар, беренсе булып, бәхәстең башын хәтергә төшөрҙө.

— Һайлауҙар бөттө, — тине ул. — Башлыҡҡа суҡмарҙы тапшырырға ваҡыттыр инде.

Дүрт күҙ берсә Ғабдуллаға төбәлде. Иң күп отош, әлбиттә, уның яғында ине. Хәтер ҡалыуҙың йәки үс һаҡлауҙың нимә икәнен белмәй торған Вәзир тәү башлап Ғабдулла алдына килеп баҫты:

— Теләһәң утҡа, теләһәң һыуға алып ин! Беҙ һинең тоғро юлдаштарың.

— Малайҙар, — тине Ғабдулла, — әкиәттә лә бит батырҙар өсәү булған: береһе йүгерек, береһе мәргән, береһе көрәшсе. Ҡалай һәйбәт булып сыҡты.

— Юҡ инде, иптәшкәй, баш бирәү генә була. Һин — Башлыҡ. Һиңә — ура! — Айҙар тауҙарҙы яңғыратып һөрән һалды.

Башлыҡҡа хас етди тауыш менән Ғабдулла үҙенең беренсе фарманын халыҡҡа иғлан итте:

— Кирәмәтте ҡотҡарыу өсөн төҙөлгән отрядҡа «Өс таған» тип исем ҡушырға. Ризамы?

— Риза. Артистар бейей торған шундай бейеү ҙә бар хатта, — тип өҫтәне Вәзир. Айҙар баш ҡына ҡаҡты.

Ошо тарихи фарманды ҡабул иткәндән һуң, малайҙар ҡосаҡлашып ауыл яғына атланылар. «Өс таған» был мәлдә үҙен мәңге ҡаҡшамаҫлыҡ итеп һиҙә ине.

## ВӘЗИРҘЕҢ БЕРЕНСЕ ҺӘЛӘКӘТЕ

Ун ҡулы менән Башлыҡты ҡосаҡлап барғанда, мәргәндең күңеле үҫеп китте. Ун ике йәшкә тиклем башлыҡ булмай йәшәгән икән, бынан һуң да йәшәр. Бына ниндәй кәрәкле кеше ул!

Вәзирҙең кемгәләр яҡшылыҡ эшләгеһе, кемдәләр ҡыуандырғыһы килде. Ул салбарының һул кеҫәһендәге һалҡын ғына тос нәмәне ҡапшап ҡараны.

— Малайҙар, ә, малайҙар, туҡтағыҙ әле,— тине ул.— Башлыҡҡа ҡоралһыҙ йөрөү килешмәҫ. Мә, Ғабдулла, ал.— Ул кеҫәһенән һөйәк һаплы боронғо бәкс сығарып Ғабдуллаға һуҙҙы.

Башлыҡ менән йүгеректең дүрт күҙе һигеҙ булды. Бындай затлы нәмәне улар беренсе тапҡыр күрәләр ине.

— Ҡайҙан ҡулға төшөрҙөң быны?

— Һорашып торма, биргәндә ал.

Ләкин Башлыҡ бүләкте алырға ашыҡманы. Бәке оҡшаны уға, бик оҡшаны. Тик: «Был нәмә Вәзир ҡулына яҙып-яңылышып килеп инмәнеме икән»,— тигән шик уны тыйып ҡалды. Сөнки мәргән ҡулына ундай малдар кереп сыҡҡылай ине шул.

— Ҡайҙан алдың, дөрөҫөн әйт. Юғиһә бәкеңә бармаҡ осомдо ла тейҙермәйем.

— Дөрөҫө ни инде уның... Биргәс, ал да ҡуй.

— Ҡайҙан алдың тиҙәр һиңә?

— Ҡайҙан тип ни... Дөрөҫө генә...— Вәзир ҡапыл төйөлөп ҡалды.

— Нимә, дөрөҫө генә?

— Дөрөҫөн генә әйткәндә, бая мин уны Шәрифулланың сумкаһынан сәлдерҙем. Ниңә оҡшамаймы ни?— Был ваҡыт Вәзир үҙенең яҙа атҡанын һиҙеп ҡалғайны инде.

— Урланыңмы? — Башлыҡ ике юлдашын ике яҡҡа этәреп ебәрҙе. Күҙҙәренән уның уҫал осҡондар сәсрәп сыҡты.— Урланыңмы, эт ҡайышы?

— Урламаным, сәлдерҙем,— тип аҡланды Вәзир,— һабы күренеп тора ине.

— Ух, бәке ҡарағы! — Ғабдулла уға бер ҡунып та төштө. Икенсе һелтәгәндә уның ҡулын Айҙар тотоп ҡалды.

— Ҡулыңды бысратма шуға һуғып,— тине ул.

Башлыҡ шунда уҡ үҙенең икенсе фарманын иғлан итте:

— Көтөүсе Шәрифулланың һөйәк һаплы бәкеһен урлаған өсөн, ҡараҡ Вәзирҙе «Өс тағандан» сығарып ташларға. Бынан һуң уға ҡул бирмәҫкә, һүҙ ҡушмаҫҡа. Мәсхәрә!

— Ҡараҡҡа мәсхәрә! — тип ҡабатланы Айҙар.

Вәзир, үҙ хәленең бөтә әшәкелеген аңлап, башын түбән эйҙе. Уның күҙҙәре улән төбөндәге үҙенең бәләкәс кенә өңөнән имгәкләп сығып килгән ҡуңыҙға туҡталды. Ҡуңыҙ тишектән сыҡҡас, тирә-яҡҡа һынаулы ҡараш ташлағандай, саҡ ҡына туҡтап торҙо ла үҙ юлына китеп барҙы. Уның эштәре Вәзирҙекенә ҡарағанда шәберәк ине.

Мәргән өҫтөндәге зәңгәр сәләмәләрҙе киске һалҡынса ел тарткылай. Буй-буй ҡара эҙ ҡалдырып, маңлайынан тир аға, күҙҙәре гәҙәттәгенән дә йышырак сылтлап йомола. Тик иҙеүендәге ҙур аҡ төймә генә, һис нәмә булмағандай, үҙ урынында тыныс ултыра. Был минутта Вәзирҙәге берҙән-бер аҡ тап ана шул төймә ине. Ошо мәлдә ситтән генә берәй кеше ҡарап торһа, ул былай тип әйтер ине: «Ер йөҙөндә хәҙер иң ҡайғылы кеше — Вәзир. Ҡыҙғанығыҙ уны, ғәфү итегеҙ»,— тиер ине. Ләкин мәргәндең әлекке иптәштәре уға ситтән генә ҡараманылар. Ҡыҙғаныу, ғәфү итеү кеүек йомшаҡлыҡтарға улар күңелендә урын ҡалмағайны.

Был кистә «Өс таған» буйынса өсөнсө фарман яңғыраны:

— Бәкене хәҙер үк хужаһына илтеп бирергә, Шәрифулланың аяғына йығылып, ғәфү үтенергә! Әгәр ҡарышһа, «ҡараҡ» тигән яманатты бөтә ауылға таратырға!

Башлыҡ икенсе фармандың аҙағын яңынан ҡабатланы:

— Ҡараҡҡа ҡул бирмәҫкә, һүҙ ҡушмаҫҡа! Мәсхәрә!

— Мәсхәрә!

«Өс тағандың» икеһе, ҡапыл боролоп, ҡайтыр яҡҡа китте. Бер-ике аҙым атлағас, улар артҡа әйләнеп, Вәзиргә мыҫҡыллы ҡараш ташланылар һәм теш араһынан төкөрөп ҡуйҙылар.

Өсөнсө «таған» һерәйеп баҫып ҡалды. Оҙаҡ торҙо ул. Бөгөн донъя бөтһә, ул Башлыҡтың һуңғы фарманын, бәлки, үтәмәҫ тә ине. Ләкин иртәгә лә көн бар бит. Шуны уйлап, Вәзир туп-тура ферма яғына йүгерҙе. Шәрифулла, эшен бөтөрөп, ҡайтырға сыҡҡайны.

— Бына, ағай. Ҡүкрәктауҙа таптым...— тип шыуҙырҙы ул. Дөрөҫөн әйтеп, гәфү һорарға уның көсө етмәне.

— Вәт маладис, мырҙам! Ғәҙел егет икәнһең. Рәхмәт үҙеңә!

Ләкин бындай маҡтауҙар һәм рәхмәттәр «ғәҙел егетте» ҡыуандырманы. Сөнки был юлы бер рәхмәт Вәзирҙе мең бәләнән дә ҡотҡарасаҡ түгел ине [1].

## ӨЙҘӘ ЗАРЫҒЫП КӨТКӘНДӘР, АХЫРЫҺЫ

Хәҙер малайҙарҙың өй эстәренә күҙ һалайыҡ. Ҡемдән башлайыҡ икән? Башлыҡтан башлайыҡ. Юғиһә хәтере ҡалыр.

Ғабдулланың өй эсендә өс кеше. Әсәһе яҙ башында уҡ йәйләүгә күсеп китте. Ул һауынсы булып эшләй. Өйҙә улар өләсәһе Нәғимә инәй менән икәү генә ҡалдылар. Атаһы һуғыштан ҡайтманы, «гармунсы Мөхәммәт» тип, уны ауылда әле лә иҫкә алғылайҙар.

Мөхәммәт тураһындағы яман ҡағыҙ һуғыш бөтөргә ун-ун биш көн ҡалғас ҡына килде. Унда: «Ватан өсөн көрәштә батырҙарса һәләк булды»,— тип яҙылғайны. Әсәһе менән өләсәһе һыҡтап-һыҡтап бик оҙаҡ илапылар, унан һуң бөтөнләй шымып

[1] Боронғолар: «Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр»,— тигәндәр.

ҡалдылар. Оҙон көндәр буйына ауыҙ асып өндәшмәгән саҡтары булды. Ул ваҡытта Ғабдулланың етеһе лә тулмағайны. Шулай ҙа ул йортҡа ҡот осҡос бәлә килгәнен үҙенең бәләкәс кенә йөрәге менән аңланы һәм ололарға үҙ ҡайғыларын ҡайғыртырға ҡамасауламаны. Атаһының иҫке һырмаһын бөркәнеп, көндәр буйы ҡапҡа төбөндәге яҫы таш өҫтөндә ултырҙы. Йылы килде ул яҙ. Апрель бөтмәҫ борон уҡ үләндәр йәшәрҙе, ҡоштар һайрай башланы, күлдә аҡ сабаҡтар һикерешеп уйнаны. Тик урамдан үтеп-һүтеп йөрөүсе апайҙар ғына, Ғабдулла тураһына еткәс, уға тултырып ҡарайҙар ҙа, баштарын ситкә борон, бышылдайҙар: «Бахырҡай...» — тип ҡыҙғаналар. Ҡайһылары ең осо менән күҙҙәрен дә һөртөп алалар. Ғабдулла ул ваҡытта атайҙың кем икәнен һәм уның нимә кәрәклеген белеп еткермәй ине. Шулай ҙа бала күңеленә ауыр шом керҙе.

Бер аҙҙан һуң Мөхәммәттең «Батырлыҡ өсөн» тигән миҙалы килеп төштө. Иптәштәре ебәргән икән.

Бына алтынсы йыл инде Нәғимә инәй һәр кесаҙна көндө кис шул миҙалды аҡбур менән ялтыратып улының стеналағы берҙән-бер һүрәте аҫтына элеп ҡуя.

Ғабдулла ҡайтып ингәндә, Нәғимә инәй әлеге миҙалды ялтыратып ултыра ине. Ул ауыр көрһөнөп ҡуйҙы ла сиәнен шелтәләргә кереште:

— Атаһыҙ бала — йүгәнһеҙ ат шул инде. Бөтөнләй баш бирмәй башланыңсы. Төнгә саҡлы әллә ҡайҙа шайтан ҡыуып йөрөйһөң. Ана Яҡуптан саҡ ҡына өлгө алыр инең. Нисә ҡарама, өй тирәһендә урала. Ваҡытында ашаған, ваҡытында эскән. Өҫ-башы ҡыйып ҡарағыһыҙ. Ә һин шул Вәзирҙән тотам да ҡалмай эйәреп йөрөйһөң. Өҫ-башың ни эшләп бөткән?!

— Вәзир үҙе миңә эйәрә ул, эйәртеүсе булһа, — тип мығырланы Башлыҡ.

Нәғимә инәй әлегә тиклем ябай ғына малай иҫәпләнгән ейәненең «Өс тағанға» башлыҡ булыуын белмәй ине шул. Белһә, моғайын, башҡасараҡ һөйләшер ине. Ул һаман үҙенекен тылҡый бирҙе.

— Ана, Яҡуптан өлгө алыр инең...

— Ҡуй әле шул Яҡупты, өләсәй!

Яҡуп бөтә урамда иң йыуаш һәм тыңлаусан малай ине. Отҡорлоғо самалы булһа ла, ул дәрестә лә тырышлығы менән алдыра ине. Мәктәптә уҡытыусылар, өйҙә әсәйҙәр һәм өләсәйҙәр малайҙарҙы әрләгәндә йыш ҡына Яҡупты өлгө итеп ҡуялар. Өҙөшөп-тартышып кейемдәрен йыртһалар ҙа, ыҙғышып ауыҙ-морон ҡанатышһалар ҙа малайҙар гел шул бер һүҙҙе ишеттеләр. «Ана, Яҡуптан өлгө алыр инең, исмаһам...» Шуның арҡаһында Яҡупҡа «Өлгө Яҡуп» тигән ҡушамат үҙенән-үҙе йәбеште лә ҡуйҙы. Уны йыш ҡына ситкә тибәрҙеләр, хатта ҡаҡҡылап-һуҡҡылап та алғыланылар. Ләкин Яҡуп берәүгә лә ҡаршы өндәшмәне, ҡул күтәреп һуҡманы.

Ғабдуллаға эләккән шелтә шунан уҙманы. Өләсәһе өҫтәл яғына ишара яһаны. Унда быуы сығып торған бер туҫтаҡ тары бутҡаһы ултыра ине.

— Башта һәйбәтләп ҡулыңды йыуып ин,— тип бойорҙо Нәғимә инәй. Үҙе тағы ла ауыр көрһөнөп миҙалды улының һүрәте аҫтына элеп ҡуйҙы. Быға тиклем миҙалға Ғабдулланың бер ҙә иҫе китмәй ине. Бөгөн ул алдындағы ашын ашап бөтөргәнсе унан күҙен дә алманы. Электр яҡтыһында көмөш миҙал нур сәсеп тора ине.

Ни тиһәң дә, Башлыҡты өйҙә майлы бутҡа менән ҡаршыланылар. Ә Вәзирҙе Ҡорбанбикә еңгә, бөтә ауылды яңғыратып, янап ҡаршыланы. Ҡорбанбикә еңгәнең ҡылығы үтә ҡырҡыу шул. Әгәр һыйыры көтөүҙән ҡайтмаһа, урам буйлап һөрән һалып уҙа:

— Бүре лә быуып йыҡмай бит шул мәлғүнде! Бүре йыҡһа, Әжмәғол муллаға хәйерҙәр бирер инем!

Тауыҡтары картуф баҡсаһына инеп тибенә башлаһа, күрше тирә-яҡ йәнә Ҡорбанбикә еңгәнең әсе ҡарғышын ишетә:

— Үләт тә ҡырмай бит, исмаһам, шуларҙы! Көш! Үләт ҡырһа, йәндәрем тыныр ине! Кө-ө-ш!

Ҡайтып инер алдынан Вәзир зәңгәр күлдәктең ҡалдыҡ-боҫтоҡтарын сисеп ҡултығына ҡыҫтырғайны. Ул ҡапҡанан инеү менән, асыҡ тәҙрәнән әсәһенең сағыу тауышы яңғыраны.

— Вәзир, тим, малай аламаһы! Ҡайтып ҡына ин! Бәреп үлтерәм хәҙер, муйының һынғыры! Иомош ҡушһаң, елкә йоҡа, уйын тиһәң, донъяһын онота! Анау Яҡуптан өлгө алыр инең саҡ ҡына!

Ун ике йыллыҡ ғүмерендә янауҙарҙы күп ишеткән Вәзир был юлы ла, үҙенең күрәсәге алдында баш эйеп, яй ғына өйгә табан атланы. Ләкин шуны ла әйтергә кәрәк: Ҡорбанбикә еңгә, телгә уҫал булһа ла, Вәзиргә һис ҡасан ҡул күтәрмәне.

Элекке зәңгәр күлдәкте соландағы һандыҡ артына йәшереп, Вәзир өйгә инде. Атаһы ҡарауылға киткәйне. Һуғыштан бер аяҡһыҙ ҡайтҡан Сәмиғулла ҡарауылдан башҡа эшкә ярамай ине. Өс йәшкә кесе ҡустыһы Насип өҫтәл эргәһендә, стенаға һөйәлеп, йоҡлап ултыра. Уның ике урты бүлтәйеп сыҡҡан. Күрәһең, ул ауыҙындағы икмәген сәйнәп бөтөрмәйенсә ойоп киткән.

— Күлдәгеңде ҡайҙа иттең, йүнһеҙ?

— Мин быйыл йәй күлдәк кеймәҫкә булдым, әсәй. Тәнде сыныҡтырырға кәрәк,— тип Вәзир иплегенә яуап бирҙе.

— Сыныҡтырырға түгел, һине сыбыҡларға кәрәк! Күлдәгең ҡайҙа?

— Ул саҡ ҡына һүтелеп киткәйне, әсәй, мин уны соланда ҡалдырҙым.

— Ана, йөрө әйҙә, иҫәр Ғәбдрәфиҡ кеүек. Ыштаныңды ла һалып ташла...

— Миңә бит күкрәкте генә сыныҡтырырға кәрәк, әсәй.

Ҡорбанбикә еңгә, ҡоро һалам кеүек, дөрләп яна ла, ҡапыл һүнә лә инс. Был юлы ла уның ялҡыны оҙаҡҡа барманы.

— Ана, бүлтерек бәрәс, ултыр, аша,— тине ул, йомшара төшөп.

Айҙарҙы өйҙә иҫкә алыусы ла булманы. Туғыҙ бала араһында берәүҙең юҡлығын һиҙмәнеләр ҙә. Ул, аласыҡҡа инеп, көршәктәге ҡатыҡты күтәреп эсте лә бесәнлеккә, үҙ урынына, инеп ятты. Ятҡас та йоҡлап китте.

Вәзир, болдорға сығып, байтаҡ ҡына йондоҙҙарға ҡарап ултырҙы. Аралағы иң тоноҡ йондоҙ — уның йондоҙо һымаҡ тойолдо. Ниңә бер уға ғына бөтәһе лә тиҫкәре килеп тора икән? Ниңә?

Башлыҡты ла был төндө бик оҙаҡ йоҡо алманы. Бер тәрәүе серек булып сыҡҡан «Өс таған»ды аяҡҡа баҫтырырға кәрәк ине. Өсөнсө тәрәү кәрәк ине тағанға. Кемгә ышанырға? Кемгә таянырға?

## ӨСӨНСӨ ТЕРӘҮ

Ғабдулла йоҡонан уянғанда, өләсәһе өйҙә юҡ ине. Уның ҡарашы иң тәүҙә ҡаршы стеналағы йылтыр түңәрәккә төштө. Ул һикереп торҙо ла миҙалға үрелде. Ләкин ҡапыл тыйылып ҡалды. Сөнки Нәгимә инәй уға ҡағылырға берәүгә лә рөхсәт итмәй ине. Әсәһенең муйынсаһындағы иң ҙур тәңкәнән дә ләүерәк көмөш түңәрәктәге яҙыуҙы Ғабдулла яттан белә. Шулай ҙа уны бөгөн һәр ижегенә баҫым яһап, тағы бер ҡат ҡысҡырып уҡыны: «За от-ва-гу». Һәм малай ҡапыл был һүҙҙәрҙең оло мәғәнәһенә төшөнөп алды. Әлегә тиклем Ғабдулла уларҙың мәғәнәһе тураһында уйламағайны.

«Батырлыҡ өсөн!» Тимәк, уның атаһы батыр булған! Ниңә һуң уны «Мөхәммәт батыр» тип һөйләмәйҙәр? Күрәһең, белмәйҙәрҙер.

Әкиәттәге батыр үлһә, ул үҙенең ҡылыс-ҡалҡанын, уҡ-һаҙағын улына васыят иткән. Бәлки, Ғабдулланың атаһы ла: «Миҙалымды улыма бирегеҙ, төсөм итеп, күкрәгенә таҡһын»,— тигәндер. Моғайын, шулай иткәндер. Юғиһә ул миҙалды ебәреп тә тормаҫтар ине.

Ғабдулла атаһы мираҫын һаҡлыҡ менән генә алды ла күкрәгенең уң яғына таҡты. Стенаға беркетелеп ҡуйылған тутлы көҙгө ҡаршыһына килеп баҫты. Башлыҡ кешегә миҙал килешеп тора икән. Бынан һуң ул гел генә тағып йөрөтәсәк уны. Өләсәй менән килешеү әллә ни ҡыйын булмаясаҡ. Бер һуҡраныр ҙа бер бөтөр.

Миҙалын ялтыратып Ғабдулла урамға сыҡҡанда, ҡапҡа төбөндә тоғро юлдашы Айҙар ултыра ине. Күптән килгән булһа ла, өйгә инеп, Башлыҡты борсоманы. Ул әрһеҙ, сабырһыҙ малай түгел ине. Миҙалды күргәс тә Айҙарҙың артыҡ иҫе китмәне. Киреһенсә, атай кешенең миҙалын уйынсыҡ урынына тағып сығыуҙы ул килештереп етмәне. Ләкин, Башлыҡтың хәтерен һаҡлап, был турала өндәшмәҫ булды. Тик көлөмһөрәп былай тине:

— «Батырлыҡ өсөн» миҙалын һул яҡҡа, йөрәк тураһына тағалар...

Дуҫының шаҡ ҡатмауына аптыраған Ғабдулла миҙалды һүҙһеҙ генә һул яҡҡа күсереп таҡты. Айҙарға уның хатта бер аҙ асыуы ла килде. «Белмәгәне юҡ ошононң», — тип, әсенеп һуҡранып ҡуйҙы.

— Дөрөҫөн генә әйткәндә, Ҡирәмәт емерелә тип, Шәрифулла ағай арттыра. Ерле юҡҡа тау емерелмәй ул, ер тетрәмәһә...

— Нимә һин, «Өс тағанды» емерер өсөн, ҡотҡо таратаһыңмы?— тип ҡыҙып китте былай ҙа кәйефе ҡырылған Башлыҡ.— Шөрләйһеңме, ҡурҡаҡ?

— Мин ҡурҡаҡмы?

— Һин!

— Ә һин сәбәләнмә,— тине Айҙар тыныс ҡына.— Мин ситләтеп кенә атайымдан һораштым. Ки-



рәмәт башында, ысынлап та, күл бар, ти, тик балығы ғына юҡ, ти, балыҡһыҙ күл ул һуҡыр күҙ ише, ти. Белдеңме?

— Нимәне?

— Нимәне, нимәне? Беҙ шунда балыҡ ебәреп үрсетһәк, ҡалай һәйбәт буласаҡ. Күлдең эсенә йәп кереп китәсәк.

— Һин шулай тип атайыңа ла әйттеңме?

— Әйтте ти ана.

Тоҡтомалға дуҫына ҡаты бәрелгәне өсөн, Ғабдулла эстән үкенеп ҡуйҙы. Уның тауышы йомшаҡ, яғымлыға әйләнде.

— Беләһеңме, Айҙар, — тине ул, — Кирәмәт емерелмәһен дә, ти. Ә кешеләргә бер күл тултырып балыҡ үрсетеп бирһәк, ул да ярап ҡалыр. Иң тәүҙә беҙгә мурҙа үрергә кәрәк. Тотҡан балыҡты шунда һалырбыҙ. Ҡылыстың арғы башында һәләк йәтеш ҡамышлыҡ бар. Балыҡ унда илереп ҡаба.

— Мурҙаны мин уны һә тигәнсе үреп ташлайым,— тине Айҙар.

Малайҙар бөгөн үк Ҡылыстың арғы башындағы таллыҡҡа барып мурҙа үрергә булдылар. Ләкин «Өс тағандың» икегә ҡалыуы уларҙы һаман борсой ине әле. Эште боҙҙо бит тинтәк Вәзир. Нисек кенә булһа ла өсөнсө терәүҙе табырға кәрәк ине.

Малайҙар көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеп ултырғанда, Өлгә Яҡуп, ҡулына оҙон сыбыҡ тотоп, күл яғына ҡаҙҙар ҡыуып бара ине. Уны күргән Ғабдулла менән Айҙар бер-береһенә ҡарашып алды.

— Әй, Яҡуп, кил әле бында! — тип ҡысҡырҙы уға Айҙар.

— Ҡаҙҙар ҡыуамсы,— тине тегенеһе, үҙе ниндәйҙер меңкен йылмайыу менән йылмайҙы.

— Ҡаҙҙар юлды үҙҙәре лә беләләр. Кил тиҙәр бит һиңә!

Кеше саҡырғас, Яҡуп тыңламай булдыра алманы. Сыбығын һөйрәп, йүгереп килеп тә етте.

— Ултыр! — тип бойорҙо уға Башлыҡ. Яҡуп тубыҡланып ергә ултырҙы.— Һинең батыр булғың киләме?

— Килә лә... Нисек булырға һуң? — Яҡуп күҙҙәрен йылтыратып Ғабдулла күкрәгендәге миҙалға ҡарап алды. «Их, бәхетле кешеләр була бит...» тигәндәй, көрһөнөп ҡуйҙы.

Башлыҡ Яҡупты тағы бер ҡат баштан-аяҡ һынап тикшереп сыҡты. Ғабдулланың һынаулы үткер ҡарашын күргән Яҡуп, бөршәйеп, бәп-бәләкәс булып ҡалды. «Нимә эшләтерҙәр икән?»— тип тынын да алмай ултырҙы. Әммә шөрләүе бушҡа булды. Ғабдулла, үҙ тиңдәше менән һөйләшкәндәй, уға етди һәм тыныс тауыш менән мөрәжәғәт итте.

— Һинең, Яҡуп, Ҡукрәктауға менгәнең бармы?

— Ниңә, бар.

— Ағарып торған Ҡирәмәтте күргәнең бармы?

— Ниңә, бар.

— Ана шуның башында түңәрәк күл бар. Ә күлдә балыҡ юҡ.

— Ҡуй, балыҡһыҙ күл булмай ҙа ул.

— Була шул. Беҙ — «Өс таған» тигән отряд — шунда балыҡ ебәреп үрсетергә булдыҡ. Өсөнсө булып беҙгә ҡушылаһыңмы? Отрядтың башлығы мин.

— Ҡалай ирмәк! — Яҡуп көлөп үк ебәрҙе. Башлыҡ һорауын ҡабатланы:

— Ҡушылаһыңмы?

— Әсәйемдән һорап ҡарармын.

— Мәмәй һин, Яҡуп. Был сер. Белеп тор: аçһалар ҙа, киçһәләр ҙә, был турала һис кемгә әйтмәçкә! — Ғабдулла бурысты яйлап ҡына аңлатып бирҙе: — Башта күп итеп уылдырыҡлы балыҡ тотабыҙ ҙа мурҙаға йыябыҙ. Унан һуң күнәктәргә ярты-лаш һыу, ярты-лаш тере балыҡ һалып Кирәмәткә шылабыҙ. Һыу алыштырам тиһәң, юлда аҙым һайын шишмә. Ҡурҡыр булһаң, башта уҡ әйт!

— Әрләмәçтәрме һуң?

— Кемдәр?

— Әсәйҙәр.

— Әрләрҙәр. Бер әрләрҙәр ҙә бер туҡтарҙар. Ҙур эш башҡарған кешеләрҙе элек тә аңлап еткермәгәндәр.

«Өс таған» алдындағы маҡсаттың бөтә бөйөклөгөн Яҡуп та аңлап еткермәне, әлбиттә. Уны икенсе нәмә ҡыҙыҡһындырҙы. Гел ситкә тибәрелеп йөрөгән малайҙың үҙ тиңтерҙәре араһында булғыһы, бергә уйнағыһы, шаярғыһы килде. Шуға күрә ул, сер һаҡларға ант итеп, үҙе теләп «Өс таганга» инде. Башлыҡ уға йәнә шундай шарт ҡуйҙы:

— Өс көн эсендә үҙеңдең өлгөлөгөңдө бөтөр! Мәргән атырға, ағас башына үрмәләргә, ҡаянан ҡаяға һикерергә, һыуҙа йөҙөргә, ишкәк ишергә өйрән! Бөтәһе лә кәрәк буласаҡ.— Ғабдулла киçәтеп йәнә өçтәп ҡуйҙы.— Вәзиргә ҡул бирмәçкә!

— Ә ниңә?

— Бынһын хәҙергә белмәй торһаң да ярар.

— Ризамы шуларға? Антмы?

— Риза, ант! — тине «Өс тағандың» яңы терәүе. Иң һуңынан Башлыҡ тағы шундай киҫәтеү яһаны:

— Быларҙың көнө миңә ҡалған икән тип маһайма. Беҙ һине әҙәм итергә самалайбыҙ. Бел шуны.

— Ярай,— тип Яҡуп баш ҡаҡты.

Ошо сәғәттән алып ҙур сәйәхәткә әҙерлек башланды. Һөйләшеп килешеү буйынса, Ғабдулла менән Айҙар Ҡылыстың арғы башындағы таллыҡҡа мурҙа үрергә китергә булды. Ә Яҡуп, үҙенең өлгөләгән бөтөрөү өсөн, ауылда ҡалырға тейеш ине. Уға бирелгән өс көндөң тәүгеһе күптән башланғайны.

## ДАН КӘПӘС ТҮГЕЛ

Айҙар урамда тороп ҡалды. Ғабдулла, йүгереп, өйгә инеп китте. Бер ҡыйырсыҡ икмәк менән өләсәһенең һалма киҫә торған бысағын эләктереп болдорға сыҡҡас ҡына, Нәғимә инәй ҡайтып инде. Ғабдулла бысаҡты тиҙ генә артына йәшерҙе. Өләсәһе һиҙмәй ҙә ҡалды, ахырыһы. Ләкин сейәненең күкрәгендәге миҙалды ул шунда уҡ күрҙе. Уның йөрәген сәнсеү алды, быуындары таралды. Ләкин ул сәпсәләнмәне, ҡысҡырынманы. Ғабдулланың арҡаһынан йомшаҡ ҡына һөйҙө лә өйгә саҡырҙы:

— Әйҙә, улым, өйгә инәйек әле.

— Беҙ ни, өләсәй, Айҙар менән Ҡылыс башына...

— Хәҙер китерһегеҙ, Айҙар бәләкәс кенә сабыр итер.

Өйгә ингәс, Нәғимә инәй сейәнен эргәһенә ултыртты ла арҡаһынан тағы бер ҡат һөйөп алды.

— Миҙал килешеп тора тағы үҙеңә.

— Ысынлапмы, өләсәй?

— Өләсәйең бушты һөйләмәҫ. Бына һин, биш ҡыш һабаҡ уҡыған кеше, өләсәйеңә төшөндөрөп бирсе: миҙалды ни өсөн бирәләр?

— Батырлыҡ өсөн. Бында шулай тип яҙылған да, өләсәй. Русса.

— Ярай, быныһын аңлаттың, рәхмәт.

— Ә кемгә бирәләр уны?

— Батырҙарға.

Нәғимә инәй ейәненең күкрәгенә эйәге менән ишара яһаны. (Беҙҙең яҡта изге һаналған нәмәгә бармаҡ менән төртөп түгел, эйәк менән ымлап күрһәтәләр.)

— Ә быны кемгә биргәндәр?

— Беләһең дә инде, өләсәй... Атайыма.

— Шулай булғас, уны кем тағырға тейеш ине?

— Атайым да... Ул ҡайтманы ла баһа. Мин ни уны, өләсәй, атайымдың төҫө итеп кенә таҡҡайным.

Нәғимә инәй байтаҡ өндәшмәй торҙо. Ғәҙәтенсә, тәрән итеп күрһөндө. Бәлки, ул ҡасандыр ошолай ялан аяҡтарын урындыҡтан һәлендереп ултырған Мөхәммәтте иҫенә төшөргәндер. Ғабдулла атаһына оҡшағайны. Уның ҡылыҡтары, һөйләшеүе, тыйнаҡ йылмайыуы Мөхәммәттең бала сағын хәтерләтә. Нәғимә инәй ейәненә ҡарап берсә ҡыуана, берсә ҡайғылары яңырып, эсе өҙөлөп китә. Ғабдулла ла быны аңлай һәм шундай саҡтарҙа өләсәһенә тағы ла ягымлыраҡ булырға тырыша.

Нәғимә инәй өҙөлгән һүҙҙе ашыҡмай ғына йәнә ялғаны:

— Улай булғас, тыңла. Батыр үлһә, улына ҡылысы ҡала, мәргән үлһә, уҡ-һаҙағы ҡала. Кәрәк саҡта, ил ҡушҡанда, ата ҡоралын уландары ҡулға алғандар. Атанан мираҫ ҡалған һабан менән улдары ер һөрәләр. Уның сүкеше менән тимер сүкейҙәр, көрәге менән ер ҡаҙыйҙар. Атанан ҡалған көпөкәпәсте балалары кейә. Ана һинең башыңда ла атайың мәрхүмдең кәпәсе. Әммә атанан ҡалған даншөһрәт кәпәс түгел. Балалары уны алмаш-тилмәш кейеп йөрөй алмай. Мөрйәнән сыҡҡан төтөн донъяны йылытмаған кеүек, ата даны ла баланы биҙәмәй. Бына үҙең, атайыңа лайыҡлы булып, ил һоҡланыр-

лыҡ, кешеләр хайран ҡалырлыҡ эштәр башҡарһаң икән...

— Беҙ башҡарасаҡбыҙ, өләсәй. Күр ҙә тор бына. Үҙең дә шаҡ ҡатырһың хатта.

— Күрергә насип булһын,— Нәғимә инәй йәнә өҫтәп ҡуйҙы:— Үҙеңә оҡшаһа, тағып йөрө миҙалды әйтәм. Мин ҡаршы түгел.

Ғабдулла өндәшмәне. Күкрәгендәге миҙалды алды ла һүрәт аҫтына кире элеп ҡуйҙы. Шул саҡ урамда әсе итеп Айҙар һыҙғырып ебәрҙе. Хатта уның да сыҙамлығы бөттө, ахырыһы.

— Хәҙер бар инде,— тине Ғабдуллаға өләсәһе.— Бысаҡты юғалта күрмә берүк! — Һалма бысағына башҡа ваҡыт тотонорға рөхсәт итмәһә лә, был юлы ул сейәнсенә һүҙ әйтмәне. Бер ҡатарҙан ике нәмә менән уның күңелен төшөргөһө килмәгәндер инде.

— Ярай, өләсәй,— тине лә Ғабдулла атылып сығып китте.

Ейәне сығып киткәс, Нәғимә инәй миҙалды усына алып, бер талай ҡарап торҙо. Ең осо менән уны һаҡ ҡына һөртөп алды ла кире элеп ҡуйҙы.

## «ӨЛГӨЛӘР» ҠЫЙРАЛА БАШЛАНЫ

Өйгә ҡайтҡас, үҙенең өлгөләгән бөтөрөү тураһында Яҡуп байтаҡ баш ватты. Эште нимән башларға?

Кесе йәштән үк Яҡуп һәр аҙымын үлсәп атларға өйрәнгәйне. Ул үҙен һәр ваҡыт тар ғына баҫманан атлаған һымаҡ хис итте. Бына-бына яҙа баҫыр ҙа ҡолап төшөр кеүек булды. Сөнки әсә үҙенең берҙән-бер балаһын артыҡ һаҡлап, ҡәҙерләп үҫтерҙе.

Бәләкәс Яҡупҡа ерҙәге нәмәләр менән танышыу тотош «ярамайҙан» башланды. Болдорҙан ергә һикереп уйнарға ярамай, ҡойма башына менергә ярамай, таш ырғытырға ярамай, күрше Сабирҙарҙың

Алабайын һыйпап ҡарарға ярамай. Быларҙы уға әсәһе гел шулай тылҡып торҙо. Торған һайын «ярамайҙар» арта барҙы. Малайҙар менән урманға барырға ярамай — аҙашырһың, күлдә һыу керергә ярамай — батырһың; тауға менергә ярамай — ҡаянан йығылып төшөрһөң, йәй кәпәсеңде һалма — башыңа эҫе ҡабыр; яҙ туныңды һалма — тымау төшөр. Бына шундай «ярамайҙарҙың» осо ла, ҡырыйы ла булманы. Ә бит уларҙың бер сиге булырға тейеш ине.

Әсә улының әхлағы хаҡында ла күп ҡайғыртты. Тегенең менән уйнама, быныҡ менән дуҫ булма, тегенең өйгә саҡырма, быныҡ өйөнә барма. Тора-бара Яҡуп менән берәү ҙә аралашмаҫ булды. Әлегерәк тиҫтерҙәре уны йыш ҡына үсекләй, хатта еңел-елпе төрткөләп тә ала торғайнылар. Һуңыраҡ уға бөтөнләй иғтибар ҙа итмәй башланылар. Бармы Яҡуп донъяла, юҡмы — был бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай ине. Тик әсәйҙәр йәки өләсәйҙәр генә ғәҙәт буйынса уны үҙ балаларына һаман да өлгө итеп ҡуя бирҙеләр. Ләкин ҡаты башлы малайҙар Яҡуптан өлгө алырға теләмәнеләр.

Ғабдулла менән Айҙар үҙ эргәләренә саҡырғас, Яҡуп башта ғәжәпләнде, һуңынан ҡурҡты. Сөнки уны күптән инде берәү ҙә һанға һуҡмай ине. Килгәс, Яҡуп шуны төшөнөп алды: тимәк, әле тиҫтерҙәре унан бөтөнләй ҡул һелтәмәгәндәр икән.

Әммә берәүҙең бәхетһеҙлеге икенсегә ҡыуаныс килтергәнде ул белмәй ине. Вәзир шундай хурлыҡҡа төшмәгән булһа, Яҡуп һаман «өлгө» булып йөрөй бирер ине.

Бына хәҙер уның «өлгөлөгө» үҙенең һуңғы минуттарын кисерә. Тик нимән башларға?

Моғайын, рогатканан башларға кәрәктер. Юғиһә ул хәтәр ҡорал бөтә малайҙарҙың да кеҫәләрендә йөрөмәҫ ине. Ул, бысаҡ алып, утынлыҡҡа сыҡты. Ике йәпле ағас эҙләп тапты. Хәҙер таманлап киҫергә лә, матурлап юнырға ғына ҡалды. Ҡыҫҡаға



сабылған балтаны көс-хәл менән һурып алып, ике йәпте таманлап ҡыҫҡартырға тотонҙо. Ләкин икенсе сабыуҙа бер йәпте яңылыш төбөнән үк ҡырҡып ташланы. Бүтән ағас эҙләп табырға тура килде. Быныһын арыу йәтеш кенә сапты. Инде бысаҡ менән рогатканың һабын, йәптәрен юнып шымартырға ғына ҡалды. Рогатканы шәп булырға оҡшай.

Башта уны ул ап-аҡ итеп йышҡылар, унан Вәзирҙеке кеүек ҡыҙыл буяуға буяр. Яҡупта буяуҙар етерлек. Шунан атаһының иҫке велосипед камераһынан матур ғына итеп резинка телеп алыр, иҫке итек ҡуңысынан түңәрәк кенә итеп күн уйып алыр. Әлбиттә, уның әлегә тиклем был ҡоралды яһағаны юҡ. Шулай ҙа уның рогатканы күргәне, хатта тотоп ҡарағаны бар. Башҡалар яһағанды ул яһай алмаҫ, тиһегеҙме? Яһар, шикһеҙ яһар. Яһар ҙа, йомро ғына таш ҡуйып, анау аласыҡ башында ултырған бесәйгә тоҫҡап атып та ебәрер.

Шундай татлы уйҙарға батып, ағасын юна ғына башлағайны, үткер бысаҡ, кескәй генә бер ботаҡты киҫеп, һул ҡулдың баш бармағына килеп тә тейҙе. Бармаҡтан атылып ҡан сыҡты. Яҡуп сарбайлап ҡысҡырып ебәрҙе:

— Әсәй!

Ул шунда уҡ үҙенең хатаһын аңлап алды. Аяҡ-ҡулы ҡанағанда, малайҙарҙың береһе лә әсәһенә йүгереп ҡайтмай, тота ла ағас сөрөгө һибә. Ана бит ошо утынлыҡта уҡ серек бүрәнә башы ята.

Ул арала Яҡуптың әсәһе, сәсрәп, болдорға килеп сыҡты:

— Ни булды, балаҡайым?!

Әсәһенән йәлләтеп торорға был әлеккс Яҡуп түгел ине инде. Ул ҡулын тиҙ генә артҡа йәшерҙе.

— Мин һицә түгел, ана бесәйгә «бесәй!» тип ҡысҡырҙым.

— Ҡоттарымды алдыңсы, — тине лә әсә кире инеп китте.

Бүрәнәнән сөрөк алып, Яҡуп йәрәхәтенә һипте, күп итеп һипте. Ҡан башта сөрөк аша ла һарҡып сыҡты, ләкин бер аҙҙан туҡтаны. Башланған эште бөтөрөргә кәрәк ине. Әле генә бәлә килтергән яман бысаҡты Яҡуп яңынан ҡулына алды. Шулай ҙа эш барманы. Киҫелгән бармаҡ һулҡып һыҙларға кереште.

Яҡуп «өлгөлөктө» бөтөрөүҙең планын үҙгәртте. Бөгөнгә ҡул эшкә ярамай икән, аяҡтар бар. Ул хәҙер Күкрәктауҙың ослайып торған ҡаялы еренә барыр ҙа таштан ташҡа һикерергә өйрәнер. Башлыҡ ҡуйған бурысты үтәр. Әсәһенең һиҙгер күҙҙәре шикләнеп ҡарамаһын тип, ул башта яй ғына ҡапҡа төбөнә килде. Ҡойма буйында ятҡан тупты алып, ҡапҡаға бәреп уйнаған булды. Бер аҙҙан һуң тубын ҡапҡа аҫтынан урамға тәгәрәтеп сығарҙы. Үрелеп, бәләкәй ҡапҡаны асты. Ҡапҡа шығырлап ҡуйҙы. Быны ишеткән әсәһе шунда уҡ асыҡ тәҙрә эргәһенә йүгереп килде:

— Яҡуп, тим, ҡайҙа бараһың?

— Тубым урамға тәгәрәп сыҡты, әсәй, — тип, Яҡуп дөрөҫөн әйтте.

Әсәһе тәҙрә янынан киткәнсе, Яҡуп, тубын ҡапҡаға бәреп, урам яҡта уйнаны. Юрамалмы, ысынмы — туп тау яғына сыға торған тыҡрыҡҡа табан тәгәрәне. Яҡуп уны ҡыуа китте. Туп тәгәрәй — ул йүгерә, туп тәгәрәй — ул йүгерә. Ләкин туп йомшаҡ үләндә оҙаҡ бара алманы, туҡтаны. Ә Яҡуп

бер йүгерә башлағас, тиҙ генә туҡтай алманы. Күкрәктауға тиклем барып етте.

Ул, үрмәләп, осло ҡая эргәһенә менде. Унда һандыҡ дәүмәле, хатта унан да эрерәк таштар береһе өҫтөнә икенсеһе өйөлгән. Бүтән малайҙар, «һуғыш уйыны» уйнағанда, ошо таштар араһына боҫоп атышалар ине. Был ерҙә бик хәтәр. Яҙа баҫһаң, йығылып, башың тишелеүҙе көт тә тор. Яҡуп башта бәләкәсерәк таштар араһында һикергеләп йөрөнө. Бер тапҡыр, һөрләгеп, тубығын бәрҙе. Әммә бирешмәне, һаман һикереүсен белде. Һуңыраҡ ул эре таштар ятҡан яҡҡа күсте.

Ауыл яғынан күҙ һалыусы булһа, ҡурсаҡ ҙурлығы ғына бер нәмәнең ҡая итәгендә һикереп уйнауын күреп, гәжәпләнер ине. Әммә уға күҙ һалыусы булманы. Улының былдай ярамаған эш эшләүсе әсәһенең хатта уйына ла килмәне. Яҡуп һаман һикерҙе лә һикерҙе. Был уның өсөн уйын түгел, ә иң ҡыҫтау эш ине. Малайҙың, йығылып, беләге һыҙырылды, сикәһе сыйылды, маңлайы ҡабарып сыҡты. Яраһы күбәйгән һайын, уның сәме артты, йөрәге ярһыны. Шәрифулла әйтмешләй, бәлки, уның йөрәгенә лә бөркөт оялаған булғандыр. Тик әлегә тиклем ҡанат ҡына йәйә алмағандыр.

Яҡуп менән мауығып, кисә беҙҙән бик алама хәлдә ҡалған Вәзирҙе онотоп ебәрҙек бит. Әйҙә, Яҡуп үҙ эшен эшләй торһон, беҙ Вәзирҙәр яғына ҡағылып үтәйек. Улар Яҡуптарға ҡыйғас ҡына урам аша тора.

## ЙОМРО-ЙОМРО ЙОМҒАҒЫМ...

Һуғыш йылдарында ла, һуғыштан һуң да Вәзирҙәр ғаиләһе, башҡалар кеүек үк, ашау-эсеүгә наҡыҫ, бик наҡыҫ йәшәне. Шуға күрәлерме, Ҡорбанбикә еңгәлә бер сәйер ғәҙәт булды. Ул икмәктоҙон, сәй-шәкәрен, май-ҡаймағын иренән, балала-

рынан йыйып, йәшереп тотто. Һандыҡ, шкаф, келәт, аласыҡ асҡыстарын һәр ваҡыт үҙе менән йөрөттө. Ул ғәҙәтен йылдар именләнә төшкәс тә ҡуйманы. Бөтә ашамлыҡ затын йыйҙы, йәшерҙе. Әммә сепрәк-сапраҡ затына уның иҫе китмәне.

Өйҙә бөтә нәмә йоҙаҡлы булғанлыҡтан, Вәзир бәләкәйҙән үк аҡтарынырға, һәрмәләнергә өйрәнде. Дүрт-биш йәшлек саҡта уҡ әле мендәр араһына йәшерелгән арыш көлсәһен тапты. Юҡ, комһоҙланып, бер үҙе генә ашаманы. Нәҡ яртыһын бүлеп, ҡустыһы Насипҡа бирҙе. Һуцыраҡ, аласыҡ йоҙағын ҡаҙау менән асып, икәүләп һөт эстеләр. Һандыҡҡа ла асҡыс яраттылар. Унан «ҡунаҡ өсөн» генә һаҡланған өс шаҡмаҡ шәкәрҙең береһен сәлдерҙеләр. Балта менән сабып, шаҡмаҡты икегә бүлделәр. Бәләкәйерәге Насипҡа эләкте. Малайҙар бөтә йоҙаҡтарҙың да телдәрен тиҙ төшөнөп алдылар. Тора-бара йоҙаҡтар үҙ хеҙмәттәрен үтәүҙән бөтөнләй баш тарттылар.

Быны Ҡорбанбикә еңгә лә бик тиҙ һиҙҙе. Иҫәпһеҙ һыйҙары юҡ ине шул уның. Малайҙарҙың башына күп ҡарғыштар яуҙы. Ләкин улар ныҡыш булдылар, эҙләнеүҙәрен дауам иттеләр. Ҡорбанбикә еңгә лә үҙенең хәйләһен үҙгәртте. Нәмәләрен ул һандыҡҡа йәки соланға бикләмәй башланы. Шәкәр, кәнфит кеүек нәмәләр өйҙәге иҫке тун киҫәгенә, осормалағы бейә ҡуңысына йәки келәттә ғүмер баҡый буш эленеп торған тубалға йәшерелде. Майҡаймаҡ аласыҡ мөгәрәбенән емерек мунса мейесенә күсерелде. Әммә был саралар ҙа көткән нәтижәне бирмәне. Малайҙар бер сер артынан икенсеһен аса барҙылар. Әйтергә кәрәк, улар бер нәмәне лә умырып алманылар. Йәшерелгән әйберҙәрҙе табыу үҙе бер ирмәк уйынға, ҡыҙыҡлы кәсепкә әйләнде.

Был уйындан аҡса тигән зат та ситтә тороп ҡалманы. Әйтәйек, мейес ҡыуышында ултырған һуҡыр лампа аҫтындағы биш һум аҡсаны табып, уға перәник һатып алыу, ул перәникте малайҙар менән бү-

лешеп ашау ҡыҙыҡ түгелме ни? Вәзир уны ҡыҙыҡ-ҡа һананы һәм шулай эшләне лә. Әрләүҙәр, ҡар-ғауҙар, өй түбәһенә яуған борсаҡ кеүек һикерешеп, ситкә тәгәрәп торҙолар. Шулай ҙа йәшерелгән аҡ-саны табыу еңел эш түгел икән. Бер таптылар, ике таптылар, ләкин өсөнсөгә уларҙың һәрмәнеү һәләт-леге етмәне.

Бөгөн Вәзир эҙләнеүҙәрен яңынан башланы. Уға аҡса бик кәрәк ине. Кисәге хурлыҡты, иптәш-тәре менән килешеп, яҡшылыҡ менән генә юйырға мөмкин. Уның башында бик йәтеш бер план тыуҙы. Аҡса табып, лавканан перәник һатып алырға ла, иптәштәрҙе һыйлап, ғәфү үтенергә. Ололар ҙа бит беҙҙең яҡта наҳаҡҡа хәтерен ҡалдырған кешеһен саҡырып һыйлайҙар ҙа ғәфү итеүсе һорайҙар. Вә-зир ҙә шулай эшләйәсәк.

Ҡарауылдан ҡайтҡан атаһы соланда йоҡлап ята. Әсәһе эшкә киткән. Артыҡ шаһит булмаһын тип, Вәзир Насипты күл буйына бәпкә һаҡларға ҡыуып ебәрҙе лә, аулаҡ ҡалған өйҙөң аҫтын-өҫкә килтереп, аҡтарынырға кереште. Китап эстәрен, тоҙ һауыттарын, ишек-тәҙрә баштарын тотош теп-теп сыҡты. Әммә эҙләгәнен таба алманы.

Уның күҙ ҡарашы әлеге мейес ҡыуышындағы ҙур ғына йөн йомғаҡҡа туҡталды. Вәзир йомғаҡты алып ҡыҫҡылап ҡараны. Ул ашыҡ-бошоҡ ҡына сырмалғанға оҡшай. Үтә йомшаҡ ине. Вәзир йом-ғаҡты ҡолағына килтереп тағы ла ҡыҫҡыланы. Йомғаҡ эсенән ҡыштырлау ишетелде. Был йомғаҡ-та ниндәйҙер сер бар ине.

Вәзир йомғаҡтың осон табып алды ла һүтеп сырмарға кереште. Уның йөрәге, айыу эҙенә төш-кән һунарсы йөрәге һымаҡ, ярһып тибергә тотондо. Үҙе йомғаҡты һүтә, һуҙып-һуҙып көйләй:

— Йомро-йомро йомғағым, күрмәнеңме аҡсам-ды? — ти. Шунда уҡ йомғаҡ өсөн яуап та ҡайтара:

— Йомро-йомро йомғаҡмын, һүтелеп бөткәс, әйтермен...

— Әйтмәһәң дә, белермен...

Һүтә торғас, йөн еп икенсе йомғаҡҡа сырмалып бөттө. Вәзир ҡулында ҡат-ҡат бөкләнгән йәшкелт ҡағыҙ ғына тороп ҡалды. Вәзир уны ашыҡмай ғына һүтте. Был өр-яңы илле һумлыҡ аҡса ине. Уның эсенән тағы бер егерме бишлек, бер бишлек килеп сыҡты. Вәзиргә күп кәрәкмәй ине.

— Ата-әсәһенә теймәйек, беҙгә балаһы ла еткән, — тип бишлекте алып салбар кеҫәһенә тыҡты. Ҡалғандарын элеккесә кире бөкләп, уларға йомғаҡты яңынан һүтеп сырмарға тотонно. Үҙе сырмай, үҙе һуҙып-һуҙып көйләй:

— Йомро-йомро йомғағым, ни күрҙең дә ни белдең?

Йомғаҡ өсөн яуапты үҙе ҡайтара:

— Ай күрҙе, ҡояш алды, мин бер ни ҙә күрмәнем...

Йомғаҡты элекке хәленә килтереп урынына ҡуйғас та Вәзир лавкаға йүгерҙе. Биш һумлыҡ пәрәник үлсәтеп, ике салбар кеҫәһенә тултырҙы. Тик ниңәлер һатыусы апай уға бер аҙ шикләнеп ҡарап ҡалды. Әйтерһең, Вәзир биш һум аҡса табырлыҡ малай түгел.

Юҡ, һатыусы апай уға шикләнеп ҡараманы. Ул бөтөнләй башҡа нәмә хаҡында уйланы: «Әсәһе кер йыуалыр, күрәһең. Бахырҙың алмаш күлдәге юҡмы икән ни?» — тип бошондо ул. Вәзирҙең тән сыныҡтырып йөрөүен белмәй ине шул.

Вәзир пәрәникте ҡайтарып аҙбар ситәне араһындағы һаламға йәшерҙе. Ййы килгәс, тегеләрҙең ҡолағына төшөрөр ҙә, шунан улар өсәүләп тауға менерҙәр. Иптәштәре: «Ни булыр икән?» — тип көтөп торғанда, ул кеҫәләрендәге һигеҙ пәрәникте берәм-берәм сығарып, үлән өҫтөнә ҡуйыр, унан өләшергә тотонор. Иптәштәренә өсәрҙе бирер, үҙенә икене алыр. Үҙенә хатта бирәү ҡалмаһа ла риза. Ҡунаҡ һыйлауҙың йолаһын белә ул. Ошо уйҙарҙан

унын түбәһе күккә тейҙе. Был минуттарҙа унан да шатыраҡ, унан да бәхетлерәк кеше юҡ ине.

Вәзир, эре генә атлап, урамға сыҡты. Ҡулдарын артҡа ҡуйып, яланғас ҡорһағын кирә бирел, байтаҡ ҡына тирә-яҡҡа ҡаранғылап торҙо. Ул үҙенән сиктән тыш риза ине.

Шул арала тау тыҡрығынан, былт итеп, Яҡуп килеп сыҡты. Унын ҡабармаған, сыйылмаған ере юҡ ине.

— Эй, Өлгө, ҡайҙа барҙың? — тине уға Вәзир.

— Мин Өлгө түгел, мин — Яҡуп, — тип ҡарыулашты тегеһе.

— Әллә айыу менән алыштыңмы, бәһлеүән?

Яҡуп, иптәштәренә биргән антын шунда уҡ хәтеренә төшөрөп, үҙ юлына китә башланы. Ләкин ул бит «ҡул бирмәҫкә» ант итте. Һөйләшеү ул ҡул биреү тигән һүҙ түгел дә. Вәзир эргәһенән мәһайған кеше һымаҡ үтеп китеүҙе ул килештермәне.

— Мин быҙау эҙләнем, — тип шылдырҙы ул.

— Маңлайынды ташҡа ора-ора эҙләненме ни ул быҙауҙы?

— Булды инде, — тине Яҡуп. Бәйнә-бәйнә һөйләп биреүҙе кәрәк тапманы.

— Ну биҙәнгәнһен, әй... Нисауа, төҙәлер әле. Ямауы өҫтөндә,— тип тынысландырҙы Вәзир. Унын бөгөн күңеле күтәренке ине. Кемгә булһа ла берәй яҡшылыҡ эшләгеһе килеп кенә тора. Шуға күрә әллә ҡасан күҙҙән төшкән Өлгө Яҡупҡа ла, тиң күреп, һүҙ ҡушты, иғтибар күрһәтте, унын йәрәхәттәрен күреп, хатта ҡыҙғанып та ҡуйҙы. Ләкин был ғына аҙыраҡ тойолдо уға. Яҡупты нимә менәндер ҡыуандырғыһы килде унын. Ә Яҡуп иһә был минутта башҡасараҡ уйҙа ине: ул Вәзиргә сәләм дә бирмәй үтеп китәһе урында, хәтер һаҡлап, унын менән һөйләшеп тора, түбәнселек күрһәтә.

Әгәр Яҡуптын ошо уйҙарын Вәзир һиҙеп ҡалһа, һис шикһеҙ, Өлгөнөң маңлайына тағы бер-ике оро өҫтәлер ине. Юҡ, бер ни ҙә һиҙенмәне Вәзир. Рәхәт-

лек кисереүсселәр шулай һуҡыр булалар инде. Киреһенсә, Яҡупҡа ҡарата уның яҡшылығы артҡандан-арта барҙы. Оҙаҡ көттөрмәйенсә, салбар кесәһенән рогатка килеп сыҡты. Был — бөтә урамда дан тотҡан теге ҡыҙыл һаплы рогатка ине инде.

— Оҡшаймы һиңә? — тине Вәзир.

— Ниңә, оҡшай ҙа...

— Кәрәкме һиңә?

— Кәрәк тә...

— Кәрәкһә, ал. Мин һиңә бөтөнләйгә бирәм.

Яҡуптың ҡапыл башы әйләнеп киткәндәй булды. Күҙ алдында ниндәйҙер кескәй генә ҡыҙыл шәүләләр һикерешеп уйнаны. Был ваҡыт Вәзир ҡыҙыл һаплы рогатканы уға һуҙып тора ине.

— Биргәндә, ал! — тип бойорҙо Вәзир. Уның тупаҫ тауышы Яҡупты айнытып ебәрҙе.

— Ә мин һиңә резина туп, йәнә велосипед звоногы бирермен. Һәләк ирмәк шылтырай ул, — тип бышылданы Яҡуп.

— Кәрәкмәй. Бүләкте һатып бирмәйҙәр. Рогаткалар миндә бер ҡумта ул...

Яҡуп ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына рогаткаға үрелде. Алдатмаймы икән тип шикләнде ул. Ләкин киң күңелле, йомарт Вәзир ундай ваҡсыл шаярыуҙарҙан өҫтөн ине.

Яҡуп рогатканы алып, ҡалтырана-ҡалтырана, салбар кесәһенә тыҡты.

— Мин дә һиңә... — тип нимәлер вәғәҙә итергә керешкәйне, Вәзир уны шып туҡтатты:

— Кәрәкмәй. Бар, ҡайт та атырға өйрән!

— Ярай! — тип теге шунда уҡ өйөнә йүгерҙе.

Яҡуптың китеүе булды, ауыҙы ҡолаҡ артына еткән Гөлнурҙың Вәзир ҡаршыһына килеп баҫыуы булды. Ул ҡултыҡ аҫтына сәскәле ҡыҙыл ситса төрөп ҡыҫтырғайны.

— Абау, мәсхәрә, күлдәк тә киймәгән! — тип сәрелдәргә тотонло Гөлнур.

— Бар, юлыңда бул.

— Барам шул. Мин түбән ос Йәмлихә апайымдарға ситсә илтәм, ул миңә матур күлдәк тегә, — тип хәбәр һалды кыҙ. — Айҙар менән Ғабдулла Ҡылыстың арғы башына китте. Мине эйәртмәнеләр. Улар миңә турғай балаһы тотоп ҡайталар. Икене.

Гөлнур үҙ юлына китеп барҙы. Вәзирҙең ҡобараһы осоп, эсе әрнеп ҡалыуын ул һиҙмәне лә. Ас ҡәҙерен туҡ белмәй шул инде.

Әле генә ҡуҡырайып баҫып торған Вәзир ҡапыл бөршәйеп ҡалды. Уның кисәге ҡайғыһы яңырып китте: тимәк, тегеләрҙең Вәзирҙән бөтөнләй ҡул һелтәүҙәре раҫ. Уның Өлгө Яҡуп хәленә төшөүе, күрәһең, ошолор инде.

Бөгөндән алып Яҡуптың йондоҙо юғарыға үрләй башлауын белмәй ине шул ул. Белһә, үҙ ҡулы менән үҙ ҡоралын уға тотторор та ебәрмәҫ ине.

«Нисек тә яйын табып, бөгөн кис үк иптәштәрҙе һыйлап, ғәфү үтенергә кәрәк. Юғиһә донъяның ҡыҙығы ҡалманы...» — тип уйланы ул.

## «ӨЛГӨЛӘР» СЫЛТЫРАП ҠЫЙРАЛА



Яҡуп ҡайтып күренгәс, әсәһе бер ағарҙы, бер күгәрҙе. Тамағына төйөр тығылып, башта ул байтаҡ өндәшә алмай торҙо, унан әсе итеп ҡысҡырып ебәрҙе:

— Үлтергәндәр балаҡайымды! Үлтергәндәр! Иларлыҡ та хәле ҡалмаған бит. Ҡайһы ҡоторған эте таланы шулай, балаҡайым?

«Үлергә» самаһында ла булмаған Яҡуп тыныс, хатта бер аҙ тантаналы тауыш менән яуап ҡайтарҙы:

— Мин ҡая ташта һикереп уйнаным, әсәй. Һәләк ирмәк булды. Шунда яҙа баҫып...



Гөлйөмеш апай уны тыңларға ла теләмәне, һаман сәрелдәй бирҙе:

— Әлеге Вәзирҙәр индә, йөҙө ҡара! Ҡәнсәгә саҡырып, аҡылға ултыртмаһаммы шуны!

Әле генә, шундай йомартлыҡ күрһәтеп, рогатка биргән Вәзирҙең ғәйепһеҙ әрләнеүсен Яҡуп тыныс ҡына тыңлап тора алманы. Уның хатта эсе әрнеп ҡуйҙы.

— Вәзиргә тел тейҙермә, әсәй. Ул минең дуҫым хәҙер. Мин үҙем йығылдым. Үҙе йығылған — иламаҫ.

Әсә торған һайын ярһый ғына барҙы:

— Һин үҙе йығыла торған бала түгел. Һөйләмә бушты! Нисәмә әйттем, шул Вәзирҙәргә аяҡ баҫма, тип, нисәмәләр әйттем...

Әсәһен ышандырырға әмәл тапмай торған Яҡуптың башына шундай хәтәр бер уй төштө:

— Улайһа, әсәй, — тине ул, — бына күр ҙә тор. Анау ҡараманың иң осона менәм дә һикереп төшәм. Ыһ та итмәйем.

Шулай тип әйтеүе булды, ҡойма буйындағы яңғыҙ ҡарамаға табан йүгереүе булды. Яҡуп иң түбәндәге ботаҡҡа үрелергә лә өлгөрмәне, әсәһе уны килеп ҡосаҡлап та алды. Әйтергә кәрәк, күпме тырышып ҡарамаһын, быға тиклем ул ҡарама башына Яҡуптың бер тапҡыр ҙа менә алғаны юҡ ине әле. Был юлы ла менеүе бик шикле ине.

— Иҫәрләнмә, балам, — тине Гөлйөмеш апай. Һәм үҙ һүҙенән тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.

Уның күңелендә бер шик яралды: «Әллә бер-бер төрлө шауҡым ҡағылдымы был балаға? Аҡылына зәғифлек килдеме юғиһә?» — тип ҡото осто. Ысынлап та, быға тиклем һәр аҙымын әсәһе ҡушҡанса ғына атлап өйрәнгән Яҡуптың был ҡылығына иҫ китерлек ине.

Яҡуп әсәһенең ҡосағында тыпырсынырға тотондо:

— Ебәр, тим, әсәй! Һикерәм тигәс, һикерәм...

Гөлйемеш апай тамам ҡаушап, хәлһеҙләнеп ҡалды. Был баланың боларыуы тиктәҫкә түгел ине.

— Һикерерһең, улым, һикерерһең. Тик иртәгә, йәме? — тип тынысландырҙы ул Яҡупты. — Ә хәҙер өйгә инәйек. Үҙеңде ҡаймаҡ менән һыйлармын. Сәксәк тә бирермен.

Шундай тәмле нәмәләрҙең исемен ишеткәс, Яҡуп башҡаса туламаны. Әсәһе уны өйгә шул ҡосағында килеш күтәреп индерҙе. Малай, әлбиттә, әсәһенең ҡурҡыныс уйҙарга батыуын һиҙмәне. «Әсәйҙе барыбер ышандырҙым», — тип кенә уйланы.

Өйгә ингәс, Яҡуп бер сынаяҡ ҡаймаҡ менән арыу ғына өйөм сәксәкте тиҙ үк һелтәп ҡуйҙы. Булһа, тағы ла ашар ине, тик һорарға ғына ҡыйманы. Гөлйемеш апай улынан күҙҙәрен алмай ҡарап ултырҙы. «Атаһы ла китте лә олаҡты. Ҡайҙа барып һуғылмаҡ кәрәк хәҙер?» — тип эстән өҙгөләнде ул. Ә Яҡуп, рәхәтләнеп туйынып алғас, ултырған ерендә хатта бер талпынып ҡуйҙы.

— Йәрәхәттәрең һыҙлаймы, балам? — тип һораны әсә.

— Юҡ, — тине улы. Үҙе маңлайындағы күкһел ҡара оропо һыйпап ҡуйҙы. Гөлйемеш апайҙың йөрәге жыу итеп китте. «Сире шулай уҡ ҡатымы икән ни? — тип әрнене ул. — Шул тиклем һыҙлауҙарҙы ла һиҙмәй бит был бала!»

— Ятып ал, балам, арығанһыңдыр, — тине әсә, шунда уҡ урын түшәргә тотондо. Үҙенең «өлгөләгә-

нә» ҡаршы иртәнән бирле көрәшкән Яҡуп байтаҡ йонсоғайны. Шуға күрә ул ҡарышманы. Түшәгән урынға барып ятты. Ятҡас та уң ботона ниндәйҙер ҡаты нәмә тейҙе. Яҡуп уны һәрмәп ҡараны. Был баяғы ҡыҙыл һаплы рогатка ине. Тимәк, ул кеҫәлә ята. Яҡуптың бөтә арығанлығы бер юлы әллә ҡайҙа осоп юғалды. Ул ҡапыл һикереп торматсы булғайны ла... торманы. Йоҡлаған кеше булып, күҙҙәрен йомдо, ә бер аҙҙан килештереп хырылдап та ебәрҙе.

Улының йоҡлап китеүенә тамам ышанған Гөлйемеш апай шым ғына ишеккә табан йүнәлде. Ул ауылдан бер саҡрым самаһы ситтәрәк йәшәгән урман ҡарауылсыһына барырға ҡарар иткәйне. Ҡарауылсы ҡарттың ҡалалағы врач ҡыҙы элекке көндө генә бала сағаһы менән ялға ҡайтҡайны. Гөлйемеш апай шул врачты саҡырмаҡсы булды.

Әсә солапҡа сыҡты. Бына аҡрын ғына ишек асылып ябылды, унан ҡапҡа шығырлап ҡуйҙы. Яҡуп шуларҙың бөтәһен дә ишетеп ятты. Ул ырғып урынынан торҙо ла, иҙәнгә төшкәс, бер-ике ҡат үрә һикереп алды. Унан һуң тышҡа тороп йүгерҙе. Ҡойма буйына килеп боҫто ла әсәһенең ҡайһы яҡҡа киткәнен ярыҡ аша күҙәтеп торҙо. Әсәһе Вәзирҙәргә лә инмәне, канцелярия яғына ла боролманы, тыҡрыҡ аша ауыл ситенә сығып китте.

Яҡуп ҡыҙыл һаплы рогатканы кеҫәһенән һурып сығарҙы ла уға байтаҡ ара һоҡланып ҡарап торҙо. Егет ҡулына ниндәй генә малдар төшмәй! Хәҙер эшкә тотонаһы ғына ҡалды.

Өй алдына ваҡ таш ҡатыш ҡом һибелгән. Башта Яҡуп фуражкаһына күп итеп ваҡ таш йыйҙы. Унан яйлап ҡына болдорға менеп ултырҙы. Хәҙер атыр өсөн йәтеш сәп табып алырға кәрәк ине. Аҡ келәт эргәһендәге бағана йәбенә түңкәреп элеп ҡуйылған йәшел күнәктән дә шәберәк сәпте эҙләп тә таба алмаҫһың. Яҡуптың ҡарашы шул күнәккә туҡталды. Ул, йомро ғына бер таш менән рогаткаһын

ҡороп, тоçҡарға тотондо. Оҙаҡ тоçҡаны. Рогатканың резина-кереше, һуҙыла торғас, нәп-нәҙек булып ҡалды. Яҡуп керешкте ысҡындырҙы. Таш үҙ юлына осоп китте, ә ҡапыл ысҡынған кереш бая ғына киçелгән баш бармаҡҡа килтереп һуҡты. Яҡуптың күҙ алдында ҡыҙыл түңәрәктәр һикерешеп уйнарға керешке. Элегерәк шундай хәл булһа, Яҡуп рогатҡаһын атып бәрер ҙә илай-илай өйгә йүгерер ине. Хәҙер ундай саҡтар үтте шул.

Был тәүге бәлә малайҙың бары сәмен генә арттырҙы. Ауыртҡан бармағына бер-ике тапҡыр өрөп алды ла яңынан үҙ эшенә тотондо. Бер атты, ике атты, биш атты, әммә йәшел күнәк иçе лә китмәй эленеп тора бирҙе. Зыңлап та ҡараманы. Яҡуп, болдорҙан төшөп, бер-ике аҙым келәткә яҡынлашты. Ул баçып атырға тотондо. Өсөнсө таш йәшел күнәктең ҡабырғаһына барып тейҙе. Күнәк зың итеп ҡалды. Яҡуп Вәзирҙән күп тапҡырҙар ишеткән һүҙҙәрҙе ҡабатлап ҡуйҙы:

— Бер ҡоймаҡты майланыҡ!

Ләкин «икенсе ҡоймаҡ» бик оҙаҡ «майланмай» яфаланы. Инде тейҙерҙем тип кенә атҡанда, йәшел күнәк ҡымшанмай ҙа тороп ҡалды, ә аҡ келәт тәҙрәһенең бер өлгөһө сылтырап ҡойолоп төштө. Был ваҡыт шығырлап ҡапҡа асылды. Әммә Яҡуп уны ишетмәне. Ул, сәмләнә төшөп, күнәккә йәнә атып ебәрҙе. Был юлы баяғы тәҙрәнең түбәнге өлгөһө селпәрәмә килде.

Ҡапҡанан килеп ингән Гөлйемеш апай менән врач, ни тиергә лә белмәй, башта аптырап ҡалды. Әсә үҙәк өҙгөс тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе.

— Балаҡайым! — Ул, йүгереп килеп, Яҡупты етәкләп алды. Был арала Яҡуп рогатканы кеçәһенә йәшерергә өлгөргәйне. Ләкин әсәлә рогатка ҡайғыһы юҡ ине.

— Ауырыу балағыҙ ошомо?— тип һораны врач.

— Ошо шул. Минең берҙән-бергенәм ул.

Яҡупты өйгә алып инделәр. Врач уның тамағын, күҙҙәрен ҡараны, яткырып ҡорһағын ҡапшаны. Ике ҡолағына ике резина эсәк тығып, ул малайҙың арҡаһын, күкрәген тыңланы, шунан һуң тағы бер тапҡыр күҙҙәрен ҡараны.

— Балағыҙ сәләмәт. Сәп-сәләмәт, — тине.

— Сәләмәт бала шулай буламы ни? Янмаған, күгәрмәгән ере юҡ бит.

— Сирле булһа, ырғымаҫ, һикермәҫ ине. Һикермәһә, йығылмаҫ та ине. Шулаймы, егет кеше? — тине врач.

«Егет кеше» баш ҡаҡты.

Әсә һаман үҙенекен тылҡый бирҙе:

— Бынау ороларына, уйылған-сыйылған ерҙәренә ниндәй дарыу һөртәйем һуң?

— Дарыу һөртөп тораһы юҡ, төҙәлер.

«Эсендә йәне юҡтыр был докторҙың», — тип уйланы Гөлйемеш апай. Ә докторҙың эсендә йәне бар ине. Ләкин юҡ сирҙе бар итеп һөрән һалыусыларҙы уның ене һөймәй ине. Врач, әйберҙәрен йыйып, кескәй ҡумтаһына һалды ла хушлашып сығып китте.

— Ярай инде, улай булғас, — тип тороп ҡалды Гөлйемеш апай.

Ҡискә тиклем әсә улын тышҡа сығарманы, һағалап ултырҙы. Тик көтөү ҡайтыр алдынан ғына, быҙау эҙләп алып ҡайтырға тип, тау яғына сыҡты. Унда ла улын киҫәтеп китте: «Тышҡа аяҡ атлайһы булма!» — тине. Үҙ һүҙҙәренең көсөнә ышанып етмәй, ишекте тыштан элеп тә ҡуйҙы. Ишекте элмәһә, Яҡуп, бәлки, өйҙә лә ултырыр ине. Аҙбарға ябылған кәзә бәрәсе кеүек, нисек бик аҫтында ултырһын инде ул? Тәҙрәнән һикереп, Яҡуп тышҡа сыҡты. Ул башланған эшен бер тиклем ослап ҡуйырға булды. Сөнки уға бирелгән өс көндөң береһе үтеп бара ине. Әсәһе ҡайтҡансы, ул мунса мөрйәһенең осона ҡуйылған ҡалай торбаны атып төшөрөргә лә, уң күрше Сабирҙарҙың нигеҙ өйөмөндә торған балсыҡ көршәкте ватырға ла, һул күрше Йомабикә ҡар-

сыҡтың үлән өҫтөндә ултырған еҙ ҡомғанын йәмшәйтергә лә өлгөрҙө. Яҙа атыуҙан түгел, уларҙың һәр береһенә тоҫҡап атты ул. Йомабикә ҡарсыҡ ишетмәне лә, күрмәне лә, әммә Сәрби апай Яҡуптың тетмәһен тетте. «Икенсе Вәзир булдыңмы әллә, аҙған малай?! Яҡшынан яман тыуған! Тәртиптең нимә икәнен белмәгән йүнһеҙ! Бына әсәйең генә ҡайтһын әле...»

Яҡуп ғүмерендә беренсе ҡат «тәртипһеҙ» тигән һүҙ ишетте. Юҡ, быға ул бошонманы. Тимәк, хәҙер уны берәү ҙә «Өлгө Яҡуп» тип үсекләй алмаясаҡ.

## КҮЛ ӨҪТӨНДӘ БАЛЫҠ УЙНАЙ

Көн кискә ауышып бара. Күл өҫтөндә иртәнән бирле йүгерешеп уйнаған ваҡ тулҡындар, ярға һыйынып, тынып ҡалғандар. Талсыҡҡандарҙыр, күрәһең. «Былар ял итһендәр әле»,— тигән һымаҡ, ел дә тау яғына китеп олаҡҡан. Был мәлдә ул, моғайын, ҡарағай ботаҡтарын һелкетеп йөрөйҙөр әле. Уның эше бер ваҡытта ла бөтмәй.

Ә бына ҡоштар, исмаһам, миҙгелен белеп кенә һайрайҙар. Көн эҫеһендә улар һайрау яғына бик әүәҫ булмайҙар. Һалҡын төшә башлағас, уларҙы тотоп та тыя алмаҫһың. Ҡылыс буйындағы һәр ҡыуаҡ йыр-моң сәсеп тора. Тыңлап ҡына өлгөр.

Балыҡтар ҙа иртәле-кисле шаянылаҡ булалар. Әле лә бына, һыу өҫтөндә иҫәпһеҙ-хисапһыҙ түңәрәктәр яһап, балыҡ уйнай. Ҡайһы бер үтә шуҡтары өҫкә һикереп сығалар ҙа, үҙҙәренең тәңкәләрен йылтыратып, маҡтанған булалар. Йәнәһе: «Күрегеҙ, беҙ ниндәй һылыубыҙ!»— тиҙәр. Шулай ҙа ғәмһеҙҙәр улар, балыҡтарҙы әйтәм. Әле күлде бер итеп уйнап йөрөгән сабаҡтарҙың һәм ҡыҙылғанаттарҙың байтағына бер нисә көндән, үҙ күлдәрен ташлап, Кирәмәт башындағы ят күлгә күсергә тура киләсәк. Һәм улар бер ҡасан да Ҡылысҡа кире әйләнеп ҡайта алмаясаҡтар. Был хаҡта балыҡтар бер

нәмә лә белмәйҙәр. Хатта уйҙарына ла килтермәйҙәр. Саҡ ҡына һиҙенһәләр ҙә, шул тиклем үк уйынсаҡ булмаҫтар ине.

Ҡоштарҙың эше бөтөнләй башҡа. Уларҙы һин әллә ҡайҙағы урмандарға илтеп ташла, барыбер теләгән саҡтарында үҙ ҡыуаҡтарына ҡайталар ҙа киләләр. Бына бит ул ер өҫтөндә йәшәү нисек һәйбәт. Һыу аҫтында йәшәү ише түгел инде.

Әйҙә, балыҡтар һикерешә, ҡоштар һайраша торһон. Беҙ яр буйындағы тал ҡыуаҡтары араһына күҙ һалайыҡ. Иң тәүҙә беҙ унда бер сем-ҡара, бер ерән баш күрербеҙ. Ҡәүҙәләрен ҡамыш ҡаплай. Шулай ҙа ул баштарҙың кемдәрҙеке икәнен таныуы ҡыйын түгел. Ҡараһы: «Мин Ғабдулла», ерәне: «Мин Айҙар», — тип әллә ҡайҙан ҡысҡырып тора.

«Өс тағандың» ике терәге тауышһыҙ-тынһыҙ мурҙа үреп ултыра. Хәҙер эш бөтөп бара инде. Ләкин шуны әйтергә кәрәк, Ғабдуллаға, Башлыҡ булһа ла, бары ҡара эштәрҙе генә башҡарырға, дөрөҫөрәге, Айҙарҙың ярҙамсыһы ғына булырға тура килде. Ул өләсәһенең һалма бысағы менән сыбыҡ ҡырҡып, уларҙы ботаҡтарҙан әрсеп, Айҙар алдына һалып торҙо. Был саҡта ул үҙенең Башлыҡ икәнен бөтөнләй онотоп ебәрҙе. Киреһенсә, Айҙарға һоҡланып, уны өҫтөн итеп ҡараны. Хатта бер саҡ: «Ну оҫта икәнһең, малай»,— тип иптәше алдында ярамһаҡлана биреп тә ҡуйҙы. Ҡулың һөнәр белмәгәс, шулайыраҡ була шул.

Айҙарҙың ярылып бөткән йүгерек ҡулдарына ысыилап та һоҡланып туймаҫлыҡ ине. Нескә, оҙон тал сыбыҡтары уның бәләкәс бармаҡтарында, ебәк таҫма урынына, бөгөләп-һығылып уйнай. Әйтерһең дә, ул тал сыбыҡтарынан мурҙа түгел, ә ебәктән селтәр үрә ине. Әммә үҙенең булдыҡлылығы менән ул бер генә тапҡыр ҙа шапырынманы, уның йөҙөндә ҡуҡырайыуҙың әҫәре лә сағылманы. Ара-тирә танауын тартҡылап, бары эшләй бирҙе. Ысын оҫталар ана шундай булалар ҙа инде.

Балыҡтар һикерешеүендә, ҡоштар һайрашыуында, малайҙар мурҙа үреүендә булды. Һәр кем үҙ һөнәре менән мәшғүл ине. Шуға күрә улар яр башындағы тар һуҡмаҡ буйлап боҫа-ҡаса үтеп барыусы күлдәкһеҙ малайға иғтибар ҙа итмәнеләр. Малайҙың яланғас беләктәренә тейеп ҡалған тал япраҡтары нимәлер шыбырларға итеп ҡараһалар ҙа, уларға ҡолаҡ һалыусы булманы. Бер аҙ уҙа биргәс, әлеге малай йөҙ түбән ятып, ҡамыш араһындағы икәүҙе күҙәтергә кереште. Унын сылт-сылт йомолоп торған күҙҙәре бөтәһен дә күрҙе, бөтәһен дә шәйләне. Бер аҙҙан һуң ул ҡамыш төбөндәге йәш күрәнде шәлкем итеп усына йыйып тотто ла, ат ҡойроғо төйнәгән кеүек, төйнәп ҡуйҙы. Беҙҙең урман яғында кешеләр эҙ юғалтмаҫ өсөн шулай билдә ҡалдыралар. Күрәһең, был малай ҙа әлеге урынды билдәләп үтергә булды. Сөнки Ҡылыс буйы ҙур. Ҡайҙа ҡарама, йырып сыҡҡыһыҙ ҡамышлыҡ.

Йәй көнө, тән яндырып, күлдәкһеҙ йөрөгән малайҙар һирәк осрамай. Ләкин бының кеүек етеҙ һәм һаҡ хәрәкәт итеүселәр Бөркөтлөлә күп түгел. Унын һәр ҡыймылдауы: «Мин Вәзир!» — тип ҡысҡырып тора. Үҙенә кәрәктең бөтәһен дә барлап, тикшереп сыҡҡас, Вәзир, аҡрын ғына шыуышып, артҡа сигенде. Артта урман. Урманға инеп алғас, ул, ҡуйы үлән араһындағы бүҙәнә кеүек, йылт итеп кенә ҡалды.

Был арала Айҙар менән Ғабдулла ла мурҙаны үреп бөтөрҙө. Ысынлап та матур нәмә килеп сыҡты. Шулай ҙа Айҙар һөнәр эйәләренә генә хас бер ентеклелек менән үҙ эшен тағы бер ҡат тикшереп сыҡты, ҡапҡасын бер ябып, бер асып ҡараны. Шунан һуң ғына малайҙар салбарҙарын сисеп ырғыттылар. Ике-өс күнәк балыҡ һыйышлығы ауҙың эсенә ҙур ғына ике таш һалып, уны күл эсенә, ҡамыштар араһына күтәреп индерҙеләр. Мурҙа тиҙ генә батырға теләмәне. Уны, түбән тарттырып, ҡамыш һабаҡтары менән бәйләштергеләргә тура килде.

Ҡыҫала-фәлән инмәһен тип, мурҙаның ҡапҡасын ябып, нығытып ҡуйҙылар. Сөнки беҙҙең балыҡсылар бер ҡатлы түгелдәр. Улар балыҡсылар кәсебенең рәтен беләләр. Был миҙгелдә мурҙаға яҙып-яңылышып ингән балыҡты көтөп тороу йүнһеҙлек булыр ине. Ундай аҙашҡан сабаҡтарҙы ғына аңдып ултырһаң, йәй үтеп китер. Иртәгә үк кәм тигәндә дүрт ҡармаҡ менән эшкә тотонорға тура киләсәк.

Ана бит һыу өҫтөндә күпме балыҡ сиртә. Малайҙар оҙаҡ итеп күлгә ҡарап торҙо. Уларҙың күҙ алдында һикереп уйнаған балыҡ тик ҡармаҡҡа ҡабыр өсөн генә ашҡына. Бәлки, улар үҙҙәренең яңы күлгә китәсәктәрен һиҙеп шулай ҡыуанышаларҙыр. Ил гиҙеүҙе, донъя күреүҙе кем генә яратмай һуң?

— Уйнағыҙ, уйнағыҙ, — тине Ғабдулла, — уйнар көнөгөҙ алда әле.

Һәм үтә мөһим эш башҡарған малайҙар, салбарҙарын кейеп, ауыл яғына ыңғайланы.

## ИРТӘ ЯМҒЫРЛЫ БУЛДЫ

Беҙҙең яҡта хатта йәйге ямғырҙар ҙа ултырып яуа. Бер башлаһа, тәүлек буйына талғын ғына шыбырлай бирә. Шуға күрә уны: «Ултырып яуа», — тиҙәр. Был саҡта инде ер, майлы бутҡа ашаған малай ирендәре кеүек, йылтырап, рәхәт сигеп ята.

Төн уртаһында башланған ямғыр иртә менән дә туҡтаманы. Ләкин барыбер дүрт өйҙәге дүрт малай ҡул ҡаушырып тик ултырманы. Ҡыҙыл туҡалды көтөүгә ҡыуып ҡайтҡан ыңғайҙа уҡ Ғабдулла Айҙарҙарға инде. Улар аласыҡта бынамын тигән дүрт ҡармаҡ рәтләнеләр. Иҫке ауҙы ҡырҡып, селтәр тоҡ йүнәттеләр. Ул тоҡтоң нимә кәрәклеген балыҡсылар үҙҙәре генә белә. Унан аҙбар артына сығып консерва ҡалайына селәүсен йыйҙылар. Ер еүеш булғас, бөгөн селәүсендәр теремектәр ине. Ҡомһоҙ балыҡты улар үҙҙәре үк саҡырып торасаҡ.

— Йыға һуҡты был ямғыр,— тине Ғабдулла, уфтанып. — Тапты яуыр ваҡыт!

Һәр нәмәне яҡшыға юрарға өйрәнгән Айҙар дуҫын тынысландырырға кереште:

— Яуһын әйҙә. Игендәр үҫер. Яуыр, яуыр ҙа туҡтар. Иртәгә лә көн беҙҙеке бит. Ямғырҙан һуң балыҡ һәләк шәп ҡаба ул.

— Һиңә бөтәһе лә шәп инде, үҙ башың менән уйламағас, — тип Ғабдулла үҙенең Башлыҡ икәнен хәтергә төшөрөп алды. — Ә бына ҡайҙан кәмә табырға? Кәмә! Һинең уйыңа кергәне бармы шул?

— Ә ниңә кәрәк ул? Яр башынан да тупылдап ҡабып тора.

— Юҡ инде. Селбәрә аулаған ыбыр-сыбыр малайҙар кеүек, яр башынан ҡармаҡ һалып йөрөп булмаҫ, — Ғабдулла эре генә өҫтәп тә ҡуйҙы: — Ул замандар үткән.

Ысынлап та, үҙен «балыҡсымын» тигән кеше беҙҙең Ҡылыс буйында яр башынан ҡармаҡ һалып йөрөмәҫ. Балыҡтың ереһе — күл эсендә, балыҡсының йүнлеһе — күл өҫтөндә булыр.

— Ярай, табылыр әле, — тип килеште Айҙар. — Өлгөнөң олатаһы ҡалала ҡунаҡта йөрөй. Тик кәмәһен һәләк ҙур йоҙаҡ менән йоҙаҡлап киткән. Асҡыс яратып булһа...

Башлыҡ яңы фарманын иғлан итте:

— Кәмә табыуҙы Өлгө Яҡупҡа йөкләтергә!

Был ваҡыт Вәзирҙәр өйөндә ошондай күңелле һөйләшеү бара ине:

— Тандан тороп, бөгөн ҡоймаҡ иҙгәйнем. Балаларымды бер һыйлайым әле, исмаһам, — тип теҙеп китте Ҡорбанбикә еңгә. — Хәҙер дөрләтеп мейес яғып ебәрәм.

— Әсәй, — тине Насип, — ҡоймаҡтың шыма яғын майларһыңмы әллә шаҙра яғынмы?

— Шыма яғын да, шаҙра яғын да майлармын, улым. Бар әле йүгереп кенә аласыҡтан ҡоро утын алып ин.

— Их, тәмле була икән! — тип Насип хатта сәпәкәй итеп алды. Ул һә тигәнсе, ҡосаҡ тултырып, утын да кертеп ташланы.

Вәзиргә лә эш ҡалғайны әле:

— Ә һин, Вәзир, йүгереп кенә Йәмлегөл инәйҙәрҙән таба алып ҡайт. Ике таба менән сыжлатып ҡына бешереп алырмын. Ҡара уны, бер аяғың унда, икенсеһе бында булһын!

Бүтән йомош булһа, Вәзир, бәлки: «Ана, Насибың барһын», — тип ҡарышып та торор ине. Әммә был йомош ҡарыша торған йомош түгел ине. Ул атаһының оло итектәрен ҡуңалтаҡ кейеп кенә тышҡа атылды.

— Ҡойоп ямғыр яуа бит. Яланғас йөрөмә шулай әҙәм көлдөрөп, йүнһеҙ! Ана һырмаңды булһа ла элеп ал! — тип ҡысҡырып ҡалды Ҡорбанбикә еңгә.

Вәзир әйләнеп тә ҡарамаңы. Ағаһы өсөн яуапты Насип ҡайтарҙы:

— Тән сыныҡтыра бит ул, әсәй. Вәзир ағайым баһадир кеүек көслө буласаҡ. Бына күр ҙә тор. Анау уҫал үгеҙ бар бит әле, ана шуны сәтәкәй бармағы менән генә төртөп осорасаҡ ул.

— Бик осорор әле, һалҡын тейҙереп, анау Ҡашаф кеүек, ҡых-ҡых ҡыһылдай башлаһа...

— Баһадирға һалҡын теймәй ҙә ул, әсәй.

— Бына тағы икенсе бер иҫәүәне. Һиңә генә етмәгәйне тағы, тәтелдек.

Ҡорбанбикә еңгәнең бөгөн күңеле күтәренке ине. Өфөнән үҙенән килгән күҙлекле ағай кисә уның эшен маҡтап китте:

— Тауыҡтарың йырлап тора, эшең ырап тора икән, килен. Районда алдынғылар рәтенә сығып бараһың бит, — тине.

— Яҡшы һүҙең — йән аҙығы, рәхмәт, ағай, — тип ҡыуанып ҡалды Ҡорбанбикә еңгә.

Шулай итеп, бөгөнгө ҡоймаҡтың әсеткеһе кисә үк һалынғайны. Эшенә маҡтау ишеткән әсә, ҡой-

маҡ менән һыйлап, балаларын да ҡыуандырырға булды.

Мейескә ут та яғылды. Күмер ҙә төштө. Яңғыҙ таба күп тапҡырҙар сыжлап мейескә лә кереп сыҡты. Тик Вәзир генә китте лә батты.

## КӘМӘНЕ ЙӨҘӨРГӘ ӨЙРӘТӘМ...

Бөтә йорттар урамға теҙелешеп ултырған. Бер Йәмлегөл инәйҙең генә кескәй өйө, көтөүҙән айырылған кәзә бәрәсе һымаҡ, күл тыҡрығының арғы башына яр ситенә сығып баҫҡан. Уның ике тәҙрәһе күл яғына ҡарап тора. Әллә бер-бер нәмәгә үпкәләп, был өй шулай ауылға арты менән әйләнгән инде? Улай тиһәң, бөтә Бөркөтлө Йәмлегөл инәйҙе аһ итеп тора. Күрше-тирә уны аш-һыуҙан ҡалдырмай.

Был өйҙөң үҙ тарихы, үҙ яҙмышы бар. Өйҙөң төп хужаһы Мырҙабай атаҡлы балыҡсы ине. «Балыҡсы урыны һыу янында булырға тейеш», — тип ул нигеҙен яр буйына ҡорҙо. Бик матур ғүмер иттеләр, улдар үҫтерҙеләр. Күл өҫтө тып-тын бер көндә Йәмлегөл инәйҙең өрлөк кеүек ике улы бер юлы ошо өйҙән һуғышҡа сығып китте. Икеһенең береһе әйләнеп ҡайтманы. Һуғыш баҫылыр алдынан ғына Мырҙабай ҡарт үҙе лә үлеп китте. Донъялар именләнә башлағас, колхоз идараһы Йәмлегөл инәйҙең өйөн ауыл уртаһындағы буш урынға күсереп һалырға ҡарар сығарҙы. Ләкин ул риза булманы: «Улдарымдың нигеҙенән ҡуҙғалмайым», — тине.

Әгәр Йәмлегөл инәй теге саҡта өйөн күсереп һалырға ризалашҡан булһа, бая таба алырға сыҡҡан Вәзир шунда уҡ әйләнеп ҡайтыр ине. Ә ул китте лә олаҡты.

Вәзир, ҡыптыр-ҡыптыр йүгереп, тыҡрыҡ башына килеп сыҡты. Йәмлегөл инәйҙең урам ҡапҡаһын инде үрелеп астым тигәндә генә, уның йылғыр күҙ-

ҙәре ямғыр селтәре аша күл өҫтөн ҡапшап сыҡты. Яр ситендә ҡаҙҙар күшегеп ултыра. Ә эстәрәк кемдер кәмәлә ишкәк ишеп булаша.

Бәй, был Яҡуп та баһа!

Яҡуптың кәмәлә йөрөүен Вәзир яҡындан ҡарап китмәй булдыра алманы, әлбиттә. Быға уның көсө етмәне. Ҡойоп ямғыр яуғанда Өлгө Яҡуп кәмәлә йөрөһөн дә, һин шуны иҫәпкә алмай уҙып кит, имеш. Юҡ инде. Бындай мәрәкәләр һирәк була ул.

Вәзир күл ситенә йүгереп килде. Башта бер аҙ өндәшмәй ҡарап торҙо. Яҡуп уның килгәнен дә, торғанын да күрмәне. Үҙ мәшәҡәте үҙенә еткәйне уның. Нисек кенә ишеп ҡарамаһын, кәмә алға ла китмәй, артҡа ла сиҡмәй, бер урында әйләнеп тик тора. Ә яр яғынан иҫкән ел уны аҡрын-аҡрын ғына эскә ҡыуа.

Вәзир сыҙаманы:

— Эй, Өлгө, ни эшләйһең унда? — тип ҡысҡырҙы.

Яҡуп ҡапыл тертләп китте. Ләкин үҙен тиҙ үк ҡулға алды:

— Олатайымдың яңы кәмәһен йөҙөргә өйрәтәм, — тип яуап ҡайтарҙы.

— Их, һин, бер ишкәкле кәмәне ултырып ишәләрме ни? Уны аяҡ үрә баҫып ишәләр. Баҫ хәҙер үк! — тип бойорҙо Вәзир.

Яҡуп, кәмә ситенә үрелә биреп, һыуға ҡарап алды:

— Һыу тәрән бит...

— Ҡурҡма, йүнһеҙ, бында һай, һине лә буйламай.

— Мин ҡурҡмайым да ул.

Яҡуп кәмәнең нәҡ уртаһында ултыра ине. Шул ултырған еренә аяҡ үрә баҫты. Вәзир уға яңы команда бирҙе:

— Артҡа күс! Уртаға баҫып кем ишкәк ишә, ә?

Яҡуп һаҡ ҡына артҡа сигенде.

— Бына шулай, — тип хупланы уны Вәзир. —

Хәҙер ишә башла. Башта уң яҡтан иш! Уң яҡтан тим бит! Уң менән һулды айырмайһыңмы ни?

Әммә был юлы Вәзир уң менән һулды үҙе бутаны. Уға ҡаршы баҫҡан Яҡуптың уң яҡтан ишеүе һул булып күренде. Быны Вәзир үҙе лә һиҙеп алды. Тик сер генә бирмәне.

— Ярай, әләйһә, белгәнеңдә иш,— тигән булды. Яҡуп ишә бирҙе, ә яр башынан команда ҡабатлана торҙо: «Аръяҡтан иш, шулай, шулай! Бирьяҡтан иш! Аръяҡтан иш!» Әйләнеп-тулғанып булһа ла, кәмә ярға яҡынлаша башланы. Ләкин был ғына Вәзирҙе ҡәнәғәтләндермәне. Ул, ике ҡулын алмаштилмәш һелтәй биреп, бойороҡ өҫтөнә бойороҡто яуҙырып ҡына торҙо: «Ишкәгеңде батырма! Киңерәк һелтә! Киңерәк! Нинә сәғәт теле кеүек һелкенеп тораһың? Тура баҫып иш! Ана шулай!»

Яҡуп һәр бер бойороҡто теүәл үтәргә тырышты. Тик инде өйрәнеп бөттөм тигәндә генә, көтөлмәгән бәлә килеп сыҡты. Яҡуптың киң генә һелтәп, һул яҡтан ишеп ебәреүе булды, кәмәнең ҡырынайып китеүе булды. Тегеләй сайҡалды кәмә, былай сайҡалды. Кәмәнән былайыраҡ Яҡуп сайҡалды. Вәзир: «Ултыр!» — тип ҡысҡырырға ла өлгөрмәне, Яҡуп гөпөрт итеп һыуға ла сумды. Ҡурҡыуынан һөрәнләргә лә онотто. Ҡолап төшкәс, Яҡуп бер талай бөтөнләй күренмәй торҙо. Тулҡын өҫтөндә уның шаҡмаҡлы кепкаһы ғына тороп ҡалды. Лысма еүеш кепка бата башлауға Яҡуптың башы ҡалҡып сыҡты.

Вәзир, рогатканан атылған таштай, күлгә ташланды. Һыуға инеү менән, уның итектәре үҙенән-үҙе төшөп ҡалды. Яҡуптың башы күренеүгә, Вәзир кәмә эргәһенә барып та етте. Был урында күл ысынлап та тәрән түгел. Шулай ҙа Яҡуптың ҡолағына етерлек ине. Йөҙә белмәгән кешене батырырға күп кәрәкме ни?

Вәзир, бешмәгән ишкәксенең яғаһынан эләктереп, ярға табан һөйрәне. Бер нисә аҙымдан һуң уны

баҫтырып ҡуйҙы. Яҡуптың йөҙө борған сепрәк төҫлө ап-аҡ ине.

— Күл һыуы тәмлеме? — тип шаяртмаҡсы булды Вәзир. Тегеһе баш ҡына сайҡаны. Күрәһең, бик үк тәмле түгелдер.

— Бар, сыға тор, — тине Вәзир. — Мин сумып, кепкаңды эҙләйем.

Шунда ғына Яҡуп телгә килде.

— Кәрәкмәй, — тине ул, ҡалтырана-ҡалтырана, — баш һау булһа, кәпәс табылыр әле.

Кепкаһы — кепка. Ә бына кәмә менән ишкәк икеһе ике ерҙә, тулҡын өҫтөндә аҡрын ғына бәүелгән булып, эскә табан ыңғайларға самалай түгелме? Шулай шул. Юҡ инде. Быңдай баш-баштаҡлыҡҡа юл ҡуйып булмай. Вәзир, ҡолас һалып, яңынан күлгә йөҙөп инде. Башта ул ишкәкте барып тотто. Унан, кәмәнең ҡойроғона сығып, бер ынтылыуҙа менеп тә баҫты. Яҡуптың хәл мөшкөлөрәк булһа



ла, сая иптәшенә һоҡланмай булдыра алманы ул. «Их, шулай йөҙә белһәң ине», — тип эсенән көнләшеп ҡуйҙы.

Кәмә мороно ярға төртөлгәс тә, Вәзир һикереп төштө. Күл ситендә ҡуңыстары ғына күренеп ятҡан итектәрҙе табып, уларҙың эсендәге һыуҙы түкте. «Атайымдың итектәре йыуылды. Һәйбәт булып ҡалды әле, — тип, был мәшәҡәттәргә яҡшы һөҙөмтә лә сығарып ҡуйҙы ул.— Былай булғас, ялан аяҡ ҡына ҡайтырға тура килә инде».

Яҡуп баҫҡан урынында ҡуҙғалмай ҡатып тик торҙо.

— Һинән рәт сығасаҡ, — тип йыуатты уны Вәзир. — Тик әлегә таҡыл яғы ғына самалыраҡ. Ә рәт сығасаҡ.

— Ысынмы?

— «Ысынмы?» «Ысынмы?», имеш... Мин ҡасан бушты һөйләгәнем бар?

— Юҡ та.

— Ә хәҙер ни эшләйбеҙ?

— Әлләсе. Олатайымдың кәмәһен урынына илтеп ҡуяйыҡ.

Малайҙар кәмәне яңынан һыуға этәреп төшөрҙөләр.

— Ал ишкәкте, түлке ашыҡмай иш — тине оҫта үҙенең өйрәнсегенә.

Күл ситенән генә Яҡуп кәмәне үҙ урынына алып китте. Вәзир уға үҙ кәңәштәрен һаман бирә барҙы. Бер сирҡаныс алған Яҡуп үҙе лә был юлы ишкәк менән ҡыйыуыраҡ эш итте. Утыҙ-ҡырҡ аҙым араны үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

Кәмәнең сылбырын бағанаға ура, йоҙаҡ элеп торғанда ғына, тыҡрыҡ осонан Яҡуптың әсәһе сәрелдәп килеп сыҡты.

— Утҡа ла һала, һыуға ла батыра бит был бала мине! Әлеге Вәзирҙең эшелер инде! Көшөл кеүек булғанһың бит, балаҡайым! Бөгөн үк кәнсәләргә барып башырмаһаммы — исемем Гөлйөмеш булма-

һын. Ҡайҙа иттең уның кәпәсен? Ниңә шул балаға ҡаныҡтың һин! Торғаны менән бер юлбаҫар үҫә бит!

Гөлйемеш апай Яҡуптың белгәненән тотмаҡсы итте. Ләкин Яҡуп ситкә тайшанды.

— Әгәр, әсәй, Вәзиргә тағы ла тел тейҙерһәң, хәҙер үк ошо кәмәгә ултырам да күл эсенә инәм дә китәм. Бер инһәм, мәңге сығасаҡ башым юҡ. Бел дә тор.

Һүҙһеҙ генә башын эйеп торған Вәзиргә зәһәрле ҡараш ташлап алды ла Гөлйемеш апай һүҙен ҡапыл икенсегә борҙо:

— Ярай, ярай, тел тейҙермәм, әйҙә, һиненсә булһын, — тип улын етәкләргә ынтылды.

— Етәкләмә мине, — тип ҡарышты Яҡуп. — Етәкләмәһәң дә ҡайтырмын... Тик Вәзиргә тел тейҙермәҫтән булһын. Юғиһә...

— Ярай, ярай, бөттө тим бит инде.

Әсә менән улы ҡайтыр яҡҡа китте. Ике итеген ике ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, Вәзир күл ситендә баҫып ҡалды. Унда таба ҡайғыһы ла, ҡоймаҡ шатлығы ла юҡ ине инде.

## ЯМҒЫРҘАН ҺУҢ

Көн буйы яуған ямғыр кискә ҡарай ҡапыл туҡтаны. Китмәҫкә килгәндәй түшәлеп торған болоттар әллә ни арала таралып та өлгөрҙө. Ямғырҙа йыуылып таҙарған асыҡ зәңгәр күккә ҡояш яңынан хужа булды. Тик ҡайҙалыр бейектә аҙашып ҡалған ваҡ тамсылар ғына һирәк-һаяҡ тамғылап ҡуя. Ере тамсылар ергә төшкән саҡта, улар, уйынға мауығып, һауала тороп ҡалғандар, күрәһең. Ни тиһәң дә, бәләкәстәр шул. Уйынға бер керешеп китһәләр, донъяларын оноталар.

Ул кескәй тамсылар шундай йылы, ягымлы булалар. Ҡулыңды һуҙып торһаң, усыңа һикереп ир-

кәләнәләр, шаяралар. Усынды йомһаң, бармаҡ араларынан сығып ҡасалар. Ҡалай шаяндар!

— Әһә, ҡаптыңмы ҡармаҡҡа, бләктеңме бармаҡҡа! — ти Гөлнур, усына тамған тамсыны йомарлап. — Үҫе ҡалай йылыҡай... Унда, ҡояш эргәһендә, йылылыр шул. — Ул яңынан усын аса ла бүтән тамсыны саҡыра. — Йә, там инде, тағы бер генә там!

Ҡыҙҙың кескәй усына тамсы тағы тама. Ул шарҡылдап көләп ебәрә.

Гөлнур ҡойма буйындағы йыуан бүрәнәнең бер башына атланған да ямғыр тамсылары менән һөйләшә. Ә бүрәнәнең арғы осонда Айҙар менән Ғабдулла байтаҡтан бирле һүҙһеҙ ултыра. Малайҙарҙың кәйефе һүрән күренә. Эше ҡалған кешеләр шундайыраҡ була инде. Улар бөтә урамды бер итеп шарлауыҡ эсендә сабышып уйнаусы ваҡ малайҙарҙың сыр-сыуына ла, Гөлнурҙың өҙлөкһөҙ һайрауына ла иғтибар итмәйҙәр. Үҙ мәшәҡәттәре үҙҙәренә еткән.

— Был Өлгөнән дә уңманыҡ, — тине Айҙар, ниндәйҙер фекерҙәренә йомғаҡ яһап. — Кәрәкмәгәндә гел эргәлә урала, кәрәк саҡта күҙгә лә күренмәй, мәмәй.

Һүҙгә ҡушылыу урынына Ғабдулла теш араһынан төкөрөп кенә ҡуйҙы. Был инде асыуҙың сиген аңлата ине.

Бер аҙҙан Айҙар тағы һүҙ ҡуҙғатты:

— Йә ул шөрләгәндер әле... Ә ҡарттың кәмәһе бер тигән. Тамсы ла һыу кермәй.

Малайҙарға Яҡуптан бигерәк кәмә кәрәк ине.

— Мине Башлыҡ тип һанайһыңмы? — тине Ғабдулла ҡапыл ғына.

— Һанайым.

— Һанаһаң, бар хәҙер үк Өлгөнө бында саҡырып килтер.

— Әсәһе мине күреп ҡалһа, ғүмер ҙә ебәрәсәк башы юҡ. Хәҙер сәрелдәргә тотонор.

Нәҡ шул саҡ Айҙарҙың ҡолағына Гөлнур тауышы сағылып ҡалды. Ул инде аҡ таш эргәһендә үҫеп ултырған үлән ҡыяғы менән һөйләшә ине.

Айҙар һеңлеһен үҙ эргәһенә саҡырып алды:

— Гөлнур һылыуым, — тине ул, ярамһаҡланып, — һиңә турғай балаһы кәрәкме?

— Кәрәк тә... Һин бит тота белмәйһең.

— Беләм. Бына күр ҙә тор. Һинең тәтәй күлдәгеңде ҡотлап, бер юлы икене тотоп бирермен, йәме.

— Йә, — тип, Гөлнур үҙ юлына китмәксе итте. Уның баяғы үлән ҡыяғы менән һөйләшер һүҙе бөтмәгәйне әле. Ләкин ағаһы уны тиҙ генә ҡотҡарманы.

— Ул турғай балаларына мин ситлек тә яһап бирермен, зәңгәргә буяп. Йәме.

— Йә, — тип баш ҡаҡты Гөлнур. — Мин уларға ем һибермен. Эйеме?

— Һиберһең. Шуның өсөн һин дә минең йомошомдо тыңла. Һин үҫкән бит инде.

Был юлы «үҫкән» булғыһы килмәһә лә, Гөлнур ҡаршы өндәшмәне. Сөнки уға турғай балаһы бик кәрәк ине. Әлфиә исемле ҡыҙҙың турғайы булһын да, Гөлнурҙыҡы булмаһын, имеш. Ул, теләһә ниндәй йомошто тыңларға әҙер икәнен белдереп, ағаһының күҙҙәренә ҡараны.

— Бар, һылыуым, тиҙ генә Яҡупты саҡырып кил, — тине Айҙар. — Тик ҡара уны, әсәһе күреп ҡалмаһын. Әрләшә ул.

Ялан аяҡтары менән бысраҡты сәпелдәтә-сәпелдәтә, Гөлнур Яҡуптар яғына ҡарай йүгерҙе. Барып еткәс тә, ул дөбөрләтеп ҡапҡанан килеп инмәне. Ҡойма ярығынан башта йорт алдын күҙәтеп сыҡты. Уның ҡарашы утынлыҡта нимәлер юнып ултырған Яҡупҡа туҡталды. Тегеһе үҙ эше менән шул саҡлы мауыҡҡан, хатта күтәрелеп тә ҡарамай. Ҡысҡырһаң, әсәһенең ишетеүе бар. Күп уйлап-нитеп тормай, Гөлнур йоҙроҡ ҙурлығы таш алып ҡойма аша ырғытты. Таш сәп итеп батҡаҡҡа килеп

төштө. Яҡуп һиҫкәнеп китте. Шунда уҡ ҡойма ярығынан кескәй генә бармаҡ килеп сыҡты. Яҡуп, әлбиттә, алыҫтан бармаҡты күрмәне. Шулай ҙа ул, нимәлер һиҙенеп, ҡойма эргәһенә килде. Баяғы бармаҡ ҡытыр-ҡытыр ҡойманы тырнарға кереште.

— Ҡем унда? — тип бышылданы Яҡуп. Урам яҡтан Гөлнур сипылдап яуап ҡайтарҙы:

— Мин. Айҙар ағайым менән Ғабдулла һине саҡырҙы. Тиҙ үк килһен, тинеләр. Был Өлгөнән дә уңманың, тип асыуланырҙар юғиһә. Улар беҙҙең бүрәнә өҫтөндә ултыра.

— Ярар, күп телеңә һалынма, бар, ысҡын!

— Ысҡынырмын шул!

Әммә Гөлнур ҡайтыр яҡҡа «ысҡынманы». Ҡапыл уның иҫенә тегелеп ятҡан күлдәге килеп төштө. Яңы күлдәктең хәлен белергә тип, ул Йәмлихә апайҙарына тороп йүгерҙе. Уны бит бер юлы ике шатлыҡ көтә: тәтәй күлдәк тә, күлдәктең һөйөнсөһө лә!

Яҡуп иптәштәрен оҙаҡ көттөрмәне. Картуф баҡсаһы аша башта ул күл яғына сыҡты, унан тыҡрыҡ буйлап урамға менде. Урауыраҡ булһа ла, был юл ҡурҡынысһыҙ ине. Сөнки шығырлыҡ урам ҡапҡаһы һәр ингән-сыҡҡанды Гөлйемеш апайға ошаҡлап ҡына тора.

Ғабдулла менән Айҙарҙың Яҡупты ике көн күргәндәре юҡ ине. Был арала Яҡуп бер аҙ тартыла төшкән, маңлайы ҡара көйөп күгәргән, сикәләре, яңаҡтары ҡутырлап бөткән. Ә шулай ҙа ул элеккегә ҡарағанда нисектер үҫеп, турайып киткән һымаҡ күренә.

— Кем үҙенде шулай килештереп биҙәне? — тип ҡаршыланы уны Башлыҡ.

— Үҙем.

— Шыттырма!

— Икмәк өҫтө. Мин ҡаянан һикерергә өйрәндем. Үҙең ҡуштың да. Минең өлгөләк бөттө инде. Тик йөҙә генә белмәйем.

— Бер-ике күнәк күл һыуы эсһәң, өйрәнерһең әле.

— Өйрәнермен дә ул... — Иртән уртлаған күл һыуынан уның әле лә күңеле болғана ине.

Был ике көн эсендә нимәләр эшләгәнен Яҡуп берәм-берәм һөйләп бирмәксе ине лә, Башлыҡ үҙе һорамағас, сабыр итергә булды.

— Олатайың ҡасан ҡайта? — тип һораны Айҙар.

— Олатай ни ул тиҙ генә ҡайтмаҫ әле. Ә ниңә?

— Уның кәмә асҡысы ҡайҙа?

— Әллә.

— Һин күп әлләләмә әле, — тине Башлыҡ ҡырҡа ғына,— иртәгә таңдан күлгә төшөргә кәрәк. Яҡтырыр-яҡтырмаҫ Йәмлегөл инәйҙең мунсаһы артында йыйылышабыҙ. Кәмәң кистән үк әҙер булһын.

Иптәштәренең йомошо төшөүгә Яҡуп сиктән тыш шатланды. Быға тиклем гел ситкә тибәрелеп йөрөгән кешегә «Өс тағандың» Башлығы үҙе эш йөкләтһен дә, шатланырһыңмы, юҡмы? Яҡуптың аҡһыл йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, күҙҙәрендә быға-са күренмәгән яҡты нур балҡыны. Тиңдәштәрең араһында үҙеңде тиң һиҙеү бик рәхәт була икән.

— Кәмә ни ул әҙер! — Яҡуп ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. — Хыт хәҙер үк ултыр ҙа сыҡ та кит.

— Әҙер, имеш, унда бейәләй дәүмәле йоҙаҡ эленеп тора.

— Дәү булһа ла, алдаҡ йоҙаҡ ул. Заһиттарҙың алабайы һымаҡ, өрмәй ҙә, тешләмәй ҙә. Олатайым уны былай ғына элеп ҡуя.

— Олатайың аҙаҡтан әрләмәҫме һуң? — тип Айҙар арт яҡты ҡайғыртып ҡуйҙы.

— Әрләмәҫ. Олатайым үҙемдеке әле.

«Өс тағандың» өс терәүе шундай мөһим нәмә хаҡында һөйләшеп ултырғанда, ике ҡулын кеҫәһенә тығып, урамдың аръяғынан Вәзир үтеп китте.

Үҙе ниндәйҙер көйгә һыҙғырған була. Йәнәһе, уның быларға иҫе лә китмәй. Йәнәһе, уның эшләнәһе эше эшләнгән, донъяһы тигеҙ, урамға ла ул былай ғына, тәп сыныҡтырып йөрөү өсөн генә сыҡҡан.

Ары үттс Вәзир, бирс үттс. Ләкин уға әйләнеп ҡараусы ла булманы. Дөрөҫөрәге, әйләнеп ҡаранылар, тик сер бирмәнеләр. Бүрәнә өҫтөндәгеләрҙең береһе лә Вәзир исемен телгә алып һүҙ башларға баҙнат итмәне. Әйтерһең, урамда уларҙың элекке дуҫы түгел, ә инер ҡапҡаһын тапмай аҙашҡан һарыҡ бәрәсе йөрөй ине. Юҡ, аҙашҡан бәрәс булһа, уны һәр ҡайһыһы ҡапҡа асып индерер ине.

Юғары остан урап ҡайтҡанда, Вәзир урамдың был яғына сыҡты. «Өс таганга» яҡынлаша башлағас, һыҙғырыуҙан туҡтаны, кеҫәләренән ҡулдарын алды, мөмкин тиклем меҫкенерәк ҡиәфәткә инергә тырышты. Ә меҫкен булыу уға шул тиклем ауыр ине. Үҙ-үҙен ҡыҙғаныуҙан хатта күңеле тулып китте. Әммә, түбәнһенеп булһа ла, уға иптәштәре менән яңынан аралашырға кәрәк ине. Яңғыҙлыҡҡа сыҙай торғандарҙан түгел ине Вәзир. Малайҙар тураһына еткәс, ул, бөтә көсөн йыйып, һүҙ ҡушты:

— Ғабдулла, — тине ул үҙәк өҙгөс ҡыҙғаныс тауыш менән, — теге бәкене мин шунда уҡ... ышанмаһаң, Шәрифулланың үҙенән барып һора. Бынан һуң кеше әйберенә тейһәм, ҡулым ҡороһон. — Уға иң тәүҙә Ғабдулланың күңелен иретергә кәрәк ине. Айҙары иһә Башлыҡ һүҙенән сығасаҡ түгел.

Ғабдулла, тупаҫ ҡына яуап ҡайтарырға әҙерләнеп, Вәзирҙең йөҙөнә күтәрелеп ҡараны. Ләкин әйтер һүҙен әйтә алманы. Уның алдында күҙҙәрен сылт-сылт йомоп торған Вәзирҙең бөтә ҡиәфәте, ҡарашы Башлыҡтың барлыҡ асыуҙарын ерсә таратып ебәрҙе. Уның беләктәренә, күкрәктәренә ҡаҙ тәпе ҡалҡҡан, өҫкө ирене дер-дер ҡалтырай, ҡорһағында буйҙан-буйға сыйылған эҙ ята,— ул эҙ иртән күлдә, Яҡуптың кәмәһенә үрмәләп менгән саҡта һалынғайны.

Ғабдуллала ҡыҙғаныу тойғоһо уянды тиеү генә аҙ булыр. Малайҙың йөрәген нимәләр, әрнетерлек итеп, семтеп алды. Уның күҙ ҡарашына әлеге Вәзир түгел, әлекке дуҫ, бәләкәстән бергә үҫкән Вәзир килеп баҫты. Шундай саҡта бөтәһе лә бер юлы хәтергә төшә бит ул... Әле мәктәпкә лә йөрөмәйҙәр ине, буғай. Бер саҡ урманда кәпәс сөйөп уйнағанда, Ғабдулланың кепкаһы иң өҫтәге ҡоро ботаҡҡа эленеп ҡалды. Күпме таяҡ, таш ырғыттылар улар, ләкин кепканы бәреп төшөрә алманылар. Ә ағас башына үрмәләргә Вәзирҙән башҡа берәүҙең дә һоло етмәне. Кепканы ул менеп алды. Төшкән саҡта яҙа баҫып, үҙе лә ҡолап төштө. Хатта шыңшып та ҡараманы ул. «Йөрөмәгән — йығылмаҫ», — тип кенә ҡуйҙы.

Ғабдулла менән Вәзир бергәләп күпме балыҡҡа йөрөнөләр. Ғабдулланың балыҡтан бәхете гел самалы булды. Вәзир ике-өстө ҡаптырғанда, ул берҙе лә эләктерә алмай йонсоно. Шулай ҙа Вәзир, кис ҡайтҡанда, балыҡты, эреһен эрегә, вағын ваҡҡа айырып, һәр ваҡыт ҡап уртага бүлде.

Ә былтыр шундай хәл булды. Ҡайһылыр бер яманы күл тыҡрығындағы тәрән ҡоҙоҡҡа бесәй балаһы ташлап киткән. Бесәй һыуға батмаған, ә иң түбәндә сығып торған бер бураға менеп ултырған. Төшкә тиклем ҡысҡырҙы бисара. Дилбегәгә күнәк бәйләп төшөрөп ҡаранылар. Бесәй балаһының күнәккә күсеп ултырырға башы етмәне. Ололар ҙа, малайҙар ҙа әллә ни саҡлы булаштылар, тик эш сығара алманылар. Шул саҡ, оҙон арҡан һөйрәп, Вәзир килеп етте. Бер осон бағанаға бәйләне лә, арҡанга тотоноп, тәрән ҡараңғы ҡоҙоҡҡа төшөп тә китте. Башта теге күнәккә ултыртып бесәй балаһын мендереп ебәрҙе, унан үҙе менде.

Бына шул малай хәҙер, ғәйепле башын түбән эйеп, иптәштәренән һүҙһеҙ генә ғәфү үтенә. Ғабдулла ла, Айҙар ҙа уны ғәфү итергә әҙер ине. Әммә «Өс тағандың» намыҫына тап төшөргән кешегә ҡарата

тиҙ үк сиселеп китеүҙе Башлыҡ урынһыҙ тапты. «Бындай саҡта нескә тойғоло булырға ярамай», — тип уйланы ул, шуға күрә лә Ғабдулла ғәмһеҙ, һалҡын тауыш менән һорау бирҙе:

— Нимә кәрәк һиңә?

— Кәрәкмәй.

— Кәрәкмәгәс, ниңә был тирәлә уралаһың?

— Һеҙ кәрәк миңә, — Вәзирҙең хатта тауышы ҡалтыранып китте.

Вәзирҙе йәлләп, Яҡуп саҡ-саҡ илап ебәрмәне. Егетлектә, саялыҡта һәр саҡ өлгө булған малайҙың шундай хәлгә төшөүе уның башына һыймай ине. Бөтә урамды дер һелкетеп торған Вәзиргә ни булды икән? Иптәштәре ниңә уны ситкә тибәрәләр? Дуҫына хөрмәт йөҙөнән ул кеҫәһендәге ҡыҙыл һаплы рогатканы ҡапшап ҡуйҙы.

— Теләһәгеҙ әрләгеҙ, теләһәгеҙ туҡмағыҙ, — тине Вәзир, — тик бер һүҙемде генә тыңлағыҙ, малайҙар.

— Йә, һал хәбәреңде. Юғиһә беҙҙең ваҡыт юҡ.

— Беҙҙең аҙбарҙа бер ирмәк нәмә бар. Ирмәк тип ни инде, әллә ни ирмәк тә түгел. Әйҙәгеҙ, шуны барып ҡарайбыҙ.

— Йә берәй хәйләләр әле, — тип шик белдерҙе Айҙар.

— Хәйлә түгел ул.

— Ә нимә?

— Барғас күрерһегеҙ.

«Өс тағандың» өс тәрәүе бер-берeһенә ҡарашып алды. Тәүге һүҙҙе, әлбиттә, Башлыҡ әйтергә тейеш ине. Һәм ул әйтте лә:

— Барһаҡ та, һине һынар өсөн генә барабыҙ. Ҡара уны, хәйлә-мәйлә ҡороп маташһаң, аҙаҡ үпкәләштән булмаһын... — Башлыҡ үҙенең тос йөҙроғон күрһәтеп алды.

— Әйтәм бит, теләһәгеҙ аҫырһығыҙ, теләһәгеҙ киҫерһегеҙ...

Ғабдулла «Өс тағанға» команда бирҙе:

— Әйҙәгеҙ, ҡарап ҡарайыҡ әле.

Яҡупты саҡырыу Вәзирҙең самаһына тура килмәй ине. Уңан да бигерәк, был урында Өлгө бөтөнләй артыҡ ине. Әҙәм араһына керергә уға иртәрәк әле.

— Ә һинә, Яҡуп, эйәрмәһәң дә була, — тине ул.

Яҡуп күҙҙәрен мөлдөрәтеп Ғабдуллаға ҡараны. Уның өсөн яуапты Башлыҡ үҙе бирҙе:

— Эйәрһен! Ул беҙҙең өсөнсө таған.

Вәзирҙең йөрәге жыу итеп китте. Әммә сер бирмәне.

— Барһын, әләйһә, — тигән булды. Шунда уҡ уйында яңы иҫәп сығарып алды: «Ғабдулла менән Айҙарға өсәр пәрәник тейһә, Яҡуп менән үҙемә берәр ҙә еткән. Әгәр улай тура килмәй икән, кеше башына икешәр сығасаҡ...»

## ВӘЗИРҘЕҢ ИКЕНСЕ ҺӘЛӘКӘТЕ

Аҙбарға килеп ингәс, Вәзир үҙен хужа итеп һиҙҙе. Уның тауышы ла хәҙер көрөрәк яңғырай башланы. Ни тиһәң дә, бөгөн ул табын хужаһы буласаҡ.

— Малайҙар, — тине ул тантаналы тауыш менән,— һеҙҙең өсөн бәләкәс кенә һыйым бар. Аҙ булһа ла күп итеп ҡабул итегеҙ.— Был һүҙҙәрҙе табын йыйған саҡта уның атаһы йыш ҡына әйтә торғайны.

«Ниндәй һый булыр икән?» — тип малайҙарҙың күҙҙәре йылтырай башланы. Тәмле тамаҡ Яҡуп хатта ирендәрен сәпелдәтеп, һеләгәйен йотоп ҡуйҙы.

—Һый, тип ни, әллә ниндәй һый ҙа түгел инде, — ҡыуанысынан Вәзир бер туҡтауһыҙ тәтелдәне. — Ҡана, Яҡуп, фуражкаңды биреп торсо.

Яҡуптың башында атаһының иҫке фуражкаһы ине.

— Вәзир, фуражканы алып, аҙбарҙың ҡараңғы мөйөшөнә китте. Ситән араһына ҡулын тығып, ул һәрмәнергә кереште. Ҡалған алты күҙ уны күҙәтеп торҙо.

— Әһә, эләктегеҙме, тәмлекәйҙәр! — тип ул ситән араһындағы перәниктәрҙе берәм-берәм фуражкаға тултырҙы. — Бер, ике, өс, дүрт, биш, алты, етә, һигеҙ, Ғабдулла менән Айҙарға өсәр перәник, ҡалғандарға — берәр, бөтәһенә лә тигеҙ.

Әлбиттә, һый малайҙар көткәндән артығыраҡ ине. Иҫ итмәгәндә перәник менән һыйланыу һирәк эләгә ул. Яҡуп йәнә бер тапҡыр иренен сәпелдәтеп ҡуйҙы. Бүтәндәрҙең дә тамаҡ төптәре ҡытыҡланып китте.

Вәзир фуражкаһының ике ситенән бөрөп тотоп алды. Ҡунаҡтарҙы аҙбарҙа һыйлауҙы ул яҡшыһынманы. Аҙбарҙа көйшәп ултырырға улар быҙау түгел дә.

— Әйҙәгеҙ, аласыҡ артына барабыҙ, унда һәләк аулаҡ, — тип саҡырҙы ул ҡунаҡтарын. Ҡунаҡтар хужаның һүҙен йыҡманылар.

Аласыҡ артында яҫы ҙур таш ята. Табынды шунда ҡороп ебәргәндә, бик йәтеш буласаҡ. Бына хәҙер хужа шул таш өҫтөнә перәниктәрҙе таратып ташлар. Ҡунаҡтар ҡыҫтатҡан булыр. Вәзир уларҙы өҙләкһеҙ ҡыҫтап торор, Яҡупты, бәлки, артыҡ ҡыҫтамаҫ та.

Ҡунаҡ һыйлауҙан да күңеллерәк нәмә бармы икән был донъяла?

Аласыҡ артына сыҡҡас, Вәзир фуражкалағы мөлкәтте таш өҫтөнә сәсеп ебәрҙе лә бушаған «һауытты» Яҡупҡа ырғытты. Әммә ҡунаҡтарға ни булды? Әле генә йылмайған ирендәр ҡапыл ғына турһайҙы, йылтырап торған күҙҙәр тоноп китте. Ни булды был ҡунаҡтарға?

Таш өҫтөндәге һигеҙ перәниктең береһе генә лә бөтөн түгел ине. Ҡайһыһының башы, ҡайһыһының ҡырыйы кимерелгән, бер нисәһе үтәнән-үтә тишел-

гән. Ҡүрәһең, перәникте малайҙар ғына түгел, сысҡандар ҙа ярата икән. Ике көн эсендә улар байтаҡ хөрмәт күрергә өлгөргәндәр.

— Сысҡандан ҡалған һыйынды үҙең генә һоғон инде, — тине Башлыҡ.

Вәзир тамам ҡойолоп төштө. Кеше башына бәлә килеүсе килер ҙә, был тиклем үк килмәҫ инде.

— Кисә генә ҡайтарып ҡуйғайным да, — тип мығырланы ул, — ышанмаһағыҙ ана...

Яҡуп эште төҙәтергә тырышып ҡараны:

— Сысҡандан ҡалғанды ашаһаң, теш ныҡ була икән ул, — тигән булды. Айҙар уны шып туҡтатты:

— Беҙҙең тештәр былай ҙа ныҡ. Һинең кеүек беҙ шәкәр кимереп үҫмәгән.

Шул тиклем ымһынып ҡал да, гәрлегең килерме, юҡмы? Малайҙарҙың ғәрлеге эстәренә һыймай ине.

— Рәхмәт, һыйланғандан да артыҡ булды, — тине Ғабдулла. «Өс тағанға» шунда уҡ бойороҡ бирҙе: — Киттек!

Ҡунаҡтар яй ғына китеп барҙылар. Вәзир тәүҙә таш өҫтөндәге перәниктәргә бик оҙаҡ ҡарап торҙо. Унан тегеләрҙе берәм-берәм картуф баҡсаһына тондора башланы. Һелтәгән һайын әсенеп бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатланы: «Мә һиңә!» «Мә һиңә!» «Мә һиңә!» Был һүҙҙәрҙе ул сысҡандарға ҡаратамы, перәниктәргә ҡаратамы, иптәштәренә ҡаратамы, үҙенә ҡаратамы әйтте, — уныһы билдәһеҙ ине. Һуңғы перәникте ырғытҡас, ул лап итеп таш өҫтөнә ултырҙы ла быуылып иларға кереште. Күптән инде илау-һыҡтауҙың ни икәнен белмәгән Вәзир оҙаҡ, бик оҙаҡ үкһене. Күҙҙәрендә йәше бөткәнсе иланы ул.

Көн тыуғанда беҙҙең Ҡылыс күлен күргәнегеҙ бармы? Юҡтыр шул. Бер генә тапҡыр күрһәгеҙ ҙә, хайран ҡалыр инегеҙ. Мин был хаҡта маҡтаныр өсөн һүҙ ҡуҙғатмайым. Ҡылысты ла, уның тандарын да беҙ яһамаған, уларҙы тәбиғәт шулай яратҡан. Беҙҙең маҡтаныр урыныбыҙ юҡ. Мин тик шуның өсөн генә әйтәм: ошо матурлыҡтан һеҙгә лә өлөш сығарғы килә.

Яңы көндөң тәүге нурҙары башта Ҡылыс аръяғындағы бейек текә ҡаяға килеп бәреләә. Шунан һуң, сәселеп, тирә-яҡҡа тарала. Был ваҡыт әле күл, ап-аҡ томандан һырылған йомшаҡ юрғанын баштан-аяҡ ябынып, йоҡлап ята. Таң яҡтыһы ғына уны рәхәт йоҡоһонан уята алмай, киреһенсә, күл юрғаның тағы ла нығыраҡ бөркәнә төшә. Беҙҙең тау яғында йәйге иртәләр һалҡынса була шул. Тик ҡояш үҙе күренгәс кенә, Ҡылыс, ҡынынан һурып алынған ҡылыс төҫлө, ялтырай башлай.

— Оҙаҡ йоҡлайһың, Ҡылыс, — тип шелтәләй уны ҡояш. — Ниндәй төштәр күрҙең?

— Замандар имен ваҡытта ҡылыс йоҡларға тейеш, — тип шаяра күл. — Яҡшы төштәр күрҙем, ҡояш, рәхмәт!

Ҡояш уға башҡаса һүҙ ҡушып тормай, үҙ юлына китә. Ерҙәге һәр нәмә менән оҙон-оҙаҡ әңгәмәләшеп торһа, бер көн эсендә күкте нисек урап сыҡһын ти ул?

Был мәлдә күл өҫтө тигеҙ, ағымлы була. Шул тигеҙлектә ялан аяҡ йүгереп уйнағы, һикерге килә. Яңы көн тыуғанда, яңы шатлыҡтар, яңы өмөттәр ҙә тыуа бит. Тик томандар ғына бойоҡ, сөнки уларҙың ғүмерҙәре ҡыҫҡа. Шулай ҙа, яр ситендәге ҡамыштарға, тал ҡыуаҡтарына, томбойоҡ япраҡтарына уралып булһа ла, күл эргәһендә ҡалырға тырышалар улар. Әммә юҡҡа. Ҡояш менән томан һыйышып оҙаҡ йәшәй алмай. Быны һәр кем белә.

Бөтә ауылды бер итеп әтәстәр ҡысҡырғанда, өс малай кәмәгә ултырҙы. Ғабдулла менән Айҙар бесәнлектә бергә йоҡланылар. Уларҙың торғанын да, киткәнен дә күреүсе булманы. Ләкин Яҡуп тауыштынһыҙ ғына ысҡына алманы. Ул таң һыҙыла башлағас та уянғайны. Байтаҡ ара ҡуҙғалмай ятты. Унан һуң шым ғына кейенергә кереште. Салбарының бер балағын кейгәс тә, әсәһе уянды.

— Ниңә иртә уяндың, улым? Әллә яман төш күрҙеңме?

— Күрмәнем. Беҙ бөгөн малайҙар менән балыҡҡа барабыҙ.

— Балыҡҡа? Күлгәме? — Гөлйөмеш апай һикереп үк торҙо.

— Балыҡ күлдә була инде ул, әсәй.

— Ауыҙыңды ла асма. Шул ғына етмәгәйне тағы.

— Мин иптәштәремә вәғәҙә бирҙем, әсәй. Вәғәҙәне боҙорға ярамай.

— Ярамағаны бар, ярағаны бар. Аяғыңды ла атламайһың. Бына шул.

— Мин кемдән кәм, әсәй? Бүтәндәргә ярағаң ниңә бер миңә генә ярамай ул?

— Бүтәндәрҙә эшем юҡ. Минең балам берәү генә.

— Беләһеңме, әсәй, әгәр иптәштәрем менән бергә ебәрмәһәң, олатайымдың кәмәһенә ултырам да бер үҙем күлгә инәм дә китәм. Бына күр ҙә тор. Гел генә мине тыйып тора алмаçһың, мин хәҙер ҙур инде.

Гөлйөмеш апайҙың күҙ алдары ҡараңғыланып китте. Ни булды был балаға? Ниндәй генә зәхмәттәр ҡағылды икән? Өй тауығы кеүек йыуаш малай ике-өс көн эсендә бөтөнләй ҡулдан ысҡынды. «Әгәр уны хәҙер ебәрмәһәң, барыбер һүҙен һүҙ итер, тәки кәмәгә ултырып сығып китер», — тип уйланы әсә.

— Иптәштәрең кем һуң? Шул Вәзирҙәр әле,— тине ул, бер талай һүҙһеҙ торғас.

— Ғабдулла ла Айҙар! — тип ғорурланып яуап ҡайтарҙы Яҡуп.

Байтаҡ һатыулашҡандан һуң, әсә илай-һыҡтай ғына риза булды. Был Яҡуптың ҙур ғына еңеүе ине.

— Алдыңды-артыңды ҡарап йөрөй күр инде, балам, — тип ҡалды әсә.

Бына хәҙер Яҡуп, ишкәк тотоп, кәмәнең артына баҫты, Ғабдулла уртаға, Айҙар осҡа ултырҙы. Ишкәксе арыу һолло ғына ишә башланы. Кәмә яр буйлап яй ғына алға шыуҙы, бер аҙҙан ул бөтөнләй томан эсенә инеп юғалды.

Ҡылыстың арғы башына, мурҙа тураһындағы ҡамышлыҡҡа еткәс, малайҙар, кәмәне туҡтатып, ҡармаҡ һала башланылар. Был ваҡытта инде ҡояш сығып, күл өҫтөндәге томандарҙы ҡыуыпебәргәйне.

Тәүҙә балыҡ арыу сиртте. Айҙарға матур ғына һигеҙ сабаҡ, ике алабуға, бер ҡыҙылғанат эләкте. Ғабдулла ла, вағыраҡ булһа ла, алты-ете баш ҡаптырҙы. Яҡуп ҡына берҙе лә ала алманы. Сөнки ул, балыҡ емде ҡымтығас та, ҡармағын кинәт тарта.

Эләккән һәр балыҡ кәмә ситенән һыуға төшөрөлгән селтәр тоҡҡа һалына барҙы. Улар, яңынан күлгә ҡайттыҡ, тип рәхәтләнеп йөҙәләр, һикерешәләр.

Балыҡ ҡаптырғанда шауларға ярамай. Ләкин ҡармаҡ ташлағанда тылсымлы һүҙҙәр әйтеү беҙҙең яҡта йолаға кергән. Ул шаулауға ла иҫәпләнмәй.

— Ир маҡтаныр, ҡорал эшләр, төкөрөп һалдым, һикереп сыҡ, бер сабағын алып сыҡ, — тип һәр юлы ҡармағын сихырлай Ғабдулла.

Теге ҡыҙылғанат эләккәс, Айҙар башта уның ауыҙына төкөрҙө, шунан таҡмаҡларға тотондо:

— Ҡыҙылғанат, Ғизелбанат, әсәйеңде саҡыр, атайыңды саҡыр, ағайыңды саҡыр, апайыңды саҡыр. Саҡыр ҡат-ҡат! Ҡыҙылғанат, ҡап, ҡап!

— Ҡап-ҡап ҡармаҡҡа, эләгерһең бармаҡҡа, эләкмәһәң ҡармаҡҡа, әйләнерһең һармаҡҡа,— тип

тегеләргә ҡушылды Яҡуп. Күрәһең, балыҡтар ҡармаҡҡа эләгеүгә ҡарағанда һармаҡҡа әйләнеүҙе яҡшыраҡҡа һанағандарҙыр. Улар Яҡуптың янауҙарына ҡолаҡ та һалманылар. Бәлки, ҡолаҡ һалырҙар ине лә, уларҙың ҡолаҡтары юҡ шул.

Ҡояш юғарыраҡ күтәрелгән һайын, һирәгерәк сиртә башланы. Балыҡсылар бер нисә тапҡыр күсеп тә ҡаранылар, барыбер балыҡтар, һүҙ берләшкәндәй, ҡармаҡҡа ҡағылмаҫҡа булдылар. Артыҡ ултырыуҙың файҙаһы юҡ ине. Бар балыҡты, иҫәнһау сығарып, мурҙаға ебәрергә кәрәк. Юғиһә эстә лә эттәр өрә башланы.

Мурҙа тапҡырындағы ҡамыштарҙы ярып, кәмә ярға килеп төртөлдө. Ғабдулла менән Айҙар, салбарҙарын сисеп, мурҙа эргәһенә ашыҡтылар. Ул тап үҙ урынында тора. Туҡта, туҡта! Мурҙа тирәһендәге ҡамыштар һелкенә түгелме? Малайҙар



мурҙаны күреп алды. Ни тамаша был? Мурҙа эсендә эре-эре сабаҡтар, ҡыҙылғанаттар, алабуғалар сәпелдәшеп ята. Ун биш-егерме баш булыр. Нисек кергәндәр улар? Бына һиңә мәрәкә! Мурҙаның ауыҙы нәҡ элек ябып киткәнсә. Тимәк, был эште ниндәйҙер әҙәм ҡулы эшләгән.

Ауҙан балыҡ сәлдереү ғәҙәте бар ул беҙҙә. Әле иҫәрерәк саҡта Ғабдулла менән Айҙар үҙҙәре лә кеше ауына бер-ике тапҡыр ҡул һалғайнылар. Вәзирҙе әйтеп тораһы ла юҡ. Әммә сит мурҙаға балыҡ килтереп һалған кешене уларҙың күргәндәре лә, ишеткәндәре лә юҡ ине. Бөркөтләлә бындай хәл булғанын хәтерләүсе табылмаҫ. Һөйләһәң, әҙәм ышанмаҫлыҡ мәрәкә был.

— Бына һиңә, өләсәйем әйтмешләй, бирәһе килгән ҡолона — сығарып ҡуйған юлына! Әйҙә, иш янына ҡуш булыр, — тине Ғабдулла.

— Йә берәйһе, үҙемдең мурҙам тип, яңылыш һалып киткәндер әле, — тигән фекер әйтте Айҙар.

— Китте ти ана, тот ҡапсығыңды.

— Улайһа, бер-бер хәйлә барҙыр, — тип йәнә шик белдерҙе Айҙар.

— Һинең өсөн бөтәһе лә хәйлә инде.

— Беләһегеҙме, быны кем эшләгән? — тине яр башындағы Яҡуп. — Балыҡсыларға ҡот килтереүсе изге рух эшләгән.

— Изге рух, имеш. Етмәһә, үҙе пионер тағы, — тип Айҙар уның һүҙен бушҡа сығарҙы.

Малайҙар аптырашта ҡалдылар шулай ҙа. Хатта Башлыҡ үҙе лә быны серенә төшөнә алманы, Йомаҡ сиселмәй ҡалды.

Икенсе көндө балыҡсыларҙың кәсебе уңышлыраҡ булды: ярты көнәк самаһы балыҡ тотоп сыҡтылар. Ләкин уларҙы кисәгегә ҡарағанда ла нығыраҡ борсоу алды. Мурҙала балыҡ тағы ла арта төшкән. Етмәһә, арала өс һары табан да бар. Был юлы малайҙар бөтөнләй телдән ҡалды. Шатланырғамы быға әллә ҡайғырырғамы? Мурҙала балыҡ

кәмеһә, бер хәл ине. «Ниндәйҙер бер кәкре ҡулдың эше», — тиерҙәр ине. Шик иң тәүҙә, әлбиттә, Вәзиргә төшөр ине.

— Малайҙар, — тине Яҡуп, — әйҙәгеҙ яҡшыға юрайыҡ. Тимәк, беҙгә ҡот килгән. Беҙ кешенекен урламаған да.

— Көс түкмәй табылған нәмә барыбер урлау менән бәрәбәр ул, — тине Башлыҡ.

— Беҙ үҙебеҙ тотҡандарҙы таныйбыҙ бит. Әләйһә, сит балыҡтарҙы сығарайыҡ та ебәрәйек. Эше лә бөттө. — Был ҡыйыу тәҡдимде Айҙар индерҙе.

Шулай ҙа ҡыйыу һүҙҙән ҡыйыу эшкә күсергә малайҙарҙың ҡулы барманы. Бынау йылҡылдап торған балыҡтарҙы үҙ ҡулдарың менән кире күлгә ебәр, имеш. Был ахмаҡлыҡ булыр ине.

— Төптән уйлап ҡараһаң, беҙ ни өсөн балыҡ тотабыҙ? Табала ҡурып, кетерләтеп ашар өсөнмө ни?— тигән һорау ҡуйҙы Башлыҡ.

— Кетерләтеп ашар өсөн түгел.

— Шулай булғас, тора бирһендәр. Аҙаҡтан күҙ күрер.

— Әгәр харамдан ҡурҡһағыҙ, минең өлөштән булыр. Миңә бит барыбер балыҡ ҡапмай, — тип Яҡуп яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алмаҡсы булды.

— Бында һинеке-минеке юҡ! — тине Ғабдулла. — Бөтәһе лә уртаҡ.

Нисек кенә булмаһын, серле мажара малайҙарҙың маҙаһын китерҙе.

Әммә беҙҙең балыҡсылар асыҡ ауыҙҙарҙан түгел ине. Өсөнсө көндө улар, бер күл уртаһына инеп, бер ҡамышлыҡҡа һуғылып, аҙ ғына ҡармаҡ һалып йөрөгән булдылар ҙа мурҙанан байтаҡ ситтә ярға сыҡтылар. Кәмәләрен ҡамыш араһына йәшерҙеләр ҙә, мурҙа тураһына килеп, күрән эсенә боҫтолар. Был хәйләне улар кисә үк ҡорғайнылар. Нисек тә серҙе сисергә кәрәк ине. Уларҙың башҡаса сыҙар хәле ҡалманы.

Мурҙа яғынан күҙ ҙә алмайынса, малайҙар байтаҡ яттылар. Ләкин шылт иткән тауыш та ишетелмәне. Ҡамыш һабаҡтары, ағас япраҡтары, үлән ҡыяҡтары әле иртәнге йоҡоларынан уянмағайны. Ә ҡыуаҡ һайын үҙ йырҙарын йырлаған ҡоштарға малайҙар иғтибар итмәне. Ҡоштарҙа уларҙың эше юҡ ине.

Бына бер саҡ күл өҫтөн шаҙралатып ел йүгереп үтте. Ҡамыштар: «Ниңә уяттың?» — тигән һымаҡ, бер-береһен әрләп, ҡыштырлашып алдылар. Ә ағас япраҡтары яҙын йомшаҡ күңелле булалар. Улар әрләшмәнеләр. Киреһенсә, бер-береһенә яғымлы итеп сәләм бирҙеләр. Ел үтеп киткәс, тирә-яҡ йәнә тып-тын булып ҡалды, хатта күбәләк осҡаны ла ишетелә ине.

Бәлки, икс, бәлки, өс сәғәт үткәндер. Малайҙарҙың ҡул сәғәте лә, кеҫә сәғәте лә юҡ ине. Бала саҡта сәғәт ҡорһаҡта була ул. Асыҡтыңмы, ана шул сәғәт йә иртәнгене, йә төшкөнө, йә кискене ашарға ваҡыт еткәнен күрһәтә. Балыҡсыларҙың ҡорһағындағы сәғәте, иртәнгене күптән һуғып, төшкә табан ыңғайлай ине. Бындай саҡта түҙемлек тигән нәмәнең дә рәте китә башлай.

— Юҡты бушҡа бушатып ят инде, — тип бошоноп ҡуйҙы Яҡуп. Айҙар шунда уҡ түбәтәйе менән иптәшенең ауыҙын ҡапланы. Унан йоҙроҡ күрһәтеп алды. Яҡуп бөтөнләй дә төшөндө һәм шымып ҡалды.

Яҡында ғына ағасты ағас ҡырған тауыш ишетелде. Был тауышты балыҡсы булған кеше тиҙ таный. Ҡәмә ситенә ишкәк тейгәндә сыға ул. Унан һуң һыу сапылдауы, ҡамыш ҡыштырлауы ҡолаҡҡа салынды. Әммә был ишкәксе йүнле юлда йөрөмәй ине. Ул нимәнәндер шикләнеп, үтә һаҡ ҡылана ине.

Ҡамыш араһынан, ялғаш дәүмәле генә кәмәгә баҫып, Вәзир килеп сыҡты. Ул башта алан-йолан ҡаранып алды. Кеше заты юҡлыҡҡа ышанғас ҡына, кәмәһенән һикереп төштө. Кәмә ҡойроғона нимәлер таҡҡан түгелме һуң? Эйе шул. Вәзир ҡой-

роҡтан һәленеп йөҙөп килгән шул нәмәне сисеп алды. Ул ҙур арыш тоғо булып сыҡты. Тоҡ төбөндә нимәләр сәпелдәргә тотондо. Вәзир туҡто яныйан һыуға батырҙы ла мурҙа эргәһенә һөйрәп китте. Тимәк, уға үҙе тотҡан балыҡ ҡына етмәгән. Ниндәй комһоҙ! Хәҙер мурҙалағын сәлдерергә самалай. Барып сыҡмаҫ! Һинең һәр аҙымыңды алты күҙ күҙәтеп тора. Тейеп кенә ҡараһын! Кемдер берәү йәшерен ярҙам итә. Ә Вәзир уларҙы таларға маташа.

Ғабдулланың башынан ана шундай уйҙар йүгереп үтте. Ҡалғандар ҙа ҡараҡ тотоп фашлау тантанаһын кисерә башлағайнылар инде. Ух, эләгәсәк тә һуң Вәзиргә!

Вәзир мурҙаның ҡапҡасын асты. Ул ярға арты менән баҫҡайны. Уның кәүҙәһе ҡулдары нимә эшләгәнде күҙәтселәрҙән ышыҡланы. Балыҡ сәпелдәгән тауыш ишетелде. Әһә, мурҙалағы балыҡтарҙы берәм-берәм тоғона күсерә түгелме һуң? Ҡараҡ, үҙ эшен еренә еткереп, ҡапҡасты элеккесә ябып нығытып ҡуйҙы. Тап шул ваҡыт Ғабдулланың зәһәр тауышы яңғыраны.

— Ҡаптыңмы, балыҡ ҡарағы!

Вәзир һиҫкәнеп китте. Башта ул ҡарашы менән тирә-яҡты байҡап алды. Иптәштәрен күргәс, күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, йылмайып ебәрҙе. Был йылмайыу малайҙарҙың асыуын ғына килтерҙе. Ғабдулланың килеп етеүе булды, Вәзирҙең яңағына ҡунып төшөүе булды. Айҙар ҙа берҙе өҫтәп ебәрҙе. Ләкин Вәзир яуап ҡайтарманы, төп кеүек ҡымшанмай тик торҙо.

— Балыҡ ашағың килдеме, тәмле тамаҡ? — тип ярһыны Башлыҡ. — Мә, улайһа, тағы бер суртанды! — Ул Вәзиргә йәнә киҙәнде. Шул саҡ Вәзир ҡулындағы буш тоғон күтәрҙе. Уның төбөнән сөбөрләп һыу аға ине. Әммә тоҡ эсендә ҡыймылдаған нәмә һиҙелмәне.

— Ҡайҙа иттең балыҡты? Беҙгә үсләшеп, ҡулға ебәрҙеңме?

— Ана, мурҙаны ҡара, ышанмаһаң...

Ғабдулла менән Айҙар мурҙаға ташланды. Күтәреп ҡараһалар, уның төбө туп-тулы балыҡ ине. Баяғыға ҡарағанда ла күберәк. Яр башындағы Яҡуп ҡыуанысынан хатта һыҙғырып ебәрҙе.

Малайҙар мурҙаны кире һыуға батырҙылар. Дөрөҫөрәге, ул үҙе ҡулдан төшөп китте лә аҡрын ғына бата башланы. Бына нисек булып сыҡты! Ғабдулла менән Айҙар телдән яҙып, Вәзиргә ҡарап ҡаттылар. Тегеһе, их, һеҙ тигән һымаҡ, башта йылмайып ҡуйҙы, һуңынан шарҡылдап көлөргә кереште. Көлгәндә уның яланғас ҡорһағы, һыу өҫтөндә ваҡ тулҡын сығарып, бейеп тора ине. Быны күргәс, Айҙар көлөүенән тыйылып ҡала алманы. Уларға Башлыҡ үҙе лә ҡушылды.

Билдән һыуҙа торған өс малай, бөтә күл буйын яңғыратып, шулай байтаҡ хахылданы. Ситтән ҡарап торған берәү: «Был ниндәй иҫәрҙәр?» — тип уйлар ине.

Бөтәһенән дә бигерәк Яҡуп ҡыуанды. Быға тиклем ул үҙен гел ике ут араһында һымаҡ һиҙә ине.

— Ҡалай ирмәк булып сыҡты! — тип һикереп ҡуйҙы ул.

— Ҡисә лә һин һалдыңмы? — тип һораны Ғабдулла, ярға сыҡҡас.

— Эйе, — тип баш ҡаҡты Вәзир.

— Элекке көндө ләме?

— Эйе.

— Ә ни өсөн?

— Тик, былай. Һеҙҙең мурҙағыҙ тиҙерәк тулһын өсөн. Шулай ҙа йоҙроғоң тос икән, малай. — Вәзир яңағын һыйпап алды.

— Йә, ярар инде, — тине гәйебен таныған Ғабдулла. — Бөтһөн дә ҡуйһын ошонда. Үҙең бит...

— Вәзирҙең балыҡтан ҡото бар, — тип һүҙҙе икенсегә борҙо Яҡуп.— Гел эреһен генә ҡаптырған.

— Ыбыр-сыбырын мин уның кире ебәрә барҙым да...

Башлыҡтың башына бынамын тигән бер фекер килеп төштө:

— Тағанда нисә терәү була?

Ғабдулланың был кинәйәле һорауын зирәк Айҙар шунда уҡ аңлап алды:

— Нисәне терәһәң, шул саҡлы була. Терәүсенең үҙ ҡулында ул. Теләһәң унды терә.

Был юлы Башлыҡ ғәҙәтенсә бойороҡ иғлан итмәне, ә иптәштәренән кәңәш һораны. Вәзирҙе нахаҡҡа йәберләүе өсөн ул эсенән бик бошона ине. Шуға күрә бойороҡ бирергә үҙен хаҡһыҙ һананы. Башлыҡ кеше сабырыраҡ, тотанаҡлыраҡ булырға тейеш ине.

— Малайҙар, — тине ул. — Вәзирҙе «Өс таған-ға» яңынан алһаҡ, ҡалай йәтеш булыр ине. Кем дә кем риза, шул ҡул күтәрә.

Малайҙар берҙәм ҡул күтәрҙе. Иптәштәренә ҡушылып, хатта Вәзир үҙе лә күтәрҙе. Бөтәһе лә эстән үтә шат ине. Тик уны тышҡа сығарыуҙы һәр кем урынһыҙ һананы.

Байтаҡ михнәттәр күргән «Өс таған» шулай итеп яңынан ныҡлап аяҡҡа баҫты. Был юлы ул ҡаҡшамаҫ дүрт терәүгә таянды.

Малайҙар кейемдәрен бороп кейҙеләр. Вәзир бөтәһенән дә алдараҡ өлгөрҙө. Уның бар кейеме — бер ҡат салбар ине.

— Ниңә, һинең бүтән күлдәгең юҡмы ни? — тип хәстәрлек күрһәтте Башлыҡ. — Ямғырҙа ла яланғас йөрөйһөң.

— Бар, һандыҡта ята. Мин, тән сыныҡтырып, юрамал күлдәкһеҙ йөрөйөм.

Иптәштәре уның тән сыныҡтырыуын белмәй ине шул.

Кирәмәт күленә йән индереү сәғәте алыҫ түгел ине инде. Юлға сығыу бөрһегөнгә билдәләнде. Көндө лә көтөп тормайынса, улар таң атҡансы уҡ ҡуҙғаласаҡтар. Ә хәҙергә ике кәмә ауыл яғына ҡарай йөҙөп китте. Алдағыһына өсәү, арттағы кескәйенә

бераү ултырған. Кәмәләр күл уртаһына еткәс, бик моңло йыр яңғырай. Беҙҙең Айҙар шулай моңло йырлай. «Бигерәк моңло балаһың, бәхетһеҙ булмаһаң ярай инде», — ти торғайны уга өләсәһе. Ни эшләп бәхетһеҙ булһын ти ул? Кешеләр күңелен йыр менән иркәләү үҙе ҙур бәхет түгелме һуң?

Бына әле лә уның матур тауышы күл өҫтөнә һибелә лә ярҙарға килеп бәрелә. Юҡ, ярҙарға ғына түгел, кешеләр ҡолағына барып һуғыла ла йөрәктәргә үтеп инә.

Ҡайҙарҙа ғына булмай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы...

## ҮГЕҘ МЕНӘН АЛЫШЫУ

Ауыл осонан көтөү күренде. Иң алдан Йәмлегөл инәйҙең һыңар мөгөҙлө ала кәзәһе килә. Ул Бөркөтлө көтөүенең алдан йөрөүсеһе. Хатта иң шуҡ һарыҡ бәрәстәре лә яланда уны уҙырға баҙнат итмәйҙәр. Тик ауылға кергәс кенә, ала кәзә бер ситкәрәк сығып, башҡаларға юл бирә. Шуны ғына көтөп килгән һарыҡтар, баҡырыша-баҡырыша, йүгерә башлай.

Был саҡ инде бөтә урамды яңғыратып ваҡ малайҙар оран һала:

— Көтөү ҡайтты! Көтөү ҡайтты!

Оранды ишетеп, һәр өйҙән кем дә булһа бераү көтөү ҡаршыларға ҡапҡа төбөнә сыға. Әштән ҡайтып өлгөрмәгән яңғыҙ кешеләрҙең малын күршекүләндең бала-сағаһы ҡаршылай. Был беҙҙең Бөркөтлөлә ғүмер баҡый шулай.

Йәше-ҡарты, төрлөһө төрлө тауышҡа ҡысҡырып, мал саҡыра:

— Бәрәс, бәрәс...

— Ҡәзәкәй-кәзәкәй...

— һәү-һәш, һәү-һәш...

Бөгөн көтөү ҡаршыларға Ғабдулла сыҡты. Өләсәһе өйҙә юҡ ине. Әле бая уҡ уларға Яҡуп килгәйне. Ул Башлыҡҡа Вәзир биргән рогатканы күрһәтте. Быға тиклем Яҡуп теге ваҡытта Вәзир менән аралашҡаны өсөн шөрләп йөрөй ине. Хәҙер бөтәһе лә үҙ кешеләр. Ғабдулла ла уға үпкә һүҙе әйтмәне. Кирсһенсә, Яҡуп бер нисә тапҡыр мәргән генә атып күрһәткәс, уны маҡтап ҡуйҙы.

Хәҙер ҙә улар көтөү ҡаршыларға бергә сыҡтылар. Ғабдуллаларҙың башта ике һарығы, унан һыйыры ҡайтты. Ләкин малайҙар шунда уҡ кире өйгә инмәнеләр. Бөркөтләлә һәр кем шулай. Үҙ малы ҡайтҡас та, бороло п ҡына инмәй. Ҡалған көтөүҙе оҙатып ебәрә. Был шау-шыулы бер нисә минуттың үҙ йәме бар. Ҡескәй генә байрамға оҡшап ҡала ул.

Иң ялҡау һыйырҙарҙан да йөҙ-йөҙ илле аҙым артта ҡалып, түбән остоң ҡыҙыл күҙле ҡоба үгеҙе ҡайта. Үҙе әллә ни ҙур ҙа түгел, әммә һөҙгәк тиҙәр. Ул үткәндә, бала-сағаның ҡото оса. Ҡайһыһы ҡапҡа артына боҫа, ҡайһыһы кәртә башына менә. Бына әле лә, ул яҡынлаша башлағас, Ғабдулла менән Яҡуп, ҡурҡып түгел, тик былай ғына, кәртәгә менеп атландылар. Яҡуп, кеҫәһенән ҙур ғына йомро таш алып, рогаткаһын ҡорҙо. Донъя хәлен белеп булмай, кәрәк булып ҡуйыуы бар.

Үгеҙ Ғабдуллалар тураһына еткәндә генә, күршеләрҙең өй алдындағы ағас ышығынан Гөлнур килеп сыҡты. Ул, яңы ҡыҙыл күлдәген кейеп, тегенсенән ҡайтып килә ине. Гөлнурҙың түбәһе күккә тейгән. Ул бер уңға, бер һулға борғолана, күлдәгенең матур төймәләрен тотоп ҡарай, эйелеп-эйелеп, балитәктәрен һыйпап ала. Үҙе нимәлер бышылдай. Ә-ә-ә... «Күлдәгең бик матур икән, Гөлнур, ҡотло булһын. Йылы тәнеңдә туҙһын!..» — ти икән ул. Был һүҙҙәрҙе уға әле бер генә апай әйткәйне.

Ысынлап та, ҡыҙыл күлдәктең килмәгән ере юҡ ине. Урам уртаһынан ғәмһеҙ уҙып барған ҡоба үгеҙ ҙә иғтибарһыҙ ғына үтә алмаңы. Тәүҙә ул, туҡтап,

күҙҙәрен аҡайтып ҡарап торҙо. Шунан һуң, башын эйә биреп, аҡрын ғына Гөлнурға табан атланы. Был саҡ Гөлнур күлдәгенең түшендәге йәшел бәрхәт күбәләккә нимәлер һөйләй ине.

— Гөлнур! Ҡас! — тип ҡысҡырҙы Ғабдулла.

Гөлнур тертләп китте, ләкин ҡот осҡос бәлә килгәнен аңламаны, сөнки бөтә донъяла уның өсөн тәтәй күлдәктән башҡа нәмә юҡ ине.

Шул арала үгеҙ кескәй канауҙы һикереп сыҡты ла, башын ҡырын һала биреп, Гөлнурға ташланды. Бына-бына ҡыҙыл күлдәкле кескәй ҡыҙҙы мөгөҙөнә элеп ырғытасаҡ ул.

— Әсәкәй! — тип ҡысҡырып илап ебәрҙе Гөлнур.

Ҡәртә башындағы Ғабдулла һикереп түгел, осоп төштө. Осло мөгөҙҙәр инде Гөлнурға сәнселде тигәндә генә, ул ҡыҙҙы күтәреп ҡәртә аша ырғытты. Был турала эстә Ғабдуллаларҙың ҡыяр баҡсаһы ине. Ҡыҙ йомшаҡ түтәлгә барып төштө. Ярһыған үгеҙ, аҙ ғына сигенә биреп, Ғабдуллаға ынтылды һәм уны элеп тә алды. Мөгөҙ уға ҡаҙалманы. Ғабдулланың кәүҙәһе ике мөгөҙ араһына тура килеп ҡыҫылды. Был хатаһына асыуы килеп шашынған үгеҙ, башын ҡапыл юғары күтәреп, Ғабдулланы сөйөп ырғытты. Ул ҡәртә буйында ятҡан ҡырлы таш өҫтөнә барып төштө. Ыһ тип бер генә һыҡтаны ла ул бөгәрләнеп ятты. Үгеҙ, тағы артҡа сигенеп, яңынан ташланырға әҙерләнде. Инде ынтылдым тигәндә генә, уның ҡан һауған күҙенә сәп итеп таш килеп тейҙе. Ул ташты Яҡуп шулай рогатканан ҡыйыш атып тура тейҙерҙе. Ауыртыуға сыҙай алмай ҡоба йыртҡыс хатта үкереп ебәрҙе. Башын сайҡай-сайҡай бер урында зырлап әйләнде лә урам буйлап тороп йүгерҙе.

Был хәл күҙ асып йомған арала булды.

Ғабдулла эргәһенә халыҡ йыйылды. Ул, ауыртыуҙан ыңғырашып ебәрмәҫ өсөн, күлдәк итәген сәйнәп ята ине. Ҡемдер уны күтәреп алмаҡсы итте:



7 Заказ 157

— Ах, ҡулым! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Ғабдулла. Уның ауыҙ ситенән, нескә генә эҙ ҡалдырып, ҡан аға ине. Быны күргән Гөлнур сыйылдап илап ебәрҙе.

— Баҡырма әле! — тип туҡтатты уны яңы ғына килеп еткән Айҙар.

Йыйылған халыҡ гөж килде. Һәр кем үҙ һүҙен әйтергә, үҙ кәңәшен бирергә тырышты. Берәүҙәр үгеҙҙе һүкте, икенселәр уның хужаһын әрләне.

— Мал үҙ эйәһенә оҡшамай буламы?

— Уның эйәһе лә йылан аяғы киҫкән нәмә.

— Харап иткән баланы...

— Һүҙ менән һөйәк ялғап булмаҫ. Сараһын күрергә кәрәк.

— Сараһы ни уның шул — тиҙ үк больницаға оҙатырға кәрәк.

— Ике машинаның береһе өйҙә юҡ, исмаһам...

— Бар, йәһәт кенә ат егеп кил, Яуымбаев!

— Эй, туҡта әле, — тип ҡысҡырҙы Шәрифулла еңел ҡырандаста уҙып барыусы оло ғына бер кешегә. Юлсы, атын туҡтатып, халыҡ яғына килде.

— Бына малайҙы үгеҙ һөҙөп имгәтте, — тинеләр уға.

Юлсы күп төпсөнөп торманы.

— Һалығыҙ малайҙы ҡырандасҡа, — тине.

Шәрифулла, һаҡ ҡына алып, Ғабдулланы төбөнә йомшаҡ бесән түшәлгән ҡырандасҡа илтеп һалды. Ғабдулла күлдәк итәген йомарлап, йәнә ауыҙына тыҡты. Уның йөҙөндә ҡан әҫәре юҡ ине.

— Йә, ҡайһығыҙ бара? — тине ат хужаһы. — Ҡуҙғалырға кәрәк.

— Өләсәһе өйҙә юҡ бит әле, — тине берәү.

— Үҙем барам.

— Үҙем...

— Минһеҙ эш сыҡмаҫ, — тип Шәрифулла ҡырандас күсеренә менеп үк ултырҙы.

Айҙар менән Вәзир ҙә һорап ҡараны, тик уларҙы ултыртманылар.

Әле генә осҡон кеүек һикереп йөрөгән Ғабдулланы, һоло тоғо урынына һалып, бынан егерме саҡрым ерҙәге Ҡултабан больницаһына алып киттеләр. Ҡырандастағылар, күл башын урап, ҡалҡыулыҡ артына күмелгәс тә, халыҡ таралыша башланы. Ғабдуллалар ҡапҡа төбөндә иң һуңынан өсәү ҡалды. Улар тау аша киткән алыҫ юлға оҙаҡ ҡарап торҙолар. Инәләрен бесәй урлап ҡасҡан турғай балаларына оҡшай ине был өсәү.

## ХАТ

Ғабдулла киткәндән һуң, малайҙар балыҡҡа төшмәне. Ләкин һәр көн мурҙалағы балыҡты барлап, ем һибеп ҡайттылар.

Был арала ауылда әллә ни иҫ китмәле ваҡиғалар булманы. Улай тиһәң дә, теге ҡоба үгеҙҙе хужаһы йығып һуйҙы. Һуймаҫ та ине, халыҡ тауыш күтәрҙе: «Юғиһә үҙеңде үгеҙең-ниең менән судҡа бирәбеҙ», — тип ҡурҡыттылар.

Йәнә шул бар икән: Айҙар һеңлеһе Гөлнурға биргән вәғәҙәһен үтәне. Ферма ҡыйығына менеп, яңы ғына ҡанаттары сыҡҡан ике турғай балаһы тотоп бирҙе. Тик ағаһы ситлек яһағансы, Гөлнур уларҙың икеһен дә осороп ебәрҙе. Вәзиргә әсәһе һары сатин күлдәк тектерҙе, әммә Вәзир уны барыбер киймәне. «Һабантуйҙа киейермен әле», — тине. Яҡуптың иҫке йәрәхәттәре уңала барҙы, яңылары өҫтәлә торҙо. Сөнки унын менмәгән ҡаяһы, үрмәләмәгән ағасы, аша һикермәгән соҡор-саҡыры ҡалманы. Быға хатта Гөлйемеш апай ҙа күнегә төштө.

Ғабдулланың имгәнеү хәбәре йәйләүҙәге әсәһенә лә барып етте. Ул икенсе төндө өҙгөләнеп ҡайтып килде. Еккән атын да туғармай, шунда уҡ Ҡултабанға сапты. Уны ауылда күреүсе лә булманы. Улының тере икәнен күргәс кенә, әсә бер аҙ тынысланды. Ғабдулланың ике ҡабырғаһы, һул ҡулы

һынғайны. «Йәш һөйәк тиҙ үк ялғаныр,— тине доктор.— Малайың сыҙам икән. Ай-һай-һай. Шәп егет буласаҡ». Кешене үлемдән ҡотҡарған ҡыйыу улы өсөн әсә ғорурланып та ҡуйҙы. «Хас та атаһы инде», — тип уйланы ул.

Ауылда ла Ғабдулланың исеме бер нисә көн телдән төшмәне. Гөлнурҙың әсәһе, өй беренсә йөрөп, Ғабдулланы илай-илай маҡтап һөйләне: «Мәңге түләп бөтөргөһөҙ бурыслыбыҙ инде ул балаға», — тине. Ғабдулла ҡайтҡас һыйлармын тип, йомортҡа йыйып, май яҙып ҡуйҙы.

Бөтә ауырлыҡты һүҙһеҙ кисерергә өйрәнгән Нәғимә инәй был юлы ла кешегә белдереп аһ-ваһ килмәне. Әммә эсе бик өҙөлдө. «Ҡарап торған берҙәнбер ейәнемдән тороп ҡалмаһам ярар ине», — тип әрнене ул. Яңы ҡайғыһы ни тиклем генә ҙур булмаһын, ул кесаҙна көндө кис улы Мөхәммәттең «Батырлыҡ өсөн» миҙалын аҡбур менән ялтыратып ҡуйырға онотманы.

Ун көн тигәндә, өләсәһенә Ғабдулланан хат килеп төштө. Үҙе уҡый белмәһә лә, Нәғимә инәй хатты асмай түҙә алманы. Ул һаҡ ҡына конверттың елемен ҡуптарҙы. Хатты сығарып әйләндереп-әйләндереп ҡарап торҙо. Шунан ғына ейәненең өс дуҫын хат уҡырға саҡырҙы. Арала иң еренә еткереп уҡыусы Яҡуп ине. Тыңлаусылар теҙелешеп һикегә ултырҙы. Яҡуп ҡаршыға баҫты. Ул тамағын ҡырып алды ла уҡырға кереште.

## Хат башы — яҙ ҡаршы

Ҡәҙерле һәм хөрмәтле өләсәйем! Әлегә тиклем ни өсөн хат яҙмай торҙоң, тип һораһаң, яуап бирәм. Минең ике ҡабырғам, һул ҡулым һынған булып сыҡты. Йәнә өс көн ҡан түкөрөп яттым, эс-бауырым ҡуҙғалған икән. Хәҙер урынына ултырҙы инде. Мине карауатҡа һалып ҡуйҙылар ҙа бер аҙна торғоҙманылар. Тышҡа сығаһы килгәндә лә, ҡуҙғатманы-



лар, аҫҡа сынаяҡ һауыт ҡуйып ҡына торҙолар. Мин оялып бөттөм. Һул ҡулымды аҡ балсыҡ һылап ҡатырҙылар. Хәҙер ҡуҙғатып ҡарайым да, ҡулым яман ауыр. Ҡулымдың һыҙлауы бөттө. Тик балсыҡ аҫтында ҡысытып маҙамды ебәрә. Тын алғанда, һул ҡабырғам сәнсешә. Сәнсешһә лә, әүәлге кеүек ҡыйын түгел. Мин тынымды самалап ҡына алырға тырышам.

Күлдәгемде, салбарымды һалдырып алдылар. Ғәләмәт ҙур аҡ күлдәк-ыштан кейҙерҙеләр. Ыштанымды сестра апай яра бәйләй торған оҙон тар марля менән быуып ҡуйҙы. Больницала бик эҫе. Себен кермәһен өсөн, тәҙрәләргә селтәр көпләгәндәр. Себен барыбер керә. Ашап туйғас, көн дә емеш һыуы эсерәләр. Компот тиҙәр уны. Һәләк тәмле була икән ул компот.— Һуңғы һүҙҙәрҙе уҡығанда, Яҡуп ирекһеҙҙән ирендәрен сәпелдәтеп алды.—

Докторҙар ифрат һәйбәттәр, өләсәй. Иң баш доктор минең менән гел шаярып һөйләшә. Бүлмәгә килеп ингәс тә: «Шәпме, батыр!»— тигән була. Минең сәсемде машинка менән алдылар. Ул машинка тамсы ла ауырттырмай икән. Аллабирҙе олатай башымды бәке менән ҡырғанда, күҙҙән уттар күренә торғайны.

Бер бүлмәлә беҙ өсәүбеҙ. Тәҙрә янында ятҡан ағай иҫерек көйө ҡыҙыл араҡы тип ҡараңғыла шыйыҡ елем эскән. Ҡағыҙ йәбештерә торған елем. Уның эсе эскә йәбешкән. Радио ҡумтаһы эргәһендәге ағайҙы урман ҡырҡҡанда ағас баҫҡан. Ул телен тешләп өҙгән, хәҙер һөйләшә алмай.

Мин бында бик еләнем инде. Ерһеп китмәһәм ярар ине тип ҡурҡам. Күлдәк менән салбарҙы бирһәләр, бөгөн үк ҡайтып китер инем.

Өләсәй, был хатты, моғайын, йә Вәзир, йә Айҙар, йә Яҡуп уҡып бирер. Кем уҡыһа ла әйт: теге балыҡтарҙың хәлен белеп торһондар, ем илтеп һипһендәр. Астан үлерҙәр юғиһә. Әсәйемдән һорарға ла оноҡҡанмын: Гөлнурҙың аяҡ-ҡулы иҫәнме?

Өләсәй, мин һиңә бәләкәс кенә күстәнәс йыйҙым: ун бер печенье, һигеҙ кәнфит, ун шаҡмаҡ шәкәр. Был үҙ ауыҙынан өҙә икән, тип уйлама тағы. Быныһы — артып ҡалғаны.

Хат ахырында шуны яҙам: бөтә нәҫел-ырыуға, дуҫ-ишкә айырмайынса минән сәләм тапшыр. Үҙең менән әсәйемә, йәнә Айҙарға, Яҡупҡа, Вәзиргә айырым-айырым сәләм. Минең өсөн хәҙер борсолма инде, өләсәй. «Батыр яраһыҙ булмаҫ», — тине доктор.

Шуның менән хат тамам. Алыусыһы өләсәйем, яҙыусыһы Ғабдулла.

*1950 йыл, 9 июнь*

Хатты тыңлап бөткәс, Нәғимә инәй Яҡупҡа буш конверт һуҙҙы:

— Мә әле, улым, бынауҙың артына ла нимәләр яҙған түгелме?

Конверт артына ошондай һүҙҙәр яҙылғайны:

«Был конвертты теге елем эскән ағай бирҙе. Маркаһы ла өҫтөндә».

Нәғимә инәй үҙе хат тыңланы, үҙе Ғабдулланың ун ике йыллыҡ бөтә ғүмерен күҙ алдынан кисереп ултырҙы. Әле күптәнме һуң ул ейәне тураһында: «Ҡасан тәпәй баҫыр?», унан: «Ҡасан һөйләшә башлар?», «Ҡасан мәктәпкә китер?» — тип уйлай торғайны. Бына хәҙер уның ейәне ер аяғы, ер башы ерҙән, Ҡултабан ауылынан, килештереп хат яҙып ебәргән. Ғабдулланың ғүмерендә беренсе яҙған хаты ине был.

**ЯУАП**

Яуап яҙыуҙы оҙаҡҡа һуҙманылар. Ғабдулланың яҙылып бөтмәгән дәфтәренән ҡағыҙ йыртып алдылар. Ләкин өйҙә ҡәләм заты ла, яҙыу ҡараһы ла табылманы. Башлыҡ һаҡсыл кешеләрҙән түгел ине. Әлеге Яҡуп йүгереп өйҙән ҡәләм алып килде. Хатты яҙа башлағансы уҡ, Нәғимә инәй, ҡулына аҡса

тотторош, Айзарзы почтальонға маркалы конверт алырға ебәрзе.

Хатты Вәзир яззы, сөнки уның языуы арала иң матуры ине. Яззы тигәс тә, үз башынан уйлап сығарманы. Уға Нәғимә инәй бөтәһен дә тезеп әйтеп торзо.

— Һезки ғиззәтле вә хөрмәтле булып тороусы ейәнем Ғабдулла! Яззыңмы? — тип һораны Нәғимә инәй.

— Яззым да, «гиззәтле» һүзендә ике «з» язайыкмы әллә берәү зә еткәнме?

— Нисәү кәрәк, шул тиклем яз. Етмәй калғансы, артык булһын, икене куй.

— Нимә тигән һүз ул ғиззәтле?

— Мин үзем дә белеп еткермәйем уны. Әммә хат башына уны куймай килешмәй. Һин күп төпсөнмә, әйткәнде яза ултыр. Әйзә, баштан башлайык: — Һезки ғиззәтле вә хөрмәтле булып тороусы ейәнем Ғабдулла!

Бер кәлимә һүземде әйтерзән әүәл, бер генә шәлкем сәскә кеүек сәләмдәремде һинә күндереп калайым, тим. Һин яткан Култабан яктарынан күззәрен дә алмай зарығып көткән өләсәйеңдән күптән-күп сәләм, йәнә Яйык буйында йәйләүзә һыйыр һауып, һинең өсөн янып-көйөп йәшәүсе әсәйеңдән сәләм. Дәхи атайыңдың да, әсәйеңдең дә кендеген кисеп, өйзә лә, илдә лә хөрмәт күреп торған Йәмлегөл инәйеңдән сәләм. Олатайыңдың һунарзаш дуҫы Аллабирзе олатайыңдарзың бөтә өй эсенән сәләм. Оло башын кесе кылып, юк вакытын бар күреп, һине духтырға үз кулдары менән илтеп тапшырған Шәрифулла ағайыңдан сәләм. Атайыңдың иң якын корзашы, хәзергеһе көндә кәнсәлә счет төймәһе тартып ултырыусы сатан Сәхипгәрәйзән сәләм. Ике як ут күршеләрзән өй эстәре менән сәләм. Сәләм шуның менән тамам.

— Ә беззән? — тине Якуп.

Нәғимә инәй хатаһын тиҙ үк аңлап алды ла дауам итте:

— Тамам тигәнсе өҫтәп яҙ: — Бергә уйнап үҫкән тиҫтерҙәрең Вәзирҙән, Яҡуптан, Айҙарҙан күп сәләм. Сәләм шуның менән тамам.

Ейәнем Ғабдулла, һинең ебәктән затлы, алтындан ҡиммәтле хатыңды мең дә туғыҙ йөҙ ҙә иллеңсе йылдың ун икенсе июнь көнөндә өйлә ваҡытында алып тиҫтерҙәрең Айҙар, Яҡуп, Вәзир менән ҡат-ҡат уҡып сыҡтыҡ. Һинең аҫыл һөйәктәрең һыҙлағанда минең йөрәккәйем әрнеү бушҡа ғына булмаған икән. Ярай, аҙағы хәйерле бөтһөн инде. Бер сабый баланы һәләкәттән ҡотҡарып, күпме кешенең ҡайғыһын юйҙың бит һин. Әгәр ҙә ки һинең күҙ алдында шул баланы үгеҙ һөҙөп үлтерһә, ғүмер буйы йәнең ғазаптан сыҡмаҫ ине. Йән ғазабы тән ғазабынан әсерәк була ул. Инде хәҙер духтырҙарыңды тыңлап ҡына тор, һауыҡкас, телефон сыбығы аша хәбәр ит. Колхоз рәисе Дәүләт ағайың әйтте, Ғабдулланы алырға иң яҡшы айғырҙы ектерермен, тине. Ундай айғырға элек губернатор ғына ултырып йөрөй ине.

Беләгем ҡысыта, тигәнһең. Әйт духтырыңа, мунса яғып кертһендәр. Ҡайын миндеге менән сабып ҡарағыҙ. Әммә үтә эҫе сапмағыҙ. Ҡустәнәстәреңде ашағандан да артыҡ булдым. Эсең бошҡанда, һин үҙең аша уларҙы. Өләсәйеңдең ҡустәнәсе итеп аша. Әллә берәй тиҫтә йомортҡа, берәй көршәк ҡаймаҡ ебәрәйемме тигәйнем дә, Дәүләт ағайың кире һүҙе. «Бәлнистә ашау етә ул», — тине.

Йәнә шул да мәғлүм булһын. Йорт-ер, мал-тыуар, ҡош-ҡорт бары менән шөкөр, имен. Тауыҡтар йомортҡа һалып тора. Теге сыбар тауыҡ ун ике себеш сығарҙы. Һыйырҙың да һөтө был арала арта төштө. Элекке көндө, эсебеҙ бошоп, Йәмлегөл инәйең менән баҫыуға сыҡҡайныҡ. Игендәр бик матур күренә. Түбән ос Әмирхандарҙың мунсаһы янып китте. Башҡа бәлә-ҡаза күреүсе юҡ. Именлек улай.

Хәҙер инде һинең һау-сәләмәт әйләнеп ҡайтыуыңды зар-интизар булып көтөп ҡалабыҙ. Ҡайтып күҙемә күренһәң, атайыңдың миҙалын берәй көн тағып йөрөргә биреп торормон тип торам әле. Бер көн миҙал тағып йөрөрлөк кенә эш күрһәтмәнең түгел, күрһәттең. Гөлнур тураһында һорағанһың. Ул һау-сәләмәт, йүгереп йөрөй. Ҡош теләндәй генә хатымды ошо ерҙә тамамлап, һиңә аҡ юлдар теләп ҡалыусы өләсәйең.

— Ә балыҡтар хаҡында, өләсәй?

— Бая ла һорармын тинем дә, оноттом. Ниндәй балыҡтар һуң ул?

— Уныһы сер, өләсәй.

— Һеҙҙең серегеҙ бөтөрмө? Әләйһә, белгәнеңде үҙең өҫтәп яҙ ҙа ҡуй.

Вәзир үҙ белдеге менән өҫтәп ҡуйҙы: Ғабдулла, балыҡтар өсөн ҡайғырма. Улар иҫән. Тиҙерәк ҡайт!

Хатты әйтеп тороусы өләсәйең, яҙыусы Вәзир.

Айҙар хат яҙылып бөткәнсе үк урап ҡайтҡайны. Баҫма хәрефтәр менән Вәзир бик матур итеп адрес яҙҙы. «Тапшырырға Ғабдулла Юламановҡа» тигән һүҙҙәрҙең аҫтына ла һыҙып ҡуйҙы.

— Ҡана, өләсәй, үҙем йүгереп кенә почта тартмаһына һалып киләйем, — тине Яҡуп.

— Рәхмәт, балалар, үҙем юл ыңғайында һалып китермен әле. Шул яҡҡа бараһым да бар ине, — тине Нәғимә инәй. Мейес артындағы тартманан алып, ул малайҙарға икешәр йомортҡа һондо. Тегеләр алмаҫҡа итеп ҡараһалар ҙа, булдыра алманылар. Һыйҙан оло булырға ярамай. Бөркөтлөлә йола боҙоу ғәйепкә һанала.

— Тора биргәсерәк инеп сыҡһаң, Яҡуп, тағы бер ҡат уҡып иштерер инең, — тип ҡалды Нәғимә инәй.

Яҡуп баш ҡаҡты.

Малайҙар сығып киткәс, Нәғимә инәй, һандыҡтан алып, оҙон сыбар күлдәген, йәшел бәрхәт кам-

зулын кейҙе, яңы ҡушъяулығын бәйләне. Уның башҡа барыр ере юҡ ине. Ейәненә хатты инәйҙең үҙ ҡулдары менән һалғыһы килде. Ә шундай күңелле эште ул байрамса кейенеп эшләргә булды.

Нәғимә инәй йүгерә-атлай клуб эргәһенә килде. Ана, ишектең һул яғында ғына почта тартмаһы эленеп тора. Ниндәй уңмағандар был почта кешеләре! Тартманы бер иле туҙан баҫҡан бит. Нәғимә инәй тартма өҫтөнә ҡунған туҙанды башта өрөп төшөрмәксе итте. Былай ғына барып сыҡмағас, камзул кеҫәһенән ҡулъяулыҡ алып, уны һәйбәтләп һөрттө. Шунан һуң ғына, кескәй ҡапҡасты асып, хатты эскә төшөрҙө. Ул тиҙ генә боролоп китмәне. Тартмаға байтаҡ ҡарап торҙо ла йомшаҡ ҡартлас ҡулдары менән уны һыйпап, һөйөп ҡуйҙы.

— Ҡош ҡанатҡайҙары юлдаш булһын! — тине ул.

## ЮЛ

Үҙ башың менән ныҡлап уйлаһаң, теләһә ниндәй нәмәнең осона сығырға була. Бер көндө кис тау яғында һыйыр ашатҡанда, малайҙар, уйлай торғас, шундай фекергә килделәр: иртәгә үк Ғабдулла янына барырға кәрәк. Нимә эшләп һуң әле был уй уларға элегерәк килмәгән? «Өс тағандың» башлығы ғазап сигеп больницала ята, ә былар, һис нәмә булмағандай, шаярып йөрөй. Дуҫтарының хәлен барып белеү иҫтәрендә лә юҡ. Шул да булдымы иптәшлек?

Малайҙарҙың өсөһө лә өйҙәренә ҡайтҡас, иртәгә ҡояш менән бергә юлға сығасаҡтарын әйттеләр. Ғабдулла исеме сыҡҡас, ата-әсәләрҙән берәү ҙә ҡаршы төшмәне. Хатта Гөлйемеш апай ҙа икеләнеп-нитеп тормай риза булды. Ә Айҙарҙың әсәһе ҡыуанып уҡ китте.

— Әллә ҡасан кәрәк ине! Йөрөйһөгөҙ шунда йыйын йүнһеҙ, — тине ул. Үҙ балалары ауыҙынан

өҙөп булһа ла Ғабдуллаға тип әҙерләгән йомортҡаһынан, майынан күстәнәс йүнәтте. Яҡуптың әсәһе кескәй банкаға һалып бал, байтаҡ ҡына йыуаса ҡуйҙы. Ҡорбанбикә еңгә осормалағы йөн араһынан йәшергән ҡарағат ҡағынан бер оло йәймә алып бирҙе. «Сәйенә һалып эсһен, һөйәкте йомшарта ул», — тине.

Башлыҡ вазифаһын ваҡытлыса үҙ өҫтөнә алған Айҙар кистән үк иптәштәренә төрлө бойороҡтар бирҙе. Кейем-һалымға арала иң бөтөн иҫәпләнгән Яҡупҡа ике ҡат салбар, ике ҡат күлдәк кейергә ҡушты:

— Эҫе булыр бит, — тип ҡараны тегеһе.

— Эҫе һөйәк һындырмай ул.

Яҡуп төпсөнөргә тотондо:

— Ә нинә ике ҡат?

— Кәрәк булыуы бар.

Был юлы Вәзиргә лә һары сатин күлдәкте кейергә тура килде. Әллә ҡайҙа сит ергә барып күлдәкһеҙ йөрөү абруйһыҙлыҡ булыр ине. Һәр нәмәнең самаһын белергә кәрәк.

Ҡояштың тәүге нурҙары офоҡ ситен тишеп сыҡҡанда, ҡулдарына төйөнсөктәр тотҡан өс малай юлда ине инде. Башта улар бик йылдам атланылар, тау түбәне тура килгәндә, йүгергеләп тә алдылар. Ҡояш күтәрелгән һайын, юлсыларҙың аҙымы һүлпәнләнә барҙы. Таш араһынан сылтырап ҡына аҡҡан бер шишмә янында һыу эсергә туҡтанылар. Ләкин улар, һыуһауҙан былай, асыҡҡайнылар инде.

— Әйҙәгеҙ, тамаҡ ялғап алабыҙ, — тине Вәзир. Был урынлы тәҡдимде берәү ҙә кире ҡаҡманы.

Тамаҡ ялғарға ғына ултырған малайҙар ошо шишмә янында көнлөк аҙыҡтарын йылт иттереп кенә ҡалдырҙылар. Ашап туйғас, Айҙар килештереп нәтижә лә сығарып ҡуйҙы:

— Ярай, көнлөк аҙыҡ ҡорһаҡта булыр.

Шишмәнән ятып һыу эстеләр ҙә юлсылар йәнә юлдарында булдылар. Уларҙы байтаҡ ара атлы ла, машина ла ҡыуып етмәне. Малайҙар, урман, тау араларын үтеп, дала юлына сыҡтылар. Ҡултабан дала яғында. Вәзир юлды яҡшы белә. Ул атаһына ултырып, былтыр ғына ике тапҡыр Ҡултабан баҙарына барғайны.

Ярты юлды үткәс, малайҙарҙы оҙон бүрәнә тейәгән тағылма арбалы машина ажғырып ҡыуып етте. Өсөһө лә ҡулдарын күтәрҙеләр. Машина былар тураһына яй ғына килеп туҡтаны. Шофер ишекте асып ебәрҙе. Ул ун ете-ун һигеҙ йәшлек кенә егет ине:

— Ҡайҙа юл тоттоғоҙ, юлсылар?

— Ҡултабанға.

— Ни етмәгән унда һеҙгә?

— Беҙҙең иптәшебеҙ больницала ята. Үгеҙ һөҙөп имгәтте. Шуның хәлен белергә барабыҙ.

— Ултыртығыҙ әле, ағай?

— Йөк бик ауыр, — тип шаяртты шофер, — машина тарта алһа ярай ҙа.

— Тартыр әле. Юл тигеҙ бит, — тип тынысландырҙы уны Яҡуп. — Беҙ еп-еңелбеҙ.

— Улайһа, ултырығыҙ. Тик кабинаға бөтәгеҙ ҙә һыймаҫһығыҙ. Берегеҙгә өҫкә ҡунаҡларға тура килер.

— Өсөбөҙ ҙә өҫтә барайыҡ, ағай.

— Ҡарағыҙ уны, осоп төшмәгеҙ. Бәләгеҙ үҙегеҙҙән ҙур булыр.

Һә тигәнсе малайҙар бүрәнә өҫтөнә менеп ҡунаҡланылар.

Дала юлы тигеҙ, йомшаҡ ине. Машина бәүелтеп кенә алып бара. Малайҙарҙың күңеле күтәрелеп китте. Юлдың ике яғында игендәр күкрәп үҫеп ултыра. Баҫыу өҫтөндә еңелсә ел йүгереп уйнай. Алыҫта, артта, тауҙар күгәреп ята. Бөркөтлө лә шул яҡта күмелеп ҡалды. Тауҙар итәгендә төтөн бағаналары күренә. Йәйләүҙәгеләр усаҡ яҡҡандар, күрәһең.

Бөтә түбәләрҙән юғары булып, Кирәмәттең аҡ түбәһе ялтырап тора. Беҙҙең яҡта Кирәмәтте тауҙар батшаһы тиҙәр.

Рәхәтлеккә сыҙай алмай, Айҙар йырлап ебәрҙе:

Тыуған еркәйемә ҡайтыр инем,
Аяҡ балтырҙарым талһа ла, имгәкләп...

Йырлағанда, ул бөтә донъяһын онота. Әле лә йырлай торғас, төйөнсөгөн яңылыш бүрәнәгә бәреп алды. Сепрәк аша шыйыҡ нәмә һарҡый башланы. Ғабдуллаға күстәнәскә тигән йомортҡалар шундай йоҡа ҡабыҡлы булып сыҡты. Ләкин Айҙар ҙа, башҡалар ҙа быны күрмәне. Һарҡып сыҡҡан йомортҡа шыйығы ҡояшта тиҙ үк киҙеп тә өлгөрҙө. Ҡара сепрәк бөтә серҙе йәшереп ҡалдырҙы.

Ҡултабанға еткәс, шофер машинаһын туҡтатты.

— Мин, ауылға инеп тормай, тура китәм. Ғәйепләштән булмаһын, егеттәр, илтеп үк еткерә алмайым, — тине ул, ишектән башын сығарып. — Ҡайһығыҙҙыр бик шәп йырлай икән. Юл һиҙелмәй ҙә ҡалды.

— Бына был, — тип Айҙарға төртөп күрһәтте Яҡуп.

— Молодец, ҡустым!

Малайҙар машинанан төштө.

— Рәхмәт, ағай! — тине өсөһө лә аллы-артлы. Ғабдулла өлөшөнә инеп, Айҙар шоферға ике йомортҡа ла бирергә уйлағайны, баҙнат итмәне. «Йә алмаç, алмаһа, оят булыр», — тип икеләнде.

— Больница ауылдың арғы осонда, урман ситендә булыр. Оло урамдан туп-тура менәһегеҙ ҙә китәһегеҙ, — тип юл өйрәтте лә, шофер ҡуҙғалып китте.

Юлсылар йәнә йәйәүгә ҡалдылар. Ләкин больница күҙ күреме ерҙә генә ине. Ауыл уртаһындағы йылғаға еткәс, малайҙар өҫтәрендәге туҙанды ҡаҡтылар, йыуынып алдылар. Улар бит мал аҙбарына

бармайҙар, больницаға баралар. Һәр нәмәнең үҙ рәте була.

Больница болдоронда аҡ халатлы оло ғына бер ҡатын һарыҡ йөнөнән шәл бәйләп ултыра ине. Ихата эсендәрәк тағы бер ағас йорт бар. Уның эргәһендәге эскәмйә артына һөйәлеп, йәш кенә ҡатын бала имеҙеп тора. Ҡойма буйындағы йыуан ҡарағасҡа арҡаларын терәп, ике ир сүкәйгән. Ситтән килгән ауырыуҙарҙы врачтар ошо йортта ҡабул итә.

Ихатала ағастан ағасҡа тартылған бер нисә оҙон епкә аҡ кер эленгән. Болдорҙа ултырған ҡатын, бәйләүенән туҡтамай ғына, ара-тирә керҙәргә күҙ һалып ала. Күрәһең, шул тирәлә уралыусы кәзәләрҙән һаҡлай торғандыр. Кәзә малы аҡ кер сәйнәргә һәүәҫ була ул.

— Апай, — тине Вәзир,— беҙ иптәшебеҙҙең хәлен белергә килгәйнек. Юламанов Ғабдулланы күрергә кәрәк ине.

— Уның хәле шәп хәҙер, — тине апай. — Дүртенсе палатала яңғыҙы ята. Тик әле инергә ярамай. Иртәнге аштан һуң йоҡо сәғәте. Төштән һуң үҙе сығыр.

Дуҫтарын күрергә атлығып килгән малайҙар өсөн был күңелле хәбәр түгел ине.

— Беҙ шым ғына инербеҙ, апай, аяҡ остарына ғына баҫып. Кертегеҙ инде, — тип ялбарҙы Яҡуп.

— Аяҡ остарына баҫып та ярамай, бармаҡ остарына баҫып та ярамай. Барығыҙ. Аҙаҡ килерһегеҙ.

— Беҙ бик алыҫтан килдек бит, апай. Бөркөтлө ауылынан.

— Бөркөтлөнән ни ҙә, Ҡарғалынан ни — барыбер ярамай.

Малайҙар урман ситенә барып, ҙур ҡайын күләгәһенә һуҙылып яттылар.

— Эштәр шәптән түгел. Көн үтә, — тине Айҙар.

— Юл уңманы былай булғас, — тип өҫтәне Яҡуп.

— Юл уңманы тип уфтанып ятһаҡ, уңмаҫ инде. Уңдырырға кәрәк уны, — тине Вәзир.

Юлсылар быш-быш һөйләшеп, ниндәйҙер кәңәш ҡороп алдылар.

Малайҙар йәнә больница эргәһенә әйләнеп килделәр. Болдорҙа шул уҡ ҡатын шул уҡ шәлен бәйләп ултыра ине.

— Ваҡыт бер ҙә үтмәй бит әле, апай, — тигән булды Вәзир, — берәй эшегеҙ бармы шунда? Тик йөрөгәнсе, эшләй торор инек.

— Эшләйем тигән кешегә эш бөтәме...

— Теләһә нимә ҡушығыҙ, беҙ өсәүләп тотонһаҡ...

— Иренмәһәгеҙ ни... анау керҙәр кибеп ҡатып бөтәлер инде. Алымымды сығайым тип һаман ҡулым теймәй. Шуларҙы бынау аласыҡҡа ташығыҙ, бер ҙә ҡулығыҙ ҡалмаҫ. Рәхмәт алырһығыҙ. Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара ул. Ҡарағыҙ уны, төшөрөп бысрата күрмәгеҙ!

— Беҙ ипләп кенә, апай...

Малайҙар шунда уҡ эшкә кереште. Әлеге апайға мөмкин тиклем ярарға тырышып, улар үтә һаҡ, үтә ипле тотондолар.

— Була бит балалар, — тип эсенән һоҡланып ултырҙы апай. — Минеке ҡушҡанды ла эшләмәй, ҡарыша.

Кер элеп торған урында бер аҙҙан төйөнлө-төйөнлө аҡ ептәр генә тороп ҡалды.

— Бына рәхмәт үҙегеҙгә! Уңған балалар икәнһегеҙ, — тип маҡтаны апай.

— Рәхмәтте алдыҡ инде, апай,— тине Айҙар,— хәҙер шул рәхмәтегеҙ беҙҙе бәләнән дә ҡотҡарһын. Беҙгә иптәш янына инергә кәрәк.

— Ах, шаяндар, ах, хәйләкәрҙәр! Һеҙҙең менән ни эшләмәк кәрәк инде. Врач күреп ҡалһа, бөтәбеҙгә лә эләгәсәк.

— Беҙ эләгеүҙән ҡурҡмайбыҙ ҙа ул.

— Юҡ, юҡ, ярамай... Өсөгөҙҙө лә индерә алмайым.

— Һеҙ икебеҙҙе генә индерегеҙ. Бына был тышта көтөп торор. — Айҙар Вәзирҙең еңенән тартып ҡуйҙы.

— Ҡарағыҙ уны, тынығыҙ ҙа сығаһы булмаһын.— Ҡатын тирә-яҡҡа күҙ йөрөтөп алды.— Дүртенсе палата. Ингәс тә, уң ҡулда икенсе ишек.

Айҙар менән Яҡуп, аяҡ остарына ғына баҫып, эскә инеп китте. Вәзир болдорҙа ултырып ҡалды.

— Кемгә бәйләйһегеҙ был шәлде? — тип һүҙ ҡушты Вәзир. Уға ҡатындың иғтибарын ситкә ебәрмәҫкә кәрәк ине.

— Кейәүҙәге ҡыҙым һорағайны. Үҙе быҙау ҡарай. Бер ҙә генә бушамай.

— Минең әсәйем тауыҡ фермаһында эшләй.

— Тауыҡтары һаламы һуң?

— Тәгәрәтеп кенә торалар. Йыйып өлгөрөп булмай. — Быныһын, әлбиттә, Вәзир арттырыбыраҡ ебәрҙе.

Ҡатын бик һүҙсән булып сыҡты. Әңгәмә ҡуйырғандан-ҡуйыра барҙы. Вәзиргә шул кәрәк тә ине. Ҡатын үҙенең бөтә белгән һөнәрҙәрен берәм-берәм теҙеп китте. Ул шәл дә бәйләй, мейес тә һала, кейем дә тегә, ҡурай ҙа тарта, беймә лә баҫа, театрҙа ла уйнай икән. Үҫмер ваҡытында һабантуйҙарҙа малайҙар рәтенә хатта ат та саптырған. Шундай сая ҡыҙ булған ул.

Иптәштәре килеп ингәндә, Ғабдулла түшәмдәге себендәрҙе һанап, карауатында салҡан ята ине. Ул ҡапыл һиҫкәнеп тороп ултырҙы. Иҫән ҡулы менән күҙҙәрен ыуып алды. Тегеләре иҙеләр ҙә ишек төбөндә ҡатып ҡалдылар.

— Килдегеҙме ни?— тине Ғабдулла, башҡа һүҙ тапмағас.

— Килдек. Терелдеңме инде?

— Терелдем.

— Ҡулың да һыҙламаймы?

— Хәҙер һыҙламай инде.

Малайҙар тәү тапҡыр бер-береһенә ҡул бирең күрештеләр.

— Вәзир ниңә килмәне?

— Килде. Уны индермәнеләр, тышта ҡалды.

— Бына һиңә күстәнәс килтерҙек. Ҡағы Вәзирҙеке.

— Күстәнәс өсөн рәхмәт тә, тик тамаҡҡа аш бармай. Өйгә ҡайтҡы килә. Өләсәйем иҫәнме? Балыҡтар тереме?

— Бөтәһе лә һикерешеп тора. Һине ҡасан ҡайтаралар?

— Тағы ун көндән, тиҙәр. Бер аҙнанан балсығын ҡуптарасаҡтар.

— О-һо-о!

— Салбар булһа, әллә ҡасан тәҙрәнән сығып ысҡыныр инем. Салбарҙы ғына бирмәйҙәр. — Ғабдулла тәҙрә эргәһенә килде. Был яҡ урманға ҡарай ине. — Эт тә күрәсәк түгел, — тип өҫтәне ул. — Бынау селтәрҙе ысҡындырып алаһың да...

— Кейем-һалым беҙҙә етерлек ул, — тине Айҙар. — Ана, Яҡупта ике ҡат.

Башҡаса һүҙ артыҡ ине. Ғабдулла өҫтөндәге аҡ күлдәк-ыштанды һалдырып ташланылар. Уға салбар кейергә булыштылар. Салбар таман булды. Тик күлдәк кенә тарыраҡ ине. Гипстағы ҡул еңгә һыйманы. Малайҙар быға аптырап ҡалманылар. Буйлы зәңгәр күлдәктең еңен Яҡуп шатырлатып төптән үк йыртты ла алды.

— Ҡайтҡас, әсәйем тегеп ҡуйыр әле,— тине ул.

Ғабдулланың өләсәһенә тип йыйған күстәнәстәрен өҙөлгән еңгә тултырып, ике баштан төйнәп ҡуйҙылар. Айҙар тәҙрәгә ҡепләнгән селтәрҙе һаҡ ҡына ысҡындырҙы. Һикерергә генә йыйынғанда, Ғабдулла иптәштәрен туҡтатты.

— Билдә бирмәй китеү ярамаҫ, — тине ул. Тум-

бочка тартмаһынан ҡәләм-ҡағыҙ алып, кескәй генә яҙыу яҙҙы.

«Ҡәҙерле доктор ағай!

Һеҙгә күп рәхмәттәр яуһын. Мин һауығып бөттөм инде. Хәҙер ауылға ҡайтып китәм. Иптәштәрем кейем килтергән. Балсығын ҡуптарырға бер аҙнанан үҙем килеп етермен. Ғәйепләп ҡалмағыҙ.

Ғабдулла Юламанов».

Тәҙрәнән башта Айҙар төштө. Шунан Ғабдулла сыҡты. Айҙар уны биленән ҡосаҡлап күтәреп үк алды. Иң һуңынан Яҡуп һикерҙе. Ул, һөрләгөп китеп, тубығын ҡарағай тамырына бәрҙе. Күҙенән уттар күренде. Әммә ыһ та итмәне.

Урман араһына инеп, кеше күҙенән йәшеренгәс кенә, Айҙар, ҡош һайрауына оҡшатып, һыҙғырып алды.

Вәзирҙең зирәк ҡолағына был иң матур моң булып ишетелде. Шулай ҙа ул кинәт кенә тороп йүгермәне.

— Анау ҡыуаҡ артына барып ҡына киләйемсе, бик ҡыҫтылдым, — тигән булды.

Был саҡ теге ҡатын үҙҙәре ҡуйған һуңғы спектаклдең эстәлеген һөйләп ултыра ине.

— Һөйләп кенә бөтөрәйем дә...

— Ул театрҙы беҙҙең ауылда ла ҡуйҙылар. Мин ҡараным уны.

— Ҡарағас, ниңә башта уҡ әйтмәнең? Мин бүтәнен һөйләр инем. Әләйһә, быңа быныһын күргәнең бармы?..

Больница артында «ҡош» йәнә һайрап ҡуйҙы.

— Их, йәмле лә һуң ошо йәй айҙары! — тип һоҡланды ҡатын.— Өҙҙөрөп ҡоштары һайрап тора.

— Уф, эсем! — тип Вәзир бөгөлөп үк төштө.

— Бар, больница артына, ҡыуаҡ араһына йүгер, — тип кәңәш бирҙе ҡатын.

Вәзир, эсен тотоп, урам яғына йүгерҙе.

Ҡайтҡан саҡта малайҙарға машина ла, ат та тура килмәне. Улар оҙон-оҙон юлды йәйәү ҡайттылар. Ләкин арыу-талыуҙың әҫәре лә юҡ ине.

Көн кисләүгә, дүрт юлсы Ҡылыс аръяғындағы ҡалҡыулыҡҡа килеп етте. Ҡояш был ваҡыт Кирәмәттең нәҡ түбәһендә ултыра ине. Бынан ҡарағанда, ул ялҡын бөркөп торған янар тау төҫлө күренә. Матур ҙа, шомло ла. Малайҙар, алыҫ тауға һоҡланып, оҙаҡ ҡарап торҙолар. Айҙар, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡысҡырып йырлап ебәрҙе.

Алыҫтарҙан ғына, ай, күренә
Кирәмәткәй тауҙың аҡ ташы.
Ҡайҙарҙа ғына булмай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы.

Алда Кирәмәт. Бер нисә көндән дүрт терәүгә таянған «Өс таған» уның күленә йән индерер өсән юлға сығыр. Ә юлға бер сыҡҡан кеше маҡсатына барып етмәй кире боролмай ул. «Өс таған» да кире боролмаҫ, ә бейек һәм бөйөк тауҙың түбәһенә күтәрелер.

Йәнә йылдар үтер. Был малайҙар егет булып етер. Шул саҡ улар Кирәмәттән дә бейегерәк түбәләргә күтәрелерҙәр. Ерҙе генә түгел, күкте лә биҙәрҙәр улар.

Һеҙ быға ышанаһығыҙмы? Мин ышанам.





## АЙЫУ МАЖАРАҺЫ

*Хикәйә*

Арҡыры аяҡ айыуҙың бик күп мажаралары тураһында ишеткәнегеҙ барҙыр.

Умарталыҡҡа урлашырға килгәс, ул, бал ҡорттары сағыуҙан ҡасып барғанда, ҡоҙоҡҡа ла йығылып төшкән. Шул саҡта билен имгәтеп, әле лә арт һанын күтәрә алмай йонсой. Үҙе лә әшәүәтһеҙ инде.

Хәйләкәр төлкөнөң һүҙенә ышанып, ул, балыҡ тотмаҡсы булып, мәкегә ҡойроғон да тығып ултырған. Уның был кәсебе ни менән бөткәнен бөтә кеше белә. Төн уҙғансы, ҡойроҡ боҙға йәбешеп туңған. Таң атҡас, һыу алырға төшкән килендәр айыуҙы көйәнтәләр менән туҡмарға тотонғандар. Айыу ҡасып киткән, ә ҡойроғо өҙөлөп ҡалған. Шунан бирле ул сонтор ҡойроҡ менән йөрөп ята. Үҙе лә бер ҡатлы шул. Хәйләкәр төлкөгә ышанмаҫҡа кәрәк ине лә бит.

Ә быйыл йәй айыу, йөрөй торғас, саҡ-саҡ ҡына өс аяҡҡа тороп ҡалманы. Ағас аяҡ яһатып алырға тура килә ине шул үҙенә. Юғиһә бынау тиклем кәүҙәне өс аяҡ ҡына йөрөтә алыр инеме ни? Был мажара ла үҙенең гәмһеҙлеге арҡаһында булды инде.

...Ағиҙелдең һеңлеһе тип йөрөтөлгән Ҡариҙел исемле йылғаны ишетеп тә, бәлки, күреп тә белеүселәр барҙыр. Урал итәгенең ҡаялы бейек тауҙары, ҡалын урмандары, сәскәле үҙәндәре буйлап ағып төшә лә ул Ҡариҙел, Ағиҙелгә килеп ҡушыла. Ағиҙел үҙенең һыуҙарын — Камаға, Кама Волгаға илтеп ҡуя. Уйлап ҡараһаң, иҫең дә китерлек бит. Беҙҙең Ҡариҙелдең һыуы Каспий диңгеҙенә тиклем барып етә. Махачкала малайҙары, Каспийҙа һыу ингәндә, Ҡариҙелде, моғайын, иҫтәренә лә төшөрмәйҙәрҙер әле. Ә бит улар сумып-сумып уйнаған һыуҙа Ҡариҙелдең дә тамсылары бар. Һөйләп китһәң, хәбәр күп инде ул. Ҡариҙелдән кәмәгә ултыр ҙа биш диңгеҙҙең теләһәң ҡайһыһына ҡарай сыҡ та кит хәҙер. Хуш күрәһең икән, бөтә донъяны урап ҡайт. Юл асыҡ. Рәхим ит.

Бына ниндәй дан йылға бит беҙҙең Ҡариҙел! Шуға ла инде яҙ һайын Каспийҙың төрлө-төрлө балыҡтары беҙҙең һыуға ыуылдырыҡ сәсергә менәләр. Йәмле ерҙең ҡайҙа икәнен беләләр улар, йылтыр күҙҙәр! Шул балыҡтар араһында Ҡырпа исемле ғәләмәт ҙурҙары, кәмә буйлыҡтары ла була. Ҡунаҡ булып ҡына килгәнгә күрә лә, ул балыҡтарҙы беҙҙә тотмайҙар. Әҙәп һаҡлайҙар. Тик ҡунаҡтар үҙҙәре генә ҡайһы ваҡыт әҙәпте боҙоп ташлайҙар. Анау Ҡырпа тигәне арала үтә ҡомһоҙ бер балык инде.

Ә айыу шул Ҡырпаның ниндәйлеген әле быйыл йәй генә ныҡлап төшөндө. Был турала һөйләп үткәндә лә ярай.

Яр буйында баландар сәскә атҡан, тауҙар һәм туғайҙар хуш еҫ бөркөп торған, урмандарҙы яңғыратып ҡоштар һайраған бер саҡ ине. Таңда сутылдаған һандуғас тауышына уянған ҡарт айыу, төш еткәнсе, кирелеп-һуҙылып, ҙур саған күләгәһендә ятты. Әллә ул үҙенең ялҡаулығын еңә алманы, әллә, үләндәр еҫенән иҫереп, йәй мондарына таң ҡа-

лып, былай ғына рәхәтләнеп аунаны. Айыуҙың күңелендә ни барын ҡайҙан белеп бөтөрәһең инде.

Ҡояш түбә өҫтөнә күтәрелгәс, ул тағы бер тапҡыр кирелде лә урынынан торҙо. Йылтырап ятҡан Ҡариҙелде япраҡтар селтәре аша күреп алғас: «Битте-күҙҙе йыуып менергә кәрәк әле», — тигән уйға килде. Ул, лап-лоп баҫып, ашыҡмай ғына яр ситенә төштө. Башта, эҫе ҡом өҫтөнә ултырып, бер талай тирә-яҡты күҙәтеп торҙо. Һыу өҫтө тып-тын. Һирәк-һаяҡ ваҡ балыҡтар ғына һикерешеп уйнай. Яҡын-тирәлә генә айыуҙан ҡеүәтле йән эйәһе барлығы һиҙелмәй.

Һыу түбәнендә, бынан бер километр самаһы ерҙә, ҙур төҙөлөш бара. Унда туҡтауһыҙ машиналар шаулай, ҡырмыҫҡа иләүендәге кеүек, кешеләр ҡайнаша. Ләкин уларҙың айыуҙа эштәре юҡ. Айыу ҙа иртә яҙҙан бирле уларға күнегеп бөттө инде. Дөрөҫ, ул тәүге мәлдәрҙә бер аҙ бошоноборaҡ йөрөнө йөрөүен, хатта башҡа берәй тауға күсеп китергә лә елкенгеләп ҡуйҙы. Ләкин был ниәтенән тиҙ кире ҡайтты. Ни тиһәң дә, тыуған тау бит! Төҙөлөш барған яҡтағы шау-шыуға ул эйәләшеп үк китте. Шуға ла айыу әле лә ул яҡҡа бер генә боролоп ҡараны.

Ҡояшта ултыра торғас, айыу эҫеләнеп китте. Ул, һыуҙың ситенә генә килеп, тәпәйен тығып ҡараны. Бер аҙ эскәрәк инеп һыу эсте. Битен йыуҙы. Унан һуң ҡомайылға ултырып алды ла алғы тәпәйе менән һыу сәсрәтеп уйнарға кереште. Һуҡҡан һайын төрлө төҫтәге тамсылар уның күҙ алдында йымылдашып һикерештеләр. Был уйын айыуға бик оҡшаны. Ул бөтөнләй мауығып китте. Бара торғас, ике тәпәйе менән бер юлы һуғырға тотондо. Тамсылар уның һайын бейегерәк сәсрәнеләр. Айыу, үҙенең еүеш моронон күккә сөйөп, уларҙың йымылдашып төшкәнен ҡарап, рәхәт сикте.

Уйын иң ҡыҙған бер мәлдә бәләкәсерәк кәмә оҙонлоғо Ҡырпа балыҡ һыу ярып килеп сыҡты ла айыуҙың алғы уң тәпәйенән эләктереп алды. Бил-

дәле, айыу, уйынға алданып, уның килгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Айыу ҡуҙғалғылағансы, Ҡырпа тәпәйҙе бөтөнләй үк йотоп ебәрҙе. Бына бер заман алыш китте. Бына китте алыш. Ҡырпа айыуҙы һыу эсенә һөйрәй. Һөйрәй алмай. Айыу балыҡты ярға сығармаҡсы итә. Ләкин хәлдән килмәй. Башта ул бәләнән тауыш-тынһыҙ ғына ҡотолмаҡсы ине лә аҙаҡтан сыҙай алманы, үкерергә кереште. Тартыш ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы. Айыу үкерә, Ҡырпа үрле-ҡырлы һикерә. Тәпәйҙе бик ысҡындырыр ине лә бит, хәҙер ул үҙе ысҡынмай, тештәр ебәрмәй. Икеһенең дә хәл шәптән түгел ине. Шулай ҙа айыу, үкерә-үкерә булһа ла, Ҡырпаны бер аҙ ярға яҡынлаштырҙы. Ләкин балыҡ та тиҙ генә бирешергә теләмәне. Ай-һай, үҙе лә сая икән.

Әгәр төҙөлөштәге эшселәр айыу үкергәнде ишетмәһәләр, нимә менән бөтөр ине икән был алыш? Ҡайһыһы еңер ине икән быларҙың? Хатта әйтеүе лә ауыр.

Айыу менән Ҡырпа тартышҡан арала, ҙур тракторға ултырып, ҡомло яр буйлап кешеләр килеп етте. Ҡемдер берәү мылтыҡ та күтәреп алған. Ҡеше һәр нәмәнең хәйләһен уйлап таба бит. Улар, нисектер, рәтен табып, һуғыш суҡмарҙарының икеһен дә сынйырлап алдылар ҙа трактор менән ҡоро ергә һөйрәтеп сығарҙылар. Ҡырпаны, уҫал ниәт менән һуғыш башлағаны өсөн, шунда уҡ атып үлтерҙеләр һәм, һуңыраҡ, самосвалға һалып, балыҡ заводына ебәрҙеләр. Айыуҙы, сынйырлап, тракторға таҡтылар. Ул башта тулап ҡараны ла аҙаҡтан, аҡһаҡлап-аҡһаҡлап булһа ла, атлай бирҙе. «Эштең яманыраҡ бөтөүе лә мөмкин ине бит әле», — тип уйланы ахыры. Башҡаса тыпырсынмаҫ булды.

Бер аҙнанан һуң, айыуҙың имгәнгән аяғы төҙәлә биргәс, уны Өфөгә зверинецҡа оҙаттылар. Шулай итеп, ул хәҙер ҡалала йәшәүсе булып китте. Уға «Балыҡсы» тигән яңы исем ҡуштылар. Зверинецҡа килгән малайҙар йыш ҡына:

— Сәпәкә ит әле, Балыҡсы! — тиҙәр уға. Ә ул теге ыҙғыштан һуң кәкрәйеп ҡалған тәпәйен күрһәтә лә башын ғына сайҡап ҡуя:

— Ниңә инде шул бер балыҡ башын сәйнәйһегеҙ, егеттәр? — ти, ахыры.

Ҡала Балыҡсыға оҡшаны булһа кәрәк. Күңеле уның һәр ваҡыт күтәренке күренә. Тик ҡояшлы ямғыр яуғанда һәм танауына балыҡ еҫе килеп бәрелгәндә генә, бер аҙ эсе бошоп китә. Уға ла күнегер әле. Айыу бит ул.

## МАЛАЙҘАР

*Хикәйә*

Беҙ инде илебеҙҙең сиктәренән алыҫта, Болгария ерҙәрендә, фашист ғәскәрҙәрен эҙәрләп, алға бара инек. Беҙҙең мотопехота часы ҡояш байыр алдынан кескәй генә ҡалаға килеп инде. Азатлыҡтың тәүге көнөн кисереүсе ҡала халҡы беҙҙе икмәк-тоҙ менән ҡаршы алды. Көҙ мәлендә ағастарҙан япраҡ ергә нисек ҡойолһа, ул көндө ҡала урамдарына кешеләр шулай һибелде. Тарма баҫыуына төшкән турғайҙар, кеше килгәнде һиҙеп, пырылдап һауаға нисек күтәрелһә, беҙҙе ҡаршылаусы төркөмдәр өҫтөндә лә күккә сөйөлгән кәпәстәр шулай осоп торҙо. Ҙур-ҙур автомашиналарға ултырып барыусы совет һалдаттары өҫтөнә яуған сәскә ямғырын һис ни менән дә сағыштырырлыҡ түгел ине.

Ә малайҙар һуң, малайҙар! Ялан аяҡ малайҙар улар бөтә ерҙә лә бер төҫлө булалар. Уларҙың сәскә ырғытып та, кәпәс сөйөп тә торорға ваҡыттары юҡ. Улар иң алдан барыусы машина менән йәнәшә, ҡулдарын болғай-болғай йүгерәләр. Ҡаланы солғап алған шау-шыу һәм көлөү ауаздарынан, машиналарҙың геүләүҙәренән, ҡайҙалыр арттараҡ башланған йыр моңдарынан асығыраҡ булып, малайҙарҙың ескә тауыштары яңғырай. Ул тауыштар тотош геүләп торған һауаны, гүйә, неско-неско

генә һөңгөләр булып, тишеп үтәләр. Малайҙар азатлыҡ килтереүсе армияны шулай сәләмләйҙәр:

— Доброе дошли, братушки! [1]

— Братушки! Братушки!

Ҡала уртаһындағы майҙанға еткәс, колонна туҡтап ҡалды. Һалдаттар машиналарҙан һикерешеп төштөләр. Шунда уҡ алдағы машина эргәһенә бер төркөм малай килеп етте. Улар башта, һалдаттарҙың пилоткаларындағы йондоҙҙарға, иңдәрендәге автоматтарға, уларҙың саң баҫҡан йөҙҙәренә һынаулы ҡараш ташлап, шымып торҙолар. Ләкин был «өҫтән генә танышыу» ваҡыты оҙаҡҡа һуҙылманы. Ун йәштәр самаһындағы бер малай иптәштәренән айырылып сыҡты ла ошо беренсе машинанан төшкән боецтар эргәһенә килде. Малайҙың ҡолаҡтарын күмерлек булып еткән сәстәренә, уның ҡасандыр салбар балаҡтары тип аталған нәмәһенән һәленеп-һәленеп төшкән ереле-ваҡлы суҡтарына, себештәр сығып бөткән ҡара көрән аяҡтарына ҡарағанда, уның быға тиклем бал-май эсендә йәшәмәгәнлеге асыҡ ине. Ләкин ҡуйы ҡара ҡаштар аҫтында ике тере күмер булып янған күҙҙәре, әшкәлә, моғайын, туҡмашҡа ла күнеккән ҡарағусҡыл ҡытыршы ҡулдары уның үҙ дәрәжәһен һаҡлай алырлыҡ кеше булыуын күрһәтеп тора ине.

Малай, берәүгә лә төбәп кенә ҡарамай, әйтә һалды:

— Миңә генерал кәрәк ине.

— Ниндәй генерал?

— Иң баш генерал!

Боецтар башта гәжәпләнеберәк ҡалдылар, унан һуң тыйыла алмай көлөшөргә тотондолар. Ләкин малай үҙенекен ҡабатланы:

— Миңә генерал кәрәк!

— Беҙ ни, туған, бында бөтәбеҙ ҙә генерал инде, — тине автоматчик Вершинин.

---

[1] Хуш килдегеҙ, туғандар!

Малай, иптәштәренә боролоп, кемгәлер ҡул болғаны. Боецтар эргәһенә козырекһыҙ фуражка кейгән, мыҡты кәүҙәле, киң битле икенсе малай йүгереп килде.

— Былар генералдармы, Младен? — тип һораны ул киң битле малайҙан.

— Түгел. Генералдың салбар балағына ҡыҙыл таҫма тегелгән була уның. Иртәнсәк үткән һалдаттар араһында шундай генералды атайым үҙе күргән.

— Ә һин үҙең кем һуң? — тип һораны Вершинин тәү килгән малайҙан.

— Минме? Мин — Анастас. Быныһы — Младен. Ә тегеләре?— Ул ситтә торған иптәштәрен күрһәтте. — Ярай уларҙы әйтеп тормайым инде. Уларҙың әле һеҙҙең менән танышырлыҡ уҡ эш эшләгәндәре юҡ. Ә генерал ҡайҙа?

— Егеттәр, ә, егеттәр, беҙҙең Ярмөхәмәтов ни менән генералға оҡшамаған һуң? — тине берәү; ул бынан ай ярым самаһы элек, госпиталдән сығып, беҙҙең подразделениеға килгән боецтың фамилияһын телгә алды. Ярмөхәмәтов — әүәле башҡорт дивизияһында хеҙмәт иткән һәм кавалерияны үтә яратыуынан әле лә лампаслы салбар кейеп, мыйыҡ еткереп йөрөй торған үткер генә бер егет ине.

Шул арала бер нисә кеше бер юлы элекке кавалеристы саҡырырға тотондо.

Өсөнсө машина эргәһендә торған Ярмөхәмәтов, үҙенең фамилияһын ишеткәс, йүгереп үк килеп етте.

— Генерал кәрәк булып китте бит әле бына егеттәргә.

Элек тә һирәк-һаяҡ «генерал» ҡушаматын ишеткән Ярмөхәмәтов эштең ниҙә икәнлеген тиҙ үк төшөнөп алды.

— Нимә булды? — тип һораны ул эре генә.

Салбарына ҡыҙыл таҫма тегелгән элекке кавалеристы күргәс, малайҙарҙың йөҙҙәре асылып китте.

— Ошомо? — тине Анастас, иптәшенә боролоп.

Младен баш ҡаҡты.

Анастас серле итеп яҡ-яҡҡа ҡарап ҡуйҙы һәм, ымлап, Ярмөхәмәтовты бер аҙ ситкәрәк алып китте. Ләкин малайҙың мөмкин тиклем серлерәк әйтергә тырышҡан һүҙҙәре бөтә кешегә лә ишетелеп торҙо.

— Другарь[1] генерал, — тине ул, — беҙ һеҙҙең килеүегеҙгә ҡайһы бер нәмәләр әҙерләп ҡуйҙыҡ. Ләкин көпә-көндөҙ уларҙы һеҙгә килтерә алмайбыҙ. Үҙегеҙ беләһегеҙ — хәрби сер...

Тап шул ваҡытта ялға туҡтау өсөн билдәләнгән урындарға барырға команда булды. Беҙ яңынан машиналарға ултырыштыҡ, һәм подразделение үҙенә тәғәйенләнгән өйҙәргә китте.

Ә малайҙар шунда уҡ ҡайҙалыр юҡ булдылар. Уларҙы, нисектер, хәтергә алыусы ла табылманы.

* * *

Беҙҙең подразделениены ҡала майҙанынан алыҫ түгел бер ҙур йортҡа урынлаштырҙылар. Сентябрь айында Болгарияла төндәр йылы була, шуның өсөн һуғышсылар асыҡ һауала ҡуныуҙы артығыраҡ күрҙеләр. Беҙ йоҡлар алдынан, ҡура уртаһына ултырып, һалдат сәйен эсергә керештек.

Ҡапыл эңер төштө. Тау яғына эңер шулай ҡапыл төшә шул. Арлы-бирле иткәнсе, Ярмөхәмәтов, ҡайҙандыр лампа табып, табын уртаһына ултыртып ҡуйҙы. Табын яҡтырып китте.

Ҡапыл урам ҡапҡаһы шығырлап асылды. Беҙ бөтәбеҙ ҙә әйләнеп ҡараныҡ. Унда ике ҡараҫҡы күренде лә тағы юғалды. Ҡапҡа артында нимәгәлер бәрелгән тимер сыңлауы ишетелде, һәм шул арала теге ике ҡараҫҡы ҡураға килеп инде. Шәүләләр утҡа яҡынлаштылар. Беҙ был төнгө ҡунаҡтарҙы тиҙ үк танып алдыҡ. Кыйһыҙ ҡылыс күтәреп алдан килеүсе Анастас ине. Уның артынан Младен эйәргән. Ул нимәлер тултырылған фуражкаһын ҡулына тотоп алған.

[1] Иптәш, дуҫ.

Малайҙар табын эргәһенә килеп туҡтанылар һәм күҙҙәре менән кемделер эҙләргә тотондолар. Арғы яҡтараҡ ултырған Ярмөхәмәтовты күреп алғас та, Анастас ҡулындағы ҡылысты уның алдына илтеп һалды. Ҡылыс эргәһенә Младен фуражкаһын килтереп ҡуйҙы. Ләкин уның фуражканы ҡалдырғыһы килмәне. Малай яңынан эйелде лә фуражканың бер ситенән тотоп һелкте. Унан автомат патрондары сытырлап ҡойолдо.

Һалдаттар малайҙарҙың нимә әйтеүен көтөп, өнһөҙ ҡалдылар.

Эште еренә еткереп башҡарғанлығына ышанғас ҡына, Анастас һүҙен әйтте:

— Бына, иптәш генерал, ҡабул итеп алығыҙ.

— Ҡабул ит, генерал! — Боецтар пырхылдап көлөп ебәрҙеләр.

Ярмөхәмәтов юғалып ҡалманы.

— Көлөүҙе туҡтатығыҙ! — тип бойорҙо ул һәм, малайҙарға ҡарап, йомшаҡ ҡына дауам итте. — Рәхмәт, егеттәр. Ә нисек итеп ҡулға төшөрҙөгөҙ һеҙ был нәмәләрҙе?

— Һеҙгә бүләк ул. Ике-өс көн төшөндә, төн уртаһында, бынан фашистар ҡастылар. Буталыш, ҡысҡырыш китте бер заман! Әй мәрәкә булды. Шул ваҡыт беҙ Младен менән икәүләп Стоян байҙар эргәһендә торған машинанан ошо ҡылысты сәлдерҙек. Теге машина фашист генералыныҡы ине, — Анастас ашыҡмай ғына дауам итте. — Үҙебеҙҙе лә саҡ-саҡ ҡына эләктермәнеләр. Арттан атып ҡалдылар. Ә беҙ яр аҫтына һикерҙек. Ана, Младендың фуражкаһында пуля тишеге лә бар... Ә патрондар улар — элегерәк ҡулға төшкән нәмә. Һеҙгә кәрәк булыр әле.

Һүҙгә ҡапыл Младен ҡушылды:

— Бына ошо генералдың үҙ ҡылысы менән үҙенең башын сабып өҙөгөҙ. Һәләк яман ул! Һеҙ уны барыбер ҡыуып етәһегеҙ бит.

— Әлбиттә, етәбеҙ!

— Сабып өҙөгөҙ, йәме!

— Ярар.

«Генерал» малайҙарҙы үҙ эргәһенә ултыртып алды. Вершинин уларға сәй ҡойоп килтерҙе, алдарына шәкәр, икмәк, колбаса өйөп ҡуйҙы. Ләкин малайҙар башта дәрәжәне юғары тоттолар, ҡомһоҙланып һыйға ташланманылар.

Тик бер аҙҙан һуң ғына малайҙарҙың ҡыйыулығы арта төштө. Беҙ улар менән тиҙ үк дуҫлашып та алдыҡ. Оҙаҡ итеп сәй эстек. Ҡунаҡтар һүҙгә йомарт булып сыҡтылар. Улар үҙҙәре хаҡында ла күп кенә нәмә һөйләнеләр. Анастас менән Младен икеһе лә урамда аяҡ кейеме таҙартып көн итәләр икән. Анастастың ауырыу әсәһе бына бер йыл инде өйҙән сыға алмай, шуға күрә Стоян байҙарға кер йыуырға ла бара алмай. Ә Младендың бер атаһына һигеҙ йәнде туйҙырырға тура килә. Малайҙарҙың әлегә тиклем мәктәп юлына аяҡ баҫҡандары ла юҡ. Ләкин уларҙың һүҙҙәрендә бер генә лә һыҡтау ауазы ишетелмәне. Сөнки хәҙер бит уларға яңы тормош киләсәк.

Һүҙгә аҙ ҡатнаша торған Младен ҡапыл ғына белдереү яһаны.

— Һеҙ килгән шатлыҡтан, Болгария азат ителеү шатлығынан, беҙ Анастас менән өс көн буйы байрам итәсәкбеҙ. Аяҡ кейеме таҙартырға урамға сыҡмаясаҡбыҙ. Байрам итәсәкбеҙ.

Анастас уның һүҙен ҡеүәтләп ҡуйҙы:

— Эйе, ҡулға щетка ла тотмаясаҡбыҙ!

Хушлашыр алдынан һалдаттар Младендың козырекһыҙ фуражкаһына шәкәр, сохари, колбаса, шоколад тултырҙылар.

Ләкин малайҙар тиҙ генә сығып китмәнеләр. Улар, нимәлер әйтергә теләп, бер-береһенә ҡарашып алдылар. Һәм Младен ҡапыл әйтеп һалды:

— Пилоткаға ҡуйыр өсөн һеҙгә нисәшәр йондоҙ бирҙеләр?

— Берәрҙе.
— Ә юғалһа?..

Һалдаттар малайҙарҙың тел төптәре ҡайҙа барғанын шунда уҡ һиҙеп алдылар һәм тоҡтарын аҡтарырға тотондолар. Шул арала йондоҙ ҡуйылған өр-яңы икс пилотка ла табылды. Ярмөхәмәтов пилоткаларҙы, бик тантаналы итеп, ҡунаҡтарҙың баштарына кейҙерҙе. Малайҙар сикһеҙ ҡыуаныуҙан бөтөнләй һүҙһеҙ ҡалдылар. Бер аҙҙан һуң ғына Анастас ныҡ итеп башын эйҙе. Младен да тап шуны уҡ ҡабатланы.

— Дәү итеп рәхмәт әйтәбеҙ, другари! — тинеләр малайҙар һәм йүгереп сығып та киттеләр.

Беҙ байтаҡ һүҙһеҙ ултырҙыҡ. Башлап Ярмөхәмәтов өндәште:

— Насар эшләнем мин, егеттәр. Ниндәй һәйбәт малайҙарҙы алданым. Генерал, имеш... Миңә хәҙер инде генерал булғансы хеҙмәт итергә тура киләсәк...

Берәү ҙә һүҙгә ҡушылманы.

* * *

Мин ҡояш менән бергә уяндым. Иптәштәрем әле йоҡлап ята ине. Ләкин мине бер нәмә ғәжәпкә ҡалдырҙы. Һәр боецтың аяҡ осона һалып ҡуйған итектәре яңы сыҡҡан ҡояш нурында ялтырап тора ине. Улар шундай һәйбәт итеп таҙартылып, майланып ҡуйылғандар. Мин сыҙаманым, егеттәрҙе уяттым.

— Бына мөғжизә, — тине Вершинин.

— Мөғжизә түгел, — тине ҡапҡа төбөндә һаҡта тороусы һалдат. Мин уларға үҙем рөхсәт иттем. Таң алдынан килгәйнеләр.

— Бына ниндәйҙәр бит улар,— тип ҡабатланы Ярмөхәмәтов. — Их егеттәр, егеттәр...

Беҙгә, нисектер, күңелле лә, моңһоу ҙа булып китте.

Малайҙарҙы беҙ башҡаса күрә алманыҡ. Бер сәғәттән артабан киттек.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Беҙҙең өйҙөң йәме *(повесть)* . . . . . . 3

Өс таған *(повесть)* . . . . . . . . 97

Айыу мажараһы *(хикәйә)* . . . . . . 197

Малайҙар *(хикәйә)* . . . . . . . . 201

*Кесе йәштәге мәктәп балалары өсөн*

*Мустай Карим*
**(Каримов Мустафа Сафич)**

**РАДОСТЬ НАШЕГО ДОМА**

**Повести, рассказы**

*(на башкирском языке)*

* * *

Редакторы *Р. М. Сабитов*
Рәссамы *А. А. Костин*
Художество редакторы *И. С. Файрушин*
Техник редакторы *Ф. Г. Ғайфуллин*
Корректоры *Г. А. Иткулова*

ИБ № 2095

Наборға бирелде 26. 05. 83. Баҫырға ҡул ҡуйылды 17. 08. 83. Ҡағыҙ форматы $84 \times 108^{1}/_{32}$. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Тип. ҡағыҙы № 2. Шартлы баҫма таб. 10,92. Шартлы буяу оттискыһы 11,13. Учет.-изд. таб. 8,74. Тиражы 15000 экз. Заказ № 157. Хаҡы 50 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул. Советская, 18. Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекты, 2.

50 тин.